# Ағиҙел

**Өфө,**
**июль**
**2013**

**7(1083)**

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***,

Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева,Тәнзилә Сәлихова (корректорҙар),
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.07. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 200 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0092.13.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2013 (7,1083)**

# БЫЛ ҺАНДА:

ШИҒРИӘТ

**Гөлнур Яҡупова.** «...Һәм иңрәп йырланым, моң-зарлы ҡурайҙай». Ш и ғ ы р ҙ а р. ...........................................................................5

**Римма Ғәлимова.** Бәхет төҫө. Ш и ғ ы р ҙ а р. ................................15

**Азамат Юлдашбаев.** «Саҡрымдарҙы һыйпап табан менән...» Ш и ғ ы р ҙ а р. ..........................................................................20

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Ишғәли Нурғәлиев.** Ҡарабаш турғай. Я ҙ м ы ш н а м ә. Аҙағы. ...27

ӨМӨТЛӨ ҠӘЛӘМ

**Сәлиә Ғатауллина.** Һин китәһең, мин ҡалам... Х и к ә й ә. ...........87

ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ

**Мәүлит Кәримов.** Яҙмыштарҙан уҙмыш юҡ! Ш и ғ ы р ҙ а р. .........115

**Әхмәт Нуретдинов.** Китмәйем. Ш и ғ ы р ҙ а р. ............................117

**Ришат Вахитов.** Яҙҙар етһә... Ш и ғ ы р ҙ а р. ................................119

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Әнғәм Хәбиров.** Башҡорт та ул, россиян да *(Ирек Кинйәбулатовҡа – 75 йәш).* .................................................120

**Әнисә Таһирова.** Муза ситкә тибәрмәне һине... Ш и ғ ы р. ..........138

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Әхмәт Мәхмүтов.** Юмор һәм сатира оҫтаһы *(Зөлфәр Хисмәтуллиндың тыуыуына – 90 йыл).* ..........................139

ПУБЛИЦИСТИКА

**Мәхмүт Хужин.** Ваҡытты эйәрләгән һыбайлы. .............................140

**Рима Ҡотлоғәлләмова.** Акрил проекты: мул тормошмо, әллә өҫтәмә мәшәҡәттәрме? .........................................................146

ЗАМАН ҮӘ ЗАМАНДАШТАР

**Хәлил Барлыбаев.** Яҙмыш – һикәлтәле юл. Аҙағы. .......................151

**Мирас Иҙелбаев.** Төрки донъяһының рухи Мәккәһе. ..................179

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Леонид Соколов.** Ҡ ы ҫ ҡ а х и к ә й ә л ә р. ....................................185

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Г. Якупова, Р. Галимова, А. Юлдашбаев.** *Стихи.*

ПРОЗА

**И. Нургалиев.** Воробушка моя. Повесть. *Окончание.*

ПРОБА ПЕРА

**С. Гатауллина.** Я уйду, ты останешься. *Рассказ.*

ТВОРЧЕСТВО ЧИТАТЕЛЕЙ ЖУРНАЛА

**М. Каримов, А. Нуретдинов, Р. Вахитов.** *Стихи.*

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**А. Хабиров.** И башкир он, и россиянин
*(75 лет И. Киньябулатову).*

**А. Тагирова.** Посвящение.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**А. Махмутов.** Мастер юмора и сатиры
(*90 лет со дня рождения З. Хисматуллина).*

ПУБЛИЦИСТИКА

**М. Хужин.** Всадник, оседлавший ветры времен.

**Р. Кутлугаллямова.** Проект акрила: *благосостояние или ненужные хлопоты?*

СОВРЕМЕННОСТЬ И СОВРЕМЕННИКИ

**Х. Барлыбаев.** По ухабистым дорогам. *Окончание.*

**М. Идельбаев.** Духовные высоты тюркского мира.

САТИРА И ЮМОР

**Леонид Соколов.** Веселые рассказы.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары –292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Гөлнур**
**ЯҠУПОВА**

# «...Һәм инрәп йырланым, моң-зарлы ҡурайҙай»

## Икеләнеү

*Гонаһлымын, тәүбәләргә киләм!*
*Хаҡ Тәғәләм, һине алданым:*
*Йәр һөймәм, тип, бүтән,*
*Ант иткәйнем —*
*Их, һөйҙөм шул,*
*Тыйыла алманым.*

*Әй, Хоҙайым!*
*Ғәфү итерһең бит?!*
*Сығарып ҡуйғас үҙең юлыма*
*Ҡотло ғына,*
*Ғәзиз бәхетте, тим,*
*Инселәп үк биргәс ҡулыма?*

*Мәрхәмәткә һинең инанамын.*
*Әҙәм бына мине нишләтер?*
*О, ул инде, беләм,*
*Ярлыҡамаҫ,*
*Ғәйбәт ишер,*
*Берҙе биш итер.*

---

*Гөлнур Яҡупова (1948) Ғафури районының Сәйетбаба ауылында тыуған. Салауат педагогия училищеһын, БДУ-ны тамамлай. Ғафури район гәзите, «Башҡортостан ҡыҙы», «Ағиҙел» журналдары редакцияларында эшләй. Тиҫтәнән ашыу шиғри һәм проза йыйынтыҡтары авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Жәлил Кейекбаев, Муса Гәрәев исемендәге әҙәби премиялар лауреаты.*

*Йәр һөйөүме инде хур ғәҙәт?*
*Йәр һөймәүме инде ҙур әҙәп?*
*Ҡисер, Раббым!*
*Ҡисер...*
*Икеләнәм...*
*Мөхәббәткә ҡылам ғибәҙәт.*

## *Төшләктәге ҡояш*

*Ҡояш саҡ төшлөктә,*
*Һүнмәгән өмөтө:*
*Ҡыҙ һалмай ҡалмаҫ, тип*
*Сәмләнеп ул көттө.*
*Ҡыҙ һалдым!*
*Ялҡынлы*
*Хистән мин ҡыуарҙым*
*Һәм иңрәп йырланым,*
*Моң-зарлы ҡурайҙай.*
*Ҡояштың ҡыҙенә*
*Иң ҡайнар мәлендә*
*Салынғас, нишләмәк,*
*Мин — ҡурай хәлендә...*

## *Сигендем...*

*Мин яратам һыуға*
*Ҡарарға,*
*Һыуға ҡарап яҙмыш*
*Юрарға.*
*Бер мәл миңә сөңгөл*
*Ҡул һондо,*
*Ҡапыл уға ҡыңел*
*Ымһынды:*
*Ҡосағына уның*
*Һикерһәм,*
*Мин эҙләгән сер ул —*
*Һин, тиһәм?*
*Ҡарашыңда ҡөсө*
*Сөңгөлдөң!*
*Ҡаушаным мин, ҡурҡтым,*
*Сигендем.*
*Ҡосағыңа, сөңгөл,*
*Ауманым,*
*Тәрәнлегең сөнки*
*Аңланым.*

## Һинме – минме?!

*Үсектем мин һиңә!*
*Үс иттем:*
*Хис йәдкәрен ваттым,*
*Көс етте.*
*Утҡа яҡтым ватып,*
*Көл иттем.*
*Эҙҙәреңә*
*Услап көл һиптем.*
*Көлгә ҡарап*
*Үҙем ант иттем:*
*Мин оноттом һине,*
*Оноттом!*
*Кем көлә ул?*
*Көлмө? Мөмкинме?!*
*Көлгә ҡалдың*
*Һинме йә минме?*
*...Хис йәдкәрен*
*Көлдән эҙләнем,*
*Көлгә батты*
*Ғорур теҙҙәрем.*

## Кәрлә һөйөү

*Теләнем иркеңде сикләргә,*
*Үҙемдең донъямда бикләргә.*
*Ҡалдыңдыр һиҙмәй ҙә: тиҙ генә*
*Ҡулыма төшөрҙөм теҙгенде.*
*Мораҙым – бер аҙым,*
*Ашҡындым,*
*Ахырҙа*
*Мин һиңә баш булдым:*
*Сикләнем сиктәрҙе –*
*Кесерәй!*
*Мин һине ситлеккә*
*Куҫерәм.*

*Иркеңде ҡаманым, тарайттым:*
*Үҙемсә – самаһыҙ яраттым?*
*Бәләкәй кәрләһең*
*Хәҙер һин.*
*Усыма йомһам да –*
*Әҙерһең.*
*Теләһәм,*
*Һыйырһың кеҫәмә.*
*Теләһәм,*
*Сығырһың иҫемдән.*

*Уф!*
*Ниңә әйләндең кәрләгә?*
*Көнләшәм мөһабәт йәрлегә!*
*Сиктәргә ниңә һин сикләндең,*
*Биктәргә бик къндәм бикләндең?*

*Кәрләне һуң инде әрләргә,*
*Ҡала тик икәүләп үлтергән*
*Бисара һөйөүҙе ерләргә...*

## Төңөлөү

*Алдандым шул.*
*Аһ, алдандым*
*Бәпләп ҡурҡаҡ бәпкә:*
*Ныъытманы ҡанаттарын,*
*Оса алмай күккә.*

*Йәллә мине, ташлама, тип*
*Бахыр бәпкә илай...*
*Ә күктәрҙә ҡыйъыр бөркөт*
*Йөрәгемде даулай!*

*Йәсе, бәпкәм,*
*Тәүәккәллә —*
*Тәҙрәләрем асыҡ:*
*Унда — киңлек,*
*Унда — ирек,*
*Рөхсәт итәм,*
*Бар, сыҡ!*

*Сыҡмайһыңмы?*
*Осмайһыңмы?*
*Кил ҡуйынъа, бәпкәм.*
*Һүреләйек...*
*Мин төңөлдөм —*
*Бөркөт бул, тип әйтмәм.*

## Болон һәм болан

*Күңелем болон ине,*
*Һөйгәнем болан ине.*

*Дуҫ тигәндәр көнләште,*
*Илгә ъәйбәт өләште —*

*Бер көтөү улар булған,*
*Болонға килеп тулған.*

*Тапанылар болондо.*
*Тапманылар боланды.*

*Болонда серле мөйөш —*
*Баландың өйө, имеш.*
*Асылмай ишек унда,*
*Асҡысы минең ҡулда.*

*Дуҫтарҙан биҙҙе йәнем,*
*Иланым — һиҙҙермәнем.*

*Ҡуңелем минең — болон.*
*Һөйгәнем минең — болан.*

## Төш һәм өн

*Урланым һине, урланым!*
*Маңлайыңда — ай нуры.*
*Йәшерен һөйөү тотҡоно һин,*
*Мин — ошо төндөң буры.*
*Айлы төн, нурлы маңлайың —*
*Төш һымаҡ... Өнөм башҡа:*
*Ҡыймайым тура ҡарарға*
*Ҡөнөмдәге ҡояшҡа.*

## Тылсым

*...Бер тубырсыҡ*
*Алдарыңа*
*Тәгәрләне,*
*Әгәр йәне*
*Белһә икән тапарыңды,*
*Үҙен “сүп” тип*
*Атарыңды?!*
*Ә ул емле емеш ине,*
*Емеш ине, еңмеш ине!*
*Һин тапаның,*
*Илап түҙҙе,*
*Гелән үргә*
*Хыял үрҙе.*
*Һин тапаның —*
*Ергә һеңде.*
*Һерелеге*
*Гүрҙе еңде.*

*Тубырсыҡта —*
*Тыуыр көстөр,*
*Тыуыр көстөң*
*Йәне — өстөр.*
*Сабыр ғына*
*Ҡылған тылсым:*
*Шыршы булып шытҡан —*
*Ысын!*
*Һин “суп” тигән*
*Емеш булған,*
*Есеменә*
*Тылсым тулған.*
*Оҡшағанмы мин шыршыға?*
*Суп түгелмен —*
*Ышан шуға!*

## Ғәйбәт

*Ҡорбан көҫәй ғәйбәт.*
*Ас ҡарғалай*
*Ҡарҡылдай ҙа*
*Минән ҡан һорай.*
*Ҡарҡылдама, тим дә,*
*Киҫеп бирәм*
*Бәғер итем—*
*Бәғерем ҡанһырай.*
*Бер арыйға*
*Ҡолаҡ тынып тора.*
*Ауыҙын яба*
*Тамаҡ туҡ ҡарға.*
*Ҡасан да бер, беләм,*
*Тотошлайға*
*Бәғеремде теләр йоторға.*

*Ҡанһырайым.*
*Ғәйбәт кәсәһендә*
*Мөлдөрәмә ағыу һоналар.*
*Ә күңелдә,*
*Ҡарғаларҙан ҡурҡып,*
*Шып-шым ғына*
*Гөлдәр һыналар...*

***

*Хыянатыңдан һөйөү үлде,*
*Йәне ашты күккә —*
*Хаҡ асылы уның һинән*
*Юғарыраҡ күпкә.*

*Тере мәйет үҙең хәҙер —*
*Хурлыҡ, түбәнлектә.*
*Һинән бейек утҡа осҡан*
*Ҡескәй күбәләк тә.*

## Саҡ ҡына...

*Миңә яҙһын өсөн*
*Был яҙың,*
*Ләйсән яуҙырырлыҡ*
*Йыр яҙҙым.*
*Йәшлегеңә йәшерен*
*Барып индем —*
*Баҙмам, тиһәм,*
*Баҙҙым.*
*Әллә аҙҙым?*
*Ҡапыл ҡаушап ҡалъан*
*Ҡарашыңа*
*Тәүәккәллек бирҙем,*
*Наҙ көттөм.*
*Мөхәббәтем*
*Ҡарҙы иретте лә,*
*Үҙ ҡышымды үҙем*
*Яҙ иттем!*
*Баҙмам, тиһәм,*
*Баҙҙым.*
*Әллә аҙҙым?*
*Яҙыҡтарым барҙыр*
*Саҡ ҡына:*
*Ялан аяҡ*
*Ҡарҙан йүгерҙем дә*
*Умырзаяң булдым*
*Аҡ ҡына...*

## Шәфәк нуры

*Яҡты әле.*
*Һиҙгер күңел генә*
*Алдан шәйләй шәфәҡ ялҡынын,*
*Ҡыҙыл нурҙар ҡанатында килер*
*Ҡуйы эңерҙәрҙең һалҡынын.*
*Ауыштырып көндө үҙ яъына,*
*Килеп етһә шәфәҡ бер мәлде,*
*Йәшәтергә мине,*
*Йәшәртергә*
*Бирер һымаҡ яҙмыш әмәлде...*

## Тик берәү...

*Ҡанаттарым йәш ине —*
*Кҿҙәтсенән йәшерен,*
*Ә һин һиҙеп ҡалғанһың,*
*Ҡыҙығып күҙ һалғанһың.*

*Осор мәлдәрем етте,*
*Күктәр мине үҙ итте.*
*Күҙеңдә тик һағалау,*
*Уйыңда — бик йә быға у.*

*Көнләштең осар ҡоштан,*
*Яратмағанһың баштан.*
*Булғанһың бары аусы,*
*Азат йәнде урлаусы.*

*Ҡанаттарым түрҙә лә...*
*Алтын рамда — күргәҙмә.*

*Йылмая күп кешеләр,*
*Улар һинең ишеләр.*
*Тик берәү илай ысын —*
*Мине һөйгән ыласын.*

## Дауыл

*Үтте-китте хис дауылы!*
*Ҡыуып та етә алманым.*
*Ғәрлегемә сыҙамайса,*
*Илап ергә ауланым.*

*Үтеп китте, саң борхотоп,*
*Саңда — эҙе, саң — һүҙе.*
*Ни өсөн ғәрләнәм әле—*
*Саң ҡосағында үҙе.*

*Үтте-китте, зыяны юҡ.*
*Аҡыл алдым дауылдан.*
*Ел аша сәләм тапшырам,*
*Ул бит күрше ауылдан.*

## Бәхет нуры

*Бәхет ул, ипле ҡунаҡтай,*
*Килә лә тик бер мәлгә,*
*Китә лә башлай, әйтәһең:*
*Рәхмәт хәлде белгәнгә.*

*Зарыкҡанымды һиҙгәндәр,*
*Миңә лә инеп сыҡты:*
*Таң нурына сумған Бәхет*
*Ҡисеп килгән ысыҡты.*

## *Эсперанто*

*Ҡиҫелгән төпһәнән бер саҡ*
*Үҫеп сыҡты талсыбыҡ.*

*Осоп та килде һандуғас,*
*Ҡуныр сыбығы булғас.*

*...Сағырманыҡсы тылмасты,*
*Йыр теле—эсперанто!*

***

*Һыуға төшөп батҡан*
*Аҫылташтай,*
*Мөхәббәтең — миндә,*
*Асылымда.*
*Кире тартып уны*
*Ала алмаҫһың —*
*Асыуланма!*

***

*Йырымдың*
*Һүҙе — һин,*
*Күҙе — һин,*
*Һулышы — һин,*
*Тауышы — һин.*
*Йырымдың*
*Үҙе — һин!*

## *Мөхәббәт ағасы*

*Күл буйында бер йәш ҡайын*
*Һәр ботағы йоҙаҡлы.*
*Бисара, уға ни сара —*
*Эләккән бит тоҙаҡҡа!*

*Шул саҡ күрәм ни тамаша:*
*Егет менән ҡыҙ килә,*
*Үҙ юрауҙарын юраптыр,*
*Ағасҡа йоҙаҡ элә.*

*Йоҙаҡты бикләп, асҡысын*
*Улар күлгә ырғытты,*

*Был — ғашиҡтар тоғрологон*
*Иҫбатлаған ырым, ти?*

*Шул саҡ ҡайын, ҡалтыранып,*
*Аяныс ауаз орҙо,*
*Әйтерһең, яралы берәү*
*Йәнасыҡҡа ызғырҙы.*

*Тамырҙары аҡтарылып,*
*Ауҙы йәш ҡайын ҡулгә,*
*Төпкә һөйрәне йоҙаҡтар,*
*Тереләй күмелде ләмгә.*

*Үлде мөхәббәт ағасы...*
*Йоҙаҡтың юҡ асҡысы.*

## Диалог

*Көҙгө ямғыр һорай мыжып:*
*— Һин ниңә йоҡламайһың?*
*Яуап бирәм,йәнем көйөп:*
*— Һин ниңә туҡтамайһың?!*

*Был диалог — хәл белештән,*
*Икебеҙ ҙә бер иштән,*
*Мин һәм ямғыр, ҡушлап илап,*
*Бер-береһен ишеткән...*

## Минең Айым

*...Төнгә индем*
*Серле төнгә:*
*Йөрәгеңде*
*Ас, тип, миңә,*
*Ай нур һуҙҙы —*
*Алтын энә.*
*Арбай-арбай,*
*Ҡаҙай,буғай,*
*Энәһен, ай!*
*Йөрәк серем —*
*Һағышымды*
*Һурыр-һурыр...*
*Һәм һарғайыр.*
*Ай — наркоман,*
*Ә мин — донор.*



**Римма**
**ҒӘЛИМОВА**

## *Бәхет төҫө*

*Бәхет төҫөн аңлар йәшкә еттем,*
*Шул иҫәптән — тормош сәмен дә,*
*Ике быуат арауыҡты ғына*
*Йәшәү кәрәк икән кәмендә.*
*Ябай хәҡиҡәтте белер өсөн*
*Юғалтыуҙар кәрәк булғанмы?*
*Ата-әсә, бала хаҡы күпме,*
*Туған белмәй үҫә туғанды!*
*Беҙ йәшәгән донъя ошо бит ул,*
*Вәхшилектән ҡай саҡ ҡот оса.*
*Ер шары ла таҙаланыр ине,*
*Әшәкелектәрҙән ҡотолһа.*
*Ҡайҙа ла бер ҡояш, нуры төрлө*
*Ҡеше аңдарына үтмәгәс.*
*Беҙ йәшәйбеҙ, тормош дауам итә,*
*Ахыр замандары етмәгәс.*
*Бәхет төҫөн аңлар йәшкә еттем,*
*Татыным мин тормош тәмен дә.*
*Ике быуат арауығын ғына*
*Йәшәү кәрәк икән кәмендә.*

*Римма Ғәлимова (1963) Ишембай районы Йәнырыҫ ауылынан. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын тамамлай. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән тәбрикләйбеҙ.*

## *Йылан йылы*

*Хуш, аждаһа! Йылан йылы килә*
*Бөгәрләнеп түгел, турайып,*
*Яңы йылды ихлас ҡаршыларға*
*Беҙ быйыл ла әҙер торайыҡ.*
*Аждаһаны һанға һуҡмағандай,*
*Йылан батша шыуып-шыуыша.*
*Ҡарлы ергә аҡ мөгөҙөн һалғас,*
*Иҫке йылды буран ҡыуыша.*
*Йондоҙ яуған мәлдә күҙҙе йомһаҡ,*
*Офоҡтарҙа бәхет күренә.*
*Ҡот килтерһен аҡ йыландың йылы*
*Һәммәбеҙҙең өйө түренә.*

## *Башҡортостан*

«Йөрәгендә халҡы булмағандың
Ҡеше булырға ла хаҡы юҡ!»

Рәми Ғарипов.

*Башҡортостан — Ерем һулышы һин,*
*Ғәзиз йәнгә тауың, урманың.*
*Атайсалым тарта, ҡалмағанда*
*Ҡайтып әйләнерлек туғаным.*
*Тыуған тупраҡ ҡәҙерҙәре арта,*
*Ҡәберлек тә ерҙәр ҡалмағас.*
*Әле булһа беҙҙе юҡһыналыр*
*Олатайҙан ҡалған алмағас...*
*Ауылыма киткән автобустың*
*Арттарынан күҙҙе алмайым.*
*Сирек быуат үткәс танымаған*
*Ауылдаштарымды аңлайым.*
*Башҡортостан — ғәзиздәрҙән-ғәзиз,*
*Ҡупҡанда ла дауыл-туфаның,*
*Ҡайҙа йөрөһәк тә һағындыра*
*Йүкәләре баш йорт — Уфаның.*
*Илебеҙҙе, еребеҙҙе баҫты*
*Әллә ҡайҙан килгән хаиндар.*
*Беҙҙең менән бергә түгелеп илай*
*Теҙелешеп баҫҡан ҡайындар.*
*Ерҙе тырнап, үкһеп илаһаҡ та,*
*Тартып алғас, булмай ҡайтарып.*
*Башҡаларға башын эймәгәнгә*
*Барыһына шаһит сал тарих.*
*Салауаттар күҙ алдына баҫа,*

Вәлидиҙәр сыҡмай уйымдан.
Мортазалар әле булһа сафта —
Башҡараһы эштәр муйындан.
Халҡы мәнфәғәтен хәстәрләгән
Мәңгелеккә иҫтә ҡалалыр.
Майлы ҡалъя өсөн килгәндәре
Беҙҙе тәрән уйға һалалыр.
«Хәсрәт кенә тотоп, ялҡын йотоп
Уй уйлаған ирҙә йоҡо юҡ»,*
Башҡортостан, һиндә килмешәктең
Хужа булырға ла хаҡы юҡ!

## Торатауһыҙ ҡалһа донъялар

Йөрәгемде әстән һулҡылдата,
Торатауым, һинең яҙмышың,
Ҡуҙғатып та тауҙы, алмайыҡсы
Ата-бабаларҙың ҡарғышын.
Халҡым ғорурлығын аҫҡа һалып
Тапатмайыҡ сеймал хаҡына.
Ҡомарҡыны яҡлап сик ҡуяйыҡ
Томалана барған аҡылға.
Ил ҡеүәте — мәғрур ҡаяларҙа.
Ил байлығы — ғорур тауҙарҙа.
Еребеҙҙе һаҡлап ҡалыр өсөн
Ҡорал алып сығам яуҙарға,
Һүҙ ҡөҙрәте бар ҡоралдан көслө,
Олатайҙан ҡалған аманат.
Аяҡ терәп тауҙы яҡлағанда,
Сыҡһа сыҡһын беҙҙең яманат.
Башҡортлоғом йөрәгемдә булғас,
Ғәҙел юлды үҙем һайланым.
Торатауҙы ҡара болот ҡаплай,
Итәгендә — көрәш майҙаны.
Ут-ғәрәсәт илде ялмағанда,
Йәнем йәһәннәмгә ашҡына.
Торатауһыҙ ҡалһа был донъялар —
Ер бит күсәренән ысҡына!

## Еләк тәме һеңгән ергенәм

Ҡыҙарып та бешкән еләк булып
Зиһенемә үтә елбәҙәк йәй.
Өҫтәл уртаһында еҙ самауыр —
Еләк ҡағы менән, эй, тәмле сәй.

* Халыҡ йырынан.

*Ғәзиз ергенәмдең бесәнлеге,*
*Хуш еҫтәре аңдарыма һеңгән;*
*Тыуған яҡҡа ҡайтып илар инем,*
*Утҡайҙары уның күптән һүнгән...*
*Нигеҙ ташы кемдәр ҡулындалыр?*
*Егән һыуҙары ла ҡороғандыр.*
*Еләк һатҡан ҡатындарға ҡарап*
*Тыуған яҡты үлеп һағынамдыр.*
*Ҡалалағы ҡарға ҡарҡылдауы*
*Эҫе йәйҙә тамам ялҡытҡанда,*
*Ҡайын еләгенең һутынан да*
*Эске донъям минең балҡып ҡала.*
*Ҡыҙарып та бешкән ер еләген*
*Ҡайтып ҡына йыйыр саралар юҡ,*
*Үткән менән бөгөнгөмдө ҡушып,*
*Тоташтырыр ғына аралар юҡ...*
*Еләк тәме һеңгән ергенәмдең*
*Яйлап ҡына арта ҡәҙерҙәре,*
*Килмешәккә күскән тупраҡ-ерҙәр*
*Тайфун булып өтә бәғерҙәрҙе.*

## Ҡыш

*Күңелемдә аҡ өмөттәр бәпләп,*
*Һәлмәк кенә ҡарҙар яуа ергә.*
*Быйма кейеп алған ҡыҙым атлай,*
*Ҡарһылыуҙай, минең менән бергә.*
*Иң ғәзизе эргәһендә булғас,*
*Ышанысլы ваҡ-ваҡ аҙымдары.*
*Әсәй барҙа бала йәтим түгел,*
*Дауам итә тормош ағымдары.*
*Йәшел күрәк менән ҡарҙы күрәй,*
*Ер йөҙөндә ҡалыр дауамым шул,*
*Ҡыҙым менән мин дә кесерәйәм,*
*Уның менән мин дә баламын шул.*
*Донъя яулай ҡыҙым йән-фарманға,*
*Еүешләнеп бөттө кейеме лә.*
*Бәхет өсөн күп кәрәкмәй икән —*
*Хасил булды тауҙың өйөмө лә.*
*Сана һөйрәп тауға менеп бара,*
*Яҙмыш бүләге һин, эй, ҡурсағым!*
*Һинең бәхет өсөн доға ҡылып,*
*Һүрелтмәйсә торам өй усағын.*

## *Диуана*

*Мин — ҡатын-ҡыҙ. Иң ҙур бәхет ошо*
*Һомай ҡошо булған донъяла.*
*«Әсәй!» тигән тауыш мәғәнәһен*
*Һәр иртәлә тойоп уянам.*
*Ҡосағыма алам бәпесемде,*
*Йөрәк һулышымды ул тоя.*
*Әҙрәткән дә, яратҡан да йәрҙең*
*Йән йылыһын йомшаҡ ҡул тоя.*
*Йәшәүемдең ике тотҡаһы һеҙ:*
*Һөйгән йәрем, уртаҡ балабыҙ.*
*Тормош әме менән өсәүләшеп*
*Донъялыҡта урын алабыҙ.*
*Йондоҙло күк фатихаһын биргән*
*Мөхәббәткә һалып тамғалар,*
*Беҙҙең хистәр һөйөү диңгеҙенә*
*Яҙғы тулҡын булып ҡағалар.*
*Шул тулҡындың бер тамсыһы булып*
*Ҡыҙыбыҙ бит йөҙә уртала.*
*Уның яҡты яҙмыштары өсөн*
*Ҡурсала һин беҙҙе, ҡурсала!..*

## *Ысынбарлыҡ*

*Ослай алмай аҙапланам*
*Фекеремдең төйөнөн,*
*Сәфәргә сығып эҙләйем*
*Һүҙҙәремдең бөйөгөн.*
*Ғәҙеллек илсеһе булғас,*
*Ҡәләм шартлап һынды ла,*
*Күңел ҡол булмай, йәшәргә,*
*Азатлыҡҡа ынтыла.*
*Ҡол да итеп ҡаранылар*
*Баш бирмәгән башҡортто.*
*Ауыҙын ҡаплағанда ла*
*Кем теленән баш тартты?*
*Баш-баштаҡлыҡ ҡылынһа ла*
*Батшалар әмерендә,*
*Кемдер фараз иткәндә лә*
*Халҡымдың кәмерен дә...*
*Беҙ булғанбыҙ, бар, барлыҡты*
*Танырға ваҡыт күптән!*
*Һауаларҙы ярып әйтәм:*
*Ысынбарлығы — күктән.*
*Ысынбарлыҡҡа таянып,*
*Күктең йомағын һүтәм.*
*Ғәҙеллек илсеһе булып*
*Ҡалған ғүмерҙе үтәм.*



## Азамат ЮЛДАШБАЕВ

# «Сакрымдарҙы һыйпап табан менән, Әйләндерешәһең бит һин дә Ер шарын...»

Пәйғәмбәрҙәр затынан булған менән
Иблистән дә уҙған әҙәмдәр...
Ш. Бабич.

***

*Беҙ —*
*Ахрызаман геройҙары*
*Һәм тиҫкәре персонаждар:*
*әллә —*
*артыҡ йәшәгәндәр,*
*әллә —*
*етлекмәй тыуғандар.*
*Телдәр — шыма, уйҙар — шыуғалаҡ,*
*һәр кемебеҙ битлектә.*
*Тәхеткә менгән әрһеҙлек,*
*намыҫ аунай һуплектә.*

*Уң ҡул күрешергә һуҙылған,*
*һулы — артта — йоҙроҡта,*
*йөҙҙәрҙә — таш һымаҡ йылмайыу,*
*күңел — ете йоҙаҡта...*

*Аҙымлап ара яҡынлая —*
*сакрымлап алыҫлашабыҙ,*
*илап күрешәбеҙ яҡындар менән —*
*көлөп айырылышабыҙ...*

*Азамат Юлдашбаев (1964) Ейәнсура районының Саҙалы ауылынан. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын тамамлай. «Ватандаш» журналының баш мөхәррире.*

*Телдәрҙә күркәм, изге лөғәт,*
*ғәмәлдә башҡа ниәт.*
*Атҡа менһә, туған талаша,*
*көнсөллөк — күркәм ғәҙәт.*

*Ирендәр доға ҡабатлай,*
*эстән бәддоға уҡып.*
*Зыялылар өнһөҙ ята*
*зыянлыларҙан ҡурҡып.*

*Нәфсе выжданды баҫты,*
*беҙҙе — тормош ваҡлыҡтары.*
*Беҙ — әллә аҡтыҡҡы геройҙар,*
*әллә әҙәм аҡтыҡтары*

***

*Ултыр әле, әсәй, һөйләшәйек,*
*йәнәһе,*
*йылдар ҙа юҡ арала, юлдар ҙа...*
*Һөй арҡамдан, һыйпа башымдан.*
*Тәүбәһенә ҡайта икән*
*түбәһе сайҡалып киткән улдар ҙа...*

*Сыҡманы бит минән фәрештә...*
*Ҡайһылай итһәм дә,*
*үҙемдән үргәрәк һикереп булманы.*
*Ярай,*
*ошо килеш тә*
*ҡабул итә донъя әлегә мине.*
*Һәм мин — донъяны...*

*Яҡшы улмынмы мин?*
*Яуап шулай — тырыштым.*
*Килеп сыҡҡандырмы, юҡмы? Билмәйбә.*
*Ситән аша ырғып, сиктән сығып*
*самаларҙан ашҡан саҡта*
*ҡарашыңды тойоп ҡурҡтым һәр хәлдә.*

*Рәнйеттеләр.*
*Рәнйеткеләнем үҙем дә.*
*Йәшәмәнем*
*ап-аҡ сәллә урап,*
*йәшел сапандарға төрөнөп...*
*Булды инде —*
*гонаһ менән сауап араһында*
*футбол тубы кеүек йөрөнөм.*

*Урлашманым,*
*хәйер,*
*булды — алғыланым...*
*Башҡаларға тейеш ҡарғышты.*
*Алдашманым, тиһәм...*
*Бер-ике ҡат*
*яҙмышымды алдап маташтым.*

*Кеше йырын йырламаным.*
*Моңһоҙораҡ,*
*моңһоуыраҡ булһа ла,*
*үҙ көйөмдө генә көйләнем.*
*Донъяға үс итеп*
*себен яһағаным булды филдән,*
*дөйә иттем ҡай саҡ төймәне.*

*Ямалып та ғына бөткән күңел,*
*йүрмәләгән дә генә йән менән*
*ҡайттым бына...*
*Һинең ҡаршыңа.*
*Рәнйеһәң дә, әсәй,*
*әрләһәң дә...*
*Һөй арҡамдан. Һыйпа башымдан.*

***

*Тышауһыҙ тай кеүек*
*тулап туйып тамам, тойғолар*
*тәртәләргә инеп тынғанда...*
*Көҙҙө көткән һуғым малы,*
*ҡышты көткән ҡоро утын һымаҡ*
*барыһына күнеп,*
*барыһын да ҡабул ҡылғанда...*

*Ымһындырғыс бер төш булып,*
*хыял булып индең*
*инде мүкләнеп тә барған күңелгә.*
*Бөткәйнем бит хатта йыйынып*
*тәрән соҡор ҡаҙып,*
*хистәремде шунда күмергә.*

*Йәшәйештә яңылыш осрашыу бар,*
*тик осраҡлы яңылышыу юҡ.*
*Әкиәттәрҙә генә була шулай:*
*һарыҡтар ҙа иҫән, бүре лә туҡ.*

*Тик кем һуң һарыҡ икебеҙҙән,*
*Ҡайһыныбыҙ бүре?*
*Кем һунарсы, кем ҡорбан?*

*Ниндәй изгелек йә мәкерлек*
*йылмайыуыңа ҡунған?*

*Йәлләргәме һине,*
*йәки, ҡурҡып,*
*урап үтергәме алыҫтан?*
*Һин — әллә аҙашҡан бесәй балаһы,*
*әллә ауға сыҡҡан инә арыҫлан?..*

*Тойғоларҙың ауыҙлығын алып,*
*терелтеп төңөлгән хистәрҙе —*
*эх, аҡыл түренән һикереп төш тә...*
*Тамам Мәжнүн булып,*
*ҡасырға ине шул тылсымлы төшкә,*
*Ҡалырға ине төштә...*

*Үткәндәрем*
*Илай-илай*
*Аяҡтарҙы тота,*
*тышаулай.*
*Был утта мин мәңге яналмам.*
*Уятығыҙ мине!*
*Бындай төш булмай...*

***

*Офоҡ артында — йәнә офоҡ,*
*юл сатынан һуң — тағы юл саты.*
*Әллә һин һайлайһың, әллә һине:*
*ҡағиҙәләр — ҡыҙыҡ, ҡанун — ҡаты.*

*Уңға китһәң әгәр?..*
*Йә һулғамы?..*
*Уңһаң да, туңһаң да...*
*Барыһы ла*
*нисек бар — шулай ҡалһын...*
*Саҡрымдарҙы һыйпап табан менән,*
*әйләндерешәһең бит һин дә Ер шарын.*

*Ай бараһын көн үтәһең,*
*көн бараһын — йыл буйы.*
*Таңың ата һинең кискә табан,*
*иртәнсәк ҡояшың байый...*

*Юлыңдың башы ла юҡ,*
*аҙағы ла —*
*ҡуласаға сыҡтың, ахыры.*
*Бәлки, тапанаһыңдыр, алйып,*
*һаман бер урында, эй, бахыр!*

*Күҙҙәрҙе һин күптән күрмәйһең —*
*бары аяҡтар.*
*Күкте ҡаплай емерелгән ҡаштар,*
*донъя киң дә, ҡараш — тар...*

*Ҡабат-ҡабат әйттеләр бит*
*дуҫтар, яҡындар, туғандар:*
*«Сыҡма*
*юлдан, еңмеш,*
*барыһы барған һуҡмаҡтан бар!»*
*Ә һин артыҡ үҙ һүҙле, имеш,*
*алдыңда — үртәлгән күперҙәр,*
*артыңда — өтөлгән хыялдар.*

*Һинең сәғәтеңдең йөҙөндә*
*бары ике һан —*
*тик ике һүҙ —*
*тыйыу һәм үлем.*
*Һинең компасыңда тик бер тараф:*
*ҡайҙа боролһаң да — «унда түгел!»*

*Ә һин, атла, еңмеш, туҡтама —*
*йәнеңде услап, шиктәреңде үртләп,*
*финал яҡын —*
*барыбер дүрт — ике-икең.*
*донъя бер саҡ алдыңа теҙләнер ҙә*
*шым ғына әйтер:*
*«Мин — һинеке»...*

***

*Мәхәббәттә мәрхәмәт юҡ:*
*унда әсирҙәр алмайҙар,*
*ярлыҡауҙар һорап*
*окоптан*
*аҡ әләм болғамайҙар.*
*Барыһы ла аҙаҡҡаса —*
*батырҙарса, бахырҙарса —*
*ахырғаса.*
*Тойғолар туҙғанса,*
*хистәр кипкәнсә,*
*сикәләрҙе өтөп ағып төшкән*
*күҙ йәштәрен ялай-ялай,*
*наҙ урынына*
*тубыҡтан*
*нәфрәттәр кискәнсә.*
*Ҡалҡан менән йәки ҡалҡанда*
*һөйөү фронтынан ҡайтҡанда.*
*Мөхәбәттә мәрхәмәт юҡ,*
*унда әсирҙәр алмайҙар.*

*...Арҡаға ҡаҙалған һөңгө һабына*
*кемдер ҡулъяулыҡ киптерергә элгән...*

***

*Һүҙҙәр күптән мәғәнәһен юйған,*
*Шуға күрә, зинһар, өндәшмә!*
*Баҫ тормозға. Туҡталыш ошонда.*
*Ер әйләнер минһеҙ килеш тә.*

*Бәлки, хаталар өҫтөндә эшләрҙәр*
*минән һуң донъяға килгәндәр.*
*Арыным,*
*бында һәр кем үҙенә иблис,*
*үҙенә үҙе һәр кем пәйғәмбәр.*

*Тәүге аҙым — һуңғыһының башы,*
*беренсе мәхәббәт —*
*нәфрәткә беренсе иғәнә...*
*Мине бер кем аңламай, тиһең, —*
*атылған йондоҙҙа бөтә мәғәнә?*

*Бер үк баш менән —*
*бер үк ишеккә —*
*ете йөҙ ҙә етмеш етенсе ҡат.*
*Ҡарап ятҡан төшөң оҡшамаһа,*
*бисмилла ит тә әйләнеп ят.*

*Әйләндем.*
*Ятам.*
*Яуапһыҙ һорауымды*
*төнгә төбәп.*
*Атырға ла,*
*атылырға ла әҙермен:*
*мин үҙем — сикә,*
*үҙем — сикәгә терәлгән көбәк.*

***

*Аҡ ҡағыҙ битенә төбәлеп,*
*нервылар керештәй тартылған.*
*Өлгөрмәй аҡылың эйәреп*
*баш бирмәҫ хыялың артынан.*

*Ваз кисеп фанилыҡ ғәменән*
*эҙләйһең оло сер ғаләмдән.*
*Тынлыҡҡа сорналған донъяла*
*төн менән мәңгелек бәйләнгән.*

*Тәмәке. Ҡәһүә. Яңғыҙлыҡ.*
*Төн үтә тағы ла йоҡоһоҙ.*

*Таң ата...*
*Һаман да буш ята*
*алдыңда тап-таҙа аҡ ҡағыҙ.*

*Ижад, һин —*
*тамуҡ менән ожмах араһы,*
*татлы ләззәт һәм бөтмәҫ ғазап.*
*Ижад, һин —*
*үҙ-үҙеңдән ҡасҡан ваҡыт,*
*үҙең менән үҙең осрашҡан саҡ.*

***

*Тоғролоҡ ҡайҙа изге васыятҡа?*
*Ҡайҙа беҙҙең анттар?*
*Ҡайҙа аттар?..*
*Яуап бирмәй*
*өнһөҙ ҡалған,*
*ағас мылтыҡ тотҡан ҡурғаш һалдаттар.*

***

*Кемдер тәгәрмәскә таяҡ тыға,*
*кемдер күккә кәпәс сөйә.*
*Илде йәнә тулғаҡ тота,*
*ҡыҙ тыуыр, ахыры:*
*РЕВОЛЮЦИЯ...*

***

*Боғаҙына бысаҡ терәлгән һарыҡ*
*күҙен йомоп һуңғы һүҙҙәрен әйтте:*
*— Мөбәрәк булһын ҡорбан ғәйете!*

***

*Йә,*
*тартмаймы ауырттырып арҡалыҡ,*
*ышҡымаймы ҡойроҡ аҫтын ҡойошҡан,*
*быумаймы муйындарҙы ҡамыт,*
*азатлығын ризыҡҡа алыштырған халыҡ?..*
*ялтырай ҡалаҡтар,*
*шаҡылдай яңаҡтар,*
*ялпылдай ҡолаҡтар —*
*иң мөһиме — тамаҡ туҡ булһын,*
*килер әле ирек, ҡыҙыл ҡар яуғас.*
*... Тутыҡ сәнскеле сымға ҡунып,*
*өҙөлөп тә генә һайрай һандуғас...*



Ишғәли
НУРҒӘЛИЕВ

# ҠАРАБАШ ТУРҒАЙ

Яҙмышнамә

*1939 йылдың 10 декабрендә Ишембай районының (элекке Маҡар районы) Әптек ауылында тыуғанмын. Ауырлыҡтарға бирешмәй, 1946 йылда – үҙебеҙҙәге башланғыс, 1950 йылда – Сәлих ете йыллыҡ, 1956 йылда Этҡол урта мәктәбен тамамланым. Бик йәшләй колхоздың комсомол ойошмаһы секретары булдым, армия сафында ла йәмәғәт йөгө тарттым.*

*1961 йылдан 1969 йылға тиклем Стәрлетамаҡ синтетик каучук заводында аппаратсынан башлап өлкән инженер баҫҡысына күтәрелдем. Артабан баш механик вазифаһында һөт комбинатын әүҙем төҙөшөргә, директор вазифаһын да үтәргә насип итте.*

*Ситтән тороп Өфө нефть институтын тамамлағас, һөт сәнәғәте тармағында (1974 йылдан 1980 йылға тиклем) Нижневартовск ҡалаһында төҙөлөш-монтаж эштәренә етәкселек иттем.*

*Күптән хаҡлы ялдамын. Проза яҙам, публицистика жанрын да яҡын күрәм. Әле хөрмәтле «Ағиҙел» уҡыусыларына автобиографик яҙмаларымдың аҙағын тәҡдим итәм (тәүге киҫәктәре журналдың 2009 йылдың 11-12-се, 2011 йылдың 5-се һандарында баҫылды. Ыңғайҙан яҙмышнамәмде ташҡа баҫырға күп көс һалған, миңә «Журналдың 2009 йылғы лауреаты» исемен ололоҡлап биргән редакция хеҙмәткәрҙәренә, әҫәргә ҡарата үҙемә хаттар һалған ҡорҙаштарға ихлас рәхмәтемде белдерәм.*

***Автор.***

# *Корчагинсы*

Тимер юл вокзалына ҙур портфель тотҡан ир килеп инде. Ул тура касса тәҙрәһенә барҙы ла купе-вагонға билет һораны. Йәйге осор бит, кассирша плацкарттан урын тәҡдим итте. Ә йәш кешегә купе юҡлығы оҡшаманы, буғай.

– В общий вагон, – тип аҡса һуҙҙы.

Кассир сырайын һытты, тиҙ-тиҙ яҙып билет һондо, күрәһең, аламараҡ вагон һайланы.

Йәш ир (йәғни мин фәҡирегеҙ) бер һүҙ ҙә әйтмәне, перронға сыҡты. «Күмертау – Өфө» поезы килеүгә бер нисә минут ҡалған, халыҡ көтә. Беҙҙең пассажир беренсе булып вагонға инә, сумкаһынан «Литературная газета» алып, икенсе ҡаттың ятыу урынына йәйеп һала ла, аяҡ кейемен дә сисеп тормай, менеп ята. Вагонда халыҡ әҙ, буш урындар байтаҡ.

Поезд ҡуҙғалды, ә проводница, үтеп барышлай, һәндерәлә ятҡан егеткә аҡырып ебәрҙе:

– Что такое? Немедленно сними обувь, а то вызову милицию...

...Ике ҡатын килә икән, берәүһе – поезд бригадиры. Вагон йәнләнде. Өс ҡатын ныҡлап бәйләнергә булды, ә йәш ир өндәшмәй ҡалманы:

– А вы скажите, когда вы в последний раз мыли вагон? Пыли тут сколько! Год не убирались!

Бармағы менән туҙанлы һәндерәгә яҙып та күрһәтте:

– Давайте составлять протокол, позовите начальника...

Вагондағылар ҙа һүҙгә ҡыҫыла башлағас, бәхәс ҡуйырҙы.

Бригадир вагон хужабикәһенә бәйләнде: «Ниңә бысраҡ вагон ҡабул иттең, йәйен вагон тиҙ бысрана икәнлеген беләһең бит…» Ә үҙе тиҙерәк китеү яғын ҡараны.

– Сараһын күрербеҙ! – тигән булды тегеһе.

Иртән, Өфө вокзалынан сыҡҡас, йәш кеше тәүге трамвай менән Ленин урамындағы ашханаға килде: унда бишбармаҡ йәки өлөштө арыу әҙерләйҙәр. Тамаҡ туйҙырып алғас, Ибраһимов бульварындағы «Башкомплектснаб» конторыһына барҙы. Эш көнө башланыуы менән һәр бүлеккә инеп сыға, белешмәләр ала. Ә бына бүлектәрҙең береһендә сибәр ҡатын серен систе:

– Һеҙҙең заводҡа бер катушка бронекабель килгән. Бирмәҫкә тырышырҙар. Нисек булһа ла алып китергә тырыш. Бик дефицит продукция! – тине. Бүлек инженерына рәхмәт әйтеп, тейешле ҡағыҙҙарҙы алып, командировкалағы ирекәй конторанан сыҡты ла Совет майҙанына йүнәлде. Майҙандағы контораларҙың береһе – «Росмаслосырпром». Ә унда секретарь ҡыҙ:

– Начальник Ҡырымда, баш инженер китте, йәй бит, күптәр ял итә. Начальникһыҙ эш сыҡмай, – тип тик ултыра..

Йәш кеше ҡаршылағы ишекте асып инде. Начальник урынбаҫары Вахитов, башын да күтәрмәй, ниҙер яҙа.

– Ҡамасаулама, ваҡытым юҡ.

– Йомошом бик ашығыс, машина кәрәк...

– Иртәгә килерһең.

– Миңә мәсьәләне бөгөн үк хәл итергә кәрәк!

– Ҡамасаулама, бар сыҡ, күрәһең бит: мин Совминға отчет яҙам. Ә ул бөгөн тапшырылырға тейеш.

Вахитов өҫтәл артынан тороп, йәш кешене этеп сығарҙы ла ишекте шарт

бикләп ҡуйҙы. Егет икенсе ҡатҡа менде, ПТО кабинетына инеп, әлеге Вахитовҡа телефон аша шылтыратты:

– Улай булғас, мин «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһына киттем, бәлки, ярҙам итерҙәр.

– Ярар, кил кабинетыма, кил, маҙама тейҙең.

Яңынан Вахитовҡа ингәс, йәш кеше баҫалҡы булырға тырышты, ә Вахитов «ҡайнап сыҡҡан»:

– Ниндәй машина? Йөрөйҙәр бында йыйын йүнһеҙҙәр! Һинең бер кемгә кәрәгең юҡ, ә бына мин был ҡағыҙҙар менән Совминға барырға тейешмен. Ә һин кем? Шалопай...

– Миңә иртәгә иртәнсәккә йөк машинаһы кәрәк. Стәрлетамаҡҡа бронекабель алып ҡайтырға. Иртәгә ала алмаһам, аҙаҡ үҙегеҙ эҙләп табырһығыҙ.

– Вот сопляк, өйрәтә бирәү. Минең кем икәнде беләһеңме?

Шулай ҙа ул телефон трубкаһын алып, шылтырата башланы. Ярай, тиҙ алдылар. Юғиһә Өфөлә телефон бәйләнеше маҡтарлыҡ түгел.

Машина буласаҡ. Йәш кешегә Өфөнөң икенсе осона – Благовещенск яғына барырға кәрәк. Әлеге трамвайҙа... Ул базаға килеп, склад мөдире менән һөйләште. Бер катушка бронекабель – урынында, алырға теләүселәр йөҙәтә икән. Йәш кеше кискә табан Иҫке Өфөгә әйләнеп ҡайтты. Ә ҡунаҡханала урын юҡ. Эйе, көтөп ултырыу мотлаҡ, иң һуңынан раскладушка бирелә.

Ә йәш кешенең үҙ хәйләһе: блокнотында бер бланк ята. Бланк тултырыла, башҡалар тапшырғанда ул да үҙенең бланкыһын паспорты менән бирә. Номерҙан урын ала. Ә бына раскладушкалар өсөн бланкылар бирелә башлағанда, ул тағы бер бланк эләктереп ала. Эйе, тағы киләһе бар. Хәйләһеҙ донъя – файҙаһыҙ.

Ҡунаҡхана буфеты иң ҡәҙерле урынға әүерелә. Эйе шул, төшкө ашҡа ваҡыт етмәне, ҡорһаҡ буш. Ә буфетта аҙыҡ сифатлы. Бер стакан портвейн дә зыян итмәҫ. Ҡунаҡхана үҙ тәртибе менән йәшәй. Командировочныйҙың башҡаларҙа эше юҡ, иртән иртүк тороу мотлаҡ. Дежурныйға әйтер: алтынсы яртыла уятырға! Үҙ сәғәте үҙ башында, һәр саҡ ваҡытында үҙе уяна. Ә бына йоҡларға ҡамасаулаусылар бында етерлек. Бигерәк тә ул-был район түрәләре алама. Төн убырҙары.

Йәш кеше иртәнсәк тәүге трамвайға өлгөрә. Бына Шота Руставели урамынан түбәнгә атлай. Дубитель заводына етә. Бына һөтсөләр гаражы. Егет теҙелгән машиналарҙы ҡараштырып йөрөй. Аптырарға түгел, Стәрлетамаҡҡа барырға теләүселәр юҡ. Начальникка ла был маршрут оҡшап етмәй. Бер саҡ ул йәш кешегә моторы алынған машинаны тәғәйенләп ҡуйғайны. Тауыш булды. Шулай, тағы бер төн ҡунаҡханала ҡунырға тура килде.

Ә бөгөн – яуаплы рейс, ыңғай шофер кәрәк. Нисек һөйләшергә? Начальник үҙенсә генә уйлай.

Эш сәғәте етте. Начальник йәш кешене көйһөҙ ҡаршыланы:

– Тағы Стәрле! Стәрле хәйерсеһеме ни һин? Машина һорап беҙгә киләһегеҙ.

Йәш кеше бәхәсләшмәне, ниндәй машина кәрәклеген әйтте. Түрә йомшара төштө, ҡулай машина тәғәйенләне. Шофер сетерекле булып сыҡты: бензин табылғас, өйгә ҡайтып ашарға теләүен әйтте. «Ярай инде, ҡаршы тороу файҙаһыҙ», – тип уйланы «хәйерсе», өндәшмәне. Шулай ҙа базаға ваҡытында килеп етелде. Йәш кеше портфеленән ҡыҙыл һыҙыҡлы «Особо важная стройка» тип яҙылған ҡағыҙын алып, база начальнигына барып инде. База начальнигы – тәкәббер Сахапов – ҡыҙыл һыҙыҡлы ҡағыҙға ерәнгес ҡараш ташлап:

– А-а! Молокозавод! Нищета! Һеҙгә бер нәмә лә бирерлек түгел. – Ҡағыҙға

ҡултамғаһын ҡуйғас: – Автокранды үҙең табырһың, миндә бөгөн юҡ, – тип өҫтәне.

Йәш егет бронекабель уралған катушка эргәһенә килеп баҫты, әҙ генә уйлашҡас, эшһеҙ торған автопогрузчик йөрөтөүсене саҡырып алды. Ә Сахапов юҡ-бар «эш» табып, автокранды ҡайҙалыр ебәрҙе. Эйе, ҡапҡанан сығып китеүен үҙе күҙәтеп торҙо. Йәш кеше шофер менән погрузчик йөрөтөүсегә яҡшылап аңлатты, сөнки машинист, биш тонналы катушканы бер нисек тә тейәп булмай, тип сәбәләнде.

– Ышанығыҙ, мин тәжрибәле механик, – тине егет.

Бына ҡыҙыҡ: ауыр катушка кузовка тәгәрәп кенә кереп ултырҙы. Йәш кеше әҙерләнгән тимер сымдар менән катушканы бәйләп беркетте лә, ҡапҡанан сығыу ҡағыҙҙарын алып, алға йүнәлде. Һиҙенгәндәй, ҡапҡа тирәһендә ни эшләргә белмәне Сахапов. Ҡыҙарынды, бүртенде, әрләшеп арығас:

– Кем? Нисек? Мин хәҙер! –тип ажарланды.

Һуң инде. Дефицит бронекабель һинең дуҫтарыңа эләкмәй, ул – үҙ юлында.

– Погрузчик йөрөтөүселәрҙе эштән ҡыуам!

Бөгәсә йәш кешенең йөҙөнә беренсе тапҡыр йылмайыу яҙылды. Водителдән үҙе белгән ашханаға йүнәлеүҙе һораны. Иртәнге аш та, төшкөһө лә ошонда... Һыра алып портфеленә тыҡты – юлда кәрәгер. Эйе, Благовещенск осонан аэропорт тирәһенә тиклем оҙон-оҙаҡ юл, ә тиҙлек әҙ. Нисәмә тапҡыр үтте был юлды! Күңелһеҙ ҙә, көлкөлө лә хәлдәр күп булды. Ярар, көн маҡсаты үтәлде.

Йәш кешенең эш тәртибе ҡыҙыҡлы... Ошо турала юлда уйланды.

Ҡамыты – баш механик, ә хеҙмәт хаҡы – йөҙ егерме һум. Премия-фәлән юҡ. Үтәгән эше өсөн маҡтаусы ла, әрләүсе лә юҡ. Ысынбарлыҡта иһә ул һөнәрен онотмаҫ өсөн эшләй.

Баш механик, ә үҙе тиҫтәнән ашыу эш башҡара. Ике йөк бушатыусыны алыштыра, сөнки бәғзе көндәрҙә һөт комбинаты төҙөлөшөнә ике вагон кәрәк-яраҡ килә. Бушатыусы ла, складҡа индереүсе лә – үҙе. Ул – ҡарауыл башлығы: буласаҡ комбинатҡа килтерелгән ҡиммәтле әйберҙәр асыҡ һауала һаҡлана, складтар юҡ. Баш энергетик та – ул үҙе. Мастер ҙа, экспедитор ҙа, директор урынбаҫары ла, монтаж эштәре буйынса куратор ҙа – үҙе...

Ә иң яуаплы бурысы – комплектлаусы инженер, сөнки һөт комбинатын төҙөү өсөн ниндәй генә ҡорамалдар кәрәкмәй. Бына машина төҙөлөшкә килеп етте. Ә нисек бушатырға? Автокран юҡ, ялларлыҡ аҡса ла юҡ. Ындай эштәр өсөн аҡса әҙ бүленә, ә мут баш бухгалтер был аҡсаны... этем белһен. Директор менән йәш кеше әмәлен тиҙ уйлап таба. Бер нисә йөк машинаһы покрышкаһы һалына, дәү катушка покрышкалар өҫтөнә тәгәрәтеп төшөрөлә. Булды! Бына шулай, йәш инженер Өфөгә аҙнаһына ике тапҡыр килә, кәрәкле нәмәләрҙе үҙе ташый.

Ҡыйын эштәрҙең дә аҙағы була, һөт комбинатын тапшырыу көндәре яҡынлаша. Комбинат йәнләнә. Бына «отлично» билдәһе менән тапшырыу акты яҙылған, тейешле ҡултамғалар ҡуйылған.

Төҙөүселәргә арыу ғына премиялар билдәләнгән. Ҡала түрәләре, төҙөүселәр өҫтән маҡтау өмөт итә. Барыһы ла йыйылған. Аптыраш. Ә ни өсөн балталары һыуға төшкән кеүек ултыралар?

Бына һиңә кәрәк булһа, КПСС Өлкә комитетының беренсе секретары иптәш Шакировтың ышаныслы кешеһе килгән! Комбинат «бик яҡшы» билдә менән тапшырылған. Ә комбинат алдында – тауҙай төрлө ҡорамал өйөмдәре. Эйе, план үтәү өсөн тимер юлы менән кәрәк-кәрәкмәгәндәрен дә оҙатыусылар булған. Был ҡорамалдарҙы «йәшереү» өсөн бер аҙна кәрәк! Иртәнсәк Шакиров үҙе килеп етәсәк, кемделер эштән бушатыуы ла ихтимал....

Ҙур бүлмәгә ингәндә, барыһы ла һүҙһеҙ ултыра ине. Смена тамамлана. Ни эшләргә? Йәш инженер мәсьәләнең айышына тиҙ төшөндө:

– Можно... – ти.

– Ә нисек? Эш көнө бөтә…

– Миңә хәҙер үк 150 – 200 һум табығыҙ. Ә ҡалғанын – үҙем!

Инженер яуап та көтмәй урамға сығып, бер нисә эшсене ҡайтыуҙан туҡтата. Крансы ҡыҙ егетте тыңлап өйрәнгән. Тракторсы – дуҫ кеше. Автокранды ул Өфөнән үҙе һорап алды, ярты ай ваҡытлыса директор булып алған мәлдә. Бер нисә слесарҙы үҙе эшкә алғайны – тыңланылар.

Аҡсаны директор үҙе килтереп бирҙе, эш ҡайнай башланы. Биш сәғәттә «тау» урынында тип-тигеҙ ҡарлы урын хасил булды.

Иртәгәһенә беренсе булып ҡала комитетының икенсе секретары Сөләймәнов килеп етте. Аптырауынан тәгәрәп китә яҙҙы. Нисек? Бер төндә? Комплектлаусы инженер ҡаршыһында тора. Өндәшмәй.

– Ниңә өндәшмәйһең? Әйт.

– Арыным...

Түрәләр берәмләп килә-китә торҙо, Шакиров кешеһе лә күренде. Эйе, вәкил комбинатты ҡабат-ҡабат әйләнеп сыҡты. Ни әйткәндер, кем белһен, ә килгән түрәләр: «Вот те на! А как?» Шакировтың килмәҫен түрәләр кискә табан аңланы. Эйе, кәйеф бына тигән, ә нишләргә? Кәйеф барҙа ни эшләйҙәр? Түрәләр бындайға һәләтле. Эш көнө бөткән. «А как без банкета?» Өфөнән килгән түрәләр ҙә банкет тәмен белә икән. Ҡараштар һөт заводы директорына төбәлде. Кисә эше мөшкөл ине, ә хәҙер күңеле күтәренке. Аҡса юҡ, әммә банкет кәрәк.

– Можно... – Быны йәнә йәш инженер әйтте, ҡараштар йәнә уға төбәлде.

– Нисек? – Был һорауҙы ике өфөлө бер юлы бирҙе.

– Вашу «Волгу»...

Эйе, теге икәү «Волга» автомобилендә килгән. Йәш кеше, «Волга»ға ултырып алғас, иҫке һөт заводына сапты: үҙәк кассала профком аҡсаһы бар. Профсоюз рәйесен йәш кеше банкетҡа алырға риза, әгәр рәйес кассанан 250 һумды үтескә бирһә. Әйтелде – үтәлде. Нисә подряд хужалығы бар әле? Унға яҡын. Һәр берегеҙҙән 150-шәр һум. Хәҙер үк! Таптылар. «Волга» «Встреча» кафеһына сапты.

Банкетта маҡтау һүҙҙәре әйтелде. Бына һиңә, комбинат төҙөүҙә Өфө түрәләре күп көс түккән икән дәбаһа! Төҙөүселәр ҙә маҡталды, ә йәш кешенең үҙе тураһында ла арыу һүҙ ишеткеһе килде. Ишетмәне. Ә кем әйтһен? Булмаҫты... Аҙаҡ тостар әйтеү башланды. Тос әйтеүҙе иң ҙур түрә башлай икән. Бына һүҙ төҙөлөш директорына бирелде.

Ул тосын «За строителей!» тип тамамларға теләне. Ошо һүҙ әйтелгәс тә, йәш кеше, фужерын күтәреп: «За корчагинцев!» – тиеп һөрән һалды. Директор, меҫкен, нишләһен, ҡабатланы: «За корчагинцев!»

Улар йыш ҡына бер-береһен «корчагинсы» тип атай ине шул.

***

Күп йылдар үтте. Элекке «йәш кеше» ярайһы ҡартайҙы инде. Бына ул һөт комбинаты ҡапҡаһы төбөндә тора. Эйе, ул алып ҡайтҡан бронекабель дауахана ҡаласығы подстанцияһы менән комбинат араһына һалынған. Әле лә шунда ята. Аб-ба, ҡартты танымайҙар – һөт комбинатына индермәнеләр. Пенсионер ашыҡмай ғына ҡайтыу юлынан атланы. Ә ниндәй уйҙар менән?

Эйе, үткән эштән төш яҡшы. Һәр кемдең үҙ юлы.

# Портфелем ҡайҙа?

*Ҡарабаш турғайҙар үҙ-ара һуғышмай. Ә бер-береһен ҡурҡытыу ғәҙәттәре бар.*

Түмән ҡалаһының Рощино аэропорты. Уф, ниндәй интегеүҙәр күрмәнем мин бында! Аэровокзал төньяҡҡа осоусы транзит пассажирҙары менән тулы – авиабилет алып ҡара!

…1974 йылдың көҙ мәле. Касса тәҙрәһенә тотоноп торам. Ҡараһам, сумаҙаным аяғым аҫтынан киткән. Сумаҙанымды «ҡотҡарҙым», эйе, Надымға осаһы самолетҡа тейәйҙәр ине – тартып алдым. Юҡ, урлашыу түгел, ашыҡҡанда әйберҙәр йыш бутала. Бындай хәлдәргә аптырайһы түгел. Хәйер, аптыраған сағым да булды: ике тәүлеккә яҡын касса рамын ҡулымдан ебәрмәй, тотоноп торҙом: самолетҡа ашыға инем. Бынһы 1975 йылдың башында булды... 1976 йыл, Рощиноламын. Борсолоу юҡ, сөнки хәҙер, документымдан файҙаланып, теләгән билет ала алам. Кәрәк икән, Мәскәүгә осам…

Рейсҡа сәғәттән ашыу ваҡытым бар, «теге урын»ға инеп сығайым да... Ауыр портфелде аэровокзал тәҙрәһенә, һәр кем күрәһе урынға ҡуйып, бараһы урынға йөрөп килдем – портфель юҡ. Пуля кеүек атылып тышҡа сыҡтым, эйе, ҙур портфель һары төҫтә, алыҫтан күренергә тейеш. Күренмәй. Метеор кеүек атылып икенсе ҡатты әйләнеп сыҡтым, башҡа урындарға ла күҙ һалдым. Уф алла, портфелдә, деликатестарҙан башҡа, министрлыҡтан килгән кәрәкле документтар бар ине бит. Нишләмәк хәҙер? Кермәгән тишек ҡалманы. Тағы ҡайҙа керергә? Милицияға... Индем, ни күҙем менән күрәм: иң күренгән урында, тәҙрә төбөндә – минең портфель.

– Портфелде юғалтҡайным…

– Ултырығыҙ, уҡып танышығыҙ.

Бына һиңә кәрәк булһа! Миндә ултырыу ҡайғыһы юҡ, үҙ әйберемә бармаҡ менән күрһәтеп, эсендәге главканан, министрлыҡтан килгән ҡағыҙҙар тураһында уйлап:

– Минең портфель, – тинем.

– Ысынлапмы? – Лейтенант үртәп алырға булды.

– Эсендәге әйберҙәрҙе һанай алам!

– Әллә шул, булһалар?

– Портфелде ҡуйып китеүемә биш минут та үтмәне.

– Ә һеҙ әйберҙәрегеҙҙе залда ҡалдырып йөрөргә тейеш түгелһегеҙ. Һаҡлыҡ камераһы бар. Ярар, ултырығыҙ, уҡығыҙ.

Нишләйһең, уҡый башланым, баҡтиһәң, ябай милиция протоколы. Уҡығас, ҡаршымда ултырған бысраҡ затҡа иғтибар иттем. Бына һиңә кәрәк булһа, ҡаршымда бит таныш әҙәм – Юра, шабашсы.

– Нисек әле былай, Юра? – тип һораным. Ысынлап, монтажда бергә эшләгәйнек, мин – прораб, ул монтажсы ине.

– Юра, әйт әле, нисек былай? – Ҡабатлайым.

– Һеҙ яңылышаһығыҙ, мин Юра түгел.

Яңылышмай ни, ул монтаждан китте, ә мин уны яңынан монтажға килергә саҡырҙым. Ул: «Һе, килмәй ни, 400 һум аҡсамы ни, миңә күп кәрәк. Бына беҙ автобаза корпусы төҙөйбөҙ. Мин бер йылда «Волга»лыҡ аласаҡмын. Мөгөҙҙәрҙе һелкетеп уйлау кәрәк, белдеңме...»

Күрәһең, Юра мөгөҙҙәре менән күберәк һелкеткән, мөгөҙөн юғалтып, йәшәү урынһыҙ ҡалып, эшһеҙлеккә юлыҡҡан. Протоколда ул «документһыҙ шәхес» тип аталған. Милиция үҙ эшен белә, заттың кем икәнлеген аныҡлағас, тағы үҙ яйына ебәрәләр, сөнки ул енәйәтсе түгел. Шулай, бич ҡайҙа ғына барһа ла бич инде.

– Ә беләһеңме, теге һин төҙөгән автобаза корпусы һәйбәт, ваҡытында эшкә тапшырҙылар. Һиңә күпме хаҡ эләкте?

– Шулай, бугор менән заказчик беҙҙе һемәйтте. Бер тинһеҙ ҡалдыҡ. Етмәһә, документтарыбыҙҙы «юғалттылар». – Юраның битендә мыҫҡыллы йылмайыу күренде.

Шулай, һәр бичтың үҙ легендаһы бар. Бич ҡайҙа ғына барһа ла бич. Юраға ышандым, тарихы алдамай. Милиция протоколына ҡултамға ҡуйҙым, әйберҙәр исемлеген әйтеп, портфелемде алдым. Минең самолетҡа ла регистрация иғлан ителде. Самолетта урын алғас, уйға сумдым. Юра тураһында ла уйлап алдым: урта ҡуллы белгес, тиҙ ышаныусан. Оҙон аҡса артынан ҡыуыусылар бындайҙарҙы оҫта файҙалана. Бындағы донъя һыу ағымы кеүек – ағып китеүселәрҙең иҫәбе-һаны юҡ.

Төмәндән төньяҡтараҡ төбәк үҙенең сәйер үҙенсәлеген совет дәүерендә үк алды. Ғөмүмән, Төмән өлкәһендә псевдопатриотизм хөкөмлөк кенә итмәне, хакимлыҡ та итте.

Был төбәккә килеп эш башлағас, килеүсе-китеүселәрҙе күҙәтеп, формула сығарырға маташтым. Килгәндәрҙең күптәре ҡайтып китә. Процентын сығарҙым, дөйөмләштерҙем. Был күренеш ҡыҙыҡлы хәлдәргә ишаралай. Егәрлеләрҙән күберәк елғыуарҙар килә. Иң үкенеслеһе: эш белмәгәндәр килә. Әйтәйек, аэропорттың һаҡлыҡ камераһында ҙур сумаҙан ҡалдырылған: 500-ҙән артыҡ белгестәр танытмаһы, Украинанан килтерелгәйне. Күҙәтеүҙәрем һөҙөмтәһе – һығымталар. Өс йыл эшләгәс, һығымталарыма ҡолаҡ һалыусылар күбәйҙе. Берәүҙәр ризалашты, бәғзеләр ҡаршы төштө. Минең анализым бигерәк тә партия етәкселәренә оҡшаманы. Ни тиһәң дә, минең һүҙҙә партияны тәнҡитләү ята. Бына шулай, тәүге йылда уҡ үҙемде күҙәтеүсе шымсылар табылды.

Йәшерәһе түгел, бигерәк тә Украинанан килгән түрәләр партияның хаталарын күрергә теләмәне. Теләгәндәрҙе ҡыҫтылар. Ҡулдарынын килгәнсе. Алдашмайым, улары мине «дошман итеү» юлына баҫты.

## *Тетрәткес ун көн*

Һәр кем иллюминаторға маңлайын терәп ҡарарға тырыша. Мин дә иғтибар менән ҡарайым. Ни ғәжәп: донъя ҡып-ҡыҙыл – Самотлор факелдары яна! Ҡолаҡтар ауыртып сеңләй, бына самолет тәгәрмәсе бетонға тейҙе. Гөжләп рулләп алғас, самолет туҡтай. Трап әҙер, төшәбеҙ. Аэропорт бинаһында баҫып торорға ла урын юҡ. Урамға сығабыҙ, башҡалар ыңғайына автобусҡа инәм. Белгәндәр менән ҡунаҡханаға барырға булдыҡ. Бына ике ҡатлы ағас бина. Ишектән инеүебеҙ менән ҡыуылыуға дусарбыҙ. Һорауҙарға яуап та бирмәйҙәр: «Сығып китегеҙ, гостиница тик саҡырылғандар өсөн». Башҡа ҡунаҡхана эҙләргә теләүселәр бар, мин кире аэропортҡа китергә булдым.

Туҡталышта бер сәғәт тирәһе тапанғас, әлеге автобуста аэропортҡа килдем, пассажирҙар залына индем. Сумаҙан ҡуйырлыҡ урынды стена эргәһендәрәк таптым. Сумаҙаным өҫтөнә ултырып, әҙ генә уйлашып алырға булдым. Уйлап булмай: ят күренеш, ауыр еҫ. Үҙемә эйәргән ир менән дә һөйләшергә теләгем юҡ.

Бер төркөм араҡы эсә, томат һутын да һемерәләр. Ҡысҡырып һөйләшәләр: имеш, иртәгәнән башлап «оҙон аҡса» көрәй башлаясаҡтар. Күрәһең, былар вокзалда беренсе көн түгел, ике эскәмйәне биләп алғандар, башҡаларға урын биреү юҡ. Уйлап та ҡуйҙым: бындай команда эсеүен туҡтата алмай. Минең янда оло йәштәрҙәге ир «Крокодил» журналын уҡып ултыра, тегеләргә ҡысҡырып та ала: «Әй, һеҙ, бичтар, ҡасан шешә йыя башлайһығыҙ?» Үҙ һүҙенән үҙе көлә, ә тегеләр

ишетмәй. Кәрт уйнаусылар бар, йоҡлаусылар күренә, йөрөштөргәндәр ҙә етерлек.

Бына миңә табан бер ир килә, аяғында – кирза итек, телогрейкала, баш кейеме таушалған. Эйе, бындай кейемде зектарға бирәләр. Тимәк, ул төрмәнән сыҡҡан. Төрмәнән сыҡҡан әҙәм бында самолетта осоп килгәнме? Ай-һай, булмаҫ. Тимәк, бында ла төрмә бар. Тимәк, ҡайтып китергә иҫәп тота. Бына ул эргәмә килә. Минең менән һөйләшеү маҡсаты менәнме? Кәрәге юҡ, ә ул миңә яҡындан бер ҡарап алды ла, текә боролоп, китеп барҙы. Был йөрөштө ул бер нисә тапҡыр ҡабатланы. Бына ул иҙәндән һүндерелмәгән тәмәке төпсөгө күтәреп алды ла, рәхәтләнеп һурып, ситкә быраҡтырҙы. Тағы ниндәйҙер тауыш сыкты. Бынығы туп-тура минең яҡҡа килә, өҫтөндә – капюшонлы куртка, аяғында – быйма, ҡултығы аҫтында төйөнсөгө бар. Тәбәнәк буйлы, айыу йөрөшлө, үҙен күңелле кешегә оҡшатырға тырыша, тик арығанлығын йәшерә алмай, үҙен яуыз күрһәтергә теләй.

– Басмач! Ишеттеңме, һине Арзамат саҡырғайны? Һин нимә? Бичтарҙы белмәйһеңме?

Оҙон буйлыһы аҡланырға тырыша, ул тәмәке эҙләгән дәһә.

– Һин ниндәй бич, тәмәкең дә булмағас?

Ул Басмачҡа папирос бирҙе. Басмач ауыҙына ҡабып ике-өс тартып ҡараны – тартырлыҡ түгелдер.

– Ағай-эне, Басмачҡа тәмәке бирегеҙсе.

Тауышы өс яңғыраашта: клоун да ул, бандит та, хәйерсе лә. Мәгәр барыһының да иғтибарын үҙенә тартты.

– Мә, һиңә тәмәке, миндә «Север» ғына.

Папиросты алып, ул миңә иғтибар менән ҡараны. Һорау бирҙе:

– Абзый, вы откуда приехали?

Яуабымды ла көтмәй, кире боролоп китте. Икәүләп тәмәке ҡабыҙҙылар, ә мин ҡарап ҡалдым. Аңланым: әле ул йәш, алама кейеме, йонсоған йөҙө генә ҡартайта. Үҙе тиктормаҫ, һәр саҡ ниҙер ҡылана, әйтә, һөйләй, һүгенә. Башҡалар был заттан күҙҙәрен дә алмай. Ерәнеүселәр бар, йәлләүселәр ҙә етерлек. Бына ул яңынан дуҫын саҡырып алды, уларға иҙәндән урын бирелде, баш аҫтарына төйөнсәктәрен һалып, йоҡоға талдылар.

Сәғәт өсөнсө, күптәр йоҡлай. Мин «Литературная газета» сығарып иҙәнгә йәйҙем, баш аҫтыма сумаҙанымды һалып, серемгә киттем. Иңбашымдан этәреүгә уяндым, иҙән йыуыусы ҡатын барыһын да уята икән. Эйе, иҙәндәгеләрҙе. Швабраһы йә аяғы менән төртөп уята.

Көнө буйы эш эҙләнем, күңелле хәбәр юҡ. Эшселәр күп кәрәк, ә миндә мохтажлыҡ кисермәйҙәр: прописка́м йәки йәшәү урыным юҡ. Пропискаһыҙ ҙа алалар кәрәкле белгестәрҙе. Мәҫәлән, тампонажсылар кәрәк. Юҡтар, имеш. Ә был эшкә ике көндә өйрәнеп була, белем кәрәкмәй, хәлең генә булһын. Бер көндә әллә нисә саҡрым йәйәүләп үттем. Ҡайҙа ғына инмә: «Кәрәкмәйһең, кәрәкмәйһең, кәрәкмәйһең». Ә һәр береһендә – яҙыу: «Кәрәк, кәрәк, кәрәк». Минең дә байтаҡ һөнәрҙәрем бар, ә юғары белем менән бындай эшкә алыу тыйылған. Әлегә мин был ҡаланың иң мөһим серен белмәйем. Бында «үҙ кешең» абруйлы. Эйе, һәр түрә үҙ кешеһен саҡырыу ҡағыҙы менән ала. Ҡала йүнһеҙҙәр менән тула. Ярар, күрербеҙ.

Бына мин тағы аэропортта, барыр урын юҡ. Бөгөн күҙәтеү өсөн уңайлыраҡ урын алып өлгөрҙөм. Теге компания тағы эскәмйәләрҙе эләктергән. Ниңәлер күңелһеҙҙәр. Әһә, бөгөн араҡы эсмәйҙәр, «бормотуха» тип аталған осһоҙло вино һемерәләр, кәрт һуғалар, тәҙрә төбөндә томат һуты юҡ.

Кисәге таныштар ҡайҙа? Бына Басмач, үҙенә урын таба алмай интегә, ниҙер эҙләй. Әһә, теге, кисәге ҡарт мине үҙ янына саҡырып ала. Ул ултырған эскәмйәлә урын бушаған, тиҙ генә килеп еттем.

– Нисек, бич булыу ҡыҙыҡмы?

– Ә һин, күреүемсә, күптән бич, бындағы еҫкә күнеккәнһең.

– Эйе, мин бөгөн бич, иртәгә мине ятаҡҡа алалар, йомшаҡ түшәк көтә. Ә һеҙгә…

Мин дә уға ныҡ ҡараш ташланым, аңланы, тауышын үҙгәртеп:

– Һин беләһеңме, кем ул бич?

– Юҡ.

– Бындағы эшһөймәҫтәр!

– Ә ҡайҙан килгәндәр?

– Төрлө яҡтан, һинең менән мин кеүек, «оҙон аҡса» эҙләп килгәндәр, тайга еҫен һеңдерәләр.

– Эскеселек бәләһеме?

– Эйе, эсеүҙән. Тик барыһы ла түгел.

– Нисек?

– Ана, күрәһеңме, аҡ ҡуяндан тегелгән бүрекле йәш малайҙы? Ул бөтөнләй эсмәй, эшкә алмайҙар, ҡайтып китерлек аҡсаһы юҡ. Ун көн бында йәшәй. Комиссиянан үтә алмаған, һаулығы насар. Ярҙам итеүсеһе юҡ, ашарға таба алмай, кисә иҫтән яҙып тәгәрәне.

– Бирерлек аҡсам юҡ.

– Барыбыҙ ҙа шулай уйлайбыҙ, беҙ булмаған ерҙә яҡшыраҡ, имеш.

Ул тағы көлөп ебәрҙе:

– Мине вышкомонтажник итеп алалар, вәт, ғариза яҙҙым. Ә бында һыйыр көтөүселәре күберәк. Киләләр ҙә шешә йыялар. – Ул тағы ҡысҡырып көлә башланы. – Һин ни эшләй беләһең?

– Мин – инженер, 6-сы разрядлы слесарь.

– Э-э! Һин начальник буласаҡһың. Һуңынан иҫәнләшергә онотма.

Һауа алыштырыу өсөн урамға сығып индем. Аҡ бүрекле малайҙан күҙемде алмайым. Ул бер кемгә лә тура ҡарарға ла, һөйләшергә лә теләмәй. Бына ул һыу багынан шешәгә тултырып һыу ала, урынына килеп, һыу эсеп маташа. Кемдер уға икмәк менән селедка киҫәге бирә, алмай, ә тегеһе ашамлыҡты тәҙрә тупһаһына һала: «Алып ашарһың». Журнал уҡып ултырған ерҙән баяғы малайҙы күҙәтәм. Эйе, ул тәҙрә төбөнә килеп, аҙыҡты ашай. Имеш, күрмәйҙәр. Бындай характер менән кеше оҙаҡҡа түҙә алмай. Беҙ байтаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ, хырлап йоҡлаған тауыштар ҙа ишетелде.

Бына ҡапыл зал йәнләнде, кисәге спектакль башланалыр, моғайын. Шау-шыу күтәреп Арзамат менеп килә, ә артынан егермесе быуат Санчо-Пансаһы – асмач эйәрткән. Залдың иң уртаһында туҡтайҙар. Арзамат, барыһы ла күрерлек итеп, ҡуйынынан шешә сығара, үҙе күтәреп эсә лә Санчо-Пансаһына бирә. Санчо-Панса өндәшмәй, Арзамат клоунадаға тотона.

– Эс, бичтар эскәнде күрһен. Һин минең менән хурлыҡта ҡалмаҫһың. Мөгөҙҙәреңде һелкетергә өйрән!

Мин уға ныҡлап ҡарайым. Бына ул оло йәштәге ирҙе туҡтата, шарап һорай.

– Юҡмы? Тап. Нимә? Мине белмәйһеңме, тиҙҙән белерһең! – Ул тештәрен шығырҙата, боксерҙарса аяҡтарын алмаштырып баҫа, төйөнсөгөн колонна тирәһенә ташлай. Ята, Басмач та ята. Барыһы ла тынды, күрәһең, спектакль бөттө. Юҡ шул, бына ул яңынан тороп баҫа, ялҡау аҙымдар менән һыу багы эргәһенә бара. Мин уйлағанса түгел: ул һыу эсмәй, аяҡтарын киңерәк ҡуя, һыңар ҡулы

менән стенаға тотоноп, һелкенә биреп, бак алдындағы полиэтилен биҙрәгә сәптерә.

Арзамат төймәләрен эләктерә лә, ике ҡулы менән полиэтилен биҙрәне тотоп минең яҡҡа атлай, миңә ике метр самаһы ҡалғас туҡтай. Унының битен яҡшы күрәм, ошо минуттан башлап йөҙө иҫемдә ҡалды, буғай. Ярар, һине күҙәтәсәкмен! Мин уға ишектең теге яҡта икәнлеген күрһәтәм. Ул биҙрәне тышҡа алып сыҡты. Бына ул буш биҙрә менән килә, залдағы халыҡ тынды, күрәһең, спектаклдең кәрәге юҡ. Арзаматтың да клоунада ҡороу теләге бөттө, ул Басмачты этәреп, йоҡларға ятты. Мин дә гәзитемде иҙәнгә йәйеп һалдым. Бына тағы бер көн үтте. Һәр кесәмде ҡапшап, төймәләремде эләктереп, тәмле булмаған йоҡоға сумдым.

***

Аптырарһың, ысын белгестәр бөтөнләй аҙ. Минең дә кәрәгем юҡ. Был хәл мине ҡыҙҙыра төштө. Дөрөҫөн әйткәндә, мине был ҡалаға килергә өндәүсе бар ине. Эйе, мин Ухта ҡалаһындағы политехник институтҡа ректор урынбаҫары булып килергә йыйына инем. Михайлыч өгөтләне. Тәүге көндәрҙә ярҙам ҡулы һуҙырға ла һүҙ бирҙе. Ятаҡтан урын табырмын, тигәйне. Эшләгән урынына килдем, ул «СУ-14» хужалығында ябай инженер икән. Бына төшкө аш ваҡыты, кабинеттарында бер кем ҡалманы. Ул ҡайҙандыр «Хант с топором» тигән шешәне сығарҙы ла күтәреп эсә башланы. Шулай, «Стрелецкий» тип аталған арзан эсемлекте бында яраталар. Бына ул шешәне бушатты. Аптырарһың, ашханаға китеп барабыҙ, ул: «Һиңә лә ҡалдырырға булған»,– тип ҡабатлай.

Шешәне ҡойма буйына ырғытты.

– Шешәне бичтар йыйып тапшыра. Бындағы ашханалар – вагондарҙа.

Баҡтиһәң, үҙҙәренеке түгел. Сират. Мығырҙаусылар бар: «Ходят тут чужие!»

– Беҙ Американанмы? – Быныһы мин түгел. Минең уйҙар әллә ҡайҙа. Мин һаман аптыраштa: нисек мин был затты өйҙә, Стәрлетамаҡта, «тулы программа» менән һыйланым. Әйтеп тораһы юҡ, минең өҫтәлдә барыһы ла бар ине. Эйе, кем икәнлеген беләм, ҡарундың ҡаруны. Ә быға тиклем? Кит әле. Мин Михайлычты башҡа күрмәнем, күрергә лә теләмәнем. Ул мине эҙләп маташҡан... Ярҙам һорап. Эшенән ҡыуылғас. Бына шулай: вокзал залынан да аламараҡ урындар була.

Өсөнсө көн аэровокзалға иртәрәк килдем, эскәмйәнән урын алдым. Күрәм, теге күңелле компания һаман бында. Мине күрмәйҙәр, эйе, мине түгел, бер-береһен күрмәйҙәр, ҡараштары үпкәле. Күрәһең, күңел күтәрергә аҡсалары юҡ. 200 һум аҡсамды һаҡлыҡ кассаһына илтеп һалдым, ашханаға көнөнә ике тапҡыр ғына барам. Норма. Аскет. Минең менән йәнәш ҙур кәүҙәле йәп-йәш егет ултыра. Танышабыҙ. Исеме Николай, яҡташ тиергә лә була – Силәбенән. Минең һорауҙарҙы көтөп тормай, үҙ хәлдәрен һөйләй. Аҡса эшләргә килгән, тампонаж контораһына кәүҙәле егеттәрҙе алалар: ул комиссияны үтә алмаған.

– Күреүемсә, һин үгеҙ кеүек елле. Мин һаулығыма маҡтана алмайым. Нисек?

– Миндә көс етерлек, ике кеше өсөн эшләй алам. Врачтар... башымдан тапты. – Ул миңә күңелһеҙ күҙҙәре менән ҡарап алды.

– Һин сиреңде белмәнеңме?

– Белә инем, эшләй алғас, алырҙар, тиеп уйланым.

– Ә хәҙер ни эшләргә уйлайһың?

– Ҡайтырға ине. Аҡсам юҡ.

– Телеграмма һуҡ. Ебәрһендәр.

– Бер кемем юҡ, бында ла таныштар юҡ.

– Ни ҙә булһа уйларға кәрәк.

– Ҡайҙа ғына барманым: икмәк заводына ла барҙым, көндәлек эшкә – йөк тейәү эшенә һораным, алмайҙар. Милицияға ла барҙым. Ҡала хужаларына барҙым. Барыһы ла, ярҙам итә алмайбыҙ, беҙ һине бында саҡырманыҡ, тиҙәр.

– Һин уларға ышана инеңме?

– Әлбиттә, юҡ.

– Ә ниңә барҙың?

– Белмәйем, бына мин ошо турала уйлайым. Гәзиттәрҙә яҙған булалар, ә ғәҙеллек бөтөнләй юҡ. Мин Библияны уҡыным, дөрөҫ яҙылған. Ни өсөн беҙ Библияла яҙылғанды үтәмәйбеҙ? Хоҡуҡ бар, тигән булалар. Ә ҡайҙа ул беҙҙең хоҡуҡ? Иң мөһиме аҡса түгел, тиҙәр. Нимә һуң мөһим, нимә? Бына һин, күреүемсә, уҡымышлы кеше, зинһар өсөн, миңә әйт: ни эшләргә тейешмен? Урлашырға, таларға теләгем юҡ. Тимәк, мин – был йәмғиәткә һыймаған, һыймаҫтай зат. Әйт әле: мин кем? Беләһеңме, Аллаға ышанғандар бер-бере менән бүлешә белә. Беҙҙә хәйерселек юҡ, тиҙәр. Шулай, хәйер һорашыу тыйыла.

Ни әйтергә? Һәр һүҙең аңлайышы булырға тейеш. Уға ниндәй ҙә булһа ярҙам кәрәк. Мин ярҙам итә алмайым, сөнки үҙемдең дә ошо хәлгә төшөүем ихтимал. Шулай итеп, икебеҙ ҙә һүҙһеҙ ҡалдыҡ, тәрән уйға сумдыҡ.

Беҙҙе залдағы шау-шыу уятты. Әллә әлеге лә баяғы Арзаматмы? Эйе, Санчо-Пансаһы менән баҫҡыстан менеп киләләр. Бына ҡыҙыҡ: барыһы ла был икәүҙең килгәнен көтә. Бысраҡ эшһөймәҫтә ниндәй көс бар? Ысынлап, ул спортсы рәүешендә атлай, көлкөлөрәк сыға, берәр кешегә яҡыныраҡ килһә, боксер позаһын ала, тештәрен шығырҙата. Бына ул басмач менән менән клоунадаһын башлай. «Реклама» булһын өсөн кемгәлер бәйләнә, һөйләшергә теләмәгәнде әҙмәҙ кәмһетә. Төп маҡсаты – залдағыларҙы йәнләндереү. Күрәһең, был сара Арзаматҡа ҡәнәғәтлек килтерә. Шуныһы ла бар: көлөүселәр ҙә Арзамат менән яҡын тороп һөйләшергә теләмәй, яҡын килә башлаһа, ҡасыуҙы хуп күрәләр.

Был кисте мин Арзамат менән һөйләшергә булдым. Эйе, ул һиҙҙе, минең алдыма килеп баҫты, ә мин бич менән һөйләшкән кеүек һөйләшмәнем. Эйе, алдымда үҙемә тиң затты шәйләнем. Ул минең уйҙы аңлап алды, минең менән тупаҫ һүҙҙәр менән түгел, кешесә һөйләште.

– Тартырға бир әле, Ғәли абый!

Күреп торам: боксер позаһы юҡ, тимәк, ул үҙ тәртибен үҙгәртә белә. Тештәрен дә шығырҙатмай.

– Тарт әйҙә, мә.

Икеһенә лә папирос һуҙам. Ул бер папирос ала, мин һыҙған шырпынан ҡабыҙа ла:

– Эш менән нисек? – тип һорай, минең өмөтһеҙ ҡарашты күреп. – Һин бында һаҡланыбыраҡ йөрө, бында беҙҙе яратмағандар күп. Һине эшкә алырҙар, әгәр һин ул бәндәләр өсөн генә эшләргә теләгеңде белдерһәң, ышандырһаң.

– Үҙең нисек?

– Мин бич, бер кем өсөн дә эшләмәйем, эштән ҡыуҙылар. Әҙ генә сирләгәйнем, справка ла килтерә алманым. Бында дауаханаға инеү ҡыйын, ҡот осҡос сират. Шунан документтарымды юғалттым, иҫерек инем.

Ул һөйләп бөтә алманы: Басмач килеп, иңбашына ҡағылды, ниҙер әйтте. Ҡысҡырышып ишеккә йүнәлделәр. Мин дә тышҡа сығып, тәмәке тартырға булдым. Был икәү, йәнә бер зат менән, тройной одеколон эсәләр. Һәр кемдең үҙ эсемлеге.

Урамда оҙаҡ ҡына торҙом, баҫҡыстан икенсе ҡатҡа менә башлағас, Арзаматтың нәүбәттәге кәмитенә өлгөрмәнем. Ул үҙенең Санчо-Пансаһын саҡыра. Юҡҡа саҡырмаған, күрәһең, арыу ғына бәрелеш булған. Ике ир кейемдәрен һөрткөләп маташа, үҙҙәре ерәнеп Арзаматҡа ҡарайҙар. Арзамат иһә ғәҙәти аҙымдары менән миңә табан йүнәлде, үҙе кеҫәһен һәрмәп маташа.

Арзамат баҫҡысҡа килеп етә алманы, аҡ күлдәкле, ҡара костюм кейгән блондин күтәрелде лә, Арзаматтың артынан килеп, бар көсө менән яңағына һуҡты.

Арзамат сайҡалды, теге икәү, йығып һалып, быны типкеләй башланы. Тауыш сыҡты, был өсәүҙе ҡурҡытыусылар ҙа табылды. Баяғы аҡ күлдәге аҡ түгел инде, ҡанға туҙған. Арзамат ҡанына.

Туҡмалыусыға күтәрелеүе ҡыйын, ул ҡулы менән яңағын тотоп күтәрелде. Зал тып-тын, ул, иҙәндә ҡан күләүеге ҡалдырып, ишеккә йүнәлде.

Кеше ҡанына ҡарарға яратмайым, тағы тышҡа сығам. Ҡыҙыҡһыныу көслөрәк – тағы өҫтәге залға менәм. Ике дружинник менән милиционер килгән. Туҡмалғанын белгәс, өсәүләп көләләр, бичты тотоу кәрәк икән. Ярар, әләгер, тиҙәр. Арзаматты беләләр. Был өсәү таралыша, иҙән йыуыусы ҡанды һөртә. Тағы урамға сығам. Тиҙерәк таң атһын ине. Ҡараһам, Арзамат күренде. Ул яңағындағы яраһын лейкопластырь менән йәбештереп өлгөргән. Блондин ниндәйҙер тимер менән һуҡҡан. Беҙ яңынан өҫкө ҡатҡа менәбеҙ. Мин уға теге блондинды күрһәтәм. Иҙәнгә гәзит түшәйем: йоҡларға кәрәк, иртәгә байрам түгел.

***

Эшкә алалар, ҡайҙа, кем итеп алалар – әлегә барыбер. Хәйер, медкомиссия үтәһе бар. Хәрби билетымда хеҙмәттә алған сир тураһында яҙыу бар. Миңә был төбәктә эшләргә лә, йәшәргә лә ярамай. Нимә тураһында уйланғанымды үҙем генә беләм.

Бына мин ҡала поликлиникаһында. Иҫ китерлек урын! Коридор аша үтеү бигерәк ҡыйын. Арзамат дөрөҫ әйтә: бында килеп сирҙән ҡотолоп булмаясаҡ, тағы бер сир өҫтәргә мөмкин. Комиссия үтеү мотлаҡ. Әйтәләр бит: насарҙың да файҙаһы тейә. Ун кабинет аша үтер өсөн терһәктәрем менән эшләйем, врачтарға ла эшлекле күренергә тырышам. Ысынлап, бар кабинеттарҙы ла урап сыҡтым. Комиссияны өсөнсө көндә үтеп бөттөм. Башҡалар бер аҙна үтәләр икән.

Коридорҙа көтмәгәндә яңы танышты – Николайҙы осраттым. Уйға батҡан.

– Әллә эшкә алалармы?

– Юҡ, ҡан анализы бирәм.

– ?

– Миңә кәңәш бирҙеләр, ҡан тапшырып аҡса алып була, тинеләр. Башта анализ кәрәк. Аҡсаһы билетҡа етергә тейеш.

Оҙаҡ һөйләшеп булмай, уңыш теләп, үҙ юлымда булам. Үҙемдең анализдарҙы алырға килгәндә Николайҙы тағы күрҙем. Танымай торам, ҡағыҙ кеүек ап-аҡ. Эйе, ул үҙе мине күреп ҡалған. Уға ресторанда ашарға талон тотторғандар. Ярты килонан артыҡ ҡан биргән, – ҡырҡ һум алған. Ҡайтыуына етә. Өфөгә тиклем самолет билеты 26 һум тора. Силәбе күпкә яҡын. Ул минең ҡулымды ҡыҫты, бөгөн үк оса икән. Мин уға хәйерле юл теләнем.

Үҙем тураһында ла уйлап алдым. Эйе шул, медицина комиссияһы ауыр хәлдә эшләй. Көләһе түгел, ыңғай һөҙөмтә кәрт уйынындағы кеүек. Тәртип булмаған урында яңылышлыҡ та уңыш килтерә. Тәртипһеҙлектең дә үҙ тәртибе бар.

Бына мин яңынан аэровокзалда, уңайлы урын һайлап өлгөрҙөм, уйланып, күҙәтеп ултырам. Әйтәгүр, әлегә был ҡалаға тик һауа юлы менән генә килеп була. Бындағы тормош барышы беҙҙекенән айырмалы, был минең өсөн ҡыҙыҡлы һымаҡ.

Тағы ни әйтергә? Ун көн аэровокзалда йәшәнем, быныһы ҡыҙыҡ түгел, һорауҙар тыуҙыра, ә мин һорауға яуап эҙләй беләм. Бәләкәйҙән. Бына шулай, үҙем өсөн ят системаға килеп индем. Система файҙаһына эшләй башлағанмын, һорауҙарыма яуап алырға маҡсат ҡуйғанмын. Әллә юҡмы? Күҙ күрер. Беҙҙең Стәрлетамаҡта түрәләр аҙмы-күпме яуаплылыҡ һиҙә, бында – тулы яуапһыҙлыҡ.

Бындағы эскелеккә иғтибар иттем. Туҡталыштарҙа эселеп бөтөлмәгән шешәләр ҡалдырыла – имеш, бичтар өсөн. Араҡыны йәшниклэп алалар. Иҫеректәр күп.

Минең самолет килеп төшкән ваҡыттан ун көн үтте. Ун тәүлек аяғымдағы йылы ботинканы һалманым. Аэропортта һуңғы тапҡыр – унынсы тапҡыр ҡунам. Иртәгә ятаҡтан урын бирәләр. Ә ятаҡта йомшаҡ түшәк, йылы һыулы душ һ.б.

Иң беренсе – аяҡтарымды йыуасаҡмын, икеһенә лә ял бирәсәкмен.

Бында һәр кем әйтә: «Волка ноги кормят». Юҡ, мин бүре түгел, ләкин бүреләр менән осрашам.  Аяҡтарым мине ашатасаҡ  әле. Һис шикһеҙ.

## *Ятаҡ*

Ятаҡты маҡтамағыҙ, кәрәкмәй. Эйе, ятаҡҡа йүгереп килеүселәр байтаҡ. Мин был ятаҡҡа йүгереп килмәнем, ашығып килдем, тамам арығайным.

Һүҙ һөйләүселәр булды: имеш, беҙҙең Совет иле – үҙе бик ҙур ятаҡ. Кит әле, риза түгелмен.

Ятаҡты ятаҡта йәшәгән һәр кем һүрәтләй ала, ә шулай ҙа ятаҡты һүрәтләү талантлы яҙыусыға ла ҡыйын эш. Тышҡы йәки эске күренештәре менән ятаҡтар оҡшаш булыуҙары мөмкин. Әммә, ныҡлабыраҡ ҡараһаҡ, оҡшашлыҡтар юҡҡа сығасаҡ. Минең адрес – Советтар Союзы. Дөрөҫ, Ҡараҡом сүллегендәге казармала өс йыл көн күрҙем. Хәҙер икенсе төр ятаҡта ятам. Душҡа барып, аяҡтарымды һабынлап йыуҙым, таҙарындым. Йомшаҡ түшәктә ятам. Бында Ҡараҡом сүллеге түгел... Армия сафынан һуң заводҡа эшкә ингәс, тағы биш йыл ятаҡта йәшәнем. Әйтелгәйне: ятаҡҡа йүгереп килмәйҙәр, ятаҡҡа килеү – сараһыҙлыҡтың бер төрө. Ятаҡтың һәр саҡ үҙ ҡағиҙәһе бар. Минең өсөн иң мөһиме – һәр ятаҡтың тәрбиәсеһе бар. Бына бер көләмәс. Кәкүк балаһын үҙе сығара белмәй, бәләкәй генә ҡоштоң ояһына һалып ҡаса. Бәләкәй сыпсыҡ кәкүк балаһын үҙ йылылыһы менән сығара, ашата, тәрбиәләй.  Һуңынан? Кәкүк балаһы ҙур, ә сыпсыҡ бәләк-ә-ә-ә-әй. Эйе, үҙе баҫып сығарған балаһының арҡаһына менеп ултыра ала.

Ятаҡ тәрбиәсеһенең хеҙмәт хаҡы түбән. Тимәк, уҡымышлы йәки абруйлы зат тәрбиәсе булып эшләмәҫ.  Ятаҡта уҡымышлы, абруйлы кешеләр ҙә йәшәй. Ҡыҙыҡ түгелме ни?

Общежитие, общага йәки ятаҡ. Әллә шул, ятаҡ һүҙе урыҫтың «ночлежка»һына яҡындыр. «Общежитие» тигәне совет заманында  телгә инде. Ярай, ятаҡ – һәр кем өсөн ваҡытлыса төйәк. Шулай булғаны яҡшы.

Бүлмәлә дүрт карауат, тимәк, дүртәүләп йәшәйбеҙ. Бүлмә майҙаны 15 квадрат метр, тимәк, һәр кемгә дүртәр ҙә теймәй. Йорт ике ҡатлы, ағастан.

Тәүге көндә ятаҡ ожмах булып күренһә, икенсе көн кирелеген күрһәтә башланы:сысҡан күп. Йоҡларға ирек бирмәйҙәр. Коридорҙа матур бесәй балаһы күреп ҡалдым, тотоп алып, үҙебеҙгә индерҙем. Йәш бесәй бигерәк егәрле: һәр төндә өс-дүрт сысҡан тота. Кире яғы ла күренде:  тотҡан сысҡандарҙы минең ҡуйынға килтерә. Бала бит әле. Нишләйһең, бесәйҙе үҙем одеял аҫтына ала инем шул.

Кемдәр менән йәшәйһең? Ятаҡтың төп һорауы был. Бына Николай, Донецк ҡалаһынан. Эсергә ярата, тик яңғыҙ эсергә теләмәй. Мин һаҡсыллығым тураһында иҫкәрттем, аҡса өсөн килгәнлегемде аңлаттым. Имеш, бер үҙе эсә алмай, етмәһә, һөйләшеү өсөн минән дә уңайлы зат юҡ. Ике тапҡыр өҫтәл артына ултырҙыҡ, уның иҫәбенә. Бер аҙнанан мыжыҡланды, аңланым.

– Коля! Эс, мин эсмәйем. Иҫәп-хисап...

Бындай һүҙ кемгә оҡшаһын? Нишләргә? Ятаҡ ҡағиҙәһе баштан һыйпамай. Бына шулай, бында эсмәгәнде эсерәләр, йырламағанды йырлаталар.

Николайҙың тағы бер алама холҡо: эсеп алһа, бысаҡҡа тотона, кеше ҡурҡытырға әүәҫ. Ул эскәндә мин бысаҡтарҙы йәшерәм. Ул таба. Бер нисә тапҡыр ҡулынан бысаҡты шаҡарып тартып алырға тура килде.

Дөрөҫөн әйткәндә, ятаҡ – иҫеректәр туҡталышы. Бысаҡҡа тотоноусылар ҙа етерлек. Ятаҡта буталыш башланһа, мине саҡырыуҙар йышайҙы, барғыланым. Шулай инде: ял көндәрендә ваҡыт үткәреү – проблема. Бер кемдең бараһы урыны юҡ тип әйтерлек. Ятаҡ халҡы ҡыҙыл мөйөшкә йыйыла. Бильярд уйнау өсөн һәр ваҡыт һыу буйы сират. Сиратһыҙ уйнарға теләүселәр ҙә бар. Бына минең сират, ҡара һин әле, баҡтиһәң, был зат ятаҡта күптән, ул сиратта торорға тейеш түгел икән дәһә:

– Минән аҙаҡ уйнарһың, китеп тор.

Ярты секунд эсендә иҫәпләнем: буйға бейек, ярай, әллә ни түгел, йәшен тиҙлеге кәрәк. Ул биш метрға осоп барып ятты. Ошо көндән һуң минең сиратты боҙоусы булманы. Һулаҡай икәнлегемде лә белделәр. Иҫеректәрҙе аралау – ҡыйын эш.

Самотлор... Тимәк, бында аҡса һуғыу өсөн киләләр. Аҡсаны төрлө ысул менән табып була. Талап алыусылар ҙа осрай. Киске сменала эшләйем, сәғәт ун икеләрҙән һуң да ҡайтырға тура килә.

Туҡталышта автобустан төштөм. Ятаҡҡа тиклем тағы ике йөҙ метр атлайһы бар. Өс кеше тора, миңә ҡысҡыралар:

– Иди сюда!

– Миңә бер кем кәрәкмәй, кемгә мин кәрәк – үҙе килһен.

Быларҙың берееһе миңә ҡарай атланы. Мин әҙермен. Эйе, ят урында һалҡын ҡорал йөрөтөү ике осло. Спецовка кеҫәләрендә бармаҡтан йыуан бер нисә болт, ауырҙар. Бар көсөмдө йыйып, яҡын килгәндең маңлайына һелтәнем. Нишләгәндер, белмәйем. Йүгереү мотлаҡ. Болттар йәл түгел, күп улар, аяҡ аҫты тулы.

Ярар, ятаҡтың тағы бер иҫ китерлек үҙенсәлеге: бер бүлмәгә, күпселек осраҡта, дүрт кеше урынлаштыралар. Дүртәүҙең холҡо саптырмалы хәлдәр тыуҙыра. Был турала оҙон трактат яҙырға булыр ине.

Ятаҡ күпселек осраҡта тәрбиәләмәй, ә, киреһенсә, тиҫкәрелеккә өйрәтә. Бына шулай, һәр кем ятаҡтан ҡасыу яғын ҡарай. Ғаиләләр өсөн ятаҡ дуҫ түгел.

## *Шлагбаум*

*Һандуғас һайрау оҫтаһы ғына түгел,*
*ул төйәкләгән урыны менән маҡтана ла,*
*урынды һайлай ҙа белә. Ҡарабаш турғай*
*иһә ояһын белгертмәй.*

Ғәжәпләнеү хисе оҙаҡҡа һуҙылмай, ни тиһәң дә, һәр кем аналитик һөҙөмтәгә килә. Комбинат төҙөү еңел эш түгел, етмәһә – килемһеҙ. Ә продукция бирә башлаған комбинат – килемле. Тормош нигеҙе сығым-килем бәйләнешенә ҡоролған.

Совет системаһы үтә хикмәтле: килемле эштә тир түгеү генә әҙ, телен дә, тәбиғәтте маҡтаған һандуғас кеүек, ошо системаны ла данға күмергә тейешһең. Был йәһәттән үҙем апаруҡ психолог. Күп көс һалып эшләгән заттың теләһә кемде маҡтарға теләге лә, ваҡыты ла ҡалмай. Системаны маҡтау өсөн әҙ эшләү ҙә етә. Бына ни өсөн был донъя һәр мәлендә икегә бүленеү яғына ынтыла.

Эшкә егелгән комбинат килемле лә буласаҡ, ә табышлы урында гелән «ҡоҙғондар» йыйыла. «Табышлы» мәл күҙәтеүсегә лә ҡыҙыҡлы. Һөт комбинатында кемдәр генә күренмәне – заттар төрөн һанап бөтөрлөк түгел.

Өфөнән килгән түрәләрҙең берееһе «шахмат таҡтаһы» тураһында һүҙ башланы. Таҡталағы король – директор, ферзь – баш инженер һ.б.

Аңланым: оҡшаған вазифа, йәғни «ҡамыт» миңә тәтемәç. Мин иһә үҙ мөмкинлегемде үлсәй беләм. Ойоштороу һәләтенә эйәмен, эйе, был төҙөлөштә үҙемде яҡшы һынаным. Ҡатмарлы эштәрҙе лә иң ҡыҫҡа юл менән башҡара алам. Шулай булғас, яңы комбинатта мин кейәһе ҡамыттың бөтөнләй кәрәге юҡ, ул ҡыҙыҡлы ла түгел.

Бына ошо ваҡытта миңә яңы хәбәр әйттеләр: Стәрлетамаҡта ремонт-механика заводы төҙөләсәк. Ҡыҙыҡһыныу тыуҙы, Өфө түрәһенә идаралыҡтың икенсе баҫҡыс етәкселегенә дәғүәмде әйттем: баш инженер була алам, директор урынбаҫары булырға ла ризамын.

Аңлашылды: завод төҙөү – алдағы бурыс, идаралыҡ әлегә ойоша ғына.

Тәҡдимемде ишетеүсе булдымы-юҡмы, белмәйем. Өҫтән тәҡдим яһалды. Мине Өфөгә саҡыртып алдылар. Миңә икенсе роль бирелмәй, миңә – беренсе, йәғни директор роле... Ашыҡмағыҙ, миндә тәжрибә байтаҡ, быны тиҙ аңлап алдым: «Һәр эштең башланышында «беренсе» – ҡыйналыу өсөн...» Аңлайым, ләкин ризалаштым, эйе, эштең ҡатмарлыһы – һәр саҡ минеке.

Шулай, ике көндә совет системаһының иң әһәмиәтле етешһеҙлеген асыҡланым. Етешһеҙлектең тамыры һәм һабағы ҡайҙа? Һәр хужалыҡҡа «штат расписаниеһы» бирелә. Аңлатам. Бына беренсе шарт: директорҙың оклады юғарыраҡ булһын өсөн әҙ хаҡ алып эшләгән ваҡ түрәләрҙең күберәк булыуы мотлаҡ. Хайуандар донъяһынан килгән ҡағиҙә. Өйөр законы. Субординация. Иерархия. Эшһеймәҫтәр, конторапарҙа һәлберәшеп йөрөүселәр байтаҡ. Был ҡағиҙә менән тәүге көндән үк ризалашманым, әммә буйһондом. Был тәртипте боҙоу мөмкин түгел, тикшереү, күҙәтеү органдары етерлек.

Идаралыҡ булдырыу ҡарары раҫланды, штат расписаниеһы төҙөлдө. Иң мөһиме – хеҙмәт хаҡы фонды асылды. Минең ҡарамаҡҡа Стәрлетамаҡтағы производствоһы туҡтатылған һөт заводы ҡоролмалары бирелде.

Хәҙер мин бер үҙем директор кабинетында ултырам. Элек күп ваҡыт эш эҙләп түрәләр кабинеты тупһаһын тапаһам, бөгөн үҙем ИТР, эшсе һ.б. кадрҙар тупларға тейешмен.

Һайланырға ла була. Теләүселәр күп. Шуныһы ҡыҙыҡ: бына тигән эштәре булған заттар ҙа минең менән эшләргә теләк белдерә. Уйланырлыҡ... Нисек эшләргә? Банкыла иҫәп асылған, әҙ булһа ла аҡса бар. Мисәт, штапм тигәндәрен үҙем яҙҙым, һыҙҙым. Өфөлә яһатып алдым. Эйе, иң башта секретарь алынды. Эшләү өсөн бер ниндәй ҙә инструмент-фәлән юҡ. Бөтөнләй юҡ. Инструмент һәм материалдар һатып алыу урыны ла юҡ. Теләһәң ни эшлә. Бына шулай, партия етәкселәренә йәки милек һаҡлау түрәләренә ышанысым юҡ. Закон боҙмайынса бер генә эште лә урынынан ҡуҙғатып булмай.

Инструменттар табыу өсөн «урлаша белгән» кеше таптым. Эйе, ике аҙнала барыһы ла табылды. Материалдар менән? Тонналап урлау ҡыйын. Алдымда – ҡала гәзите. Һуңғы битендә – металлолом тапшырыу планын үтәмәгән хужалыҡтарҙың аҫтына һыҙҙым. Урынбаҫарға бөгөн үк ошо хужалыҡтарға барырға ҡуштым. Эйе, ул осор тимер-томорҙоң иҫәбе юҡ ине.

Бына шулай көтмәгәндә ике мәшәҡәт үтәлде: сүп булып ятҡан тимер-томор оҙатылды, бына тигән металл етерлек күләмдә ташылды.

Тәүге көндәрҙән үк ремонт бригадалары булдырылды, электромонтаж, автоматика белгестәре тупланды, һыуытҡыстар көйләү яйға һалынды, котельныйҙар көйләнде. Эш масштабымы? Мәсетле, Борай, Балтас, Миәкә, Әлшәй, Салауат, Белорет, Благовещенск, Бөрө... Һанап бөтөрлөк түгел.

Дөрөҫөн әйткәндә, өс-дүрт ай эсендә идаралығыбыҙ күптәнге хужалыҡҡа оҡшап китте.

* * *

Стәрлетамаҡ ҡалаһы химия үҙәгенә әйләнде, химия иһә юғары квалификациялы эшсәндәрҙе ярата, уларҙы үҫтерә. Төрлө сәбәптәр менән химиянан китергә теләүселәр әҙ түгел.

Бына ит комбинаты. Техник инспектор пар биреүсе котельныйҙы пломбалап киткән – эшләргә ярамай.

Тимәк, ит цехтары парһыҙ эшләй алмай. Инспектор ун пункттан торған иҫкәрмә биргән. Комбинат директоры миңә мөрәжәғәт итте. Мин был мәсьәләне баш инженерға йөкмәттем. Бына һиңә, ТЭЦ-та тәжрибә туплаған инженер мине аптыраашта ҡалдырҙы: имеш, ун пункттың береһен дә төҙәтеп булмай. Үҙем тотондом, эйе, синтетик-каучук заводында эшләгәс, котлонадзор ҡағыҙәләрен беләм. Бер айҙан һәр пунктҡа ярашлы ремонт башҡарылды һәм котельный һәйбәт эшләп китте. Техник инспектор дуҫыма әйләнде. Эйе, ул да үҙ эшен белә. Баш инженер Скоробогат һатлыҡ йән булып сыҡты. Өфө түрәләренә минең «етешһеҙлектәр»ҙе еткереп торған. Эш таба алмағас, миңә зарланып килгәйне, бына тигән вазифаға алдым үҙен, ә ул өҫтөмә тиҙәк өйҙө.

Әлшәй һөт заводына Германиянан яңы һөт киптергес килтерҙеләр. Монтажланыҡ, тик эшләтә алмайҙар. Иң яҡшы бригаданы оҙаттым. Булмай. Үҙем барҙым – бер көндә ходҡа ебәрҙем.

Көлөрлөк мәлдәр ҙә әҙ булманы. Бына ҡышҡы әҙерлек. Үҙебеҙҙең котельный мазут менән яғыла. Ер аҫтындағы йөҙ куб һыйышлы мазут һаҡлағысы ултырма сүптән таҙартылырға тейеш. Ә таҙартыу өсөн махсус бригада кәрәк. Сетерекле эш ер аҫтында, ҡалғанын әйтеп тә тораһы юҡ. Бер бригадирҙы табып килтерҙеләр. Биш йөҙ һум һорай. Күп.

– Ярар, начальник, иртәгә килһәм, биш йөҙ ҙә әҙ буласаҡ.

Икенсе көн алты йөҙ һум һораны, өсөнсө көн 750 һумға мендерҙе. Ҡыуып сығарҙым, ә ул көлә-көлә сығып китте. «Таба алмаçһың», – ти. Әйткәс әйтәйем, был бәндә ҡышҡа табан миңә килеп эш һораны. Алдым, бригадир итеп, котельный технологияһын белә, ялҡау түгел.

Ә мин таптым. Цех начальнигына әҙерләшергә ҡуштым. Шлангылы противогаздан башлап резина итеккә тиклем. Бына йәкшәмбе, эшселәр бөтөнләй юҡ. Иң тәүҙә үҙем аҫҡа төштөм, ун биш биҙрә сүп-сарҙы өҫкә оҙаттым. Өс сәғәттә таҙартып бөтөрҙөк.

Кисен ресторанда һыйландыҡ. Бухгалтерға 250 һум әҙерләргә ҡуштым. Эшебеҙ хаҡы. Наряд яҙылған, раҫланған. Эйе, быныһы – закон боҙоу. Боҙҙоҡ, күп тапҡыр боҙҙоҡ, көлә-көлә боҙҙоҡ. Уңышлы эшләү – ике башлы таяҡ, һәр уңышың үлсәнә.

Биллаһи, шундай заттар бар: эш барышында ҡайғылары юҡ, улар кеше эшендә хата эҙләү менән мауыға. Иҫең китер, ундайҙарҙың уңышы тосораҡ. Был турала күп һөйләп була. Кәрәкмәй.

Мин, ни өсөндөр, эшемдә темп алыуҙы хуп күрҙем. Темп алыуҙың үҙ сере. Тормош – ярыш. Мөкиббән бирелеп эшләгән кешенең башҡаларҙы күҙәтергә ваҡыты ла булмай. Ялҡауҙың тикшереүҙән башҡа эше юҡ. Эйе, туған, ялҡауҙан һаҡлан, унан арыраҡ тор.

Өфөләге түрәләр миңә ҡараштарын ҡырҡа үҙгәртте.

Дөрөҫөн әйткәндә, үҙемдә лә кире сифат бар: үҙемде күрһәтеү маҡсатын йәшерә белмәйем. Был сифат – бала сағымдан. Эйе, һәр бала үҙен күрһәтергә тырыша. Минең иһә тырышлыҡ күпкә артыҡ... Бына миҫал.

...Синтетик каучук заводында инженермын, ә кисен институтта белем алам. Асыҡ дәрес иғлан ителде, миңә лә сығыш яһау бәхете эләкте. Теманы үҙем

һайлап алдым: Америка Ҡушма Штаттары. Метеор тиҙлегендә материал эҙләнем, бер ҡосаҡ гәзит-журнал, китаптар табып уҡыным. Аналитик һығымта әҙерләнем. Һүҙем һүҙгә оҡшаны, буғай: бер нисә көндән ҡала гәзитендә тарих фәндәре кандидаты Абдуллиндың асыҡ дәресем тураһында мәҡәләһе баҫылып сыҡты, минең хаҡта матур әйткән. Цехҡа парткомдан шылтыраттылар, мине саҡырҙылар: мине ҡала комитетына инструктор итеп алырға иҫәп тоталар. Икенсе көн комитетҡа килдем, бүлек мөдире Ҡарамышев менән һөйләштем. Горкомда кем генә эшләргә теләмәй, күптәр теләй. Мин дә теләйем. Бына шуның өсөн:

– Миңә горкомда эшләргә иртәрәк түгелме? – тигән булдым. 1965 йыл ине. Әгәр шунда эш башлаған булһам, партия ышанысын аҡлар инем. Тырышыр инем, нишләйһең, кәңәшсем булманы.

Шулай ҙа 1966 йылда горкомда ай самаһы эшләп алдым. Юҡ, Ҡарамышевтың пропаганда бүлегендә түгел, ә дөйөм бүлектә.

Почеркым һәйбәт булғанға, ҡала номенклатураһына индерелгән түрәләрҙең иҫәп карточкаларын тәртипкә индерҙем, төҙәтмәләр яһаным. Йә, Хоҙай! Ниндәй генә «гонаһлы» түрәләр юҡ ҡалала. Иҫ китерлек! Үҙем генә беләм: гонаһһыҙ түрә булмайҙыр. Хәҙер иһә үҙем дә бәләкәй генә хужалыҡта беренсе түрә. Гонаһым бармы? Аңлашыла: гонаһың булмаһа – табаһың.

Уңышлы эш – үҫештә. Хужалыҡты үҫтереү юлына баҫырға ниәтләндем. Курган ҡалаһында һөт сәнәғәтен хеҙмәтләндереүсе завод төҙөлгән. Барҙым, күреп таныштым. Етешһеҙлектәрен дә таптым. Тимәк, Стәрлетамаҡта завод төҙөү мотлаҡ. Төҙөлөш өсөн ер бүленде. Волгоград ҡалаһынан проектсылар килде. Өфөлә мине ҡотлаусылар ҙа табылды. Имеш, мине партияның өлкә комитетына эшкә алалар. Эйе шул, бер нисә тапҡыр бүлек мөдире Деев менән әңгәмә булғайны. Ул һөт сәнәғәте берекмәһе начальнигы Локаштың эшен ҡырҡа тәнҡитләй ине. Мин үҙ эшем менән ризамын, мауығып эшләйем. Минең әүҙемлек әлеге Лошакка оҡшамай. Ул мине өс-дүрт ҡатлы «мат» менән «һыйлай» башланы. Яуапһыҙ ҡала белмәйем, һүҙем дә, «мат»ым да ҡыҫҡараҡ. Имеш, ул һуғышта булған, бер нисә көн... Тәүге һуғыш мәлендә үк үксәһе яраланған. Бына ни ти:

– Ты знаешь, я воевал, ранение имею...

– Мой отец штрафник – от Сталинграда до Вены через Курскую дугу прошагал, а с окопа ногу не высовывал.

Шартларҙай бүртенеп, таяғын һелтәне. Эйе, бындай түрә менән эшләп булмай. Етмәһә, алама ваҡиға сыҡты. Борай заводында эшләгән бригадала бәхетһеҙлек булды: электросварщик токка һуғылып үлде. Эйе, был эшсенең ғаилә хәлен яҡшы беләм, ул үҙенә үҙе ҡул һалды. Бына шулай, үлек юлға арҡыры ятты, пландар тамам емерелде. Сварщикты үҙем ерләнем, тағы аптыраным, хайран ҡалдым: бисәһенең ғаиләһе, туған-тыумасаһы ҡәберлектә анекдоттар һөйләй. Тол ҡалған ҡатыны тураһында һөйләүҙең кәрәге лә юҡ, ул – һөтсөләр гаражында диспетчер, һәр шоферға... ваҡытлыса. Аңлайһығыҙҙыр тел төбөн.

Бына шулай, ваҡиғалар юлдағы түмҫә кеүек, һикереп сығырға теләмәһәң, боролоп китәһең. Мин боролдом – һөт сәнәғәтен бөтөнләй ташланым.

Мин башлаған эш һүнгәндән-һүнде, завод төҙөлмәне. Мин киттем, ярҙамсылар тантаналы көндәрен күрҙеләр. Кисәге эш өсөн тантана оҙаҡҡа бармай.

Алты йыл ғүмер үткәс, Лошак мине яңынан эшкә саҡырҙы. Тағы аптыраным. Әлеге талаш, ыҙғыш һөҙөмтәһе. Һөт сәнәғәте сауҙа эшенә тиң, ришүәтһеҙ эш насар бара.

Шулай, Лошак менән борсаҡ бешмәне, үҙ һуҡмағымдан атланым.

# «Үлектәр» һәм тере «геройҙар»

Бында эшкә алыу ритуалы ҡыҙыҡлы, мәгәр иҫ китмәле ябай. Эшкә алыныусылар ике төргә бүленә. Беренселәре – саҡырыу ҡағыҙы менән килеүселәр, имеш, кәрәкле белгестәр. Бындайҙар бер ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ унда-бында урынлаша, сығымдарҙы тулыһынса хужалыҡ ҡаплай. Кем ул «саҡырылған белгес»? Бында, белгегеҙ килһә, туған-тыумаса, таныш-тонош та бар, яҡташтар ҙа осрай.

Мәҫәлән, әгәр хужалыҡ начальнигы Омск ҡалаһынан икән, йылы урындарҙы шул ҡаланан килгәндәр генә биләй ала, Омскиҙан килгәндәр генә теләгәнсә мәжлес ҡора. Миңә бындай хөрриәт тәтемәй, эште үҙем эҙләп табырға тейешмен. Ҡалала теркәлеше булмаған кешегә ҡыйынлыҡ күпкә артығыраҡ. Теркәлеү өсөн үҙеңә оҡшаған эште һайларға тейешһең. Һайланым.

Һәр ҡалала йәки районда Ленин исемендәге хужалыҡ була. Ошо хужалыҡтың нефть әҙерләү цехына урынлаштым. Партия ағзаһы икәнлегемде иҫәпкә алдылар. Хужалыҡтың партия ойошмаһы секретары оҙон һүҙен бына нисек тамамланы:

– Беҙ был цехта ҡеүәтле партия төркөмө булдырырға тейешбеҙ, был цех – хәүефле звено.

«Ни өсөн хәүефле?» – тиеп һорарға баҙнат итмәнем, быныһы аңлашыла: цехта технология тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ. Самотлор яҡтылығының барлыҡ нефте ошо цехҡа торбалар эсенән аға. Йыйылған нефть резервуарҙарға тултырыла, иҫәпкә алына, артабан нефть оҙатыусы ҡарамағына ебәрелә. Оҙатыусы хужалыҡтың да үҙ резервуарҙары, насостары етерлек. Башта аптырай төштөм: ни өсөн бында эшселәр, инженерҙар һәм башҡалар күмәк? Әлеге лә баяғы технология бар икән дә баһа.

Нефть ҡатламға һыу тултырыу ысулы менән табыла. Аллаға шөкөр, бында һыу күп, ҡайҙа ҡарама – күлдәр, йылғалар. Обь йылғаһы ғына ни тора! Һыуҙы насостар менән ер аҫтына ҡыуалар – баҫым көсәйә, ә һыуҙан еңелерәк нефть торбалар буйлап өҫкә ҡалҡа.

Ысулдың кәмселеге: нефть һыу ҡатыш сыға. Әйтәйек, Европаға йөҙ миллион тонна нефть ҡыуабыҙ икән, ти. Нефть менән бергә ун миллион тонна һыу ҡыуыу өсөн күпме сығым талап ителә! Шулай, һыу урында ҡалырға тейеш, был да технология. Нефттә һыу әҙ булһа ла, айырыу мотлаҡ, ә һатып алыусылар һатыулаша белә.

Һыуҙы айырыу ысулы ябай: тондороу, русса – отстой, бына ни өсөн ҙур күләмле резервуарҙар төҙөлә. Һуңғараҡ уны үҙем, прораб ролендә, ошо уҡ цехта төҙөнөм. Һыу – бәлә түгел. Бәләнең ҙурырағы бар. Нефть менән бергә ер аҫтынан эйәрсен газ сыға. Эйәрсен газ – үҙе байлыҡ, ә бында – бәлә. Эш ниҙә? Эйәрсен газдан файҙаланыу өсөн түрәләрҙең аҡылы ла, аҡсалары ла етмәй. Самолеттан осоп килгәндә күренгән ҡып-ҡыҙыл уттар тамаша ҡылған кешене генә аптыраштa ҡалдыра. Факелдар тураһында һүҙ булыр, әлегә – газ тураһында. Эйе, газдың әҙ-мәҙ өлөшө нефть менән резервуарға килә. Етмәһә, нефть үҙе лә эҫе көндә газға әйләнә. Быныһы – бәлә!

Бына ни өсөн мин килгән цех хәүефле һанала. Етмәһә, эҫе йәйге көн булған, ә эйәрсән газдың холҡо алама: һауа менән ҡатнашлығы тейешле нөктәгә етһә, үҙе лә тоҡанып китә ала.

Әйтеүселәр булған: «хәүефлелек һуңғы сиктә»... Түрәләр ишетергә лә теләмәгән. Европа нефть һорай, тигәндәр. Янғын көттөрмәгән, килгән, ҡапыл башланған. Смена тулыһынса янып үлгән. Беләбеҙ: бындай урындан күптәр ҡаса, ә буш урын булмай.

Беренсе көндө үк цехтың Почет таҡтаһын күрҙем, уны, кәрәкмәгәнлектән, артҡы стенаға терәп ҡуйғандар. Бына ике ҡатындың фамилияһын кемдер ҡара буяу менән кәртәгә алған: Дауытова, Закирова. Эйе, янып үлеүселәрҙең һәммәһе тиерлек – ҡатын-ҡыҙ. Кейемдәре дөрләп янған ир больницаға ла алып барылған. Шуныһы билгеле: больницаға начальник йыш йөрөгән.

Эйе шул, Ленин исемен йөрөткән иң алдынғы хужалыҡ тураһында алама хәбәрҙәр йөрөргә тейеш түгел. Ун-ун биш кеше үлеме ҙур трагедия түгел, ә бына Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен алырға иҫәп тотҡан түрәнең Алтын Йондоҙһоҙ ҡалыуы – трагедия.

Был ваҡиға менән ныҡыраҡ ҡыҙыҡһынырға уйланым... Янғын төн уртаһында сыҡҡан, ҡатын-ҡыҙ операторныйҙа һәләк булған. Ҡысҡырғандар, ярҙам һорағандар. Уттан да уҫал дошман юҡ. Тиҙ арала цех урынлашҡан урын менән, янғынға ҡаршы күрелгән саралар менән таныштым. Дөрөҫөн әйтеү фарыз: трагедия проектта уҡ һалынған. Янғындан һаҡланыу саралары бөтөнләй күрелмәгән. Тиҙерәк! Күберәк! Продукция кәрәк!

Ә ҡорбандар? Ҡорбандар, Бөйөк Ватан һуғышындағы кеүек үк, бөйөклөк күрһәткесе генә икән.

## *Әйҙәгеҙ, ордендар көтә*

Бына мин монтаж идаралығында. Был ҡалала тәүләп танышҡан хужалыҡ, тәүгә аяҡ баҫҡан контора. Ни өсөн бында килдем? Монтаж эшен яҡшы беләм. Тағы? Ҡалала монтаж эше күп, ә күҙгә күренерлек хужалыҡ әлегә юҡ, тимәк, был идаралыҡ үҫешкә дусар. Дөрөҫ уйлағанмын: мине баш инженер ҡабул итте. Монтаж эше менән таныш икәнлегемде аңланы, әҙ генә көтөргә ҡушты – прораб кәрәк икән. Күп көтөргә тура килмәне, идаралыҡ начальнигы килде. Күреп торам: кәйефе алама. Ул баш инженерға һүҙ әйтергә лә бирмәне, ҡулы менән ишара яһаны. Икәүләп кабинетына инделәр. Башта ул ниҙер аҡырынды, һүгенде. Һуңғараҡ баш инженерға ла һүҙ әйтеү ваҡыты килде. Ул минең белгес икәнлегемде, заводтар төҙөүҙә тәжрибәм барлығын әйтте. Уф, Алла, ҡолаҡтарың ғына түҙһен – вәт йәһүд Шейнин, нисек һүгенә!

Баҡтиһәң, мин бында ҡалала теркәлеү өсөн генә килгәнмен, ике-өс айҙан аҡсалыраҡ урын табып, был эшкинмәгән конторағa төкөрөп китәсәкмен икән. Минең кеүектәрҙе һепертке менән ҡыуырға кәрәк... Был һүҙҙәрҙе ишек аша тыңлап торҙом, ҡолаҡтарым арығас, китеп барҙым.

Аптырарһың: Шейнин үҙе һуңғы көн эшләгән икән, үҙ кеҫәһенә күберәк һалған өсөн уға ишек яғына юл күрһәткәндәр. Шунан Шейнин яңы заводта эш тапҡан. Мин уға барҙым, үҙемдең «К – 400» компрессорҙарын биш бармағымдай белеүемде әйттем. Ә ул:

– Беҙгә белгән кеше бөгөндән кәрәк, әйҙүк, – тине. Барманым. Тәүге осрашыуҙағы асыуым һүрелмәгәйне шул.

Баш инженер иһә ысын монтажсы булып сыҡты, эш рәтен белә. Бына мин «бөйөк төҙөлөш»тәрҙең береһендә, был – Көнбайыш Себерҙең беренсе газ эшкәртеү заводы. Бында ла беренсе көн аптыратты.

Сәнскеле тимер сым менән кәртәләнгән төҙөлөштә өс йыл эшләп өлгөрҙөм. Стәрлетамаҡта. Ике төҙөлөштө сағыштырып булмай, бында, һаҙлыҡта, бер нисә һорғолт корпус төҙөлә. Төҙөүсе – ҡеүәтле «Мегионгазстрой» тресы, ә эшселәре зектар. Оҡшашлыҡ бөтөнләй юҡ. Бындағы зектар бер кемдән дә тартынмайса шифер ҡайната. Эш урынында. Ә сәйҙе ҡайҙан алалар? Бер сварщик та ҡушылғанды үтәй алмай, хәсрәтһеҙ эшләү өсөн тәүҙә зектарға сәй килтерергә кәрәк.

Урламаған нәмәләре юҡ! Сәй, тәмәке килтереүсегә шунда уҡ әйберен кире бирәләр. Зектар күмәкләп эш итә, күҙәтә... Оятһыҙҙар, етешмәгән ерҙәре юҡ. Тәүге айҙа уҡ шулар ҡорған фундаментты ҡабул итергә тура килде. Кит әле, фундаментҡа оҡшамаған, нивелир ҡуйып, һәр ярығын ҡағыҙға теркәп барҙым. Прорабтары зек түгел, ул саҡ тәгәрәп китмәне. Эйе, баһалап «һикерә», ә бындайҙы ҡабул итеү тыйыла. Актҡа алдап яҙыу мотлаҡ икән дә! Актҡа имза ҡуйманым. Ғауға сыҡты, мин фундаменты ҡабул итергә бурыслы, имеш. Хатта начальник та асыҡланы: «Бынан да насарыраҡты ҡабул итәбеҙ», – тине.

Зектарҙан зыян күп. Эйе, Стәрлетамаҡта ла урлаштылар. Әйтәйек, тутыҡмаҫ тимер, бронза деталдәрҙе һүтеп алалар. Мин насос һүтеп ултырған зекты тоттом. Ҡурҡыттым. Ә ул миңә:

– Әгәр төрмәгә эләкһәң, минән йәки башҡанан кәрәгеңде алырһың, – тип янаны.

– Мин эләкһәм, һинең бугорың буласаҡмын, ә һин минең силғауҙы йыуырһың.

Дөрөҫөн әйткәндә, зектар тәүәккәлдәрҙән ҡурҡалар. Миңә бүләктәр ташый башланылар. Үҙҙәре сүкегән балдаҡ, ҡатын-ҡыҙ аяғы итеп яһалған мөштөк килтерҙеләр, йәнә бейек үксәле туфли... Матур эшләйҙәр! Ә фундамент ҡорорға теләмәйҙәр. Нишләйһең, яҡшылыҡтарын белгәс, мин дә уларға тәмәке, сало килтергеләнем. Бартер, әйтәгүр.

Был төҙөлөштө Стәрлетамаҡтағы төҙөлөш менән сағыштырып маташтым. Булманы. Бындағы завод Стәрлетамаҡтағы синтетик каучук заводының бер цехына ғына тиң. Дөрөҫөн әйткәндә, төҙөлөштөң смета хаҡы технологияға инмәгән биналары өсөн ҡиммәтләнә. Технологияһы ла бай, эйәрсен газдан тауар газы алына, етмәһә.

Партия йыйылыштарының береһендә трибунанан әйтеп һалдым: «Һеҙ бөйөк эш тураһында күп һөйләйһегеҙ, ә төҙөлөп ятҡан завод... завод исеменә лайыҡ түгел. Ул ни бары установка». Күптәр дөрөҫ аңламаны, ә «установка» һүҙе телдәрендә ҡалды. Проект тураһында ла өндәшмәй ҡалманым. Проект иң түбән кимәлдә. Оҙон һүҙҙең кәрәге юҡ, бер хатаны атау етә: урын дөрөҫ һайланмаған. Төҙөлөштән ике саҡрым алыҫлыҡта бына тигән майҙан бар. Тубыҡҡа тиклем батҡаҡта эшләргә теләүселәр әҙ, бик әҙ. Төҙөлөш эштәрен зектар ғына башҡара, зектарҙы ярҙамсы итеп монтажға ла ҡушалар, ә уларҙан фәтеүә юҡ дәрәжәһендә.

Заводтың иң бейек стенаһына эре хәрефтәр менән ҡупшылап яҙғандар: «Сдадим завод в срок!». Ә аҫтында – зектар яҙыуы: «У каждого – свой срок». 10 – 15 йылға хөкөм ителеүселәр ҙә бар ине төҙөлөштә. Бер төн ултырып иҫәп-хисап сығарҙым: яҡынса зектан 1 тинлек файҙа булһа, 5 тинлек зыян килә.

Идаралағы эштең иң ҡыйын өлөшө – киске оператив кәңәшмә. Кәңәшмәлә бер генә кеше сығыш яһай – начальник. Начальник теләһә кемгә һорауҙар ҙа бирә, яуап кисекмәҫтән ишетелергә тейеш. Әгәр яуап һуңлаһа йәки начальникка оҡшамаһа, яуап биреүсе бик тос оят һүҙ менән «бүләкләнә».

...Һуңғы кәңәшмәлә начальник һүҙгә үтә бай булды. Эйе, план яна, гөрләп яна! Начальник һүгенә, нисек һүгенмәһен, Мәскәү риза түгел. Ғәҙәттәгесә, артҡы мөйөштә ултырам. Мин һәр саҡ күҙәтеүсе. Начальник өҫтәле артында – бәрхәт байраҡтар, Ленин портреты. Начальник тағы ла ҡыҙыбыраҡ:

– Тиҙҙән йыл аҙағы, беҙ беренсе урынды юғалтабыҙ. Мин һеҙгә беренселекте яулап бирҙем, вашу мать! Кем һеҙҙең кеүек эшләй, барығыҙҙы ла... матери, – тип ысҡындырҙы.– Беҙҙән байраҡтарҙы аласаҡтар. Какого... Ни өсөн һеҙ булдыҡһыҙ... Бына быныһын ЦК бирҙе. Быныһын... Йыллыҡ план үтәлмәһә!? Мин һеҙҙе... Беҙ бурысҡа сумдыҡ. Ҡайҙан аҡса алабыҙ? Эште йәйға һалыу өсөн бер нисә

бригада кәрәк. Ун биш сварщик кәрәк. Ҡайҙан алабыҙ? Кем һеҙгә килһен... Сығыу урыны ҡалманы... Мөмкин түгел...

– Можно! – Былыһы минең ауыҙҙан сыҡты, начальник аптырабыраҡ ҡалды:

– Кем унда уянды? Аңлат һүҙең ни тураһында?

– Мин әйтәм: эште яйлап була!

– Ишь! Ә һин үҙең аңлайһыңмы ни һөйләгәнеңде?

Барыһының да баштары минең яҡҡа боролдо, нәфрәтле ҡараштар миңә төбәлде. Һәр кем кәңәшмә бөткәнен йотлоғоп көтә, ә хәҙер һүҙыласаҡ. Сөнки начальник кәңәшмәне яза төрө итеп ҡуллана. Үҙе: «Башығыҙ менән эшләй алмағас, арт һанығыҙ менән эшләгеҙ», – тип тә ебәрә.

Ә бер заттың туҡтауһыҙ һүгенгәнен ишетеү рәхәт түгел.

– Бында һүгенеп эш сығарып булмай, миңә бер аҙнаға командировка бирегеҙ, Стәрлетамаҡҡа. Ни эшләргә икәнен беләм.

Халыҡ аптыраша, тын алғандары ишетелә.

– Балалар әкиәтен һөйләйһең, ярар, кәңәшмәнән һуң ҡал..

Күрәһең, начальниктың эсендә ниҙер тоҡанды, кәңәшмәне тамамлау яғын ҡараны Башҡалар шатланышып ҡайтышты. Беҙ өсәү ҡалдыҡ. Күрәһең, баш инженер ҙа ышанып етмәй.

– Стәрлетамаҡ тиһеңме? Ә һин Омск ҡалаһын беләһеңме? Беҙ Омскиҙа йүнле бригада, электросварщиктар таба алмайбыҙ. Ҡайҙа барма – аврал, йыл аҙағы. Кем килһен. Ә һин...

– Стәрлетамаҡта – ике монтаж идаралығы, башҡалары ла етерлек.

– Омскиҙа – монтаж тресы.

– Омскиҙа трест ҡайһы йылда ойошто?

– Эйе, эйе, дөрөҫ әйттең. – Һүҙгә начальник ҡушылды. – Өфөнән башланды. Омскиға Өфөнән килделәр, өйрәттеләр. Эйе, һеҙҙә көслө монтажсылар. Шулай ҙа һин был эште нисек атҡарырһың? Һине ҡулға алыуҙары бар бит.

– Мин һөйләшә беләм, ҡулға алмай торһондар. Миңә саҡырыу ҡағыҙҙары ғына бирегеҙ. Иртәгә үк осам.

– Эйе, беҙ һиңә мисәтле бланкылар бирербеҙ, ә һин юлда эсеп, бланкыларҙы юғалтһаң? Миңә бының өсөн төрмәгәме?

– Мин юлда эсмәйем.

– Иртәнсәк ярты йөҙ саҡырыу ҡағыҙы алырһың, штамп фирменный, мисәтле. Ҡара, һиңә бер аҙна срок. Иң кәмендә ун биш юғары квалификациялы электросварщик алып киләһең. Ишет, барыһында ла алтынсы разряд булһын..

Ҡайтырға булдыҡ. Начальник шоферы мине йәшәү урынына уҡ килтереп ҡалдырҙы. Иртәгә өйгә ҡайтам. Һой!..

***

Дөрөҫөн генә әйткәндә, башымда бер ниндәй ҙә план юҡ ине. Ҡайтыуыма бер нисә сәғәт, ни уйларға белмәйем, ә алдымда, өҫтәлдә, «Стерлитамакский рабочий»ҙың һуңғы һаны ята. Бер нәмә лә уйламай, гәзитте ҡулыма алдым. Ба! Таныш йөҙ! Ҡаланың иң абруйлы монтажсыһы Андрей. Өс йыл бергә эшләнек, талашманыҡ. Ни өсөн, тиһегеҙме? Ул үҙ эшен «бишле»гә генә үтәй. Ә мин – барыһын да беләм. Баҡтиһәң, әле ул «И-2» цехын ҡора. Панорамалы һүрәт бирелгән. Андрейҙы ҙур планда күрһәткәндәр.

Иртән торҙом да «И-2» цехына киттем. Ҡарап торам: Андрей иң өҫкө ҡатта, эштәре ҡыҙыу. Мәлен таптым, ҡысҡырҙым. Күрҙеләр. Саҡырҙым – төштөләр. Ун минутта барыһын да күндерҙем. Бригада менән китәбеҙ, тиҙәр. Мин уларға

үҙемдең адресты биреп, иртәгә килергә ҡуштым. Башҡа бер генә урынға ла барманым, иртәнән фатирым «контора»ға әйләнде. Мин – вербовщик. 45 кеше булдыҡ. Етте. Алтынсы разрядлы сварщик ни тора! Һорауҙар күп. Уф алла, ниңә кәрәк миңә бындай бәлә? Эш белмәгәндәр ҙә минең менән барырға теләй. Кәрәкмәй. Был йәһәттән мине алдау ҡыйын.

Саҡырыу ҡағыҙҙарын тараттым. Һәр эштең үҙ тәртибе, ваҡытында барып етеү кәрәк. Иң ҡыйын нөктә – Рощино аэропорты.

Шулай ҙа кире килеп еттем. Рапорт бирҙем.

– Ҡасан килдең?

– Авиабилет алғас.

– Мин һиңә ышанып етмәгәйнем, эйе, һин слабак.

Тағы әйтәм: билеттар юҡ, отпускынан ҡайтыусылар күп.

– Ярар, күрербеҙ.

Күрҙек. Монтажсылар килә башланы. Һәр монтажсы аҡса эшләргә ашыға, ә начальник күсмә байраҡтарҙы һаҡлау өсөн тырыша. Китте эш! Бер айҙа Стәрлетамаҡ монтажсылары булмаҫтайҙы булдырҙы.

Газ эшкәртеү заводындағы уңыш тулы түгел, аҡсаһы алдан алынған. Аҡса кәрәк. Стәрлетамаҡ егеттәре быныһын да үтәне, планға инмәгән эштәр эшләнде. Һәр кем уңышҡа ынтыла, уңыш иһә бүлешкә килтерә. Ә кем бүлә?

Оператив кәңәшмә – көҙгө кеүек. Начальник мат-перемат менән һүгенә:

– Ишетегеҙ, мин булмаһам... Күрегеҙ, байраҡтар беҙҙең менән, һуҡыр түгелһегеҙ. Бына күрерһегеҙ, беҙҙе ордендар көтә. Белегеҙ, тинтәктәр, һәр кәзәгә орден эләкмәй. Белдегеҙме?

Был һүҙҙән һуң күптәр, ниңәлер, миңә әйләнеп ҡараны. Эйе шул, стәрлетамаҡтар килгәнсе ҡайһы берәүҙәр ат өҫтөндә ине. Аты арығандың уҙмышы юҡ. Яҡшы эш тиҙ онотола, быныһын күптән беләм. Орден тураһында һүҙ башлағас, күптәр тирә-яғына ҡарана башланы. Булмағанды бүлешеү минең эш түгел, ә ҡырын ҡараусыларға үҙемдең ҡарағым килмәй. Дуҫым, участка начальнигы, аэропортта монтаж эштәре менән мәшғүл. Һөйләүенсә, аэропортта йүнле белгес юҡ икән. Мин бындай эштәрҙе яттан беләм. Ә ул авиаотряд командирына әйткән. Алалар. Монтаждан киттем.

## *Олигархизм*

Самотлор. Ҡыҙыҡлы атама. Күптәр өсөн аңлайышһыҙ. Матбуғат был атаманы урындағы ханттарға бәйләй, ә ханттар бындай исемде белмәй. Самотлор күле Байкалға ла, Балхашҡа ла оҡшамаған. Ғөмүмән, ул бөйөк күл түгел, дөрөҫөн генә әйткәндә, ғәҙәттәге һаҙлыҡ. Бына аҫтындағы нефть ятҡылығы барса СССР халҡын уятты. Клондайк.

Самотлорҙа эшләү маҡсатын ҡуйҙым. Күптәр был турала оҙон-оҙаҡ уйлай ине. Мин бер көндә хәл иттем. «ДНС-5» начальнигын эҙләп таптым:

– Һиндә эшләргә теләйем.

– Алыҫҡа йөрөп эшләйбеҙ.

– Самотлорҙа эшләр өсөн килгәнмен.

– Ярар, ғариза яҙ.

Яҙҙым, ул ҡултамғаһын ҡуйҙы. Ярты сәғәттән ЦТП начальнигына индем.

– Миңә Самотлорға күсергә рөхсәт кәрәк.

– Ризалыҡ бирә алмайым, кешеләр етмәй.

– Хәтерләгеҙ, һеҙ миңә ярты йылда фатир бирергә вәғәҙә иткәйнегеҙ.

– Ниңә... бирербеҙ.

– Өс йыл эшләгәндәр фатирһыҙ...

– Шулай шул, ярар, һуңғараҡ һөйләшербеҙ..

– Үткән йыйылышта был турала низағ ҡупты, киләһе йыйылышта тағы әйтһәм...

– Бир ғаризаңды..

Икенсе көнө «ДНС-5»-кә эшкә барырға сыҡтым. Романтика. Ҡараңғыла, йәғни таң һарыһынан, ятаҡтан сығаһың да автовокзалға атлайһың. Автовокзал – хәбәр тоҡсайы. Йылы автобус һуңламай, ә беҙҙең эш урыны – бер сәғәтлек юл. Алтмыш саҡрым араны кәрт уйнап үтәбеҙ, «дурактар донъяһы»нда ғүмер итәбеҙ. Тәүге аҙнала мин кәрт уйынында ҡатнашманым. Маҡсатым – күҙәтеү.

Самотлор юлы. Матбуғат был юлды күккә күтәрҙе. Ҡыҙыҡтар етерлек. Ҡаланы сыҡҡас – юл саты, бында һәйкәлдәрҙең һәйкәле – Алеша. Гүйә, Алеша ҡулындағы янып торған факел, әйҙә, янһын факел, бында газ етерлек, тип яр һала.

Ни өсөн Алеша? Кейеме хикмәтле: бер ҡараһаң, ул – геолог, осоусы ла, әллә кем дә. Ғөмүмән, ул да, минең кеүек, һөнәрен бер нисә тапҡыр алмаштырған.

Бына Самотлор юлының 18-се километры, уң яҡта ҙур панно-плакат, йәп-йәш эшсе һәр юлсыға ҡарап: «Береги народную копейку», – ти. Үҙе ҡулына бер бөртөк гайка тотҡан, өҫкә күтәргән. Эшсенең талапсан ҡарашы күпте аңлатырға тейеш.

Плакатты үтеп тә өлгөрмәйһең, һаҙлыҡтан торба киҫәге күренә, әҙ генә барғас – йыуанырағтары. Ҡарап барам, күрәм: яртылаш батҡан, яртылаш һүтелгән торба һалыусы техника. Һо-о, был тракторҙың ауырлығы илле тоннанан артыҡ. Торба һалғысҡа яҡын ғына «Урал» машинаһы батҡан, өмөтһөҙ батҡан, сөнки уны бер кем дә, бер ҡасан да тартып сығармаясаҡ.

Арыраҡ экскаваторҙың өҫкө блогы ғына һерәйеп тора. Валютаға һатып алынған сит ил техникаһы һаҙлыҡта тутыға. Ҡарағы килмәй, уйлап та ҡуйҙым: башҡалар күрмәҫ өсөн кәрт һуғаларҙыр.

Әллә бында һуғыш үткәнме? Эйе шул, күп түрәләр бындағы эштәрҙе ҡаты һуғышҡа тиңләйҙәр. Ышандыралар түгелме? Күптәр ышана. Мин ышанмайым. Гәзиттәрҙә Самотлорҙан яҙылған репортаждарҙы күп уҡыным. Бына күп ҡабатланған һүҙҙәр: «героизм», «энтузиазм», «самоотдача», «ударный труд», «смекалка»...

Төҙөлөштә тәжрибәм етерлек. Әйтәм: бындағына ҡарағанда, Башҡортостанда төҙөү ҡыйынырағ. Мәҫәлән, Башҡортостан төҙөлөшөнә автокран һорап алыр өсөн күп ишек шаҡырға, күп адресҡа инәлергә, яҙырға кәрәк. Бында үҙҙәре килтереп бирәләр, алмаған өсөн һүгәләр.

Ярар, «ДНС-5»-кә килеп еттек. Эш урыны менән танышыу мотлаҡ. «ДНС-5» билгән урынға бер нисә колхоз йәки совхоз ере һыйыр. Иркенлек. Тайга. Күлдәр. Һаҙлыҡ. Хөрриәт. Шулай, операторҙың эше иркенлектә, һаҙлыҡта. Операторҙың ҡанаты юҡ, ә ул скважиналарҙы хеҙмәтләндерә. Оператор ГТТ вездеходына ултырып ала ла скважиналарҙы ҡараштыра. Бында нефть күләмен үлсәү берәмеге – миллион тонна. Бына ошо миллиондар күптәргә йоҡо бирмәй, күптәрҙе ҡәбергә тыға. Ғибрәт! Оператор, «ҡыуаҡтар»ҙың күп өлөшөн ҡарап килгәс, төшкө ашҡа туҡтай. Вагонда ашаталар. Туйғансы ашап була. Хаҡы? Бер һум. Һәр көн, һәр саҡ. Юҡ, уйлай күрмәгеҙ, стенаға меню эленгән, хаҡы ла яҙылған. Һис тә бер һумға еткәнен күрмәнем. Мин, ҡыҙыҡ өсөн, сдача алдым, шул уҡ мәлдә бер нисә сәнскеле ҡарашҡа дусар булдым, йәнәһе: «Самотлорҙа эшләйһең, ә сдача алаһың». Баҡһаң, бында сдача алмайҙар икән. Кассирша ла ваҡ аҡсаны күп итеп өҫтәлгә өйөп ҡуя. Ваҡ аҡса сүпләгәндәргә кәмһетеп ҡарай. Мин бында ла илле тинде һәрмәп, кеҫәмә һалдым. Төкөрәм, тинем, Самотлор

тарифы менән башҡа цехтар тарифы араһында айырма – дүрт тин. Ғорурланырлыҡ айырма юҡ. Бөтөнләй юҡ.

Оператор эшен үҙләштереү өсөн миңә өс көн етте. Ете класс белеме булған кеше был эште бер айҙа үҙләштерә ала. Тыңлаусан, әрһеҙ, һорау бирмәгән кешеләр кәрәк. Табалар. Ындайҙар күп. Эскеселәрҙе лә алалар, ваҡ түрәләр бындайҙарға теләһә ни һүҙ әйтеп, тел сарлай.

Күп нефть аҡҡан урын ҡәҙерле, бында теләһә кем хужа булырға тейеш түгел. Автовокзалда хәбәр таралды, бышылдап әйтәләр: «Беҙҙең ДНС-ка мастер итеп Муравленконың улын ҡуялар». Атаһы – «Главтюменнефтегаз» начальнигы. Биләмәһе – Төмәндән Ямалғаса. Муравленконың дәрәжәләре ҙур ғына түгел, күп: ул – СССР Юғары Советы депутаты, КПСС Үҙәк Комитеты ағзаһы һ.б.

Минеңсә, ул – совет олигархы, сөнки миллиондар менән эш итә. Эйе, быныһы аҡса менән бәйле. Олигарх күптәрҙең яҙмышын хәл итә. Муравленко – герой. Ә геройлыҡ ниҙә? Ул ҡорбандар талап итә белә. Быраулау установкаларында, промыслаларҙа, юлдарҙа тотош вахталары менән үлеүселәр бар. Ул тиҙ эшләүҙе талап итә, ә тиҙ эшләү аварияға килтерә. Ул, һуғыш сардарына оҡшап, күптәрҙе геройлыҡҡа әйҙәй белә. Эйе, ҡалала Геройҙар аллеяһы бар, әйтергә кәрәк, геройҙарҙың күбеһе – Башҡортостандан. Ҡорбандарҙың да яртыһы – Башҡортостандан.

Бер көн Муравленконың улын күрергә тура килде. Бик ҡупшы егет, вуз тамамлағас, беҙҙең ДНС-ка ебәргәндәр. Мастер итеп. Уйлай күрмәгеҙ, ДНС-та мастер бар, ул китмәне, эшләй бирҙе. Муравленко ДНС-ты күрергә генә килде. Кесе Муравленко бер үҙе генә килмәне, мастер-дублеры Макаровты ла эйәрткән. Макаров та, Муравленко кеүек, яғымлы, бер ҡайғыһыҙ егет. Ул кесе Муравленкоға күңелһеҙ булмаһын өсөн тәғәйенләнгән. Һаҡлау өсөн дә. Был икәү килгән көндә беҙҙе эштән бушаттылар. Мин байрамсыл түгел, тайгаға киттем, ондатраларҙың ял иткәнен күҙәтергә. Әкәмәт йәнлек ул ондатра, йәйҙең ҡәҙерен белә: һис тә ҡыбырҙамай, һыуҙа салҡан ята бирә. Тыныс йәшәргә ярата. Ондатраны «яратыусылар» ҙа күп.

Бына шулай, оло Муравленко дан диңгеҙендә йөҙҙө. Күрәһең, ул үҙенең улының доллар диңгеҙендә йөҙөүен теләгәндер. Ысынлап та, кесеһе «Юкос»тың абруйын күтәрҙе. Ярар, быныһы етер...

Оператор эшен оҡшатҡандар бар. Эшләһендәр. Сәғәт уғы ғүмере буйы бер тирәлә әйләнә, арымай, биҙмәй. Ә минең өсөн бер төрлө эш – ғазап. Монтажға барып сыҡтым. Прораб урыны бушаған. Миңә иһә күсенеүгә ризалыҡ кәрәк. Ризалыҡ алып булмай.

– Фатирҙы үҙ кешеләрегеҙгә генә бирәһегеҙ, ситтән килгәндәрҙең береһе лә бында фатир алмаған...

– Бир ғаризаңды!

Һау бул, Самотлор!

## *Зәңгәр күк*

*Ҡарабаш турғай оя өсөн ышаныслы урын һайлай. Йәшәгән ерен маҡтап йырларға ашыҡмай.*

Һәр ваҡыт яңылышып йәшәнем, күп аҡса алып эшләгәндәр күпте беләләр, тип уйланым. Дөрөҫ түгел икән. Идаралыҡ ҡунаҡханаһында йәшәйбеҙ. Кис ваҡыт үткәреү – проблема. Баш механик та беҙҙең менән йәшәй, ғөмүмән, барыбыҙ ҙа

түрә, ә телевизор юҡ. Элекке начальник Шейнин идаралыҡты ыштанһыҙ ҡалдырып һыҙған. Шахмат уйнарға яратам, беренсе разряд кимәлендә уйнайым. Дуҫым был уйында әллә ни булдыра алмай. Ни эшләйһең, отолорға ла тура килә – тиң булыу мотлаҡ. Донъя хәлдәре тураһында ла гәпләшеп алабыҙ. Иң таралған тема – эш тураһында. Ул монтажда күптән, тик мин монтажсы түгел, ә куратор, йәғни мин – монтажсынан эш ҡабул итеүсе. Теләһә ни проектта ла хата табам. Әле дуҫым аэропортта пар ҡаҙаны төҙөй.

Котельныйҙы дүртенсе йыл төҙөйҙәр, тик монтажсыларҙың бихисап һорауҙарына яуап биреүсе юҡ. Дуҫыма һәр көн аңлатмалар бирә башланым, сөнки был проектты яттан беләм. Проекттың хаталарын табып, файҙаһын да күрҙем. Сөнки мин – рационализатор, ҡайһы саҡта һыҙмалар ҙа һыҙып бирәм. Аэропорттағы куратор минең һыҙмаларҙы аңлап бөтмәй икән. Әһә, ике тапҡыр «йомаҡлы» һыҙма бәрҙем. Эләкте теге куратор. Тамам аңланым: һай йөҙә.

Дуҫымды авиация берекмәһе командиры менән һөйләшергә өгөтләнем. Үҙем тураһында ла әйтергә ҡуштым, сөнки авиацияла эшләргә теләүселәр күп. Теләгем бойомға ашты – мине саҡырҙылар, барҙым. Һөйләшеү оҙаҡҡа һуҙылманы, килештек. Аңланылар. Мин комплектлау эштәрен дә яҡшы беләм. Мәгәр ике шартым бар, тинем. Беренсеһе – фатир. Вагон-фәлән бармай, ҡыҫҡаһы, туалет, кухня өй эсендә булырға тейеш. Сөнки бисәм әле йәш, төндә тышҡа йөрөүҙәре – ай-һай. Беләм: бында ла бер нисә йыл фатир алмағандар етерлек. Миңә сиратһыҙ бирелергә тейеш. Көтмәгәндә командир әйтеп һалды: «Һиңә фатирҙы ике айҙа табабыҙ». Командир менән замполит йылмайышып ҡуйҙылар.

Икенсе шартты ла әйттем. Монтаждан күсеү менән төньяҡ коэффициенты өҙөлмәҫкә тейеш. Төньяҡҡа килеү аҡсаһын авиация хужалығы бирергә тейеш. Ҡаршылыҡ юҡ. Котельныйҙа етешмәгән нәмәләр күп. Мәҫәлән, деаэраторға заказ бирелмәгән, аппаратты табыр урын да юҡ. Пристандәрҙе тулыһынса ҡапшап үттем – юҡ. Мегион ҡалаһындағы бер автобазала метр йыуанлығындағы торба күрҙем, хужалары менән һөйләштем. Бирмәйҙәр. Командир менән икәүләп ҙур начальникка барҙыҡ. Бирҙеләр. Бер төндә һыҙмаларын әҙерләнем, деаэратор урында эшләнергә тейеш. Заказ бирә башлаһаң, өс йылға һуҙыласаҡ. Бындай эштәр күп булды, шулай ҙа ниндәйҙер айырмалыҡ та һиҙәм. Бына замполиттың әйткәне: «Беҙҙә эшләйһең икән, һин башҡа хужалыҡтарҙағы тәртипте онот». Аңламаным. Ә мин икенсе һүҙҙе беләм: «Авиация башланған урында тәртип бөтә». Әллә үҙеңде ғәскәри хеҙмәттәге кеүек тотоу хәжәтме? Ысынлап та, миңә күңелһеҙ. Эшем бигерәк әҙ, иртән киләм, кисен ҡайтам. Ә мин – тиктормаҫ зат. Ярай әле, күҙәтеүсәнмен. Һы, авиапредприятие колхозға оҡшаған.

Колхозда механизатор менән һауынсы абруйлы, ҡалғандарға һан юҡ. Бында тәртип көслөрәк. Миңә был оҡшап етмәй, психологиям ризалыҡ бирмәй. Һәр эште кисекмәҫтән үтәргә өйрәнгәнмен, мәсьәләне иртәгәгә ҡалдырырға яратмайым, һорау тыуһа, командирға инәм, ә ул иһә мине ҡабул итергә һәр саҡ әҙер. Ә бына секретарь, йәп-йәш сибәр хохлушка:

– Вы куда? Командиру!? Там экипаж! – тип индермәҫкә маташа.

Мыҫҡыллы көләм. Бынығы – тышымдан, ә эсемдә ут яна. Имеш, экипаж. Ҡыҙ өсөн экипаж – иҫ китерлек бейеклек. Экипаж һүҙен нисегерәк әйтә – иҫең китер. Шулай ҙа сибәркәй вертолет пилотына кейәүгә сыҡты.

Бер яҡтан ҡараһаң, граждандар авиацияһы сауҙа нөктәһен хәтерләтә. Осоуға бәйле булмағандар һәр саҡ күҙ алдында, халыҡ менән бәйләнештә. Билет кассаһы тураһында әйтеп тә тораһы юҡ. Бына шулай, осмаған авиаторҙарҙың байтағы үтә ҡәнәғәт йәшәй, хатта тәжрибәле осоусы көнләшерлек итеп йәшәй: «селяви» ти французлар. Командир һүҙендә торҙо: ике ай ҙа үтмәне, миңә

ғәҙәттә командирға тейеш бүлмәне бирҙеләр. Экипаж төндә килһә, командир тырышып ишекте шаҡый: стюардессаны нисек алып инһен! Быныһы минең эш түгел, бары тик, осоусыларҙың ғәҙәтен белдем, күрҙем, тип кенә әйтә алам. Улар такси йөрөтөүселәрҙән ҡырҡа айырыла, әҙ һүҙлеләр. Асыуға тейгәндәрен әрләп тә ала инем, «летающие колхозники» тип. Ҡыҙмайҙар, колхозник та кеше, тиҙәр.

Ике вертолет технигының ыҙғышҡанын ишетеп аптыраным. Был икәү «МИ-8» вертолетының винттарын алмаштыра ине, береһе икенсеһенә аҡыра: «Да куда ты пойдешь, кто тебя возмет, ты ведь кроме лопастей вертолета ничего не знаешь».

Эйе шул, авиацияла һәр кем үҙ эшенә маһир. Шулай кәрәк. Бында илле вертолет эшләй, күбеһе «МИ-8». Вертолеттар булмаһа, нефтселәрҙең эштәрен күҙ алдына ла килтереү ҡыйын. Иҫ китерлек эшләйҙәр «осоусы крандар». Бына шулай, әҙ-мәҙ ваҡыт үткәс, осоусыларға «колхозник» тип әйткәнемә үкендем.

* * *

Авариялар башланды. Беренсе катастрофаны хәтерләйем... Мәскәүҙән комиссия килеп төштө. Вертолетта өс экипаж ағзаһы, тағы ун ике кеше һәләк булды. Комиссияға айырым бүлмә бирелде, бер кем дә комиссия эшенә ҡыҫылырға тейеш түгел.

Ә мин ҡыҙыҡһындым. Үҙем дә аптыраным: миңә һәр бер деталь менән танышырға ирек бирелде. Комиссия иң башта техник сәбәптәргә иғтибар итә. Деталдәр, механизмдар ныҡлап тикшерелә.

Комиссия һығымтаһы: кеше факторы. Вертолет «МИ-8» алыҫ промысланан ҡала яғына осоп килә. Самотлор күле өҫтөнән оса башлай. Ошо мәлдә пилот ҡапыл күлде күк итеп күрә... һәм вертолет боҙға бәрелә.

Комиссия иғтибарлы. Авария сәбәбе асыҡлана, тик бер кем дә төп сәбәпте әйтмәйәсәк. Бар аварияларҙың: ерҙәгеһенең дә, һауалағыһының да, юлдағыһының да, быраулау установкаһының да сәбәбе бер – тиҙерәк эшләүҙе талап итеү! Икенсе авария иһә ун биш кешене ҡәбергә тыҡты. Тағы ике авария булғас, командирҙы башҡа урынға күсерҙеләр, урынына яңы кеше ҡуйылды. Киткән командир ҡала түрәләре алдында мине яҡлаусы ине, ул ғына миңә ысын баһа биреүсе булды. Бөтөнләй өмөтһөҙлөккә төштөм, ул киткәс, аяҡ аҫтым тайғаҡланды, тирә-йүнгә ышанысым юғалды.

Был ҡалала алты ай булдым, ә Алексей Михайлыч Романчук миңә биргән вәғәҙәһен үтәүсе берҙән-бер түрә ине. Ике айҙа фатир бирҙе. Кухняһы газ-плита менән, туалет бар, тәҙрәбеҙ тайгаға ҡараған. Эйе, һуңғараҡ ҡала үҙәгендә лә фатир алдым. Мәгәр тәүге фатир ҡәҙерлерәк, ғәзизерәк була икән.

## *«Торба эше»*

Һуңғы йылдарҙа оператив кәңәшмәләр минең ғәҙәти эшемә әйләнде. Әлеге кәңәшмә авиация берекмәһендә бара. Бында мин командир үтенесе буйынса ҡатнашам. Генераль подряд алып барыусы трест – ҡеүәтле ойошма. Командир Романчук трест етәкселеге менән бәхәскә инергә теләмәй. Ә бәхәсле нөктәләр бихисап. Мин бәхәстәр өсөн уңайлы зат, ул әйтергә теләмәгәндәрҙе ярып һалам. Әйткеләйем, файҙаһы ла булғылай – аэропорт өсөн, ә уҫал ҡараштар миңә текләнә.

Бөгөнгө кәңәшмәлә «беренсе» үҙе ҡатнаша. Шулай булғас, ризаһыҙлыҡ күрһәтеүселәр юҡ. Әйтерһең, эш тигеҙ юлдағы арба кеүек тәгәрәй, бәхәсле моменттар ваҡытлыса онотола. Кәңәшмә ни өсөн? «Беренсе»гә һүҙ бирелә, ә ул төпкә төшмәй, өҫтән-мөҫтән һыпыра, телмәре лә оҙаҡҡа һуҙылманы. «Беренсе» телмәренән һуң кәңәшмә тамамланырға тейеш, аҙаҡҡы һүҙ – ҙур түрәгә. Күптәр сығыу

юлына йүнәлә, мин дә ҡуҙғалдым. Ә дуҫым Игорь, иңбашыма ҡулын һалып:

– Командир һинең ҡалыуыңды үтенә, – тине.

Ҡалдым. Үҙе лә ишара яһаны, күптән түгел тапшырылған ашхана бүлмәһенә күрһәтте. Тимәк, әҙ-мәҙ һый була – мәслихәт, тимәк, ябай котлет сәйнәмәйбеҙ. Ашханала дәрәжәле түрәләр генә ҡалды, башҡалар эш урындарына сапты. Яман көндә яҡшы аш, тигәндәр, һый – һыйлылар өсөн. Беренсе командир менән йәнәш ултырҙым. Мин күҙәй түгел, «беренсе», күҙ ҡарашын минең яҡҡа ташлап, командирға ниҙер әйтте. «Ана, «Минмонтажспецстрой» вәкиле – минең кадр», – тине. Бындай өҫтәлде тамаҡ туйҙырыу өсөн генә әҙерләмәйҙәр. Командирҙы һүҙһеҙ аңлап тороусылар бар: өҫтәлгә коньяк, рюмкалар ҡуйылды. «Беренсе» әллә ни аптырап ҡалманы:

– Ярар, ярар, һеҙгә – әҙ генә мөмкин, ә миңә ярамай, тағы ике урында сығыш яһайһым бар.

Командир ҙа ни әйтергә белә, ниңә белмәһен, ул бит «беренсе» менән «һин» тип кенә һөйләшә:

– Эш тығыҙ, бер рюмканан хәлеңә зыян булмаҫ, моғайын.

– Һәй, шулайҙыр, әйҙә, һал.

Бына шулай, беренсе рюмка артынан икенсеһе лә бата, беренсе шешәнән һуң икенсеһе бушай. Муксун балығы ла телеңде йоторлоҡ әҙерләнгән.

Әлегә эш сәғәте дауам итә, күңел күтәренке, ҡайтышыу кәрәк. Мин дә башҡалар менән күтәрелдем, тик сығып китә алманым. Командир мине үҙ кабинетына эйәртте. Өҫтәл артына ултырғас:

– Һин ишеттең, быйыл беҙ яңы АТБ бинаһын ходҡа ебәрәбеҙ, ә канализация эшен алырға теләүсе юҡ, – тине лә тартмаһынан канализация проектын сығарҙы. – Давай, һин эшләп бир. Беләһең: 50 вертолетты хеҙмәтләндереү өсөн АТБ кәрәк, ә АТБ өсөн канализация кәрәк.

Проекты ҡулыма алдым, аңланым – ҡатмарлы: 350 метр араға 300 миллиметр диаметрлы ҡорос торба һалырға кәрәк. Ҡаҙып ҡара, бында – күл, был араны киптереү өсөн бер йыл ваҡыт үтер.

– Был проект буйынса ҡыҫҡа срокта эшләү мөмкин түгел. Мин төндә үҙ проектымды һыҙам... Иртәнсәк яңынан һөйләшербеҙ.

– Бик яҡшы!

Иртәнсәк яңы һыҙмаларҙы тотоп командирға килдем. Миңә үлсәп йөрөүҙең кәрәге юҡ, барыһы ла билгеле урын. Һыҙмаларҙы өҫтәлгә һалдым, ә командир, артыҡ һорау бирмәй, һыҙма аҫтына хуплау ҡултамғаһын ҡуйҙы.

– Ярар, күпме һорайһың?

– Биш мең.

– Нисек?! Егерме биш меңгә эшләргә риза түгелдәр. Һин нисек биш меңгә эшләй алаһың? Аңламайым.

– Мин ҡалпаҡ аҫтындамын, тикшереү буласаҡ.

– Беләм, котельный эштәрен тикшергәндәр. Ә проект нисек?

– Элеккеһен бөтөнләй үҙгәрттем. Ун бер ҡойоно торбаларҙан яһаясаҡмын, кирбестән яһау оҙаҡ. Экскаваторҙы үҙем табам, түләү – һеҙҙең эш, минең эш – торба һалыу. Ғөмүмән, механизация өсөн түләү миңә ҡағылмай.

– Бик шәп, ә бер метр йыуанлыҡтағы торбалар беҙҙә юҡ бит.

– Мин табам.

– Ярар, уйла, хаҡты арттырырға хаҡлыһың. Договор иртәгә үк әҙер буласаҡ.

– Экскаватор табыу ҡыйын булыр, бында ябай экскаватор бармай, драглайн кәрәк.

– Ярар, ярҙам итермен.

Ысынлап, экскаватор эҙләп күп саптым. Таптым: бер хужалыҡта ярым һүтелгән драглайн торған. Эргәһендә – бик мөшкөл хәлдәге экскаваторщик. Исеме Юра, яҡташ: Мәләүездән. Ике аҙна эшкә сыҡмаған. Ҡыуалар икән. Һуң, ниңә әле мине Остап Бендер тип үртәйҙәр?! Отошло вариант таптым: Юра прогул яһамаған, эш хаҡын тулыһынса ала, ә экскаваторын иртәгә үк трайлер менән миңә – кәрәк урынға. Хужалығы өсөн дә килемле, сөнки экскаватор өсөн аэропорт түләй. Юраның начальнигы ла отолмай. Һо-ой, йәйге көндә авиабилет алып ҡара!

Юра тәүлегенә 16 сәғәт эшләй ала. Ҡыйынлыҡта юғалып ҡалыусыларҙан түгел, әммә эш ҡыҙа башлағанда көтөлмәгән бәлә бәкәлгә һукты. «Бәлә» ер аҫтында, өс метр тәрәнлектә... Ул – алты метр оҙонлоғондағы, 1,5 метр киңлектәге тимер-бетон плита. Ватыу өсөн көслө компрессор кәрәк, сөнки миндә бына тигән пневмосүкеш бар. Йәй уртаһы, һәммә компрессорҙар эшкә егелгән, командир үҙе лә таба алмай. Табыу – Остап Бендер эше. Алыҫ түгел хужалыҡта бына тигән зифкомпрессор бар. Саптым шунда.

Эш көнө тамам. Начальник, Николай Гаврилыч, ҡайтып киткән. Арыу кейенгәнмен, галстуктамын. Мине ҡарауылсы ҙур эт менән ҡаршылай.

– Һаумы, Николай Гаврилыч ҡайҙа?

– Ҡайтып китте.

– Ниңә көтмәне? Көтәм, тигәйне бит.

– Мин ҡайҙан беләйем.

– Ярар, мин компрессорҙы алып китәм.

– Биреү юҡ, ҡушылманы.

– Кәрәк, аэропортта авария.

– Бирмәһәм, миңә ни булыр?

– Булмаҫ, машинамдың номерын яҙып ал, бына фамилиям, ә Николай Гаврилыч иртәгә аэропортҡа, командирға, үҙе килһен. Яраймы?

– Ярар.

Шулай, компрессор өҫтөрәтеп килтерелде, тейешле урынға ҡуйылды, эшкә егелде. Алып кителмәһен өсөн тирә-яғына трактор, машина ҡуйылды. Траншея ҡаҙылып бөткәнсе компрессор бер кемгә лә бирелмәне.

Эйе, мин – шабашник, ә шабашник һәр саҡ разведкала. Ҡаланың һәр мөйөшө таныш, нисә компрессор кәрәкһә лә, табам. Бөгөн торбалар кәрәк. Миңә эҙләү өсөн ваҡыт кәрәкмәй, барыһын да беләм, туп-тура барып та етәм. Торбалар табылды, «Торба эше» башланды.

Конкуренттар ҙа йоҡлап ятмай – төндә сварка аппаратын урлағандар. Таптым. Юҡ, үҙемдекен эҙләп түгел, башҡаны, шулай тиҙерәк. Эйе, шабашсы милицияға мөрәжәғәт итмәй...

Әлеге Юра үҙе табеленең тулыһынса яҙылыуына ышанмай ине, ышанды, бер көн прогулы юҡ. Тик ул траншеяны өс көндә ҡаҙа алманы, иҫке драглайны йыш ватыла ине. Был йәһәттән үҙемдең механик икәнлегемде лә күрһәттем, өйрәттем.

– Һиндә баш бар, – тине Юра. Мин уны башҡаса күрмәнем.

Бына тағы бурыс: ҡойолар өсөн бер метр йыуанлыҡтағы торбалар табырға! Ҡайҙан алырға беләм, ә һорайһы кеше, Яков Львович, бирмәй булдыра алмаҫ, миндә йомошо етерлек. Өс «Татра» менән барып, 40 метр самаһы торба тейәп килтерҙем. Һәр береһе тейешенсә киҫелгән, ҡапҡастары ла уйылған.

Торбалар өсөн дә, эш өсөн дә һуҡыр тин дә түләмәнем. Ҡойолар ултыртылды, торбалар һалынды. Эш көйлө, тип әйтергә буламы? Әллә шул. Бына мин иртәнсәк йәйәүләп эшкә киләм. Эргәмдә һәр саҡ тиерлек «Татра» машинаһы бар.

Күберəгеен еңел машина ролендə файҙаланам. Кəмендə ике хужалыҡ исеменəн уларға путевка яба алам. Үҙем менəн һəр саҡ штамплы накладнойҙар йөрөтəм. Бынығы ла фирма сере. Ə иртəн йəйəүлəйем, шулай файҙалы. Бына мин аэропортҡа яҡынлашам. Артымдан килгəн УАЗ-ик ҡапыл туҡтай. Номерына күҙ һалып өлгөрөүгə, ишеге асылды:

– Һеҙгə ҡайҙа?

– Эшкə.

– Ə ҡайҙа эшлəйһегеҙ?

– Бында...

Аллаға шөкөр, башымдың компьютер кеүек эшлəгəн мəле. Ярты секундта үҙ башыма бурыс ҡуйҙым: «Был номерҙы ҡайҙа, ҡасан күрҙем?» Французлар əйтмешлəй: «Шерше ля фам...» Аэропорт ҡапҡаһы автоматлаштырылған, йəғни асылыу ҙа, ябылыу ҙа кабинала дежур иткəн ҡатын иркендə. Əүəл бик сибəр ҡатын эшлəне, миңə лə яғымлы йылмая ине. Бер тапҡыр ҡулы менəн дə ишара яһаған, индем. Бер нисə һүҙ алыштыҡ, шунда стеналағы яҙыуға иғтибар иттем. Перронға пропускыһыҙ өс кенə машина үткəрелергə тейеш икəн: беренсеһе – ҡаланың беренсе секретары машинаһы. Партия алда. Икенсеһе – ҡала Советы рəйесе машинаһы. Өсөнсөһө – əлеге мин ултырған машинаның номеры, йəғни КГБ начальнигыныҡы.

Бына шулай, кəптемме? Һорауҙарға яуап бирмəй булмай, «эйе», «юҡ» тигəн яуаптар менəн сиклəнəм. Һиҙенгəнемде һиҙҙе.

– Ярар, һеҙҙең менəн осрашырбыҙ əле, – тип минең машинанан төшкəнемде ҡарап ҡалды. Машинанан төшкəс, туп-тура штабҡа, командирға, йүгерҙем. Үҙендə. Мине йылмайып ҡаршы алды. Ə мин:

– Алексей Михалыч! Эш харап! – тип зарландым.

– Ниңə?

– Москаленконың миндə йомошо бар. Күрəһең, торбалар буйынса. Башҡаса булмаç.

– Ə һин торбаларҙы ҡайҙан алдың?

– Дуçымдан, монтаж участкаһы начальнигынан.

– Нисəүҙе алдың?

– Метр диаметрлыны, 50 метрҙан əҙ генə оҙон.

– Бар, эшлə. Һиңə башҡа килмəçтəр.

Ул шунда уҡ телефон трубкаһын алып, КПСС ҡала комитетынының беренсе секретарына шылтыратты. Алексей Михайлыч иһə барыһы менəн дə «һин» тип һөйлəшə. Бəйлəнеүсе булманы.

Беҙ ҡаҙған траншея менəн йəнəшə юғары вольтлы электр линияһы уҙа. Ə мин автокран менəн эшлəйем. Ике шартты ла үтəнем: ҡулымда мисəтле ҡағыҙ, линияла ут юҡ, һүндерелгəн, подстанцияла табличка эленгəн: «Не включать, работают люди». Крансы менəн икəүбеҙ, беҙҙең трос, һелкенеп, тимер сымға тейҙе, осҡондар сəсрəтеп, 4 сым да ергə өҙөлөп төштө. Электрик беҙҙең линияны ток аçтында ҡалдырған, йүнһеҙ. Шул уҡ көндө, шул уҡ сəбəп арҡаһында, Самотлорҙа өс кеше үлде, ə уларҙың эшкə допусктары булмаған.

Əл дə яңғыҙ булғанмын, күмəктең яңылышлығы ла күберəк. Торбаның һуңғы киçəген һалырға кəрəк, 22 метрлыны. Көлəлəр, һала алмайһың, имеш. Участок АТБ-ның икенсе яғында – күлгə автокран ҡуйып булмай. «Вертолет менəн ҡуяһыңмы?» – тиҙəр. Һо-о, бер үҙем ике кран менəн торбаны тейешле урынға һалдым. АТБ-ның ике башына ике автокран ҡуйҙым да тəрəн траншеяға төшөрҙөм. Бындай эште бер ҡасан бер кеше эшлəмəç, ə мин эшлəнем. Шабашсы барыһын да эшлəй белергə тейеш.

Коллектор һалыуҙы тамамлағас, үҙемдең канал аша КГБ «эше»нең серен белешергә булдым. Имеш, мин торбалар алып ҡайтҡан көндө тантаналы сара уҙғарылырға тейеш булған. Ҡыҫҡаһы, «красный стык»ты йәбештереү сараһы. Оркестр менән барғандар, ә 20 метрлы торба киҫәге... урланған. Тимәк, партия эшенә аяҡ салынған, алама хәл, сәйәси зыян бит.

Бөтөнләй уйҙырма! Баҡһаң, мине оператив кәңәшмәләрҙә тәнҡитле сығыш яһағаным өсөн хөкөмгә тарттырырға иҫәп тотҡандар. Командир йөпләмәгәс, әйткәндәр: «Ярай, беҙ уны икенсе урында эләктерәсәкбеҙ».

## *Игорь дуҫым*

*Ағастан ҡолап төшкән сәүкә балаһын*
*алып ҡайттым. Портфелдә күренмәй.*
*Троллейбуста тауышына халыҡ аптыраны.*

Бындай кешене «коммуникабельный» тиҙәр. Эйе, тиҙ аралаша белгән зат дуҫ иш таба, дуҫтарын файҙаланып, маҡсатына ла ирешә.

– ОКС-ҡа яңы начальник килгән, – тигән хәбәр таралды..

Был буш хәбәр булып ҡалманы. Бына яңы түрә иртәнге оперативкала күренде. Бәй, мин инде өс ай авиацияла эшләйем, авиатор кейемен алырға баҙнат итмәйем, ә ул форма кейеп тә өлгөргән. Мин уға иғтибар менән ҡарап ултырам. Ысынлап, уға форма килешә, әйтерһең, күптән кейә. Аптырай төштөм: үҙен тотошо ла бындағылар менән күптән таныш кешенекенә оҡшаған. Тартынмай, иркен, Мәскәүсә һөйләшә, хәрәкәттәре теүәл. Быға тиклем эшләгән ОКС начальнигы өс ай ғына эшләп китте, уға әллә ни иғтибар итеүсе лә булманы. Был иһә ике-өс көндә «күренеп» маташа. Ҡыҙыҡһыныу тыуҙы: ОКС начальнигы әллә ни юғары дәрәжә түгел, мәгәр был урынға Мәскәүҙән үк килгән.

Оперативка тамамлағас, ул үҙе алдыма килеп баҫты.

– Мельников, – тип миңә ҡулын биреп, танышырға тәҡдим яһаны. – Әйҙә, ОКС-ҡа керәйек, миңә һеҙҙең менән һөйләшеү мотлаҡ.

Беҙ командир кабинетынан сығып, беренсе ҡаттағы ОКС начальнигы бүлмәһенә индек. Икәүҙән-икәүбеҙ, төҙөлөш тураһында әңгәмә булыр, тип уйланым.

– Нисек, яңы котельный тураһында һүҙ барасаҡмы?

– Юҡ та, әлегә мин проект менән таныш түгелмен, мин һеҙҙең менән яҡыныраҡ танышырға теләр инем.

Таныштыҡ. Ул матур, шыма һөйләй, темаларҙы йәтеш алыштыра.

Бер сәғәт һөйләшкәндән һуң үҙебеҙҙе күптәнге таныштар кеүек хис иттек. Үҙе тураһында күпте әйтеп өлгөрҙө. Тыумышы менән мәскәүле, юғары белемде Куйбышевта алған.

– Яҡшы институт бөткәнһең, – тип ҡуйҙым. Ә шулай ҙа: «Был ялҡау кеше булһа кәрәк», – тим эстән генә. Ул әллә ни маҡтансыҡ түгел, ә яҡшы яҡтарын күрһәтергә оҫта.

Һүҙ барышы үҙ һуҡмағын алды. «Бына мин кем!» – Бынаһы уның булмышы. «Һинең турала һөйләп тә тораһы юҡ» – Бынаһы мин. Ярар. Мәгәр иң ҙур хатаны ул үҙе яһаны. Тәүге гәпләшеүҙә үк һөйләргә ярамағандарҙы һөйләп ташланы. (Алдан әйтеп ҡуям: мәскәүле сер һаҡлай белмәй, бөтөнләй тишек иләк.) Бындай дуҫтың кәрәге тейә, биллаһи. Нисек? Ул һәр ваҡыт... штаттан тыш гэбэщник. Сит илдәрҙә булған, һанап алды: Голландия, Германия, Франция, Швеция...

Ышанырғамы? Нисек тә һүҙҙе төҙөлөш темаһына күсерҙем. Фантазияға мохтаж түгел. Имеш, аэродромда осош юлын пар менән йылытыу проекты уға таныш... Ә был темала мин көслөрәк.

Эйе, өс саҡрым юлды пар менән йылытыу – аҡылһыҙҙар эше, тинем, быны уҫалыраҡ тонда әйттем. Аңланы: мин тура һүҙле.

– Ә эштән һуң төшөрөп алмайыҡмы?

Әлегә авиаотрядта бер кем менән дә эскәнем юҡ. Шулай ҙа ризалыҡ бирҙем.

Эсеп алғас, һөйләшеү ҡыҙыуыраҡ та, тәрәнерәк тә барҙы. Биллаһи, уны, шаштырһа ла, тыңлау ҡыҙыҡлы. Ә ниңә? Һәр һөйләшеү хәҡиҡәт өсөн түгел. Баҙарҙағыса: һатыусы алдай, алыусы тыңлай… Ә кем белә: алданыусы ла өҫтөн ҡалғылай. Төрлөсә була.

Атаһы КГБ полковнигы булған элек, ниңәлер улын Мәскәү вузына урынлаштыра алмаған.

Бына шулай, ул май эсендәге йәшәгән бөйөр кеүек, ә мин аслы-туҡлы үҫтем. Ни өсөн ул миңә йәбешеп ята? Быныһына ла тиҙ төшөндөм. Нисек? Кәрт уйынындағы кеүек. Ул да кәрт уйнарға ярата, «на дура». Хәтере шәп. Отолорға яратмай.

Эйе, беҙ тигеҙ уйынсыларбыҙ, беҙҙең тормош та әлеге кәрт уйынына оҡшай башланы, буғай. Был да, минең кеүек, үҙ хистәрен йәшерә белмәй. Мин – башҡорт булараҡ, ул – мәскәүле булараҡ.

Ул һәр саҡ аҡсаға мохтаж, сөнки иркенлекте, муллыҡты ярата. Әйткәнемсә, үҙем – һәр саҡ һаҡсыл, артыҡ сығым минең өсөн түгел. Ул – ялҡау, ә мин донъяға эшләр өсөн килгәнмен. Мин таба беләм, ә ул тәләфләргә оҫта.

Бына беҙ беренсе тапҡыр эсергә ултырҙыҡ, һәм кемдең кем икәнлеге асыҡланды: ул – һораусы, мин – биреүсе. Бурысҡа өс йөҙ һум һораны, бирҙем.

– Беләһеңме, иркенлек яратам, әлегә башҡа һорарлыҡ кешем юҡ, булғас бирермен.

Шулай, ул уйлағанса, мин «ҡармаҡта». Минеңсә, ул ҡармаҡта. Уйын шартын әйттем. Мин – рационализатор, ә ул – ОКС начальнигы. Минең тәҡдимдәрҙе аҡсаға әйләндереп була. Тәҡдимдәремде тейешенсә ҡағыҙ битенә төшөрҙөм. Ҡултамғалар кәрәк. Ул шыма, ҡултамғаһын йәлләй, имеш, ауыҙы менән биргән ризалыҡ еткән. Ә мин ҡултамғаны башҡаларҙан ҡуйҙырттым, аҡсаһын да алдым, уға тәтемәне. Отош – отолош, кем-кемлек… Мин һәр проекттан етешһеҙлектәр табам, сөнки мин – ысын инженер. Ул мине ләүешкә һанамаҡсы. Бына әйткән һүҙҙәре:

– Кем менән эш иткәнлегеңде беләһеңме? Мин һинең кеүектәрҙе… – Ҡалғанын әйтмәһә лә аңланым: ул – штаттан тыш мәхлүк. Авиаотрядта бер генә кеше «күҙәтеү» аҫтында, эйе, мин фәҡирегеҙ. Ул – күҙәтеүсе. Бына уның беренсе еңеүе – уға биш ҡатлы яңы йорттан ике бүлмәле фатир бирҙеләр. Байтаҡ эшләгән, тәжрибәле белгестәргә лә былдай бәхет тәтемәй. Эйе, фатирҙы авиация түгел, ҡала хакимдары үҙ фондынан бирҙе. Мин дә фатир алдым, белгес булғаным өсөн, шартымды ҡуя белгән өсөн.

Килде заманаһы! Бер кешегә шымсылыҡ иткән өсөн – бына тигән фатир!

Ярар, икебеҙ ҙә авиациянан киттек. Мине яңынан монтажға әйҙүкләп алдылар. Ә ул, ялҡаулығы арҡаһында, яңы урын тапты. Беҙҙең ара нығына төштө. Уға мин кәрәк, миңә – ул кәрәк. Байрамдар, ял итеү бергә, муллыҡта. Ул – тәмле тамаҡ, мин дә тәмленән баш тартмайым. Мин аҡса таба беләм, ә ул дефицит таба белә, сөнки ОРС менән тығыҙ бәйләнештә. Түрәләргә тәтемәгән германский гарнитурҙы минең фатирға килтерәбеҙ. Эйе, ул – автобаза начальнигы урынбаҫары, ә мин – баш механик, икебеҙҙең дә шәхси авто. Гарнитур ике машинаға тейәрлек. Хөрриәт.

Автобазала хеҙмәт хаҡы юғары. Айына 700 һум самаһы эш хаҡы алам, шулай ҙа һәр кем күберәккә ынтыла. Мин йәнә бер аҡса сығанағы уйлап таптым.

Игорь дуҫ менән кәңәшләштем, аныҡ план төҙөп алдым: һәр кемдең эше билгеле, уға ҡағыҙ мәшәҡәттәре, материалдар табыу йөкмәтелде. Миңә – ойоштороу, үтәү. Үҙемә тейеш эштәрҙе лә, Игорға тейешен дә тулыһынса үҙем үтәнем. Эйе, башлаған эште туҡтатыу үтә ҡыйын хәлгә килтерергә мөмкин.

Бар көсөмдө һалып эште ваҡытында тамамланым, аҡсаһын алдым. Бына ҡыҙыҡ: Игорь өлөш талап итә.

– Бына һиңә! Һы, коньякты бергә эсәбеҙ, шул еткән.

Ул һаман үҙенекен тәтелдәй:

– Һин мине белмәһәң белерһең, һинең картотекаңда аҡ урын ҡалмаған, аҡылһыҙҙар йортона йәки башҡа урынға китеүең ихтимал.

Ысынлап та, ул картотека тигәндәре мунсалағы ҡайын япрағы кеүек икән, ҡайҙа ғына барма – ул һинең менән.

Игорь өсөн «уйын» бөттө, ә мин әлегә – уйынсы, ҡылдарын тартам. Ә ул ҡыҙып, үртәлеп барыһын да һөйләй, миңә кәрәген дә, кәрәкмәгәнен дә. Игорь тураһында һөйләгәндә ҡала түрәләрен телгә алыу мотлаҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, Игорь минең ысын патриот икәнлегемде аңлай, күрә, таный. Ә бындағы түрәләрҙең күбеһе псевдопатриот.

Псевдопатриот – Станиславский системаһын үҙләштергән зат, ул етешһеҙлектәрҙе күрмәй, күрергә лә теләмәй. Бар хәлде ул алһыу күҙлек аша күҙәтә. Ысын патриот иһә етешһеҙлектәрҙе күрә, тәнҡитләй, тынғыһыҙлығы менән башҡаларҙың мажаһына тейә. Ә Игорь кем? Ике төр патриотизм араһында буталыусы. Нишләйһең, көнләшерлек сифаты юҡ. Ул ысын уйынсы була алмай. Фатир алыу – отош, ләкин был уйынсы отошо түгел.

Ә мин отолоусымы? Юҡтыр. Игорь аша күпте белдем. Етмәһә, беҙ иркенләп, тәмле ашап, бергә күңелле йәшәнек. Һәр байрамды бергә үткәрҙек, ә һыйҙар ниндәй булды!

Үҙе лә, ҡатыны ла өҫтәл әҙерләргә беләләр. Әйтәйек, Игорь кеүек ҡыҙҙырған бәрәңгене бер генә ресторанда күргәнем-ашағаным булманы. Ә балыҡ блюдоларын нисек әҙерләй! Юғарыраҡ сифат булмай. Беҙ ит, ҡамыр юҫығына оҫта. Игорь рекорд ҡуйырға яратты, бер ашағанда – 90 билмән! Ә мин 25-тән арттыра алманым.

Шулай ҙа өсөнсө ынтылыш мәле килде. Тағы ҙур эш уйы килде. Тағы әйттем дуҫыма: «Һиңә – ҡағыҙҙар, ҡултамғалар эше, ә мин – ойоштороусы». Ҙур эштә тырышыу ғына әҙ: бында зиһен һәләтлеге кәрәк. Быныһы ла әҙ, хәүефһеҙлек хәсрәте лә бар. Быларҙы ул үҙ ҡулына алырға тейеш, сөнки эш менән мауыҡҡан зат тирә-йүнде күҙәтә алмай...

Был миңә:

– Миңә хәүефле эш кәрәкмәй, – тине.

– Кәрәкмәгәс, эләкмәй. – Быныһы мин.

– Миңә «таҙа» эш кәрәк, – Быныһы ул.

Дөрөҫөн әйтеү мотлаҡ: бер йәйҙә 5 километр самаһы торба һуҙҙым, әммә бер метр ҙа торба һатып алынманы. Шундай мода.

Һәр кемдең үҙ юлы, үҙ һуҡмағы. Һәр кем үҙенсә йышыла, шымара. Бына Игорҙең һуңғараҡ йырлаған таҡмағы:

*Высоко орел летает,*
*Крылом небо достает.*
*Возносишь славу до небес,*
*Мать твою, КПСС!*

Анекдоттар һөйләнә, Игорь фатирында – тулы хөрриәт.

Бындай мәлдә һәр кем үҙе теләгәнен әйтә, ярамағанын да әйтә. Әгәр уңайлы урында диктофон булһа?! Мин «ҡармаҡ» һалыуҙың башҡа төрҙәрен дә беләм. Тормош өйрәтте.

Бына шулай, беҙ нисек танышһаҡ, шулай ташлаштыҡ, үкенеүҙәр булманы. Ә дуҫлыҡ булдымы? Һис шикһеҙ.

Бала саҡ иҫемдә. Ҡанға туҙып һуғышҡан малайҙар булды ла баһа. Дуҫтар инек, йән дуҫтар инек. Эйе, дошман булмаған урында дошман эҙләмәйҙәр. Игорь минең дошманым булманы. Хатта был ҡалала ул иң яҡын дуҫым ине.

Нишләйһең, һәр кемдең үҙ яҙмышы.

***

Был төбәктә йәйге төндәр ҡыҫҡа, ә бер төндә ҡараңғы бөтөнләй төшмәй. Аҡ төн. Үткән йыл был төндә беҙҙең ятаҡта йоҡлаусы булманы. Иң оҙон көндө байрамға әйләндерҙек, күңелле үтте, күптәр был байрамды хәмер менән биҙәне, кемдәрҙер – үҙ бүлмәһендә, кемдәрҙер – тыштағы эскәмйәләрҙә. Ә мин үҙебеҙҙекеләрҙе күндерҙем: айныҡ килеш аҡ төн үткәрҙек. Онотмаҫ өсөн. Дөрөҫ эшләгәнбеҙ, тим.

Хәҙер мин ятаҡта түгелмен, пилоттар менән ваҡытлыса йәшәйем, сөнки авиацияға күстем. Ҡунаҡхана аэропортҡа яҡын урында, ашхана ла яҡында. Хөрриәт ҡойто, бында тыныс йоҡо юҡ. Әйтәйек, төн уртаһында АН-22 (Антей) килеп төшә, тауышы оҡшамай. Самолеттар тауышына өйрәнеп була. Ә бына төн уртаһында ҙур самолеттың экипажы ҡунырға килһә? Йоҡлап ҡара! Командир минең бүлмә ишеген шаҡый. Оҙаҡ шаҡый. Имеш, «люкс»та йоҡларға теләй. Бүлмәләге икенсе карауатты алырға ҡушам. Алалар. Ә командирҙар барыбер шаҡый.

Бына бер төн экипаж килде. Минең ишекте шаҡыманылар. Йоҡлап ҡара, стена ҡалын түгел. Күрше бүлмәлә экипаждың «разбор полетов» тигәне бара. Көтөп яттым – туҡтамайҙар. Ишектәрен асып бер нисә һүҙ әйттем, ярар, тинеләр. Ә һүҙҙәре бөтмәй. Ярар, әҙ-мәҙ йөрөп алырға булдым. Яҡты төн, төҙөлөп ятҡан котельный яғына киттем.

Әллә аҡылдан шашып бараммы? Ни ишетәм, әллә йоҡоһоҙ килеш һаташаммы? Төн уртаһында бөтөнләй буш торған котельныйҙан аптырарлыҡ тауыш килә:

– Да, я ишак, ишак я... вашу мать...

Ҡурҡып йәшәмәнем. Башҡа кеше булһа, ҡарауыл алып килер ине. Барып индем. Барып ингәс, тауыш-тын юҡ. Ҡараштырам. Күрәм: өсәү табын ҡорған.

Икәүһе һәйбәт кейемдә. Йөҙҙәре әҙәмсә. Ә берәүһе ҡырынмаған, спецовка кейгән. Аңлап алдым: ҡысҡырыусыһы – ҡырынмаған зат. Минең килеү – улар өсөн көтөлмәгән хәл. Ғәҙәттә, бындайҙарға үпкәмде йәлләмәй аҡырам. Өсәүләп аяҡҡа баҫтылар, күрештеләр. Мин үҙемдең начальник икәнлегемде аңлаттым. Уларға әйтеүемдең кәрәге булмаған икән. СУ-53 прорабы минең турала тулы мәғлүмәт биргән. Дөрөҫөн әйткәндә, был шабашниктар пар котелдарына обмуровка яһарға килгәндәр. Йөҙҙәренә ҡарағанда, үҙҙәрен ғәйепле һанайҙар. Икәүһе бөтөнләй тынды, ә бына һәйбәт пинжәк кейгәне хәлде аңлатырға булды, ни тиһәң дә, эште рөхсәтһеҙ башлағандар. Иртәнсәк квалификацияларығыҙҙы тикшерәм, тигәс, бөтөнләй һүнделәр. Тәжрибә тураһында әйткәс, теге һәйбәт пинжәкленең теле асылды. Обмуровка эшен беренсе тапҡыр үтәмәй икән. А-ба, политехта доцент икән.

Бына нисек, фән кандидаты эшсе кейемен кейергә мәжбүр. Ғәҙәттә, обмуровка эшенә талапсанмын, ә был өсәүгә бер тапҡыр бәйләнмәнем. Улар ҡайтып

киткәс, ныҡлап тикшерҙем: ысын профессионалдар ғына шулай эшләй. Алдамаған. Ни өсөн соҡонманым, күп һорау бирмәнем? Обмуровка материалдары ҡиммәтле. Күреп торҙом: үҙҙәре тапҡан. Тыныс эшләһендәр, тип уйланым. Тағы нимә? Кураторҙар һәр саҡ «на лапу» һорай. Быныһы ла минең ғәҙәт түгел.

– Юғары кимәлдәге ҡунаҡтарҙы ҡаршыларға тура килә, коньягы ла, икраһы ла кәрәк, ә ҡунаҡҡа барһаң, ни генә күрмәйһең. Меҫкенләнге килмәй.

Доценттың был һүҙҙәре бик оҙаҡ ҡолағымда яңғыраны.

Болғансыҡ дәүер, уйланырға тура килә. Ҡунаҡ йыйған түрә үҙе бер ҡасан да гастрономға бармай, уға килтереп бирәләр. Ул килтереүселәргә аҡыра, тәмлерәкте килтермәгәндәр, имеш. Ҡайҙа тәгәрәйбеҙ, йәмәғәт?

Үҙемдең хәлдәр тураһында уйландым. Ни өсөн бында килгәнмен? Ашау өсөнмө? Юҡ. Сөнки мин үҙ еремдә лә туҡ йөрөр инем. Уҙышыу китте. Кемдәр уҙҙы һуң? Түрәләр. Тағы ни көтөргә? Уҙыусы һәр саҡ артына әйләнеп ҡарай. Шунан? Алға ынтыла. Тимәк, «коммунизм» тигән һүҙ – теге уҙыусының артҡы һынынан сыҡҡан тауыш. Хәйер, был турала һүҙ башлана ғына әле.

* * *

Күп ваҡыт та үтмәне, мин үҙем ошо уҡ котельныйҙа шабашник ролендә эшләп алдым.

Ысынлап та, ҡайһы саҡтарҙа үҙемә үҙем аптырайым. Кем һуң мин? Ни өсөн уйҙарым, эштәрем менән килешә алмайым? Ғөмүмән, минең тормош барышы анализға бирелмәй. Әллә аналитикала һай йөҙәмме?

Ҡара әле, авиаберекмә командиры миңә бик оҡшай, уның менән рәхәтләнеп эшләргә була. Ул да мине оҡшата, шәп белгескә һанай. Бар шарттарымды үтәне. Күптәр бараҡтарҙа, вагондарҙа йәшәй. Яҡшы фатирҙарын Мәскәүгә, Киевҡа алыштырыусылар ҙа осрай. Ә ул миңә бына тигән фатир табып бирҙе. Абруйлы белгестәр бындай фатирҙы өс йыл көтөп ала. Кемдер минең үҙ юлымдан тайғанымды теләй, көтә. Эйе, бындай кеше бар.

Элек үҙем эшләгән монтаж идаралығы начальнигы кире ҡайтыуымды һорай.

– Һин тик торор өсөн тыумағанһың, һин ҙур эштәр өсөн тыуғанһың. Әйҙә, әлегә һиңә ПТО начальнигы урыны әҙер. Артабан ҡарарбыҙ.

Ысынлап та, авиацияла миңә әллә ни күңелле түгел. Минең кеүектәргә орден бирмәйҙәр. Аҡсамы? Эйе шул, бында орден өсөн килмәнем. Ярар, уйлаштым, командирға килдем.

– Алексей Михайлыч! Мин яңынан монтаж идаралығына китергә уйлайым. Мине ПТО начальнигы итергә теләйҙәр.

– Һин беҙҙә күнегә башланың, тиеп уйлағайным.

– Миңә һеҙҙә ҡыйын түгел, шулай ҙа мин – монтажсы. Стәрлетамаҡта завод төҙөнөм.

– Ярар, һине көсләп тотоп булмаҫ, тик һин беҙҙе ташламаҫһыңмы һуң?

– Һеҙҙе нисек ташлайһың, авиабилет һәр саҡ кәрәк бит.

– Билет артынан һәммәһе килә, мин икенсе нәмә тураһында. Беренсенән, урыныңа йүнле белгес алып кил, шунһыҙ – китеү юҡ.

– Бер кеше бар, теплотехник, иртәгә үк килтерәм.

– Иң кәрәген әйтмәнем әле, тыңла. Беҙҙең подрядчиктарҙың барыһы ла – минең дуҫтар. Кәңәшмәләрҙә мин уларға аҡыра алмайым. Һин булдыраһың, һине өйрәтеү кәрәкмәй, тейеш ерҙән тешләй беләһең. Һин беҙҙең оператив кәңәшмәләргә даими йөрө. Котельныйҙы тапшырыу мотлаҡ. Аңланыңмы?

Мин быны уҡ көтмәгәйнем, һиҙеүен һиҙҙем. Ә кем һуң подрядчик? «Миннефтегазстрой»ҙың иң атаҡлы тресы управляющийы министр урынбаҫары һанала.

Эре һөйләшәләр, белгестәре лә көслө. Мин иһә трестың артҡы һанына ла ҡарап алғаным бар. Бер «күргәҙмә» бригадаһы бар, бригадиры – Социалистик Хеҙмәт Геройы. Трест көсө – аҡсала. Управляющий хохол фамилияһын йөртә, психологияһы менән Урал кешеһе. Трест етәкселәре тулыһынса тиерлек Украинанан.

Командир шартына күндем һәм үҙемә үҙем хөкөм сығарҙым.

## *Яңынан монтажда*

*Ҡарабаш турғай ояһын белгертмәй*
*һайлай, шуғалыр маҡтап һайрарға ла*
*яратмай.*

Монтажға күстем, авиаторҙарҙың оператив кәңәшмәләрен ҡалдырманым. Күп тапҡырҙар трест түрәләре менән сәкәшергә тура килде. Үҙемдең урынға Стәрлетамаҡтан эйәртеп килгән белгесте ҡуйҙым. Был көндәрҙә берекмә яғыулыҡҡа ҡыйынлыҡ кисерә ине. Тағы ике резервуар кәрәк. Ике резервуар өсөн күп ишектәрҙе шаҡыу мотлаҡ. Командир был эште миңә йөкмәтте. Иң еңеле – резервуарҙар ҡуйыу өсөн паркта урын әҙерләү, иң ҡыйыны – Обь ярында хужаһыҙ ятҡан «консерва банкаһы»н табыу, килтереү.

Таптым, килтерҙем. Консерва банкаһы тигәнем – резервуар корпусы, төрөлгән, баржанан бушатылған. Тимер юл вагонында йөрөтөрлөк. Обь буйҙары әкәмәт: ниндәй генә байлыҡ табып булмай ярҙа. Шулай ике резервуар «консерваһы»ның кемдеке икәнлеген дә асыҡлап торманым.

Алып киттек. Тикшеренеүсе булманы. Хөрриәт. СССР-ҙа шулай. Ике резервуарҙы бер айҙа ҡороп бирҙек!

***

Котельный эштәре хәтәр булып сыҡты. «Һаҡаллы объект» кемдең генә теңкәһенә теймәне. Гәзит биттәренә лә эләкте. Көлөүселәр булды. Бер көн командир кәңәшмәнән һуң ҡалырға ҡушты.

– Беләһеңме, һинән башҡа был котельныйҙы бер кем дә ебәрә алмаç.

Ә мин оҙаҡ уйларға яратмайым:

– Булдырабыҙ уны.

– Күпме?

– Биш мең.

– Әҙ түгелме? Уйлап ҡара.

– Ә мин аныҡ план менән эш итәм, Алексей Михайлыч! Сургут тәжрибәһен ҡабатлау кәрәкмәç.

Сургут берекмәһендә ғәмәлдән тыш түләгән өсөн берәүгә ун йыл бирҙеләр. Ул ваҡытта беҙгә приказ уҡылды. Икенсе кәңәшмәгә мин әҙер план килтерҙем: унда барлыҡ эш төрҙәре яҙылған, подряд хужалыҡтарына ла сроктар ҡуйылған.

Автоматиканы айырым договор буйынса яйларға булдым.

Командирға план оҡшаны, ул ябай эштәр өсөн авиатехниктар бригадаһын бүлде. Комфорт тураһында ла онотманы: миңә ял итеү бүлмәһе бирҙе. Простыня йыш алыштырылһын, өҫтәлдә коньяк ултырһын, тип бойорҙо. Шаяртҡандыр, коньяк килтереүсе булманы. Был – минең беренсе шабашкам, һәр эшкә акт төҙөп, ҡултамғалар ҡуйҙырып барҙым. Бик яуаплы эш: обмуровка киптереү, ҡаҙандарҙы баçым аҫтында һынау, регистрация, инспекторға тапшырыу һ.б. Завод дефекттары ла табылды, үҙемдең монтаж идаралығы мөмкинлектәренән бик оҫта файҙаландым. Тулы өс аҙна котельныйҙан сыҡманым һәм уны ебәреү эшен тамамланым.

Көйләү эштәре барғанда «Минмонтажспецстрой» штатында инем. Тимәк,

мин – өс аҙна прогул яһаусы. Начальнигым бәйләнеп маташты-маташыуын. Мин дә беләм: «Закон – тайга», – тинем. Уға күсеү шарттарын һөйләшкәндә үк әйтелгәйне, эш төрҙәре һаналғайны. Ә үтәлеш ал да гөл. Нишләйһең, был эштә йоҙроҡ төйнәмәйенсә булманы. Кәңәшмә ҡарарына ярашлы, генподрядчик ҡалған эштәрҙе тамамлау өсөн бригада ҡуйырға тейеш. Ҡуйылды. Биш эшсе, барыһы ла – Карпат хохолдары. Мин көйләү эшен башлағанмын, ә улар котельный эсендә трактор санаһы төҙөй. Шабашка! Кисекмәҫтән сананы тышҡа сығарырға, ҡапҡаны бикләп, электросварка менән йәбештерергә бойорҙом.

– Татарин, ты сейчас… получишь, – тинеләр. Мин дә оят һүҙ менән яуап ҡайтарҙым. Ә төптәге бүлмәләге хохол, шул уҡ бригаданан, йүгереп сыҡты ла мине һуғып йығырға самаланы. Үҙенә эләкте. Китте һуғыш. Улар – бишәү, мин бер үҙем. Бәләкәй кәүҙә, сослоҡ һәм котельныйҙың тарлығы арҡаһында бирешмәнем. Колонналар, насостар, торбалар… Нисек теләйем, шулай һелтәйем. Арығансы һелтәндем дә ишеккә йүгерҙем. Штабҡа. Ҡото осҡан секретарь: «Куда в таком виде!» – тип һөрәнләп кенә ҡалды.

Командир тиҙ аңланы, котельныйға ҡарауыл саҡырҙы – карабиндар менән. Үҙе кейенде, барҙыҡ. Трактор килеп, сананы алып китте. Тегеләр һүҙһеҙ тороп арығас, ҡапҡаны ябып, йәбештереп тә ҡуйҙылар, ике-өс көндә эштәрен бөтөрҙөләр. Әҙмәүерҙәр. Ә котельный эшләй башланы. Котельныйҙы ходҡа ебәреп булмаясаҡ, тигәндәр еңелде.

Үтәлгән эштең әжере түләнергә тейеш. Үҙемдең генә һүҙем бар: «Беҙҙең илдә эшләү рәхәт, ә хеҙмәт хаҡын алыу ҡыйын». Берекмәнең баш бухгалтеры үҙенекен әйтеп һалды: «Через мой труп». Командир ашыҡтырҙы: «Мин китһәм, бөтөнләй ала алмаясаҡһың».

Судҡа барырға тура килде. Халыҡ суды рәйесе Казанкин, минең ҡағыҙҙарҙы уҡығас, суд секретарына повесткалар бирергә ҡушты. Повестканы үҙем алып килдем, командир теге ике бисәне саҡырып алды:

– Бына повестка, барығыҙ судҡа, мин бармайым, ҡултамғам ҡуйылған.

ОТИЗ начальнигы илап ебәрҙе лә повесткаға яҙып ҡуйҙы: «Немедленно оплатим».

Бына шулай, штабтан сыҡмай ғына, тейешле аҡсаны алып ҡайттым. Тик кассир аптыраШта ҡалды: «Был сумманы алыу өсөн нимә эшләнегеҙ?» – ти.

– Командирҙан һора, – тинем.

Бына шулай.

***

1976 йылдың декабре. Йыл аҙағы, Мәскәү түрәләре алдында отчет биреү аҙабы. Юҡ шул, улар Мәскәүҙә генә һыйланып ятмай, бында ла килеп тулалар. Ике-өс көндән Яңы йыл байрамы – ҡайтырға ашығалар. Беҙгә лә ике түрә килгән. Береһе – министрлыҡтан, икенсеһе – главканан. Хафаланыу? Ҡайҙа ул! Мәскәүлеләр ҡала комитеты броне менән оса, уларға самолет әҙер. Әле һуңғы кис, иртәгә осалар.

Ҡунаҡхана номерына ҡото осҡан Вячеслав Савельич килеп инде.

– Бронь горкома забрали нефтяники, «Миннефтегазстрой» тоже без билетов. А в аэропорту война.

– А что предлагаешь?

– Гали поможет.

Барыһы ла миңә текәлде. Мөлдөрәмә тулы күҙҙәр. Кит, әле генә кәперәйеп ултырған заттар мәмәйгә әйләнде.

– Мөмкин түгел, командир бронялары бирелгән. Кисә мин һеҙҙән һораным билет тураһында. Горком, тинегеҙ.

– Юҡ, һин, һин табаһың. Ради!

– Радиға ла, Вадиға ла булмай.

– Та-а-а-ба-һың! Беҙ нишләйбеҙ?

Нишләйһең, икеһенең дә паспортын алып ҡайттым.

Аэропорт. Штаб. Ҡабул итеү бүлмәһендә тығын. Барыһы ла управляющий урынбаҫарҙары тип әйтергә мөмкин.

Секретарь энә өҫтөндәгеләй борғолана. Командир юҡ, ул горкомда.

Ни эшләргә? Телефондың файҙаһы юҡ – секретарь ала. Әһә, ОКС начальнигына инәм. (Был мадам командир һөйәркәһе булғайны.) Бына ошолай шылтыратһаң, командир ала, ти. Булды, алды, аңлатты. Йүгерҙем әлеге ҡабул итеү бүлмәһенә – секретарға ҡағыҙ ҡалдырырға. Үҙем командир ишегенә һырпаландым. Йоҙаҡтың урталағы тишегенә нығ төрнәлгән ҡағыҙ киҫәге һыя. Тартып алдым, кассаға йүгерҙем, ике билет алдым. Әйҙә, осоғоҙ. Ҡәһәр һуҡҡан мәскәүҙәр! Күҙҙәре маңлайҙарына менде, ә рәхмәт әйтергә оноттолар.

Яңы йыл байрамы үткәс, анализ яһап алдым. Эйе, котельныйҙы эшкә ебәрҙем. Ни өсөн главбух аҡса бирмәҫкә булған? Уға күптәр әйткән: өс аҙнала бер кеше шул тиклем эште теүәлләй алмай, йәнәһе.

Тағы көлкөлө ваҡиға булды. Мин командирҙа ултырам, АХО начальнигы ҡыпҡыҙыл булып килеп инде. Был ҡатын әле йәш, үҙе тиҫкәре.

– Мин уларға был аҡсаны бирмәйем, ярты сәғәттә эшләнеләр. Бигерәк күп була.

– Һин үҙең һөйләштең, хаҡын да үҙең әйттең. Бирәһең, бирмәй ҡара.

Ә мин көлөүҙән тыйыла алмайым, көләм шул. Командир ҙа көлөп һөйләшә. Эйе, бында көлмәйенсә булмай.

– Юҡ, бирмәйем, йөҙ һум бирәм.

– Бирмәй ҡара. Ярар, булды.

Хикмәт ниҙә? Командирҙың үҙенә киләләр. Урамдағы туалеттың тишектәре тулы өйөм. Һыуыҡ үҙәккә үтерлек. Эйе, бында әле йылы туалет юҡ, командир АХО начальнигына задание бирә: туалет соҡорон бушатырға. Ә был ҡатын ике кеше таба. Аҡса әҙер, күрһәтә. Теге икәү тиҙ генә автокран килтереп, таҡтанан эшләнгән туалетты урынынан ҡуҙғатып алалар, Тәгәрмәсле экскаватор, ике «Татра» көтөп тора. Ағас туалет күтәрелгәс, экскаватор туң тиҙәкте ике үҙбушатҡысҡа тейәй. Туалет урынына ҡуйыла. Был эште үҙем күрҙем. «Договор дороже денег». – Аңларға кәрәк. Аңламай ҡайҙа барһын.

Фәһемле миҫал да бар. Американағы миллионер беренсе булып заводында электр двигателе ҡуйған. Бер ваҡыт ҡиммәтле двигателе туҡтаған. Аптыраушта ҡалған миллионер атаҡлы Эдисонды саҡырып алған:

– Әгәр йүнәтеп эшләтһәң, мең доллар бирәм, – тигән.

Эдисон сукеш алған да двигателгә әҙ генә һуғып ҡуйған. Двигатель эшләп алып киткән.

Асыуы килгән миллионер ни эшләһен:

– Мин һиңә мең долларҙы бирәм, ә һин үҙ эшеңде яҙып бирергә тейешһең,– тигән.

Эдисон яҙған: «Сүкеш менән һуҡҡан өсөн – 0,01 доллар. Ҡайһы урынына һуғырға белгән өсөн – 999, 99 доллар...»

Шабашник тип аталған зат ҡайһы саҡта Эдисонға ла оҡшап ҡуя. Шабашкала тәжрибә тиҙ килә. Шабашсы төрлө кеше менән осраша, һөйләшә. Шабашсы ҡатмарлы эштәрҙе лә үҙ өҫтөнә ала, ғауғалы эштәрҙән дә баш тартмай. Талашыу һөҙөмтә бирмәһә, ҡулын һелтәп китә ала.

Мин шабаш эшен тулыһынса өйрәнергә булдым. Был турала китап яҙырға теләк тыуҙы.

# *Баҙ ҡаҙалар түгелме?*

Ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың берҙәмлеге һәм көрәше. Беҙгә был философик төшөнсәне вузда сәйнәп туҡынылар. Һәр кем үҙенсә аңлай. Ә мин ошо көнгә тиклем аңлай алмайым: ни өсөн ҡапма-ҡаршылыҡ һәр көн берҙәмлеккә ынтыла? Тырышып ынтыла.

Игорь унынсы автобазаға начальник урынбаҫары булып урынлашҡан. Автобазала яңы начальник, ә Игорҙең һүҙенә ышанһаң, бик дәртле кеше икән. Яңы начальниктың төҙөлөшкә иғтибары ҙур, ә Игорь тейешле темп ала алмай, аҡһай – прораблыҡ тәжрибәһе булмағас, эштәрҙе яйға һалыу ҡыйын шул. Шуныһы: төҙөлөш эштәренең күбеһе монтажға бәйле. Игорҙе үлтереп ҡыҫтайҙар, ә быҙндай мәлдә астар кәрәк. Ул – «таҙа» төҙөүсе, монтажды белмәй.

Игорь фатирында күңел асабыҙ. Өҫтәл бай: Игорь бер мискә чех һыраһын, бер ҡумта маркалы шарапты ОРС-тан сәлдергән. Ҡурылған нельма, ҡаймаҡлы ҡыҙыл ыуылдырыҡ бар, етмәһә, тоҙланған бәшмәк менән сервелат та табылған. Иң һуңғы анекдоттар һөйләнә, хатта кисә генә Мәскәүҙә һөйләнелгәндәрен дә ишетеп була. Мәҫәлән:

*Возносишь славу до небес,*
*Мать твою, КПСС...*

Һағая төштөм, туҡта, миңә соҡор ҡаҙалар түгелме?

Соцпровокаторҙың ике төрө була: беренселәре совет системаһын тәгәрәгәнсе маҡтарға тотона. (Ысынбарлыҡты белгән зат юҡты маҡтағанды ишетергә теләмәй, үҙенекен әйтеп һала. Ҡармаҡҡа эләгә.) Икенселәре – әсе ағыу, улар үҙе тәгәрәп киткәнсе совет системаһынан көлә, көлөп туйғас, әрләй (һәм күптәр ҡушыла, йылымға күмәкләп эләгә).

Арыу ғына һалып алғас, шул асыҡланды: беребеҙ ҙә Совет власына ҡаршы түгел. Иң мөһиме – Игорь минең менән һөйләшергә теләй. Автобазаға баш механик кәрәк, һәм ул мине тәҡдим иткән.

Иртәнсәк Игорь менән автобаза начальнигына барҙыҡ. Ә килер алдынан айныҡ баштан Игорь миңә кәлимә һүҙ әйтте: «Автобазала монтаж эштәре күп, етерлек аҡса ла бүленгән. «Өлөш» һинең ҡулда буласаҡ. Онотма, һин мине төп башыма ике тапҡыр ултырттың, өсөнсөһөндә аяу булмаясаҡ. Хәҙер һине яҡшы беләм. Миңә лә өлөш тейһен. Белдеңме?»

Аңлатып тораһы юҡ, бар эште шабашсылар башҡара, хаҡын да ала. Төҙөү өсөн, бигерәк тә монтаж эштәре өсөн, бик күп нәмә кәрәк. Табыу – иң ҡыйыны. Уйлап алдым да үҙемдекен әйттем. «Игорь! Ҡатнашыу кәрәк, ә ҡарап тороу – ҡатнашыу түгел. Ярар. Ҡарарбыҙ».

Начальникка килеп индек, әңгәмә оҙаҡ барманы.

– Һеҙгә баш механик вазифаһын тәҡдим итәбеҙ. – Ул бер һорау ҙа бирмәй әйтте.

– Беләһегеҙме, мин «Татра» автомобилдәрен бөтөнләй белмәйем. Ғөмүмән, автомобилист түгелмен. Нефть институтын тамамлағанмын.

– Был турала беләбеҙ, беҙгә һеҙ кәрәк, ә автомобиль белеүселәр үҙебеҙҙә етерлек. Беҙгә етәксе кәрәк.

Ахмаҡ ҡына был һүҙҙәрҙе иғтибарһыҙ ҡалдырыр. Ҡалғаны – хеҙмәт хаҡы. Бүлек начальнигы саҡырылды, ул шунда уҡ һанап бирҙе. Бындай хаҡ өсөн көс йәлләмәҫкә мөмкин. Ризамын. Автобазала 600 «Татра», бер нисә «Магирус» автобусы бар. Ә баш механик көн-төн «ЗИЛ»-да саба. Сабырға тейеш. Автобазаның төп эше – грунт ташыу. Үҙбушатҡыстарҙың яртыһы тик тора, ватыҡтар. План 600

машинаға бирелә. План үтәлә, хатта арттырып үтәлә. Мин дә беренсе көндән үк был эшкә йәлеп ителдем. Ватыҡ «Татра»нан прицеп яһайбыҙ. Бындай прицептың тағы бер исеме бар: «алиментщик». Шоферҙар – тырыш халыҡ, тәгәрәгәнсе эшләүселәр юҡ түгел. Өс эш көнөнә ике прицеп төҙөйбөҙ, бына шулай план үтәлә. Баш механик биналар, башҡа хужалыҡ өсөн дә яуаплы. Баш сире – йылытыу системаһы ҡот осҡос хәлдә. Бына ни өсөн мине саҡырғандар. Автобазаның йылытыу системаһын тулыһынса алыштырырға кәрәк. Вагондар ҡаласығында хәлдәр бигерәк насар. Кәрәкле нәмәләрҙең иҫәбе-һаны юҡ. Ике айҙа үтәргә! Мөмкин түгел, ә үтәргә кәрәк. Вагон-ҡаласыҡта бала-саға күп, коллектор әҙер түгел. Иң беренсе – монтажға ташландым, өс шабашсы бригада төҙөнөм. Килеүемә өс көн үткәс, теплотрасса төҙөлә башланы. Бына ошонда үҙемдең генә сығарған мәҡәлем бар: «Шофер «Татры» – тупес Татры». Бына миҫал. Торбаларға изоляция яһау өсөн минвата килтерҙем, биш кубометр самаһы. Дефицит, табыуы ауыр, дуҫтарҙың ярҙамы тейҙе. Һаҡларға ҡуштым, тик төндә яртыһын шоферҙар урланы. Мин кем өсөн тырышам? Шоферҙар уны башҡа урынға һата, сволочтар.

Их, минватаны вагон-ҡаласыҡта йәшәгән шофер урлаған, ике сабый балаһы бар. Тинтәк. Бисәһе эшләмәй. Иртүк кузовтарҙы ҡараным – эҙ һәр саҡ табыла. Эйе, иң күп урлашҡан халыҡ – шоферҙар, кузовтарында күп тапҡыр үҙемдең нәмәләрҙе таптым. Шоферҙарҙың байтағы блоктарҙа йәшәй. Блок – бик бәләкәй өй, урланған әйберҙәрҙән төҙөлә. Көлкөлө өй! Мин дә ҡараҡ. Юғары кимәлдәге. Мәҫәлән, ҡаҙан йүнәтер өсөн 51 миллиметрлы торбалар кәрәк, башҡа төр бармай. «Минмонтаж» базаһына килдем. Бар икән, бөгөн килтергәндәр. Һорап та тормай тейәй башлағайным, этле ҡарауыл килеп сыҡты.

– Теймәгеҙ, ашығыс эш өсөн килтерелгән.

– Беҙҙә авария, хәҙер үк кәрәк, башҡа табырҙай урын юҡ.

– Ә мине нишләтерҙәр?

– Ҡыуырҙар, ял итерһең.

Уф алла, әлеге ҡарауылсы күптән түгел монтажда бригадир ине, мин прораб булған саҡта. Яҡшы эшләне, немец, Омскиҙан, фамилияһы Вильмас. Мин уны шабашкаға ла алғыланым.

Нишләһен, үҙе «ярамай» ти, үҙе тейәшергә ярҙам итә. Һай, донъя! Ҡайҙа барабыҙ? Шулай йәшәнек, эшләнек, маҡтандыҡ. Һәр эштең икенсе яғы ла бар. Вильмас минең кем икәнемде яҡшы белә, шуға яуаплылыҡтан ҡурҡмай.

Икенсе дуҫҡа, участка начальнигына, инәм. Йөҙ миллиметрлы отводтар кәрәк, бөгөн кәрәк. Ул мин һорағандың яртыһын ғына бирә: «Бүтән бирә алмайым». Алып китәм, монтажға бирәм, ә ҡараңғыла тағы барам, икенсе яртыһын... урлап алам. Кем урлағанын дуҫым белә, ваҡыт үткәс, мине күрә. Ләкин ул турала ләм-мим. Башҡа эштәре муйындан. Бурыс үтәлде, теплотрассалар төҙөлдө, ҡаҙандар ремонтланды. Табылмаҫтай нәмәләр табылды. Үҙем баш механик, ә күп урында бригадир һымаҡ йүгерәм. Башҡаса рәт сыҡмай, һәр эш квалификация һорай. Ә вагон-ҡаласыҡтағы бригада кавказлыларҙан тора. Белдекһеҙҙәр, аҡса алырға теләктәре ҙур, ә эш рәтен белмәйҙәр. Ҡыуҙым. Эш бөткәс, биреләһе сумма күптәргә күп күренә. Күп түгел, мин һәр саҡ самаһын беләм. Әммә минең кеҫәгә ҡарарға теләүселәр ҙә бар. Һис шикһеҙ, миңә «бер өлөш» артыҡ тейеш. Бында соҡоноуҙың файҙаһы юҡ. Ҡырын ҡараусылар бар, тимәк. Һағайҙым. Начальник урынбаҫары Игорь туранан-тура «өлөш» талап итте. Имеш, мин һүҙемдә тормайым. «Һүҙ биреү» нисек булды һуң? Игорь, урынбаҫар булараҡ, әҙ-мәҙ ярҙам итергә тейеш ине. Итмәне. Әгәр күпмелер бирһәм?

Тимәк, мин күп алғанмын, ә уға әҙ биргәнмен. Ярҙамы булған осраҡта ла бирергә ярамай. Се ля ви!

Мин нисә роль үтәнем: проектсы, смета төҙөүсе, прораб, бригадир, тәьминәтсе, эш ҡабул итеүсе... Нарядтарын да төндәрен үҙем яҙҙым, тимәк, мин тағы – мастер, нормасы.

Тағы Игорь менән байрам итәбеҙ, мул өҫтәл артында зарланыу: «Һин тағы мине аҡсаһыҙ ҡалдырҙың. Тағы оттоң». Үҙенең «штаттан тыш» икәнлеген дә онотманы, имеш, мине тиҙ арала психушка көтә. Мин – бәйге кешеһе, урындағы һәм өҫтәге власты һүккеләнем, бигерәк тә Брежневты. Ә ҡалала Брежневты һүкмәгән кеше ҡалмағайны. Мәгәр Игорь менән йәнәш йәшәүҙе дауам иттек. Игорҙың ярҙамы менән мебель-фәлән алып, минең фатирҙы бөтәйттек.

***

Автобаза. Ҡыҙыҡлы урын, ҡыҙыҡлы халыҡ. Һәр бинаға йылы тигеҙ барһын өсөн иҫәп-хисап яһаным. Аккумуляторсы будкаһына ярты дюйм еткән, ә ул йыуан торба ҡуйҙыртҡан, будкаһында – мунса. Башҡалар ҙа унынса ҡылана. Эҫе һыу ҙа ҡыҫҡа юлды ярата, ә алыҫ биналарҙа һыуыҡтан торбалар шартланы. Тимәк, минең еңеүҙәр – аяҡ аҫтына. Автобаза начальнигы саҡыртып алды: «Запорожье ҡалаһынан кейәү килде, зинһар өсөн, монтажниктар бригадиры урынын бушат». Нисек ҡаршы киләһең, ул бит – битһеҙ Запорожье казагы. Бригадир – Салауаттан, эшләй белә: алдашып булмай, тураһын әйттем. Аңланы. Артабан начальниктың килендәре, тағы кейәүҙәре һәм башҡалары ағыла башланы. Барыһын да урынлаштырыу фарыз. Урынлаштырҙым. Әйтергә кәрәк, ҡайһылары арыу эшләй. Ун һигеҙ кешеһен алдым. Начальник тыумасаһына тауыш күтәреп булмай. Ярар, нишләйһең, Брежнев заманаһы.

...Начальник саҡыртып әйтте: «Баш энергетик урынын бушат – минең дуҫым килә». Баш энергетик – йәп-йәш сибиряк Сверкунов, шәп эшләй ине. Бер генә хатаһын да күрмәнем. Дуҫтары күп, кәрәкте үҙе тапты, эшләй белде. Уға әйтеү ҡыйын булды. Аңланы. Юлы алда уның, уңасаҡ.

Ошо көндән һуң барыһы менән дә тупаҫ һөйләшеүгә күстем. Автобаза минең өсөн ят урынға әүерелде. Начальник ҡатыны – кадрҙар бүлегендәге инспектор – шәхсән парикмахерына ла урын таптыра. Тағымы? Начальник Запорожье өлкәһенән, ҡасандыр был ҡалала Брежнев хакимлыҡ иткән. Минең әсе телемдә: «Брежнев – ваш хохол». Ә улар: «Хохол түгел, ул еврей».

– Ә кем белә? Ярар, – тинем, – ул – һеҙҙең тере анекдот, кем булһа ла барыбер.

Әйткәнемсә, автобаза грунт ташыу менән мәшғүл. Бында эшләмәһәм, белмәгән булыр инем. Галстук тағып эшләгән шоферҙар ҙа бар. Өр-яңы «Татра»ларҙа йәки «Магирус»тарҙа йөрөйҙәр. Бындайҙарҙы «һауа ташыусылар» тип йөрөтәләр. Уларҙың үҙ клиенттары бар, путевка менән ҡыйынлыҡтары тыумай. Шабашсы булараҡ, мин дә һауа ташыусылар менән йыш бәйләнештә булдым. Бына ҡыҙыҡ: «Татра» үҙбушатҡысында күп юлдар үттем, ә кузов һәр саҡ буш. «Татра» еңел йөрөй, еңел машина ролендә булғас, нишләһен? Бер мәл ҡалала «Татра» тураһында фильм төшөрөп алдылар. «Трасса» тип атала. Айырым автобаза тураһында фильм юҡ. Рәхәтләнеп сценарий яҙыр инем. Булманы.

## *Профессионал*

Һыуыҡ ҡыш мине ыңғайлыҡҡа өйрәтмәне. Ваҡиғаларға анализ яһап маташтыммы? Маташтым, хатта төндәр йоҡламай уйландым. Кешенең ирекле йәшәгеһе килә, буйһоноп йәшәгеһе килмәй. Техник инспекцияла эшләү – тулыһынса буйһоноп эшләү. Бына нисек, мин әле урындағы йәки өлкә гәзитенә ике-өс

юллыҡ та хәбәр биргәнем булманы, ә ҡултамға алдылар: ике шартты үтәргә тейешмен. Беренсеһе – ыңғай күренештәр тураһында ғына яҙырға. Икенсеһе – гонорарҙы үҙемә алмаҫҡа, ә Тыныслыҡ фондына бүләк итергә. Бына ошо тема менән РГТИ начальнигы бер кис башты бутаны. Эйе, быраулаусылар инспекторы гәзиткә ниҙер яҙған, гонорарын кеҫәһенә һалған. Әҙәм көлкөһө!

Инспекциянан китергә булдым, төньяҡ коэфициентын юғалтмаҫ өсөн перевод менән китеү мотлаҡ. Урын таптым, сәнәғәтте хеҙмәтләндереү базаһы начальнигы – башҡорт, яҡташ. База нефтселәрҙе хеҙмәтләндерә, иркен йәшәй, хеҙмәт хаҡы юғары. Тәьминәт бүлегенә өлкән инженер кәрәк, ти. Базанан ризалыҡ булды, инспекциянан хеҙмәт кенәгәмде тейешле яҙыу менән алып ҡайттым. Иртәгәһенә эшкә инеүҙе рәсмиләштереү маҡсаты менән базаға килдем. Һәм... көлкөлө ситуацияға юлыҡтым.

Бындай эш урыны ҡала номенклатураһы түгел, тимәк, минең урынлашҡанды бер кем дә һиҙмәйәсәк. Өлкән инженер урынында мин үҙемде күрһәтә аласаҡмын, сөнки нефть институтын тамамлап, байтаҡ тәжрибә туплағанмын.

Юғары хаҡ алыусыға, тәбиғи, шабаш эштәренең кәрәге юҡ. Ә ни булды? Бына ҡыҙыҡ: күсеү тураһындағы ҡағыҙҙа ике начальниктың да ҡултамғаһы бар. Инспекция китеүемә риза, база килеүҙе хуплай: база начальнигы кабинетында, үҙенең алдында ултырам. Ул шылтыраған телефон трубкаһын алды. Башҡорт – ҡайҙа булһа ла башҡорт, ул трубканы ҡолағына ҡыҫмай тыңлай. Ҡала комитетында минең бында эшкә урынлашыу хәстәрен белгәндәр. Мине эшкә алыу – ҙур хәрәм, начальник гонаһ тоҡсайы буласаҡ. Трубка тотҡан начальник миңә һораулы ҡарашын ташлай, ләм-мим әйтмәй. Мин дә һүҙ әйтеп тормай сығып киттем. Ни бысағыма! Тимәк, минең ҡаланан китеүҙе теләйҙәр. Ысынлап та, мин был ҡалаға бер генә маҡсат менән килгәйнем: «Жигули» алырлыҡ аҡса йыйырға. Үтәлде. «Волга»һын да алып була. Бына ике бүлмәле фатирҙы нисек ташлап китергә? Йәшәү шарттарын бына тигән кимәлгә ҡуйғанмын. Ә китеү – мотлаҡ.

Ярар. Китермен, ишегегеҙҙе «шап» иттереп япмайынса китеүҙәр юҡ, мине бәйгегә үҙегеҙ саҡырҙығыҙ, ишеттем. Тпру! Ашыҡмағыҙ. Мин хәҙер шабашник-профессионал буласаҡмын. Миңә юғары вазифа эләкмәйме? Күреп тороғоҙ: мин Арзамат түгел, мин – эш оҫтаһы, тик шуны белегеҙ: партияғыҙҙың да кәрәге юҡ. Хеҙмәт кенәгәһен авиаберекмәгә бирҙем, бында баһам ҙур, мине beләләр. Эйе, аэропорт – минең вотчина, тимәк, эш урыны. Ә инспекцияға партвзнос түләү өсөн генә киләм. Сәсрәргә әҙерҙәр: «Ниңә учеттан төшмәйһең, эшләгән урынында учетҡа тор. Зинһар өсөн».

Минең яуап әҙер: «Миңә һеҙҙә оҡшай. Һеҙҙә – ысын коммунистар». Взнос алыуҙан баш тарттылар. Ярар, килеү бөттө. Кәрәгегеҙ юҡ. Горком теңкәгә тейә: «Беҙҙең ойошманан китеүең мотлаҡ». Мин: «Көтөп тороғоҙ». Оҙаҡ көтөргә тура килмәне, өйгә килеп саҡырҙылар. Барырға булдым. Ҡыҙыҡ бит. Минең ҡайҙа урынлашыуҙы органдарға кем еткергән? Начальник, фамилияһы Шпилевой. Ә минеңсә, – шырау. Йыйылышта өндәшмәй ултыра. Ниҙән ҡурҡа? Аһ, внештатник! Мине фашлап, һелкеп алырға уйлағандар. Инспекцияла партия ағзаһы булмаған зат юҡ. Һәр береһе һүҙ алып, мине тәнҡитләргә тырыша, туҡта, үҙҙәренең аныҡ, берҙәм позициялары юҡ. Эйе, мин «жадюга», шабаш эштәрендәге хаҡтан взнос түләмәгәнмен. Партияны, бахырҡайҙы, өлөшһөҙ ҡалдырғанмын. Партияның кеҫәһе ҙур, ҡайҙа ҡараның? Әгәр партия, министрлыҡ штатында була тороп, шабаш менән шөғөл иткәнемде белһә, үҙ сафында ҡалдырыр инеме? Шулай шул, бер балыҡ башы. Ярар, бынығын әйтмәнем.

Йыйылыш башланғас, миңә һүҙ бирҙеләр. Былай  башланым: «Мин алты йәштән үҙ тамағымды үҙем туйҙыра башланым. Үҙемде үҙем тәрбиәләнем…» Быныһы дөрөҫ. Туктап ҡалдым. Мин партияға йәбешеп ятаммы? Юҡ. Минән һүҙҙең дауамын һорайҙар. Кәрәкмәй. Сценарий төҙөлгән. Булһын шулай. Шулай булды.

– Партияла – егерме йыл, – тинем. – «Теләмәйем»  тип әйтеү ҡурҡыныс, Андропов хатын йыйылыштың беренсе көн тәртибендә уҡынылар. Етмәһә, мин мәғлүмәткә эйә... Беренсе секретарь үҙе әйткән: «Будем исключать». Әйтергә кәрәк, беренсе  секретарь өсөн мин – тос табыш. Андропов «чистка»һы башланды, ә эште нисек күрһәтергә? Һәй, тос табыш. Партия түрәләре түләй ҙә белә. Берәүһе аулаҡта ғына әйтте: «Һин үҙ яғыңа ҡайт, партия үҙеңдә ҡалдырыр, Мәскәүгә яҙырһың». Кәрәкмәй. Шулай ҙа ҡала комитетында асыҡ ҡалыпҡа әҙер инем. Факттар етерлек. Эйе, «беренсе» менән эш сәғәттәрендә бергә эскән саҡтар ҙа булғыланы. Барырға! Бына һиңә, өйҙән сыҡтым, ҡаршыма Игорь килә, кесәһендә – «Столичная».

– Барма, йөрөмә, әйҙә эсәбеҙ. Һиңә ҡаршы әҙерлек ҙур.

Бармаһаң – еңеллек. Аңлашыла: иҫереккә һәр саҡ еңел. Эстек, тағы гастрономға йөрөп килдек.

– Эх, ты, филер, – тинем Игорға.

– А что поделаешь? Се ля ви.

Һөҙөмтәлә – өс яҡ, өсөһө лә –  еңеүсе! Партия түрәһе шат: Андроповса эш итә. Игорь шат: гүйә, ат өҫтөндә. Мин дә шат: тауыш-тынһыҙ ҡотолдом.

Бер аҙнанан төндә ишек шаҡынылар. Ишекте  асһам, күрәм: майор, милиция майоры. Беләм – внештатник.

– Партбилетыңды алырға килдем.

Оятһыҙ партия! Егерме йыл взнос түләнем, иҫтәлеккә ҡыҙыл билетты ла ҡалдырырға теләмәй. Юҡ, мин «жадюга» түгел, партия үҙе әҙәм ышанмаҫлыҡ «жадюга». Билетты Төркмәнстандың Мары ҡалаһында, тантаналы рәүештә подполковник Панков ҡулыма тотторғайны. Әле майор Кузнецов тантана өсөн килмәгән. Бирҙем. Уға ни әйтәһең, ябай филер, погонлы майор. Бына шулай шабашсы-профессионал  булып алдым.

Шабашникты һүрәтләү ҡыйын, сөнки уның диапозоны ышанмаҫлыҡ киң. Ул хужалыҡтың беренсе түрәһе менән  типә-тиң  һүҙ алып бара ала. Шул уҡ шабашник ябай ғына эшсегә лә  ялынып килә ала. Шабашниктарҙың йоҡа боҙ өҫтөндә йөрөгәндәре етерлек, бер кемгә лә зыянһыҙ, тауыш-тынһыҙ эшләгәндәре лә күп.

Шабашник – кәрәк саҡта дипломат. Һүҙе үтмәгәнде уңыш көтмәй. Шабашник – тупаҫлыҡ өлгөһө, сөнки ҡаршылыҡһыҙ эштәр һирәк. Ҡаршылыҡты тауыш-тынһыҙ еңеп булмай. Шабашник – табыусы. Кәрәкле нәмәне табыу өсөн бер-ике сифат ҡына әҙ. Тимәк, шабашник – күп ҡырлы зат. Ҡайһы бер түрәләр шабашникты эш өсөн генә саҡырмай, ә үҙе материал таба алмағаны өсөн саҡыра. Шабашник таба белә. Тимәк, шабашник – бур.  Бер генә төр эш үтәгән шабашниктарҙы беләм. Мәҫәлән, ике мәскәүле һәр йәйҙе киләләр, резервуарҙар буяйҙар. Тиҙ эшләргә өйрәнгәндәр. Йәй алған аҡсалары йыл буйына етә. Минеңсә, ысын шабашник барыһын да эшләй белергә тейеш. Үҙем былдай бейеклеккә менә алдым, тим. Айырым хужалыҡ начальнигы дәрәжәһендә һөйләшеүгә ирештем. Күптәр  мине етәксе һымаҡ ҡабул итте.

Һәр эшкә  үлсәүле ҡараш менән килдем, ике кеше үтерлек эшкә бер ҡасан да өсәү йәбешмәне. Шабашник урлашырға мәжбүр. Бына мин бер километр оҙонлоғондағы теплотрасса һалырға договор төҙөштөм. 900 метрын һалдым. Йөҙ

метрын һалыу өсөн торба табып бирергә теләмәйҙәр. Мәкер. Тулы трассаны ғына тапшырып була. Урлап килтерҙем – ҡуйҙыҡ, аҡсаһын алдыҡ.

Бына миңә хәҙер үк кислород кәрәк. Авиаберекмәнең тәьминәт бүлеге начальнигы ике баллон кислород килтереп бушатҡан. Бирмәй, етмәһә, мыҫҡыллай. Мин үҙемдең «Татра» шоферына машинаны әлеге ике баллон ятҡан урынға арты менән ҡуйырға, газовать итергә ҡушам. Бүлек начальнигы минең «Татра» алдында тәмәке тартып, дуҫы менән әңгәмәләшеп тора. Ә мин бер тулы баллонды кузовҡа бәрәм, бушын, кузовҡа менеп, аҫҡа ташлайым. Был ике минутта эшләнә – һыҙабыҙ. Икенсе көндө бүлек начальнигы аэропорт яңғыратып аҡыра, ә мин көләм. Көлмәй ни, һин дә көл.

Йәнә тағы бик алама һүҙ: шабашник эсә белергә тейеш. Эсмәгән шабашник бармы икән? Эскегә һалышҡан төҙөүселәр, инженерҙар һәм начальниктар шабашник булып китергә мәжбүр. Ә эсмәгән шабашник эскесе булырға мәжбүр. Алкоголь һәм шабашка – ирле-ҡатынлы пар, ә ҡыҫҡа ғүмер – уларҙың балаһы. Эскән шабашниктың ғүмере ҡыҫҡа. Был төбәктәге эскесе-шабашсылар тураһында ҡалын китап яҙып булыр ине. Эшләй алмаған шабашник һуңғы һуҡмағына төшә, ә кем уға иғтибар итһен? Арыған ат…

Бер генә төҙөлөш ойошмаһы ла шабашһыҙ эш алып бара алмай. Бына минең фатирға яҡын урынлашҡан 2-се төҙөлөш идаралығы. Профиле – бетон йә тимербетон эштәре, юлдар өҫтөнә лә бетон плита һалына. Идаралыҡ начальнигы – Луценко, ҡалала һиҙҙермәй генә күренә башланы. Ҡайҙан килгәнен белеүсе юҡ. «Идаралыҡ бер кеше өсөн генә, Луценко өсөн эшләй»,– тигән һүҙ таралды. Штатында бер генә эшсе лә юҡ, барыһы ла шабашник. Контора штаты иҫ китерлек ябай. Прорабтар, мастерҙар юҡ, сөнки арыу шабашнигың теләһә ниндәй прорабты уҙҙыра. Шабашник эшһеҙ тора алмай, алға китеү юлын һәр саҡ таба. Бына ни өсөн план үтәлеше буйынса Луценко барыһынан да алда. Бында хеҙмәт геройы ла, депутат та, социалистик ярыш маяғы ла юҡ. Луценко ҡалала күренергә ҡарар итте, футбол командаһы төҙөнө. Эйе, Украинала футбол уйнарға ятатыусылар күп. Луценконы әлеге команда уйнаған стадионда күрҙем.

Тиҙҙән был заттың кем икәнлеге ишетелде: өйләнеп, бисәһенең фамилияһын алған икән, үҙе Одесса милләтенән, үҙ фамилияһы үҙенә оҡшамаған.

Бетон кәсебе аҡсалы, етмәһә, был эште механизациялау еңел. Иҫәп-хисабы ла еңел. Оператив кәңәшмәләрҙә Луценкоға иғтибар менән ҡарап ултырҙым: ҡайҙан шул тиклем тәкәбберлек?

Ҡалала торлаҡ етешмәй, бына тигән белгестәр вагондарҙа йәшәй. Ә Луценко һөйәркәләренә бер нисә бүлмәле фатир бүләк итә, улары, өйҙә ултырып, бүлек начальнигы окладын алып ята. Был факттар – айсбергтың өҫтө генә. Беҙ ҡапсыҡта ятмай, һүҙ артынан – ревизия, артабан – енәйәт эше. Коррупция. Бына нисек? Луценко күренмәй килде, күренмәй китте. Һораштым. Хәбәре килгән: Карелияла шул уҡ эштә икән. Мәскәүме, әллә Одессамы был донъяның хужаһы? Белмәйем. Был ҡалала одесситтар хужа, быныһы миңә билгеле.

Был йәһәттән минең үҙ теориям бар. Быныһы «Теория большой суммы» тип атала. Әгәр миллион һум аҡса кеҫәгә һалынған икән, яуаплылыҡтан ҡотолоу юлы бар. Аҡса менән әллә кемде һатып алырға мөмкин. Ә бына әҙ-мәҙ урлаған түрә ҡотола алмай.

Әйтәйек, 25 мең һум кеҫәгә һалынған, ә фашланыу суд эскәмйәһенә алып килә. 25 меңгә бер кемде лә һатып алып булмай.

Ришүәт алыусылар ваҡ-төйәккә ҡул һуҙмай. Биргәс – бир, бирмәһәң – бар, ултыр. Ултыралар.

# Эш эҙләйем...

Тағы эш эҙләйем, тағы аптырайым: ҡайҙа ғына барма, кемде генә тыңлама, мине бына тигән белгес итеп һанайҙар. Юғары белемем, тәжрибәм бар, тик бер генә хужалыҡта ла һыйышып йәшәй алмайым.

Барыһын да аңлайым. Аңлау ғына етмәй, мин ысынбарлыҡты ҡапшап, һәрмәп ҡарарға теләйем. Системаның төп механизмы ҡайҙа ята? Әлегә, формаль рәүештә, мин – автобазаның баш механигы, ә күңелем ҡайҙалыр осоп йөрөй. Миңә быныһы кәрәк түгел, әлегә кәрәкмәй, ә күңелемә оҡшаған эш кәрәк. Буровойҙар идаралығы мине гараж начальнигы итеп алырға риза. Оклады бына тигән, бәрелә-һуғыла торған вазифа түгел, тыныс урын. Бынан тыш, буровиктар эшенә күҙ һалып ҡалғы килә, ни тиһәң дә, матбуғат бөтә иғтибарын быраулаусыларға бирә.

Әммә хәл иткес урында техника хәүефһеҙлеге инженеры тәгәрмәскә таяҡ тыҡты. Үҙенең кем икәнлеген бик тиҙ асып һалды был мөртәт. Бындайҙарҙың ысын йөҙөн бик тиҙ асам, ә был затҡа ике-өс минут етте. Штаттан тыш гэбэшник, егерме процент ала, бер тамсы файҙаһы булмаған өсөн. Иң мәҙәге: ул үҙенең кем икәнлеген йәшерә белмәй. Йәшерә белмәгәс, был мөртәттең ник кәрәге бар? Һүҙе менән әйтә алмағанды йөҙө менән әйтә, күрмәгәнгә ҡабат әйтә, күп тапҡырҙар әйтергә әҙер. Бына бит бәхетһеҙ, уға 1937 йылдарҙа НКВД-ла ултырыу, һой, килешер ине.

Шуныһы үкенесле: ул ҡайҙан белһен – мин бер-ике фраза менән тиҫкәре тунын әйләндереп һалам. Тинтәк, ҡайһы бер һорауға ул яуапһыҙ ҡалырға тейеш, ә ул артығын һөйләп ташлай. Кем был затты килтереп ҡуйған? Дәүләт именлеге асыҡ ауыҙҙар ҡулында. Тфү! Мин был кешене һис шикһеҙ үтеп китә алыр инем. Кәрәге юҡ... Ҡыҙыҡ, тинтәк менән ике айҙан һуң осраштыҡ. Эйе, мин – РТТИ инспекторы, ә буровойҙа – авария. Янғын сыҡҡан, ике ҡатындың ҡулдары яраланған. Беҙ тикшерергә килдек. Котельныйҙа хеҙмәт шарттары насар. Теге тинтәк әлеге ике бисәне ғәйепләй, һәм мин уға ерәнеп ҡараным. Һәр кем үҙ эше менән булһа, нисек һәйбәт йәшәр инек. Һайыҫҡан үҙ ағасында ултырһын ине.

Әйтәгүр, юғары хаҡ түләгән хужалыҡтарға минең өсөн юл бикләнгән. Әйтеүсе табылды: ҡалала яңы аҙыҡ етештереү комбинаты төҙөләсәк. Колбаса, икмәк... Төҙөү өсөн директор кәрәк. Әһә, мине алалар, шарты: КПСС-тың ҡала комитетынан фатиха кәрәк. Ҡала комитетына индем, мин – партия ағзаһы. Бик оҙаҡ телефон аша асыҡлау башланды. Ә мин һаҡбай түгел, аңланым: гэбэшниктар менән һөйләшәләр. Игорь дуҫ дөрөҫ әйткән: «Картотекаңда аҡ урын ҡалмаған». Хәтеремдә: мин был ҡалаға килгәндә чекистарҙың күбеһе Башҡортостан егеттәре ине. Һәр кем үҙ эше менән мәшғүл булды, улар үҙ бурысын күренмәй үтәй белде. Ә хәҙер кемдәр? Украинанан килгәндәр байтаҡ. Үҙҙәрен күрһәтер өсөн ни генә ҡыланмайҙар! Ваҡыт үтә, ә беҙгә файҙа юҡ. Файҙа юҡ, ризалыҡ юҡ. Бүлек мөдире кәңәш бирә: «Һин Төмәнгә бар, обком ҡараһын». Киттем. Шул уҡ көндә өлкәнең аҙыҡ сәнәғәте мөдиренә үткәреүҙәрен һорайым. Начальник – ҡатын кеше. Мине иғтибар менән тыңланы, әлеге лә баяғы телефонға тотондо. Бына был ҡатын алдашып торманы: «Һеҙҙең кандидатураны КГБ хупламай».

Эйе, ул миңә үҙ вариантын әйтте, бер баҫҡысҡа түбәнерәк урын тәҡдим итте. Тора-бара, бер йылдан, беренсе лә булырһың, тине. Ҡайһы ваҡыт мин үҙемде аңламайым: бер минут эсендә комбинатҡа ҡыҙыҡһыныуым бөттө, кәрәкмәй, тинем. Бик ҡыҙыҡлы миҫал бар, был турала ҡалала белмәгән кеше юҡ.

Ҡалалағы байлыҡ һәм абруйҙы иҫәпләһәң, бишенсе урындағы зат – иң ҙур ОРС начальнигы – йөк бушатыусы булып урынлашҡан. Хәҙер «беренсе» лә уға эшләпәһен һалып инә.

Шулай, обком коридорын бер сәғәт тапаным, бер генә комбинатҡа ла шаҡырға теләгем тыуманы. Ҡалалағы тау-техника инспекцияһына килдем. Уйымса, бында минең менән һөйләшергә лә теләмәйәсәктәр. Ни тиһәң дә, инспекция сер тотоу, мәғлүмәткә эйә булыу яғынан прокуратуранан да өҫтөнөрәк. Бында нефтселәрҙең һәр хатаһы билгеле. Инспекция абруйлы, тәьҫирле... Начальник мине ихтирам менән ҡабул итте. Һөйләшеү оҙаҡ барҙы, юҡ, һөйләшеү түгел, мин һөйләнем, ул яҙҙы. Иң ҡыҙығы: күҙгә ҡараманы. Котлонадзор инспекторы итеп эшкә алды. Тешем-тырнағым менән йәбешеп ятманым, сөнки бында күңелемә ярашлы бер генә кеше лә булманы.

Барыһына ла иғтибар иттем, һөйләшеүҙәргә анализ яһаным. Һөҙөмтә – бындағы ике кеше... штаттан тыш... Береһе – начальник. Аҙаҡ белдем: яңылышмағанмын. Эйе, әгәр мин «внештатник» булһам, бер кемгә лә һиҙҙермәй эшләй алыр инем. Ысынлап. Мине эшкә алыусы начальник бер кемгә лә шылтыратманы. Бик оҙаҡ һорашты. Тимәк, ул үҙ эшен белә, утәй. Икенсеһе – һүҙсән, бындайҙарҙы мин тиҙ шәйләйем. Начальник минең белгес икәнлегемде яҡшы белә, сөнки мин өлкән инспекторға үҙем бер нисә ҡаҙан һынап күрһәттем. 15 кешенән торған кочегарҙар төркөмөн бер үҙем уҡытып, шул уҡ инспекторға һынау бирергә килтерҙем. Барыһы ла ыңғай үтте.

Эшләй башланым. Хата яһаным. Фатирыма ҡунаҡҡа килергә теләүселәр булды. Саҡырҙым. Миндә – бына тигән сит ил мебеле, етеш тормош. Береһенә лә оҡшаманы. Насар һүҙҙәр китте, күҙ-караштар үҙгәрҙе. Эйе шул, инспектор окладына йырлап йәшәп булмай, булмағас, дөрөҫөн һөйләп алырға ла тура килде. Ярҙамы тейми. Мин насар булып ҡалдым.

1976 йылдың һыуыҡ ҡышы, һауа температураһы 60-тан да түбәнгә төшкән көндәр булды.

Баш осомда болоттар ҡуйырҙы. Хронология: партия йыйылыштарындағы сығыштар, ҡала комитетын тәнҡитләү, «Мегионгазстрой» тресын тәртипкә саҡырыу... Николай Федорыч үҙе миңә әйтеп һалды: «Беҙ һине ун йылға һөрәсәкбеҙ, бында беҙҙекеләр күп». Был эштең кульминацияһы булды.

Етәксем ГПЗ-1 заводын файҙаланыуға тапшырған мәлдә, бер юлы ике отпускыһын алып, үҙе урынына мине ҡалдырып китте: 13 хужалыҡ өсөн бер үҙем яуаплы булдым. Монтаж эштәре һуңланы, сөнки төҙөүселәр срокты һуҙҙы. Генподрядсы монтажниктарҙы ғәйепләп маташты. Беҙ ҙә һүҙһеҙ ҡалманыҡ. Мин өс министрға адресланған телеграммаға ҡултамға ҡуйҙым: «Миннефтепром» – Токаревҡа, «Минмонтажспецстрой» – Бакинға. «Һабантуй» булды. Бер юлы өс министрлыҡтан комиссия килде. Ғәҙәттән тыш ғауға ҡупты. Минең гонаһтарҙы эҙләү башланды. Эйе, аэропорттағы шабаш эштәрен ныҡлап тикшерҙеләр. Ярай әле, иҫәп-хисап, яҙыу-һыҙыу эштәрендә миңә бәйләнеүе ҡыйын.

60 градус һыуыҡлыҡта тын алыуы ауыр. Бына ошондай көндә нефтселәр ОРС-ы яна. Бында янғындар йыш булып тора, сөнки электр менән йылынырға теләүселәр күбәйә. Был янғын йылыныу өсөн түгел, ә «йылынғандар» өсөн. Ни өсөн ОРС оҙаҡ янды? Имеш, бындай көндә ут һүндереүе ҡыйын. Ниңә ҡиммәтле тауарҙар склады янды? Ни өсөн склад ҡарауылсыһы булмаған көндө янды? Ни өсөн аҙаҡ бер мөйөшө яна биргән одеялдар, ут тейә биргән юрғандар бушлай тиерлек һатылды? Ә тундар, мантолар, ондатра, пыжик шапкалар һатылманы? Беләбеҙ. Ярар, һүҙ башындағы ОРС тураһында. Байрамда һый кәрәк. Дефицит

мәлендә барыһын да нисек тапмаҡ кәрәк? Етәксе «Мегионгазстрой» менән килешкән, ОРС-3 беҙгә ҡәҙер-хөрмәт продукттары бирә. Алырға теләүсе бар, складҡа барырға теләүсе юҡ. Ә мин әҙер. Бына ниндәй ул – ОРС. Күрмәгәнде күрҙем. Ни өсөн магазин кәштәләрендә һөрһөп бөткән емеш-еләк, йәшелсә ята? Өйөмдәр өҫтөнән йәйәү йөрөүселәр байтаҡ. Ҡайһы берәүҙәр алма, грушаны итектәре менән соҡоп ала. Беҙ ҙә күп нәмә алдыҡ: емеш-еләк, йәшелсә, ит, консервалар, хатта кофе, коньяк, шампан шарабы... тағы әллә ниҙәр...

Һөҙөмтәлә инспекция тулыһынса эшләнмәгән объектты тапшырыу актына ҡул ҡуя. Хаҡы бына ошолай түләнә.

Оҡшамаған, килешмәгән кейемде оҙаҡ киймәйҙәр – инспекциянан киттем.

# Һулаҡай көнө

Ғәҙәттәге иртә. Әллә ни һыуыҡ түгел, ҡырҡ градус самаһы. Көндөҙ егерме-утыҙға ла менеүе мөмкин.

Йәйәүләп аэропортҡа барҙым, кәрәкле кешеләр менән һөйләшеп өлгөрҙөм. Иң мөһиме, бөгөн аҡса бирәләр. Тимәк, бөгөн көн тәртибе ҡырҡа үҙгәрәсәк. Бына шәхси «Татра» килеп етте – үҙбушатҡыс еңел машина ролендә. Һәр кемгә быңдай ҡәҙер-хөрмәт тәтемәй, миңә ҡалһа, әлегә аллаға шөкөр, транспорт эҙләп интеккән юҡ.

Кассирша аҡса һанап бирҙе: 752 һум. Үҙ эшемдән 300 һум алам. Әгәр «Жигули» хаҡы алты мең икән... Минең хәлдәр насар түгел.

Аҡса кеҫәлә, шулай ҙа иҫәп-хисапты ла оноторға ярамай. Күптәргә бурыслымын, үткән айҙа авиатехник базаһында вентиляция системаһына монтаж яһаным. Бындай эште үтәү өсөн күп нәмә кәрәк: болт-гайкалар, электродтар, ҡулланмалар һ.б. – һанап бөтөрлөк түгел. Бындай нәмәләр магазинда һатылмай, дуҫтарҙан алам. Дуҫтар күп.

Йәнә бер хатам: өйгә инеп, аҡсаны ҡалдырып сыҡманым, өсөнсө микрорайон гастрономына килдем. Ҡайҙа барма – араҡыға сират, ә был магазинда эшләгән директор урынбаҫары – таныш бисә. Минең портфелгә, баҫтырып ҡуйһаң, ун биш «Столичная» һыя. Үҙемдең техник спонсорҙарҙы һыйларға саптым, тәүҙә промвентиляция цехына килдем. Араҡы алған магазин минең балкон аҫтында, тип әйтергә мөмкин, өйгә инеп, аҡсаны ҡалдырырға кәрәк булған. Икенсе хата. Төшкө ашҡа тиклем ун биш шешәне «тараттым». Һәр «нөктә»нең үҙ йолаһы – йөҙ грамм эсмәйенсә үҙ юлың менән китеп булмай. Алынған күстәнәс барыһына ла етмәне, тағы тулы портфель алдым, тағы өйгә аҡса ҡалдырып сығырға оноттом. Башҡа «нөктә»ләрҙә лә йөҙәр грамм һуҡтым. Ҡышҡы көн ҡыҫҡа, кис булды. Мине бригадирҙар мәжлесенә саҡыралар. Быныһы ла йола, айлыҡ эш хаҡы алынған көн шабашсы бригадирҙар РСУ бүлмәһендә йыйылып, прораб, мастерҙарҙы һыйлайҙар.

Минһеҙ булмай. «Татра»ны үҙ базаһына ебәрҙем. Авиаторҙар гаражының икенсе ҡатына менгәндә мәжлес ҡыҙғайны. Анекдоттарҙы йырҙар алыштырған мәл. Мине көткәндәр, тост әйтеп берҙе эсерҙеләр. Өҫтәлдәрендә араҡы бөткән, барыһы ла миңә ҡарай. Минең «еңел» машинам юҡ, микрорайонға барып булмай. Уның ҡарауы, кафе эшләй, киттем, килтерҙем. Рәсми рәүештә «лайнер»ҙа араҡы һатылмай. Ә минең өсөн бар.

Эйе, мине маҡтап та алдылар. Аңлашыла: был – беренсе сигнал. Ни өсөн маҡтайҙар? Мин иң бейек планканы алғанмын, йәғни иң күп аҡса – миндә. Бына минең дуҫ Шатохин аяғына баҫты. Күкрәген киреп, әйтер һүҙен әйтте. Имеш, һәр айҙа мин уны, Волгоград мужигын, артта ҡалдырам. Ул һәр ваҡыт икенсе:

тимәк, мине туҡмарға ваҡыт. Быныһы – икенсе сигнал. Өндәшмәй булдыра алманым, әйттем:

– Мин һеҙҙең менән генә шабашник, башҡа урында мин бына тигән инженер!

Кемгәлер оҡшаманы, ә Шатохин ҡайнап сыҡты, ташланырға уйы бар ине – тоттолар.

Өсөнсө сигналды көтөп торманым, ҡайтырға теләнем. Автобус туҡталышына сыҡтым. Бында автобустар һирәк йөрөй, күберәген попутка алып китә. Ана, ике зат һуғыша йәки һуғышыу күренеше яһай, миндә эштәре юҡ.

Ҡапыл минең эргәмдә бәләкәй ПАЗ автобусы тормоз тотто. Теге ике бәндә ҡайҙалыр юғалды, ҡастылар. Автобустан өсәү сыҡты, икәүһе мине ике яҡтан тотоп, автобусҡа алып инделәр. Тиҙ генә тентеү яһап, тун кеҫәһендәге «Столичная» шешәһен ултыра торған урынға һалдылар. Мине, шофер артынан иҫәпләгәндә, өсөнсө урынға ултырттылар, шофер артындағы урынға – береһе, икенсеһе шофер менән йәнәш. Киттек. Ниңәлер урау юлдар менән йөрөйҙәр, нимә эҙләйҙәр?  Мин космос тиҙлеге менән айный башланым. Бик йыш аэровокзал алдына  күңел өшөткөс ҡағыҙ элеп ҡуялар: үлек фотографияһы, туңған килеш тапҡандар. Туған-тыумасаһын эҙләйҙәр икән. Күп тапҡыр ишеттем: получка көндәрендә «команда» һунарға сыға, аҡсалы кешене аңдып, көтөп, кеше күрмәгән урында тотоп алып китәләр. Аулаҡ урынға килтереп, аҡсаһын алалар, үлтерәләр, ҡарға күмеп ҡасалар. Аҡсаһы булмағанды үлтермәйҙәр, типкеләп кенә китәләр.

Бына шулай, был өс зат мине һәрмәкләү өсөн аулаҡ урын эҙләйҙәр. Ниһайәт, автобус ике ҡатлы бина алдында туҡтаны. Шофер менән йәнәш ултырған минең алда ултырған иптәшенә:

– Һин уны ҡара, хәҙер машинаны алыштырабыҙ ҙа икенсе урынға китәбеҙ.

Мин, имеш, йоҡлайым, үҙем тәҙрәгә бармаҡ осо менән ҡарарлыҡ тишек иретеп алғанмын. Икәүһе автобустан төшөп, бинаға йүнәлде,  ишекте асып, бинаға инделәр. Мин бер тауышһыҙ урынымдан күтәрелдем, алдымдағы урындан «Столичная»ны һул ҡулым менән алдым. Ә был зат иғтибарһыҙ. Бар көсөмә бутылканың төп яғы менән һулаҡай ҡулым менән  танауына «яманым» да ике ҡулым менән  ПАЗ-иктың ишеген ике яҡҡа ҡайырып астым. Шулай ҙа теге арттан килеп тотондо, шарф, ике  күн бейәләй ҡалды. Аяҡта бийма, өҫтөмдә тун,  бүркем яһалма күндән. Бар көсөмдө йыйып, тайғаға йүгерҙем. Ҡырҡ градус һыуыҡта өшөмәй ҡара! Әҙ генә ел. Артымдан ҡыуыусы юҡ. Бар маҡсат – һыуыҡты еңеү. Аңлайым: туҡтарға ярамай, ҡулдарым яна башланы, биттәрем, ҡолаҡтарым туңды. «Автобуста һуғышырға кәрәк булған», – тигән уй ҙа  килде.

Йүгерәм, хәлем бөттө, ә ҡар тәрән, тубыҡтан юғары урындар бар. Туңып үлеүселәр күп. Ҡайҙа йүгерәм? Ниҙер күрәм. Әһә, ут түгелме? Ут! Эйе, торба башынан әҙ-мәҙ осҡондар сыға. Эйе, дөрөҫ янмаған котельныйҙар була: ҡором өҫтә яна, торба осонда ут күренергә мөмкин. Тимәк, котельный! Торба яғына ҡарап йүгерҙем. Уф, килеп еттем! Ишек бикле түгел, котельныйға килеп индем. Бында бер генә ҡатын, күрәм: татар йә башҡорт. Ҡотолдом түгелме?

– Мине ҡыумағыҙ, хәлем бөттө.

Ағартылған котел стенаһына арҡамды терәп яттым, иҙәнгә. Шунда уҡ йоҡоға киттем.

– Абзый, тороғоҙ, сәғәт алты тула,  начальник килһә, миңә һеҙҙең өсөн эләгер.

Уянмай булмай, тороп ултырҙым, хәл мөшкөл генә түгел, ныҡ хөрт.

– Миңә һыу бирһәгеҙсе.

Бына быныһы – нисәнсе хата… Минең хәлдә һыуыҡ һыу эсеү – ҙур бәлә. Быяла банка менән һыу килтереп бирҙе, бөткәнсе эстем. Һыуыҡ һыу шунда уҡ

быуындарыма төштө. Ҡуҙғалырлыҡ та хәлем юҡ. Бар көсөмдө йыйып аяҡҡа баҫтым, ҡапҡанан сығыу ҡыйын эш булды. Кешеләр ҡайһы яҡҡа атлай? Был ҡалала иртәнге ашты ла күпселек ашханала ашай. Әкренләп ашханаға барып еттем. Тун кеҫәһендә – әлеге асылмаған «Столичная» шешәһе.

Быныһын да һөйләү фарыз. Ни өсөн, шабашник буларак, мин алкоголик булманым? Һәр саҡ үҙ һуҡмағымдан атланым. Иртәнсәк эсеп баш төҙәткән зат ғәҙәти алкоголик була. Баш төҙәтеүҙән тулыһынса баш тарттым, сөнки баш төҙәтеү – эскенең дауамы. Эскелек – кәмһетелгән психология өсөн байрам, ә кеше организмы өсөн бәлә. Баш төҙәткәндең бәләһе үҫә бирә. Туҡтарға кәрәк. Ә нисек? Башың ауырта икән, иртә тороу мотлаҡ. Күберәк шыйыҡса эсергә: сәй, кофе, булһа – рассол, фәлән-төгән. Дәртең килһә, әҙ-мәҙ көс түгеү зыян итмәй. Тағы нимә? Ашау кәрәк. Булһа, ит аша, булмаһа – булғаны бата. Көсләп аша.

Бына шулай, кеҫәләге «Столичная»ны асырға ла уйламаным. Ашханаға индем – сират... Сиратта торорлоҡ хәл юҡ, сират башына барып, бирәүҙән кофе алып биреүҙе һораным. Бирҙе. Тағы һораным. Алып бирҙе. Бер мужиктан беренсе блюдо алып биреүен һораным. Алып бирҙе. Быныһын өҫтәл артына ултырып, ҡалаҡ менән, икмәкһеҙ ашаным. Кассирша күрмәмеш тә белмәмеш. Мин тағы бер тәрилкә аш алып биреүҙәрен һораным. Бирҙеләр. Быныһын икмәк киҫәге менән ашаным. Тағы килдем, икенсе блюдо алып бирҙеләр – ашаным. Тағы бер котлет ашарлыҡ урын бар, килдем. Сират юҡ, үҙем алдым, тағы бер компот та алдым. Әһә, кассирша миңә иғтибар итә. Өндәшмәй, ашап бөткәс, компот эскәс, кассир алдына килеп баҫтым:

– Минән күпме?

– Мин ҡайҙан беләйем?!

Икәүләп һананыҡ. Эске кеҫәнән бер ус эре купюралар сығарғас, кассир аптырай төштө. Булғылай.

Ҡорһаҡты күтәреү еңел түгел, ә атлауы күпкә еңел, өйгә ҡарай йәйәүләнем. Биткә, танауға, ҡолаҡтарға тейерлек түгел.

Иртән өйгә ҡайтып индем. Бисә ҡаршыланы.

Үҙ ғүмеремдә күп аптыраште ҡалғаным бар. Бына был көн аптыраманым, хайран ҡалдым. Бисәм йөҙөндә бер генә бөртөк һыҙланыу, теләктәшлек күрмәнем. Бына һиңә кәрәк булһа...

Сисендем дә яттым. Нисек аңларға? Ваҡытында ҡайтманым... Тышҡы күренешем ҡот осорлоҡ. Бит, ҡолаҡтар, туңған ҡулдар тураһында һөйләп тә тораһы юҡ. Бисә йөҙөндә хафаланыу бөтөнләй юҡ. Ярар. Һа! Байтаҡ йәшәнем, «йомарт» ҡыҙҙар менән дә осраштым. Булдылар. Һәр береһен күҙ алдына килтереп ҡараным. Ысынлап, был тиклем ҡаты бәғерле булмаҫтар ине кеүек. Ҡыҙҙар – алыҫтағы йондоҙҙар?... Яттым. Бер тәүлек үткәс, теге «Столичная»ны астым. Тимәк, килеүсе юҡ. Шарф, бейәләйҙәр – вещдоки. Ә шешә төбө менән ауыҙына алғаны? Ярар. Араҡы эселде, бисәнән коньяк килтерттем. Туңғандан һуң «еңеллек» кәрәк. Ике көндән һуң эштән килделәр. Күрҙеләр. Әйттем: ни гу-гу. Бер ай өйҙән сыҡмай яттым. Минең тән – эт тәне кеүек: тиҙ төҙәлә. Туңған урындар бер айҙан һуң үҙ төҫөнә ҡайтты. Ҡайтманылар шул, һыуыҡҡа тиҙ бирешәләр. Нишләйһең, хата үҙемдә. Ә «һунарсылар» кем?

Быныһы йомаҡ? Ә кем? Уйланым, иҫәпләп сығарҙым.

Вәт друг! Мин һиңә күпме ярҙам иттем? Эх, Шатохин! Көнсөллөк – кәмселек, әллә шул, һин белмәҫһең.

Әй, һин, Александр Шатохин, бер айлыҡ эш хаҡы өсөн... өс кешене еңеү? Теләһәм, мин бер үҙем булдыра алам. Теләмәйем. Теләмәйәсәкмен. Бер ҡасан да. Ярышыу ҡыҙыҡлы ғына түгел, файҙалы ла. Мин ярыша белдем. Башҡа һөйләмәйем.

***P.S.***

*Бер йыл самаһы ваҡыт үткәс, Волгоград ҡалаһынан хат килде. Ярҙам һорап Шатохин яҙған. Эскелеккә бирелеп, аҡсаһыҙ ҡалған. Һуңъараҡ ул ҡалала күренде. Шиңгән. Мин уға бер һорау ҙа бирмәнем, һалҡын ҡарашымды һиҙҙе. Ярар, һәр кемдең үҙ һуҡмағы. Мин үҙемдең хаталарымды ғына һанайым. Һәр кем үҙ хатаһын ваҡытында күрһен ине, тим.*

# *Ларьяк*

Ханттар һәм мансиҙар бында боронғонан йәшәй. Көньяҡ Уралдағы башҡорттар кеүек бындағылар ҙа. Күрәһең, төбәктә борон-борондан йәшәйбеҙ, тип уйлайҙарҙыр, моғайын. Ханттарҙы күргәнем бар, урыҫлашҡандары ҡалала йәшәй. Русса акцентһыҙ тип әйтерлек һөйләшәләр, тик урыҫ түгеллектәре күренеп тора. Белеүемсә, был халыҡ талантһыҙ түгел, ә сәйер климат үҙенекен итә. Түҙемле халыҡ, бындайҙарҙы табыуы ҡыйындыр. Әйткәс әйтәйем, ханттар – Кавказ халҡының ҡапма-ҡаршыһы. Әгәр һин кавказлыларға алама һүҙ әйтһәң, ул шунда уҡ ҡайнап сыға. Хантҡа шул уҡ һүҙҙе әйтһәң – ишетмәмеш.

Хант түҙемлелеген үҙем күрҙем, аптыраным. Ҡалала «Ленфильм» киностудияһы фильм төшөрә. Аталышы – «Трасса». Эйе, бер йыл самаһы ҡалала «Ленфильм» студияһы транспорты шәйләнде.

Фильм сюжеты «Татра» үҙбушатҡыс автомобиле тураһында. «Татра» менән донъя тулған. «Татра» күренмәгән урын юҡ. Бында мәҙәк һүҙ ҙә байтаҡ, һорау менән башлана: «Кем Самотлорҙы үҙләштергән?` Был һорауға һәр кем шунда уҡ яуап бирә. «Три Т. – Тракторы, Татры, Татары». Эйе, бында башҡорттар аҙ.

Ошо фильмда ярты минутлыҡ кадр бар: ТУ самолеты төшкәндә перронда бер хант ике егелгән боланы менән кемделер ҡаршыларға килгән. Был ханттың түҙемлелегенә оҙаҡ аптырап йөрөнөм. Аэропорт территорияһында бәләкәй генә урын кәртәләп ҡуйҙылар. Ошо урында көн һайын хантты ике боланы менән күрәм. Боландарҙың алдында ашамлығы юҡ, нарты тип аталған санаһы һәр саҡ буш. Ханттың йөҙө-ҡиәфәте һәр саҡ кемделер көткән кеүек.

Валлаһи, минең турала фильм төшөрөргә ризалатһалар ҙа, был хант кеүек оҙаҡ бер урында торорға риза булмаҫ инем, ә ул ошонда ике ай самаһы тапанды. Бер-ике йыл үткәс, был фильмды башҡа урында ҡараным. Иҫ китерлек – ярты минутлыҡ кадр! Ошо кадр өсөн ике ай?! Һантыйлыҡ өлгөһө! Кешелекһеҙлек.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, фильмдың әһәмиәте юҡ, бөтөнләй юҡ. Яһалмалыҡтан башҡа... Бына шулай. Был фильмдан һуң киношниктарға булған ихтирамым кәмене.

Ханттарҙың көнкүрешен, тормошон күрергә һәр саҡ теләгем булды. Бында ханттар тураһында һөйләүселәр күп.

Миңә ханттар ауылында булырға тура килгәйне. Юбилейҙа. Ханттарҙың һәм мансиҙарҙың милли округын асыу тантанаһы ине. Урындағы гәзит тә был турала яҙҙы. Юбилейға бер ай самаһы ҡалғас, авиапредприятие етәкселеге миңә мөрәжәғәт итте: «Ашығыс эш бар». Баҡтиһәң, хант ауылы Ларьякта яңы аэропорт төҙөлгән, тик бинаның йылытыу системаһы юҡ. Аэропортты ошо датаға эшкә тапшырыу мотлаҡ. Бындай ашығыс заказды шабашниктан башҡа кем эшләһен? Ризалыҡ бирҙем. Ике көндә, үҙемдең һыҙмаға ярашлы, котел эшләнем, ғөмүмән, ашығыс рәүештә әҙерләндем. Әҙерләнгән нәмәләрҙең ауырлығы әҙ түгел. Ларьяк ауылына ике юл менән барырға була: һыу юлын иҫәпкә алыу кәрәкмәй, һауа юлы ғына ҡала. Әҙерләнгән нәмәләрҙе Ларьякҡа алып барыр өсөн командир МИ-8 вертолеты бирергә булды. Белеүемсә, һәр вәғәҙә яртылаш үтәлә.

Йәйҙең йәмле көндәре, вертолеттарға эш муйындан. АН-2 самолеты бирҙеләр.

Самолетҡа минең әйберҙәрҙе тейәргә ярамай икән дә баһа. Кислород һәм пропан тейәү өсөн министрҙың шәхсән рөхсәте кәрәк. Командирға индем. Яңы командир, ысын хохол, Украинанан.

– Бында барығыҙ өсөн дә мин – министр...

Эйе, тиҫкәреләр тиҙ еңелде, беләбеҙ: һәр ҡағиҙәнең иҫкәрмәһе лә бар, урыҫ әйтмешләй, «нет правил без исключений». Котелды, тулы баллондарҙы, башҡа ваҡ-төйәкте самолетҡа тейәнек. Осабыҙ. Һыу, һыу, ҡайҙа ҡарама – һыу. Йылғалар киң, Вах йылғаһы ғына ни тора! Иҫәпһеҙ күлдәр. Барыһына ла исемдәрҙе ҡайҙан табаһың. Күл булмаған урында – һаҙлыҡ. Байтаҡ йылдар хант ерендә йәшәйем, ә тормоштарына күҙ һалған юҡ. Ларьяк – ханттар ауылы. Картала күрһәтелгән. Ошо көнгәсә, был ауылда ханттар ғына йәшәй, тиеп уйлағайным. Баҡтиһәң, бында хохолдар йәшәй. Урыҫ әйтмешләй, «а где их нет?»

Самолет ергә төшкән урын борсолдора: һыуға төшәбеҙме ни? Ҡайҙа ҡарама – һыу. Аэродром Вахтың бормалы урынында. Был урынға килгән һәр кем иң башта ауыл менән танышыр ине. Минең өсөн ваҡыт – аҡса. Миндәге тиҙлек – көнләшерлек, сварка трансформаторы, пропан трансформаторы беркетелгән. Беҙгә ярҙам итеүсе юҡ, ә теге, бындағы аэродром начальнигы, ҡасҡан, күренмәй. Аңлайым: хәүеф хәтәр. Бындағы эш ҡурҡаҡтар өсөн түгел. Ай-һай, беҙгә бирелгән эште үҙ өҫтөнә алыусы булыр инеме икән? Проект бөтөнләй юҡ. Бинаның планын алдан һорағайным, табып биреүсе булманы. Аэропорт тотошлай ағастан – ҡарағай, кедр бүрәнәләренән һалынған. Иң ҙур бүлмә – көтөү залы, төрлө майҙанлы тағы биш-алты бүлмә. Һәр бүлмәлә юныҫҡы тауы, ағас киҫәктәре, таҡта-брустар. Бер генә бригада ла бында эш башламаҫ ине.

Йәйге эҫе көн, былдай бина ун минутта бөтөнләй янып бөтәсәк. Беҙ икәү. Минең менән ауылдашым Фәрит. Киттек. Эш ҡайнай. Сварка барған урынды алдан әҙерләп өлгөрәм. Аэропорт таушалған грунт өҫтөнә һалынған, тирә-яғында бер нисә өйөм йомшаҡ ҡом. Йәшен тиҙлеге менән ташып, ут эше барған урынды янғындан һаҡлайым. Йәйге оҙон көн. Ҡараңғы төшкәнсе эшләнек, төшкө ашҡа ярты сәғәткә туҡтаныҡ.

Кискә табан Фәрит минең күҙгә ҡарап алды. Аңланым: шабаш. Культпоход. Гастроном. Бына ул – ауыл менән танышыу сәғәте. Ханттар магазины. Хохолдар бында ныҡлап тамыр йәйгән, һатыусы бисә лә – хохлушка. Магазин витринаһы аптырата. Араҡы күргәҙмәһеме ни, мин күрмәгән-белмәгәндәре теҙелеп киткән. Корея, Вьетнам араҡылары ла бар. Бында араҡыны аҡса түләп алмайҙар, һатыусы-хохлушканың таушалып бөткән дәфтәренә араҡы алыусының исеме яҙылған юлға яңы һан өҫтәлә. Был һүҙҙе әйтке килмәй, әммә ханттар – эскесе халыҡ. Ирҙәр эсә, тәгәрәшеп эсәләр. Ирекһеҙҙән бала сағым иҫемә төштө. Һуғыш йылдары, миңә дүрт йәш, олатай мине магазинға эйәртте. Олатайҙың һуңғы тапҡыр араҡы алған көнө. Эйе, һуғыш бара. Араҡыны мискә менән килтергәндәр. Ә шешәләр Молотов коктейле өсөн кәрәк икән. Һатыусы араҡыны тәмләп ҡарарға бирҙе. Сәсәнем. Шайтан һыуы.

Ҡаты һуғыш ваҡытында ла башҡорт ауылын араҡыһыҙ ҡалдырманылар. Араҡы – политикандарҙың иң көслө ҡоралы. Ларьяк магазинында бер тапҡыр булдым, ә күпте күреп өлгөрҙөм. Беҙ магазинда саҡта ҡапыл әзмәүерҙәй хант килеп инде. Урта йәштәрҙәге ир. Ғәҙәттә, ханттар буйға бәләкәй. Ә был – әзмәүер! Ул миңә иғтибар итте, күҙе миңә төбәлгәйне: «Хохолдар... бит улар эсмәйҙәр». Ул минең славян түгел икәнлегемде аңланы. Был хант та аҡса түләмәне, һатыусы шатлыҡлы йөҙ менән бер нисә шешә араҡы тоттороп, дәфтәренә теркәп ҡуйҙы. Беҙ араҡы алманыҡ, беҙҙең эштә араҡы – ауыр йөк. Бына тигән шарап барҙа,

ниңә араҡы һемерергә? Тағы уйлап ҡуйҙым: был хант бик шәп һунарсы һәм балыҡсылыр, һатыусы уның менән ихтирамлы һөйләшә.

Магазиндан килгәс, эшкә тотондоҡ. Ҡараңғыла икәүләп мәжлес ҡорҙоҡ. Мин иртә торам, йән-тиргә төшөп эшләнек. Бына һиңә: бер аҙналыҡ заказды ике көндә теүәлләнек. Фәриттә лә квалификация, эшендә ут кеүек яна белә.

Самолет саҡырҙым. Ошо ваҡытта теге тинтәк начальник ҡайҙандыр килеп сыҡты. Биш-алты пункттан торған дәғүәләре бар. Мине белмәй, миндә пункттар юҡ. Бөтөнләй юҡ. Өс хәрефкә тигеҙләнгән урыҫ һүҙе бар. Ә ҡалғаны: «Һин ҡайҙа йөрөнөң, ташбаш?». Имеш, ҡаҙан ағас стенаға бик яҡын ҡуйылған. Янғын сығыу ҡурҡынысы бар.

– Яҡын итеп түгел, терәтеп ҡуйылған, ә котел терәлгән стенаны киҫеп алыу, ысынлап та, мотлаҡ. Был – һинең эш. Беҙ плотник түгел. Белдеңме? Һынау тиһеңме? Ҡайҙа һыу мискәң, ҡайҙа насосың? Әлегә һинең һәлберәгән нәмәң генә бар, уныһы ла күренмәй. Ярар, самолетта эшең булмаһын. Бывай!

Кислород, пропанды һауаға осорҙоҡ. Кәрәк-яраҡты йыйҙыҡ. Көтәбеҙ. Бына ошо ваҡытты хант ауылы менән танышыуға бағышланыҡ. Ауылда ҡара төлкө совхозы бар. Бына ни өсөн сит-яттар ошонда төпләнгән. Ҡара төлкө тиреһе – үтемле тауар.

Аэродром эргәһендә – тайга янғынсылары базаһы. Моңһоу ҡарашлы йәп-йәш егеттәр тәүлек әйләнәһенә дежурҙа тора. Валлаһи, мин былдай эштә йөрөй алмаҫ инем. Аэродром тигәнең... – тигеҙләнгән ҡом. Яңы бина аҙашҡан кеүек һерәйеп тора. Ярар. Беҙҙең, йәғни мин һораған самолет килеп төштө, ә аэродром начальнигы балтаһын юғалтҡан. Тапһын, ваҡыты етерлек. Беҙ тиҙ тейәнек, барыһы – буш өс баллон, трансформатор. Ә летчик һиҙгер: ауырлыҡ әҙ. Дүрт пассажир алды, күтәрелдек. Икенсе пилот кабинанан сыҡты, пассажирҙарҙың береһе иҫәп-хисап эшен теүәлләне: ҡаҡланған балыҡ менән юл хаҡын түләне. Ниндәй оҫта ыҫланған балыҡ, телеңде йоторлоҡ, күрәһең, – летчик ҙур теләк менән алды. Уйлап ҡуйҙым: балыҡты ханттар тотҡан, ыҫлаған, араҡыға алыштырған. Ә кем ашар? Бына шулай. Ярар, уйланыуҙан файҙа юҡ. Иллюминаторға эйелеп, икһеҙ-сикһеҙ һыу донъяһына ҡарап барам. Боролоп-боролоп аҡҡан Вах, ниндәй иркенлек... Бына ошо иркенлектә талантлы хант халҡы эскелектән ыҙа сигә. Үҙ яҙмышына интегеп атлай. Ларьякта башҡа булырға тура килмәне. Хәҙер нисектер унда тормош – белмәйем.

## Баҫығыҙ, суд килә!

*Сүллек йә боҙлоҡ донъяһы ҡоштар өсөн рәхимһеҙ. Йәйге Көньяҡ Урал – ҡоштар өсөн ожмах. Ҡарабаш турғайҙар өсөн дә.*

«От тюрьмы и от сумы не зарекайся» – был урыҫ һүҙен беҙ ишетеп кенә отманыҡ. Төрмә есе, төрмә хәбәре күп ғаилә ишеген шаҡыны. НКВД, ГУЛАГ тураһында уҡып арыныҡ. Каторгалар, төрмәләр илендә йәшәүебеҙҙе аңланыҡ. Эйе, төрмәнән ҡурҡыу бөттө. Ҡайһы бер заттар өсөн төрмә йәшәү урынына әүерелде. «Миндә хата» тигәндәр күбәйҙе.

Кем һуң белмәй: тотҡонлоҡ илебеҙҙе яңы бейеклектәргә күтәреүсе иң егәрле эшсе булды. Тора-бара егәрле әрәмтамаҡҡа әүерелде. Шулай була икән. Бер ҡапҡанда – ҡалья, тағы ҡабам тиһәң... Тотҡонлоҡ тураһында бәләкәйҙән уйландым. Беҙҙең ауыл халҡын тотҡонлоҡ менән ҡурҡытып булманы, төрмә үҙебеҙҙең ауылда төҙөлдө. «Өс тапҡыр ашаталар, мунсаһы аҙнаға бер, һабын да бирәләр, ә ҡалғаны – фантазияңда...»

Тотҡондар менән аралаш эшләргә лә тура килде. Стәрлетамаҡта ғына сәнскеле тимер сым артында өс йыл эшләнем. Эйе, «бөйөк комсомол төҙөлөштәре»н күптәр белә. Шулай булды. Был ҡалаға килгәс тә тотҡондар менән тир түгелде. Һәр саҡ үҙемде тотҡон урынына ҡуйып маташтым. Эйе, минең асыҡ характер менән еңел булмаҫ ине. Аҡты ҡара тип әйтергә яратманым, көләһе урында иламаным. Шулай ҙа, йәшермәйем, үҙемде тотҡонлоҡҡа әҙерләнем: кем белә?

Бына мин – шабашсы, ә шабашсы йоҡа боҙ өҫтөндә бейеүсе менән бер. Боҙ ватылһа, ҡотолоу сараһы күрелмәгән. Шабашсы аҙым һайын техника хәүефлеге ҡағиҙәһен, көн һайын хеҙмәт кодексын боҙа. Кәмендә аҙнаһына бер-ике тапҡыр енәйәт кодексын аша атлай.

Һәр шабашсының – үҙ фәрештәһе. Был турала күп һөйләргә мөмкин, кәрәкмәҫ. Шабашсы йыртҡыс йәнлеккә оҡшаш булырға тейеш: һиҙгерлек, кәрәк саҡта – теш күрһәтеү. Ә кәрәкмәгәндә – ҡаса белеү. Шулай. Коммунизмдың әхлаҡ кодексы? Быныһына шабашсы төкөрә. Ә нисек шабашник булып китәләр? Күптәр һаранлыҡтан тип уйлай. Дөрөҫ түгел. Һәр кем шабашсылыҡҡа үҙ теләге менән килмәй.

Шабашсы ҡайҙан үҫеп сыға? Бына нисек. Мәҫәлән, бына тигән инженер мастер булып эшләй. (Оклад плюс районкоэффициент: 180+120 = 300.) Инженер өс йөҙ һумға тырышып эшләргә тейеш. Алтынсы разрядлы монтажсы 600 һум ала. Система... Система үҙе ултырған ботаҡты үҙе балта менән саба. Мастерҙан килем бик әҙ, тағы бер мастерға мохтажлыҡ бар. Ә ике мастер… Бәй, социализм тыумыштан ғәрип.

Был төбәккә килеүселәрҙең маҡсаты – аҡса. Тайга еҫе – йырҙа һәм уңышһыҙҙар кеҫәһендә. Ҡыҫҡаһы:һәр кем өҫтәмә аҡса табыу юлын эҙләй. Кемдер таба, кемдер таба алмай. Һәр кем үҙ фәрештәһен көтә. Кемгәлер фәрештә урынына Люцифер, йәғни Иблис үҙе килә. Был – коррупция. Йәшергем килмәй: был йәһәттән минең дә байтаҡ тәжрибәм бар. Әҙ-мәҙ етәксе булып эшләнем, ә коррупция – етәксенең һуҡмаҡ таяғы. Эйе, тип-тигеҙ юлдан тәгәрәүсе хужалыҡ кинола ғына күрһәтелә. Һәр етәксе үҙ һуҡмағынан атлай, һөрлөгөп тә китә. Ант итәм: ҡайһы бер эштәрҙе коррупция менән ҡулға-кул тотоношоп ҡына атҡарып була. Үтәү өсөн коррупция кәрәк, килем статьяһы кодекста юҡ. Коррупция – йомартлыҡ өлгөһө.

Тимәк, йомарт коррупция кеҫәңә лә һала белә.

* * *

Аэропорттағы кәңәшмә тамамланғас, монтаж идаралығы начальнигы авиациялағы уңыштарым менән ҡыҙыҡһынды ла төп һүҙгә күсте:

– Беләһеңме, һин ҙур эштәр өсөн кәрәкһең. Әйҙә, ПТО начальнигы булып кил. Ҙур эштәр бар, тик һинең өсөн!

Оҙаҡ уйламаным. Бына мин – ПТО начальнигы. Ваҡиғалар үҫеш алырға тейеш.

Начальник йәшереп торманы. Үҙенең ятаҡан һүҙенән башланы:

– Беҙ хәҙер – хөрмәтле, абруйлы. Ҙур эштәргә күсергә ваҡыт.

– Уйлап ҡарарбыҙ.

– Бында – нефть, тимәк, миллиондар, ә беҙ, күп булһа, бер нисә ун мең. Ана, ҡара, торбасылар миллионлап һыҙыралар. Ә һин өйөңдәгесә уйлайһың. Бында – тайга законы.

– Ярар, шуныһын ғына әйтәм: ведомостарҙа тере йәндәр булырға тейеш.

– Һиңә артыҡ ауыҙҙар кәрәкме?

– Ышаныслыларҙы табып була, ә юҡтар менән яуап биреүе ауыр.

– Юҡ. Улай түгел. Кеше юҡ – проблема ла юҡ, күренеп тора.

– Юҡ. Юҡ. Күләгә – һүрәт түгел.

Бына шулай, килешеү булманы. Миңә ПТО начальнигы булып оҙаҡ эшләргә тура килмәне. Мине өҫкә, ПРУ-ға, эшкә саҡырҙылар.

Кем белә: кис уйланған һәм иртән үтәлгән эш яҡшымы икән?.. Әллә иртән уйланып, кисен үтәлгән яҡшымы? Белмәйем.

Начальник үҙенсә эш итте. 25 мең һум аҡса – биш кеше ҡатнашлығында. Икәүһе – заказсынан. Беҙ ҡапсыҡта ятмай, кемдер ауыҙын ел иҫкәндә асҡан. Артабан – донос. Артабан – ревизия. Артабан – милиция. Ә иң аҙаҡ – суд. Тороғоҙ, суд килә!

Лирик тайпылыш түгел, әйтәһе һүҙ бар. Былдағы халыҡ судын «ғәҙеллек утрауы» тип әйтһәм, хата булмаҫ. Был суд һәр саҡ хеҙмәт кешеһен яҡланы. Кеҫәгә кереү яғын самаланы. Суд рәйесенең фамилияһы ла хәтеремдә ҡалған – Казанкин. Шәп кеше ине.

Суд өҫтәленә барып етҡан «эш» бормалы юлдарҙан йөрөмәй, кодекс һәр саҡ ҡыҫҡа юлды күрһәтә. Етмәһә, залда прокурор бар. Прокурор суд залына Американы асыу өсөн килмәй. Прокурор ғәйепләй. Ғәйепләнеүсе прокурор һорауҙарына яуап бирергә тейеш.

– Аҡса алыусыларҙың паспорт һандарын ведомосҡа кем яҙҙы?

– Үҙем яҙҙым.

– Беләһеңме, былдай һандар Советтар Союзында бөтөнләй юҡ.

– Белмәйем.

– Ҡайҙан алып яҙҙың?

– Күҙҙәрем насар күрә, ул әйтеп торҙо, мин яҙҙым.

– Кем әйтеп торҙо?

– Паспорт хужаһы.

– Бер генә паспорт хужаһымы?

Допрос оҙон-оҙаҡ бара, булмағанды иҫбатлауы ҡыйын. Юҡты бар итеү өсөн суд көнөнән күпкә алдараҡ уйлау мотлаҡ. Эйе, был турала начальник менән байтаҡ һөйләшкәйнек. Иғтибар менән күҙәттем: суд ғәйепләнеүселәргә бер ниндәй ҙә баҫым яһаманы.

«Һул» яҡтан килгән аҡсаны алыусылар, бүлешеүселәр биш кешенән ғибәрәт. Ә өсәүһе, тикшеренеү башланғас та, аҡсаларын әлеге икәүгә тапшырып, ҡулын һелкеп өлгөргән. Имеш, ҡулдары керһеҙ. Бар ғәйепте минең дуҫ менән начальник үҙ өҫтәренә алған. Эйе, кемдә аҡса – шул ғәйепле. Начальниктың хатаһы: ул «эш»тең һәр стадияһында ғәйепте кире ҡағыу юлына баҫты. Хоҡуҡ һаҡлаусылар былдайҙарға рәхимле ҡарай алмай. Эләккәнһең икән, йомшара төш. Ҡағыҙға теркәлгән «эш»тең дөйөм хаҡы йөҙ мең һум самаһы. Был сумманы хужалыҡ, минең дуҫ участкаһы үтәгән, тип раҫлай, сумма иҫәптән иҫәпкә күсерелгән. Күсерелгән сумманы тулыһынса эш хаҡына әйләндереп булмай. Эш хаҡы 25 мең һум бирелгән. Был әлеге коррупция суммаһы була ла инде. Барыһы ла аңлашыла. Судья тағы бер яҡшылыҡ эшләне: приговор беренсе көндө уҡылманы. Ғәйепләнеүселәр өйҙәренә һаҡһыҙ ҡайтарылды.

Икенсе көн приговор уҡылды. Начальник – ун йылға, дуҫым һигеҙ йылға олаҡты. Әйтергә кәрәк, әлеге ғәйепләнеүселәр хоҡуҡ һаҡлаусылар өсөн уңайлыларҙың да уңайлыһы булып сыҡты. Был икәүҙе нисек һүрәтләһәң дә, тигәндәй... Показуха. Тағы? Беренсе ғәйепләнеүсе – Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, артиллерия офицеры, ордендары байтаҡ. Дуҫым иһә – ябай участка начальнигы. Приговор уҡылғандан һуң бер ай ваҡыт үткәс, ветеранды ҡурсалау эше

башланды. Дуҫымдан да хәбәр алынды. Монтажсы ҡайҙа барһа ла монтажсы, әлегә ул – бугор, беҙҙеңсә – бригада етәксеһе. Түмәндә ултыра. Танауын төшөрмәй. Начальникмы? Насар кеше түгел, әллә ни яҡшылығы ла һиҙелмәне. Төп ҡағиҙә: «Мин начальник – һин дурак, һин начальник – мин дурак». Судтан һуң балауыҙ һығыусылар булды. Тантана итеүселәр ҙә табылды, күрегеҙ, коррупцияға ҡаршы көрәш бара. Кемде тыңларға? Береһен тыңлаһаң, иларлыҡ һөйләй. Икенсеһе көлдөрә. Мин уйландым, үҙем тураһында ла уйлап алдым. Мине лә ун йылға ултыртырға теләүселәр булды. Килеп сыҡманы. Валлаһи, әгәр мин ул заттар урынында булһам, ултыртыу өсөн бына тигән сәбәптәр таба алыр инем. Соҡоғас, соҡона белергә кәрәк. Ә суд өсөн мин ҡыҙыҡлы түгел. Мин һәр саҡ арығансы эшләнем. Урлашыуһыҙ бында бер генә зат та эшләй алмай. Шулай. (Тағы дөрөҫләп китәйем. Урланған материал өсөн мин бер генә тин дә алманым.)

Тимәк, елдән килгән елгә китте. Ел тигәнем – хөкүмәт. Ҡыҙыҡлы хөкүмәт. Көлкөлө хөкүмәт. Тағы бер һүҙ һөйләп алаһым бар. Үҙ терминым бар: прокурор шкалаһы. Прокурор ҙа һәр эшкә тотона алмай. Эйе, был шкала сумма менән иҫәпләнә. Был ҡалала булған хәтәр эштәр тураһында беләм. Сумма 25 мең һум ғына түгел, ә миллионға яҡын. Прокурор шкалаһында сумма байтаҡҡа әҙ. Эйе, ҡала прокуроры бындай эштәрҙе күрмәй. Күрергә хаҡы юҡ, шкалаһы етмәй. Шулай. Бындай эштәр тураһында яҙаһы бар әле. Алла бойорһа, яҙырбыҙ.

– Ҡаламы ни, бындай ҡала булмай!

– Шулай ҙа, ҡара әле, ниндәй самолеттар төшә! Ә Тамбовта төшмәй.

– Төшмәһә ни, Тамбов – ҡала.

– Юҡ, аңламайһың, әле – эштең башы. Бында ысын ҡала буласаҡ.

– Ошо һаҙлыҡтамы? Һин Петр I кеүек уйлайһың.

– Нисә йылдан? Бында өс йылдан ҡала буласаҡ.

– Әлегә һыуыҡ вагончиктар, ә сортир урамда, бына ҡыҙыҡ...

– Ә минең, аллаға шөкөр, бына тигән.

– Нисек? Ҡайһылай?..

– Балок һатып алдым, хөрриәт.

– Нимә? Ә ул нимә? Ҡайҙан алдың? Мәскәүҙәнме?

– Бына һиңә мә! Ҡаланы икәүләп әйләнеп сыҡтыҡ таһа. Һин шуны күрмәнеңме?

– Күрҙем, күрҙем: вагондар, вагондар, ике ҡатлы ағас өйҙәр. Янғын сыҡһа, көт тә тор, тереләй тамуҡҡа әйләнербеҙ. Көлөң күккә оса. Йәнең артынан.

– Мин һиңә икенсе нәмә һөйләйем. Һи, янғын булһа, кирбес йорт та дөрләп яна. Мин һиңә әйтәм: балок һатып алдым, хәҙер сортир яҡын, өшөп интекмәйем.

– Ярар, аңлат: ҡайҙан алдың? Ниндәй мөғжизә һуң ул балок?

– Иҫәр, балок – бәләкәй өй, дүрт мөйөшлө. Бер ҡосаҡ утын – һин йылыла. Хөрриәт!

– Эйе, эйе, улай булғас. Күрҙем. Иҫ китерлек, стеналары икегә ике, ә нисек үндай тарлыҡта йәшәргә? Әйт әле, ундай балок күпме тора?

– Мин бер ярым бирҙем.

– Э-һе, ярты йыл эшләргә. Ни бысағыма. Кәрәге юҡ…

– Ниңә, ике-өс йыл йәшәйһең дә һатып ебәрәһең, аҡсаң юғалмай.

– Һин әле генә әйттең: өс йылдан бында хәтәр ҡала буласаҡ, тинең.Ҡала булғас, балогыңды кем алһын.

– Әйтһәм ни...

Был икәүҙе башҡаса ишетмәнем, сөнки самолетыма регистрация буласағын

әйттеләр. Самолетта уйға сумдым... Эйе, мин бында яңы кеше, һәр бер һүҙгә иғтибар итәм. Ҡаланың һәр мөйөшөн ҡараным. Ҡала тип әйтерлек бер генә ере лә юҡ. Мин Маркс, Энгельсты уҡығанмын. Ошондай күренештәр тураһында яҙғандар. «Эшселәр синыфының хәле» тигән әҫәрҙәрендә. Эйе, XIX быуатта әлеге Англияла бына ошолай йәшәгәндәр. Әллә беҙ Көнбайыш Европанан йөҙ йылға арттамы? Был һүҙҙе башҡалар ишетә күрмәһен. Эйе шул, Мәскәүҙә европаса йәшәп маташалар. Маҡтаныу ҙа кәрәк. Мәскәү менән кем генә маҡтанмай. Бында балокта йәшәгәндәр байтаҡ.

Кисә «Тайга» магазинына барып индем. Бындай магазиндар әҙ, «Север» тигәне бар. Горком урамында ла гастроном бар. Башҡа юҡ. Көн матур ине, ә магазин бай: сәй-фәлән, ҡуйыртылған һөт күп, болгар консервалары тулып ята, ит консерваһы ла етерлек. Эйе, тушенканы күп алалар, һинд сәйен тейәйҙәр генә. Болгар винолары шәп.. Ә тегеләре? «Плиска», «Слынчев бряг» тигәндәре. Эсеп алһаң, шайтанды ҡыуаһың. Магазинға һатып алыу өсөн килмәнем, ҡарап китеү ҙә ҡыҙыҡ. Минән һуң магазинға йәш ҡатын килеп инде. Ниңәлер был затҡа ныҡлабыраҡ текләнем. Ул минең ҡараштарды һиҙеп алды, буғай. Вәт, үҙен күрһәтә беләүҙә. Туҡтап ҡалдым: ни әйтерһең, сибәр хохлушка! Украина ҡыҙҙары матурҙар, күптән беләм, матурҙар! Маҡтай белгәнде баһалай ҙа беләләр. Тағы ҡарайым: аяҡтары ниндәй!

Бына һиңә, ул да һатып алырға килмәгән. Әллә үҙен күрһәтергә килгәнме? Юҡ, үҙен генә түгел, күндән яңы тунын, бүркен күрһәтергә килгән. Кем белә, бәлки, ул был кейемдәрҙе тәүге тапҡыр кейгәндер. Әйбер алмағас, магазинда оҙаҡ тороп булмай. Бына ул килбәтле аяҡтары, ҡупшы итеге менән тып-тып баҫып ишеккә йүнәлде. Үҙе миңә һирпелеп алды. Ул сыкты, мин дә сыҡтым. Сыҡҡас, ул миңә тағы ҡарап алды, гүйә, ишетәм: «Һин ҡара, мин нисек матур атлайым». Ҡараным, артынан киттем. Бына был сибәр урамдан боролдо, ике ҡатлы ағас өйҙәр яғына китте. Ҡайҙа бара? Минеңсә, бындай сибәркәй яңы биш ҡатлыла йәшәргә тейеш. Кәмендә ике ҡатлыла. Ул вагон яғына атлай. Вагондарҙы уҙа башланы, юҡ, атламай, йүгерә. Мин дә йүгерәмме, юҡ, миңә йүгереү ярамай. Үҙемә аптырайым: ни кәрәге!? «Ҡайҙа йәшәй?» Вагончиктарҙы уҙҙы ла бәләкәй генә, нәҙек ҡарағай бүрәнәләрҙән һалынған балокка барып етте. Бик тиҙ ишеген асып инде лә юғалды. Балокка яҡын килергә булдым. Ишеккә ҡара буяу менән эре хәрефтәр яҙылған: «Кто без стука зайдет, со стуком вылетит». Мин шаҡып торманым, үҙ юлым менән киттем. «Ниндәй матур зат, ә балокта йәшәй», – тип уйлап ҡуйҙым.

Ярар, балоктар тураһында ла күп һөйләп була, берәүһе еткән. Балокта йәшәү – маҡсат түгел. Был турала һәр кем белә.

## *Бичтар тормошо*

Ихтыярлы булыу – һәр кемдең хыялы. Эш башлағас, үҙемә һүҙ бирҙем: бичтарға күҙ һалмаҫҡа, һөйләшмәҫкә. Килеп сыҡманы. Бичтар миңә көн һайын осрап торҙо, ниңәлер, мин уларҙы күҙәттем. ...Арзамат хәтеремдә ҡалған, ныҡ ҡалған. Аэровокзалда ҡунған төндө Арзаматтың матур эшләнгән фотоальбомын ҡараным. Ниндәй егет булған! Штанга буйынса спорт мастерлығына кандидат. Атлет. Ҡатыны, а-ах, сибәр! Аэропорттағы һуңғы төн иҫемдә. Ул ҡысҡырҙы:

– Ағай-эне, альбомымдан башҡа бер нәмәм дә ҡалманы. Братцы! Верните, у меня больше ничего нету!

Бына ул һаҡлыҡ кассаһында. Әҙ генә вклады ҡалған икән. Бирмәйҙәр,

паспорт кәрәк. Паспорты юҡ. Арзаматты йыш күрәм, нишләһен, бар хәсрәте – эсеүҙә. Бында эсергә табыу еңел: туҡталыштарҙа әҙ-мәҙ араҡы ҡалдырыусылар бар. Имеш, бичтар өсөн. Ә бына Басмач күренмәне.

Арзаматтың бәләһе ниҙә? Эксцентрик холоҡло. Бындай кеше лидер булыу өсөн донъяға килә. Була алмаһа? Донъя киң күренә, ә уға бик тар. Миллиондан берәү генә Тамерланға тиңләшә ала. Тағы ҡабатлайым: Арзамат эскеселек өсөн ҡыуылмаған, бында эсмәгәндәр әҙ, бик әҙ. КПСС-тың ҡала комитетының беренсе секретары үҙе эскесе, эш сәғәттәрендә эсеүсе. Бындағы ҡағиҙә совет законына ярашлы атламай. «Закон – тайга», һәр кем тирә-яғына ҡаранып йәшәргә мәжбүр. Өйөр ҡағиҙәһен тәүтормош кешеһе ҡабул иткән, бында нәҡ өйөр ҡағиҙәһе хөкөм һөрә. Арзамат, вожак була алмағас, ситкә этәрелгән, бичҡа әүерелгән. Үҙем дә вожак булыу өсөн әҙ көс һалманым. Ә ниңә ысын вожак була алманым? Көслөләргә теш ыржайттым. Минең был ҡалала ғына уйлап сығарған фразам бар: «Бич ғүмере – ике йәй». Бындағы ҡыш рәхимһеҙ, бичтарҙы тиҙ оҙата. Арзамат был ҡағиҙәгә һыймай, ул өсөнсө, дүртенсе йәйҙе лә тере ҡаршыланы. Ул мине урамда һәр саҡ таныны, ә мин баш ҡағып иҫәнләшергә мәжбүр. Һаҫыған бич менән һөйләшеп торорға кем теләһен. Мин һөйләштем. Ул минән өс һум аҡса һораны, бирҙем. Һөйләштек аулаҡта. Үҙ һорауымды бирҙем:

– Арзамат! Ниңә һин ҡайтып китмәйһең? Бында һин оҙаҡ йәшәй алмаҫһың. Үлерһең.

– Абзый! Мин бында оҙаҡ булмаясаҡмын, бер генә эшем бар. Барыһы ла мине эштән сыҡҡан бичҡа һанай, дөрөҫ түгел.

Тағы ниҙер һөйләне. Саҡырыу ҡағыҙы менән килгән, эште һәйбәт башлаған. Балок һатып алған. Матур бисәһен килтергән. Бынынһын үҙем альбомында күрҙем. Дуҫтары күбәйгән. Эйе, дуҫтар менән алға китеп була, дуҫтар менән ятып ҡалып та була. Арзаматтың күңелен дуҫтары һындырған.

Дуҫтар булғанда байрамдар йышая. Бында иркенлек, һәр кем үҙенә үҙе хужа, эш көнөнән башҡаһын үҙеңсә йәшәйһең. Мәгәр ҙа бындағы һауа үҙенсәлекле: кислород әҙерәк. Бындағы эскән кешегә иртәнсәк ҡыйын. «Похмельный синдром» күптәр өсөн сир генә түгел – катастрофа. Ә кемдәр өсөн? Арзамат кеүектәр өсөн. Ул ялына-ялбара белмәй, һәр саҡ үҙен кәмһетергә теләмәй. Үҙен начальниктар менән тиң күрә. Бындайҙы кем яратһын? Яратмайҙар. Бындайҙың кәрәге юҡ. Өйөр законы: юлбашсы йәки эйәреүсе, өсөнсөһө юҡ. Өсөнсөгә юл – бичлыҡ. Бисәһе ҡайтып киткәс, Арзамат тамам бичҡа әйләнә, шабашсы булып ала. Бригада уңышлы эшләй, аҡса килә, иркенлек. Шулай ҙа бригада үтә сәйер хәлгә дусар, бригада күҙәтеү аҫтында. Ни өсөн бригаданың эше ҡыҙыҡлы? Дөрөҫләп үтәйек: Арзамат бригадала ҡыҫҡа ваҡыт ҡына эшләгән. Ә ниндәй бригада? «Ҙур эштәр» бригадаһы. «Ҙур эштәр» – бындағы термин. «Ҙур эштәр» бөтөнләй эшләнмәгән, ләкин ҙур аҡсалы эштәр. Бригада, йәнәһе, ҙур эштәр башҡара: Обь йылғаһында причалдар, баржалар өсөн, вертолеттар өсөн майҙансыҡтар һ.б. төҙөй. Ысынбарлыҡта иһә бригада ваҡ-төйәк эштә бутала. Бригаданан китеү, башҡалар менән буталыу тыйыла. Һәр айҙа бригада ағзалары ведомосҡа ҡултамға ҡуялар. Ә суммалар иҫ китерлек, ҡулдарына эсерлек-ашарлыҡ ҡына бирелә. Күп эсергә рөхсәт. Бына бригадаға Арзамат аша информация «ағып сығыуы» ҡурҡынысы тыуа. «Хужалар» реакцияһы билгеле, тиҙ ҡарар сығарыла. Ҡышҡы һалҡын көндәрҙең береһендә әҙ-мәҙ аҙыҡ, араҡы-фәлән менән вертолетҡа ултыртып алыҫ тайгаға алып китәләр, ҡалдыралар:

– Әйҙә, көн күрегеҙ, кәрәгегеҙ бөттө.

Арзамат – ситтә ҡалған берҙән-бер шаһит. Бригада онотола. Әллә нисек вертолет күтәреп ятҡандарҙыр. Кем белә...

Арзамат әҙ-мәҙ төҫмөрләй. Эй, һин, Дон Кихот! Рәсәй яңы быуатҡа табан тағы бер аҙым атланы, нефть – байлыҡ билгеһе. Байлыҡты өләшеп алып булмай. Байлыҡты көслөләр өйөрө генә тотошлай ала. Һиңә байлыҡтың балҡышы ғына күренеп ҡала. Арзамат әллә ни күпте белмәй, ә «бау»ҙың осона сығыу юлын эҙләй. Ай-һай, булдыра алмаҫ. Ул тештәрен ҡыҫып дөрөҫлөк эҙләй, таба алмай. Бындағы түрәләрҙе тешләп булмай: Мәскәү һаҡта.

Мин Арзаматҡа бер кәңәш бирҙем: ҡотолоу юлы енәйәт кодексы аша икәнлеген аңлаттым. Аңланы, тик үҙенсә әйтте:

– Абзый, был турала үҙем дә уйланым, шулай ҙа эре сирттерергә иҫәп тотам: минһеҙ был «эш» бөтөнләй онотоласаҡ, уларҙы хәҙер эҙләүсе юҡ. Булмаясаҡ. Был турала мин генә беләм. Тағы берәү әҙ-мәҙ генә белә, тегеләр менән күпмеләр бергә лә йәшәне. Өндәшмәҫ зат ул. Һөйләмәҫ. Ул ҡышын – бич, ә йәйен уны ҡара эшкә алалар. Ике-өс кеше өсөн эшләй ала. Әзмәүер.

Арзамат миңә шул егетте һүрәтләне, бәй, мин ул кешене күптән беләм, күҙәтәм. Буйға бейек, артығын һөйләмәй, һәлмәк атлай. Мин уға аптырабыраҡ ҡараным: бындай зат бич булырға тейеш түгел. Ул үҙәк урамдағы кафеға йыш инә, осһоҙло шарапты ашыҡмай һемерә. Һәр саҡ аҡсаһы бар, эйе, яңғыҙы эсә. Әллә татар, әллә башҡорт, һөйләшергә тура килмәне. Бына Арзамат татарса һөйләшә, һы-ы, мине алдап булмай: ул – башҡорт. Холҡо менән башҡорт. Ә татарса һөйләшкән башҡорттар күп тәһә! Теге бәндәнән бер генә һүҙ ҙә ишетмәнем. Яҙғы көндә мин уны бер кеше менән күрҙем: һөйләшәләр. Тимәк, теле бар. Эйе. Яҙ булғас, ул ҡаланан юғала, тайгала эш етерлек. Бына шулай. Был зат йәйге көндәрҙә ҡыш ашарлыҡ аҡса эшләп өлгөрә. Сәйер, әзмәүерҙе таларға теләүселәр юҡ.

Үҙ алдыма һорау ҡуйҙым: бич күпме йәшәй? Бичтар иҫәбен алыусы юҡ. Кем ул бич? Бывший интеллигентный человек. Күҙәтеүемсә, күпселектә бич ике йәй ғүмер итә. Оҙаҡ йәшәгән бич һирәк.

Ә бич ҡайҙан килә? Иң күберәге – килеп, эшкә урынлаша алмаған заттар. Ҡалғандары – эштән ҡыуылғандар, эскеселәр.

Бына бер ғибрәт. Ҡайтып киләм. Йәйге көн. Күрәм: бич-вожак, бындайҙар бар, кемделер ҡыҫып алған, аҡса талап итә, аҡыра, ҡурҡыта. Тиҙ килеп еттем, ә талаусы ҡасты. Ҡарап торам: «Кем был?» Бына һиңә! Исемемде белә. Аптыраш. Минең ауылдаш, Риф. Эйе. Был бахырҙы ауылда яратҡан, һанға һуҡҡан кеше булманы. Тракторист үҙе.

Бында аҡса эшләргә килгән, үҙе бичтар ҡарамағында. Йәйге көндәрҙә көндәлек кәсеп табып була, Риф бушатыуҙа әҙ-мәҙ аҡса йыйнай. Нишләргә? Иҫәнләшеү өсөн ҡулын һуҙа. Нишләйһең, бичты өйгә алып килдем. Биленә, ҡайыш аҫтына, бер шешә ҡыҫтырған. Бындай хәлдә эсеү ҡәтғи тыйыла, документтан ғына түгел, башыңдан яҙаһың.

Ни әйтергә? Минең ауылдаш, иҫәрлек үрнәге, 600-700 һум аҡса эшләрлек урын эҙләй. Бөтөнләй томана өсөн бындай эш юҡ. Бөтөнләй юҡ.

– Һинең өсөн иң яҡшы эш хаҡы – өс йөҙ һум, башыңды ташҡа бәреп илаһаң да, һиңә яҡшыраҡ эш биреүсе булмаясаҡ.

Бынын уға мин әйттем. Тыңламаны. Бичҡа әүерелде. Өс төн иҙәнемдә ҡунып йөрөнө. Дүртенсе көн ишеккә күрһәттем. Етте, ҡунаҡ ваҡыты – өс көн. Кит, бар. Ул миңә беләген күрһәтеп маташтты. Көс бар икән, эйе, пристангә йөк бушатырға килгән. Типкеләнем, сығарып ырғыттым. Кем улы ул – Риф? Фашистан аламараҡ Ғариф улы. Дөрөҫөн әйткәндә, уйнаштан тыуған.

Риф бер ҡышты бич ролендә үткәрҙе. Йылытыу торбаһы люгында ҡунып йөрөнө, бер тапҡыр ярҙам һораны, аҡсалата.

– Мин һиңә хәҙер үк билет алып бирәм, ҡайтып китерһең.

Осорға теләмәй, сөнки яҡында «вожагы» күҙәтә. Бирмәнем. Әйҙә, шешә йыйһын. Эше шул. Бындайҙар күп, ә ни өсөн? Ихтыярһыҙ зат үҙен башҡаларға тиңләй, яңлыша. Был төбәктә, Совет Коллондайкында, ихтыярһыҙ кешегә урын юҡ.

Арзамат сирләгән, ә больничный йәки справка ала алмаған, эштән ҡыуылған. Ә мин? Ятаҡтағы төйәк – боҙ менән йәнәш. Тәҙрәнән ел өрә. Һалҡын тейҙе. Температурам ҡырҡҡа яҡын, ә мин больницаға барманым. Ни өсөн? Диагнозымды белһәләр, аңлашыла: миңә был төбәктә эшләргә, йәшәргә ярамай. Яңы килгәндәргә эштең ауырын йөкмәтәләр, тубыҡтарым ҡалтырай. Мин кислород тулы баллон күтәреп атлайым.

Бичтар тормошо менән яҡындан таныштым, йәшәү урындарында булғыланым.

Вожактарҙың йәшәү урыны бар, күберәген улар балоктарҙа йәшәй. Вертолет менән тайгаға оҙатылған бригаданың ярым землянка балогына ла күҙ һалдым. Был урынды миңә Арзамат күрһәтте. Күңелһеҙ күренештәр күп. Һөйләп бөтөрлөк түгел.

Ә факелдар! Самотлор факелдары йыл әйләнәһенә яна. Гөрләп яналар, яҡын барырлыҡ түгел. Ҡышҡы һыуыҡтарҙа бичтар яҡын бара. Йылыналар. Янып ғәрипләнгәндәре лә булғылай. Эйе, өшөгән – йылыға, бешкән һыуыҡҡа ынтыла. Донъя... Ярар, мин берәүҙе күрҙем: бите бешеп йәмһеҙләнгән, аяғы туңып ғәрипләнгән – иҫерек килеш башы менән факелға яҡыныраҡ ятҡан.

Обь ярындағы кәмәләр аҫтында йәшәүсе бичтар бар ине. Йыуан торба эсендә лә йәшәгәндәре бар. Бына анекдот: вертолет тайгаға йыуан торба килтереп төшөрә. Торба ергә төшкәс, эсенән бич сығып йүгерә.

Берәүһе тураһында ғына яҙам. Ул һәр ваҡыт ҡаланың иҫке өлөшөндә, осһоҙло вино һатылған магазин тупһаһында ултыра. Башта сайҡалып йөрөнө, сатанлай башланы, таяҡ тотто, ә иң аҙаҡ ҡайҙандыр ике ҡултыҡ таяғы табып алды, ғәрипләнде. Бите тураһында әйтмәгән яҡшы. Һәр саҡ туҡмалған – күгәрмәгән урыны юҡ. Мин уға ҡушамат уйлап таптым: «Вермутянка». Туҡмалыуҙан ҡурҡмай, һәр үтеп барған иргә: «Һеҙ мине… алмаҫһығыҙ, ә шулай ҙа әҙ генә вино ҡойоғоҙсо, һеҙгә йәл түгел бит?» Күрәһең, бына ошо һүҙҙәр өсөн типкеләнә. Эйе, виноға ҡарағанда типкене күберәк ала.

Бына шулай, әлегә Брежневтар «развитый социализм» төҙөгән арала, өҫтәгеләр тырышып капитал туплау юлына баҫты, «батып барған» караптан ҡасырға йыйынды. Системаны тәнҡитләүселәр әҙ булманы. Партия ағзаһы булараҡ, үҙем дә тәнҡиткә бирелдем. Система көслө, тәнҡитселәр пресс аҫтында ҡалды. Ә шулай ҙа аңлаусылар бик әҙ булды. Андропов таҙартыуы иҫ киткес резонансҡа килтерҙе. Таҙалыҡ өсөн көрәшеүселәрҙе «таҙалыҡ» өсөн көрәшеүселәр типкеләне. Мине лә партиянан төшөрҙөләр, тәнҡит өсөн. Эх, Андропов, һин кәҙә көтөүен бүреләргә тапшырҙың.

Арзамат юғалды, буғай. Ишеттем: имеш, «беренсе»нең фатирына төшкән. Ә кем белә...

Мин был ҡалаға 1974 йылда аяҡ баҫтым. Тәүге йылда уҡ йөрәк өшөтөрлөк күренешкә юлыҡтым. Ҡала моргынан үлектәрҙе һалдаттар автомобилгә тейәй. Мин һанай алманым, 32 мәйет инеме... Бичтар. Был – сер түгел, әммә был хаҡта һөйләү хупланмай.

«Татра»ла елдерәм, ә шофер: «Кисә зыяратта булдым, ә зыярат ҡараусы ҡарт бер-ике самосвал ҡом һорай», – ти. Яңы зыяратҡа яҡынбыҙ. Ашығыс заказ юҡ. Карьер яҡын, тейәнек, зыяратҡа килдек. Ҡарт рәхмәт әйтте: «Күрәһегеҙме, йәйге көн, ә еҫ ниндәй...Бына рәхмәт, күмергә кәрәк». Ҡәберҙән йыртыҡ кейемдәр һәлберәп күренә. Мин бындай күренешкә ҡарай алмайым. Күмәктәр ҡәберенә...

Ю-у-уҡ, туғандар! Һуғыш юҡ. Тәбиғәт бәләһе юҡ. Милләт-ара ыҙғыш юҡ.

Аңламайым. Санитар нормалар бар бит һуң!? Тейешле тәрәнлеккә күмеп булалыр бит? Ярар. Был ҡартҡа һорауҙарым бар ине, өндәшеп торманым. Шоферға үҙемде өйгә илтергә ҡуштым. Килтерҙе. Тағы бер рейс ҡом алып барып, дөйөм ҡәберҙе күмергә бойорҙом.

Эй, туғандар! Бич – кәмһетелгән зат. Аллаһ алдында барыһы ла тиң. Беҙ күмәкләп юл төҙөйбөҙ. Ә был юлдан кем йөрөйәсәк?

*Һәр ҡоштоң үҙ ғәҙәте. Ҡоҙғон – ҡарғаға, һайыҫҡан күгәрсенгә оҡшамаҫ. Үҙемсә һөҙөмтә яһаным: һәр милләт ниндәйҙер ҡош ғәҙәте менән йәшәй. Эйе, башҡорттарҙа һәр ырыуҙың үҙ ҡошо булған. Ә беҙ – төйләгәндәр. Һәр халыҡҡа бер ҡош атап бирергә кәрәк булһа, үҙемдең халҡыма, башҡортома, ҡарабаш турғайҙы тәғәйенләр инем.*

## Һуңғы шабаш

Хәйерле иртә. Хәйерле кис. Тыныс йоҡо. Бына шулай һәр көн. Ә бына «хәйерле эш» тигән һүҙ юҡ. «Тыныс эш» тигән һүҙ ҙә юҡ. Бына шулай, ялһыҙ эшкә күнегә башланым, ә нисә йыл тейешле отпускыла булманым. Күнеккәнмен, әрһеҙмен. Шулай ҙа күңел тыныс түгел. Минең эш тыныс түгел. Аэропортта бер нисә объект алдым: резервуарҙар ҡуйырға кәрәк. Котельныйҙы киңәйтеү проектын һыҙҙым. Сметаһын төҙөнөм – свайҙар ҡағып, эш башларға була. Аэропортта ғына бер йыллыҡ эш бар. Ә хафаланыу ҡайҙан? Үҙем ятаҡан эштәр, уларҙы ижад эше тип әйтергә була. Тик тынысланып булмай. Ниңә? Дошмандар юҡ. Мине яратмайҙар, ҡайһы берәүҙәргә оҡшамайым. Уйымса, яҡшы эшләгән кеше тыныс йоҡларға тейеш. Мин, киреһенсә, ике кеше эшен эшләйем, ә йоҡом тыныс түгел. Туҡтарғамы? Уйлап алырғамы?

Күптәр мине хужалыҡ етәксеһе итеп иҫәпләйҙәр. Ә мин – ябай шабашсы. Юҡ, ябай шабашсы түгел, проекттар һыҙа беләм, смета эшен беләм, ә нормаларҙа мин – профессор. Йоҡом ғына һаман тыныс түгел. Договор төҙөгәндә «шабашсы» һүҙе яҙылмай, мин – бригадир. Договорҙа эш күләме күрһәтелә, ә тәьмин итеү – хужалыҡ мәшәҡәте.

Бына ҡайҙа әтнәкә. Эйе, мин тиҙ эш башлайым, ә материал, кәрәк-яраҡ биреүсе юҡ. Үҙем табам. Шабашник – табыусы. Табырға тейеш түгел, табырға мәжбүр. Тимәк, табылған өсөн, табыу өсөн, түгелгән ваҡыт өсөн түләү – юҡ. Быныһы тупик. Үтәлгән эш күләмен тикшереү башланды. Минең эштәрҙе генә тикшерәләр. Партия ағзаһы түгелмен, билеттан ҡотолдом, барыбер тикшерәләр. Шөкәрә киптерергәме? Уйлана башланым. Йәйге көндәр килде, СССР-ҙың төрлө мөйөштәренән шабашсылар килеп тулды. Быңдағы шабашсылар ҡурҡышты: эш етерме-юҡмы? Ә монтаж эштәрен алыусылар әҙ, минең өсөн эш һаман күп. Тағы ишетәм: нарядтарымды тикшергәндәр. Ярай әле, был яҡтан мине отоу ҡыйын, үҙ эшемде яттан беләм. Шулай ҙа һағайҙым.

Мин эш эҙләмәйем, ә эш мине эҙләй. Мине Нәбиев эҙләп тапты. Ул мин генә үтәй алырлыҡ эш тапҡан. Ҡарап ҡарарбыҙ. Ҡалала «Нефтеавтоматика» тресы күренде. Тәүҙә бында һәр трест вагон- ҡаласыҡ төҙөй. Ә вагон-ҡаласыҡтың котельныйы, йылытыу системаһы була. Был эште тиҙ арала эшләргә кәрәк. Трест бинаһы өсөн дә йылытыу системаһын төҙөү фарыз.

Тресҡа килдем. Күрҙем. Беренсе сигнал: мине көтөп алғандар! Мәғлүмәт үҙемдән алда килгән. Имеш, кәрәкле нәмәләрҙең барыһын да үҙем таба алам. Трест, бер ниндәй шарттар тыуҙырмайынса, бер сезонға миңә өр-яңы ЗИЛ трубовозы һәм яңы автокран бирә. Башҡаһын үҙем табырға тейешмен. Бер генә бригадир ҙа быңдай вариантҡа ризалашмаҫ ине. Ә мин риза. Алға!

Иң ҡыҙығы – торбалар эҙләү, табыу. Урлау. Һүрәтләү ҡыйын. Кем ышаныр? Бер йәйҙә биш саҡрым самаһы торба урланым. Ике тапҡыр тотолдом. Нисек ҡотолдом? Кем өсөн урлайым? Дөрөҫөн әйтәм: бына машина – номерын яҙып алығыҙ. Бына автокран, уның да номеры бар. Кәрәк икән, прокурорға барығыҙ, ОБХСС-ҡа һ.б. урынға барығыҙ. Ә миндә ни эшегеҙ, миңә бәйләнмәгеҙ. Бер ҡайҙа ла бармайҙар. Кем алған – шуныҡы. Закон – тайга.

Котелдары юҡ, көҙгә була, тиҙәр. Көләһе килә, көлмәнем. Эйе шул, бындай ғәҙәткә өйрәнгәнмен. Иҫ китерлек оҡшашлыҡ. Барыһы ла бер. Аҡ себендәр осҡан мәлгә тиклем тып-тыныс йөрөйҙәр. Ә һыуыҡ төшкәс, ауыҙҙарында булған йылы һыуҙарын сәсрәтеп енәйәтсене, хужалыҡ дошманын эҙләргә тотоналар. Аңлатып маташтым, байтаҡ миҫалдар килтерҙем. Аңларға теләүсе юҡ. Иң ҙур түрә барыһын да асыҡланы һәм мин әйткәнде башҡаса әйтте:

– Мин сәғәт эшләү сәнәғәтенән, һеҙҙең эште аңлап та етмәйем. Ярар. Һыуыҡ көндәр килгәс, йүгерешеп, башҡа эштәрен ташлап эҙләрҙәр, табырҙар.

Минең урындағы заттың ни эшләрен беләм. Бер генә төкөрөп китеп барыр ине. Ә мин китмәнем. Китмәнем, бөтөнләй өмөтһөҙлөккә бирелмәнем. Ҡарап ҡарағы килә. Бер девизым бар ҙа баһа: «Алға, өмөтһөҙлөктәге уңыш өсөн!» Погнали. Туҡта, бында бер начальник бар, фамилияһы Олифер. Милләте – одессит. Тәү ҡарашҡа был зат менән тауҙарҙы урынынан күсереп булыр кеүек. Ҡыйыу һөйләшә. Бына миҫал. Трест алдынан ҡаланың иң ҙур юлы уҙа. Бына ошо юл аҫтынан ике торба үткәрергә кәрәк. Ун биш метрлыҡ гильза һалыу өсөн юл аҫтын тиҙерәк тишер өсөн катер-пиллер һорап алғандар. Ә бындай эште тиҙ генә эшләп булмай. «С-100» килтерттем. Ҙур тракторҙы эш урынына килтереү генә оҙаҡ ваҡытты аласаҡ. «С-100»-ҙө тар урынға индереү ҡыйын булманы. Әлеге тишеү өсөн килтерелгән торбаны табырға кәрәк, килтерергә лә кәрәк. Ярар, быныһы мөһим түгел – Олифер ҡыланышы ҡыҙыҡ. Донъя яңғыратып маҡтана башланы. Юл аҫтын тишкән – башы еткән. Булдырған! Аптыраушта ҡалдым. Аптырауҙың кәрәге юҡ, Одесса милләтле кешеләре гел шулай.

Тиҙ арала байтаҡ торба табып, күп эштәр эшләнем. Хатта бер котел табып килтерҙем. Беренсе – аҡса алыу. Олифер үҙенең кемлеген асып һалды. Вәт йәһүд! Күпте өмөт итә. Бирҙем, сөнки икеләтә генә түгел, өсләтә ҡайтарырға әҙер.

Иртәгәһенә ни күҙем менән күрәм: ҡасты. Отпуск алып, Украинаһына һыпыртты. Ә маҡтаныусы табылды. Хәҙер инде мин ойошторған эштәрҙе... баш инженер үҙе ойошторған икән дә баһа!

Тағы бер һүҙ. Әгәр был эштәрҙә бер генә ваҡ йәки эре түрәнең ҡатнашлығы булһа, эш сыҡмаҫ ине, бөтөнләй килеп сыҡмаҫ ине. Бындай мәлдәрҙә минең баш сәғәт кеүек эшләй. Иҫәр начальник эш боҙа белә, эшләй белмәй. Бөтөнләй. Нәҙек урында өҙөлөш. Ҡаты һүҙҙәр әйтергә тура килде. Ә иң ҡыйыны эшләнгән, тимәк, начальниктар минең тирәлә бутала башланы. Буталыш ыҙғышҡа килтерә. Йәй уртаһында йүнһеҙҙәр генә эшһеҙ ҡала. Бына ошондай тинтәктәр менән ҙур эш эшләнде. Начальниктар бутала башлағас, команда алйыны. Икәүһе прокурорға йүгерә, береһе – бындағы түрәгә, ә тағы өсәүһе ватып емерергә әҙер. Минең дә «һуңғы» әмәлем бар. Аркадий исемле дуҫыма әйтем, аңлаттым. Аркадий әлеге өсәүгә әйтте: «Боттарығыҙҙы өҙөп ырғытам, ҡулдарығыҙ менән атларһығыҙ».

Минең ғәҙәт: уңышлы эш һөҙөмтәһенә шатлана беләм. Ә кем шатлана? Асыу ҡабарҙы. Был турала һөйләге килмәй. Бирәйбә.



Сәлиә
ҒАТАУЛЛИНА

# Һин китәһең, мин ҡалам…

## ХИКӘЙӘ

*Мәктәп тупһаһынан сығыу менән хәрби хеҙмәткә алынғас, Афғанстанға эләгеп, ғүмерҙәре өҙөлгән, ә тере ҡалғандарының яҙмыштары ҡырҡа үҙгәргән тиҫтерҙәремә бағышлайым.*

**Автор.**

*1*

*Йәшлегем биҙәге – ҡыңғырау сәскә,*
*Күпме хәтирәләр уяттың?!*
*Йөрәк төпкөлөндә бикләп тотҡан*
*Йәшерен серҙәремә юл таптың!*

…Шау сәскәгә күмелгән туғайҙан икәү атлай. Ҡулға-ҡул тотоношҡандар. Үҙҙәре юҡтан да ҡыҙыҡ табып, шарҡылдап көлөшәләр, шаяралар.

Ҡыҙҙың башында ялан сәскәләренең иң сағыуҙарынан ғына яһалған нәфис таж. Өҫтөндә иҫ киткес матур, үҙенә үтә лә килешеп торған зәңгәр төҫтәге күлдәк. Егет ап-аҡ күлдәк, ҡара салбар кейгән. Тулҡынланып торған ҡара сәстәре, көлөп ҡараған ҙур ағымлы күҙҙәре уны тағы ла һөйкөмлөрәк итә. Егет, ташҡын хистәрен тыя алмай, ҡапыл ҡыҙҙы ҡосағына ала ла уны шашып-шашып үбергә тотона…

Был икәү – Зәлифә менән Айбулат. Күрше ауылға ҡунаҡҡа ҡайтып килгән Айбулаты менән Зәлифә бер нисә көн генә күрешмәгәйнеләр – шул тиклем һағынышҡандар!

---

*Сәлиә Ғатауллина (1961) Белорет районының Бирҙеғол ауылында тыуған. Оҙаҡ йылдар төҙөлөштә эшләй. Хәҙер Учалыла йәшәй, төбәк яҙыусылар ойошмаһы ағзаһы. Замандашыбыҙ күңеле-йөрәге менән беренсе сиратта – музыкант-гармунсы. Йыр-моң һөйөүе уны шиғриәткә алып килгәндер ҙә әле. 2011 йылда ул «Үтмә әле, ғүмер!» исемле шиғырҙар йыйынтығын китап итеп сығарҙы, хәҙер үҙен прозала ла һынап ҡарамаҡсы. Әлеге хикәйәһе менән «Ағиҙел»дә тәүләп сығыш яһай.*

– Зәлифәкәй, ана, күрәһеңме ҡаршылағы ҡаяны? – тип һорай егет, наҙлы ҡараштарын һөйгәненән айырып ала алмай.

– Эйе, күрәм! – ти Зәлифә. Үҙе һаман да шаярып, сыңғырҙатып көлә.

– Беләһеңме, нимә? Һин бына ошонда ғына баҫып тор, йәме? Мин хәҙер ошо ҡаяның иң бейек урынына менеп баҫам да бар донъяға һине яратыуымды яңғыратам!!!

– Ҡуй, Айбулат, мин бер үҙем бында ҡалмайым! Мин дә һинең менән! – Һөйгәненән аҙға ғына ла айырылғыһы килмәй шул уның.

– Юҡ, Зәлифәкәй! Мин оҙаҡ тормаҫмын, тиҙ арала янына кире төшөрмөн. Көт мине! – тине лә Айбулат, ҡаяға табан йүгерҙе.

Бына ул, ҡаяның иң бейек урынына менеп еткәс:

– Э-һе-һе-һе-й-йй! Ишетәһегеҙме, тауҙар? Ишетәһегеҙме, кешеләр? Мин Зәлифәне яратам!!! – тип ҡысҡырҙы.

Айбулатҡа ҡушылып, тауҙар уның һүҙҙәрен шаңдау булып ҡабатланы:

– Зә-зә-зә… я-я-я-ра-там!!!

Айбулат, ҡулдарын ҡарсыға ҡанаттарындай ике яҡҡа йәйгән дә, үҙе лә ҡоштай талпына. Зәлифәгә ул шулай ҡош булып осор ҙа китер төҫлө.

Бына ул:

– Зәлифәкәй, мин янына киләм, һин дә йүгер ҡаршыма! – тип ҡысҡырҙы ла ҡаянан төшә башланы.

Зәлифә атлығып ҡаршы йүгерҙе. Әле генә Айбулаттың һөйөү һүҙҙәрен яңғыратҡан ҡаяға ла яҡынлашты. Ҡапыл, көтөлмәгәндә, уның аяҡ аҫтындағы ер убылып китте лә, Айбулат менән икеһе араһында төпһөҙ упҡын барлыҡҡа килде. Зәлифә ҡаршы яҡҡа һикереп сығырға ла өлгөрмәй ҡалды. Ҡаушауынан, ҡурҡыуынан бөтөнләй быуынһыҙ ҡалған ҡыҙ, сарбайлап:

– Ай, Айбулат! – тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Ҡаянан төшөп еткән Айбулат та теге ярҙа үрһәләнә:

– Зәлифә! Зәлифәкәй, хәҙер ҡотҡарам мин һине, көт! – тип ялбара.

– Аһ, Айбулат, ҡалдырма мине, ал үҙеңдең янына! Мин һинһеҙ бөтөнләй йәшәй алмайым! – тип үкһеп-үкһеп илай Зәлифә.

Ә аралағы упҡын киңәйгәндән-киңәйә, Айбулат та йыраҡлашҡандан-йыраҡлаша бара. Үҙе, ҡулдарын болғай-болғай, һаман нимәлер ҡысҡыра…

– Аһ, Айбулат, ал мине үҙ янына! – Зәлифә ни эшләргә лә белмәй, үрһәләнә, Айбулатын саҡыра, өҙгөләнеп, ҡысҡырып илай…

Үҙ-үҙен белештермәй түгелеп илаған Зәлифә уянып киткәнендә шыбыр тиргә батҡан, туҡтауһыҙ аҡҡан күҙ йәштәренән хатта мендәре сыланып бөткән, үҙе һаман да тынышлана алмай, һулҡылдап илай ине…

Күргән төшөнөң тәьҫиренән айырыла алмай, Зәлифә оҙаҡ ҡына ятты. Йыраҡтарҙа ҡалған ғәмһеҙ, сая йәшлегенең иң бәхетле бер мәле төшөнә кереп, тап өнөндә булғанса ҡабатланыуы күңелен бик нык иләҫләндергәйне. Тик төшөнөң аҙағы шулай ҡурҡыныс тамамланыуы күңеленә шом һалды.

Һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә таң ҡыйыла. Отпускыла булғас, иртә тороуҙың кәрәге юҡ.

Әллә таң алдынан ғына күргән төшө сәбәпсе булдымы – Зәлифәнең йөрәге көнө буйы болоҡһоп тик торҙо. Ул, үҙенә урын таба алмай, ары һуғылды, бире һуғылды. Кискә табан бер аҙ тынысланғандай ҙа ине… тик оҙаҡҡа түгел икән шул! Кис еткәс, күптән ташлап ҡуйған бәйләмен ҡулына алып, йәтешләп кенә ҡәнәфигә ултырҙы. Бер журналда күреп ҡалған кофта үрнәген бәйләй башлаған да онотҡан икән… Ҡапыл, фатирҙы яңғыратып, телефон шылтыраны. Зәлифәнең

былай ҙа борсоулы йөрәге ярһып туларға тотондо. Ҡаушауынан күпмелер ваҡыт телефон трубкаһын үрелеп алырға ҡыймай торҙо. Күңеле, ниҙер һиҙенеп, шомланды:

– Алло?

– …

– Алло, тыңлайым?!

Телефонда бер аҙҙан ҡатын-ҡыҙ тауышы ишетелде:

– Һаумыһығыҙ! Миңә Зәлифә апай кәрәк ине… – Ни өсөндөр теге остағы ҡатын ауыр көрһөнөп ҡуйҙы.

– Был мин – Зәлифә! Ә кем шылтырата?

– Мин – Айбулаттың һеңлеһе Аида…

– Эйе, Аида һылыу!

– Ғәфү итегеҙ, мин һеҙгә хәбәр итмәй булдыра алманым. Бөгөн… беҙҙең Айбулат ағай һәләкәткә осраны… – Телефондан Аиданың һулҡылдап илағаны ишетелде.

– Аһ!

Зәлифә телефон трубкаһы ҡулынан нисек төшөп киткәнен дә һиҙмәне.

Аптырап, тирә яғына ҡаранды ла йәнә трубканы ҡулына алды. Телефонда Аида өҙгөләнеп Зәлифәне саҡыра ине…

– Ишетәм, Аида һылыу… Ғәфү ит, зинһар, әллә нишләнем дә ҡуйҙым!

– Зәлифә апай, ерләү – иртәнән һуңға. Килеп өлгөрһәгеҙ, яҡшы булыр ине.

– Әлбиттә, ҡайтам, иртәгә иртүк юлға сығам, көтөгөҙ!

– Һеҙҙе вокзалда уҡ ҡаршы алырҙар. Ярай, хуш-һау булығыҙ.

– Һау булығыҙ…

«Бына ни өсөн уның йөрәге иртәнән бирле тулаған. Их, Айбулат… Һәләкәткә осраған, тиме? Нимә булғанын һорашырға башыма ла килмәне. Хәйер…»

– Аһ, Айбулат йәнем!

Зәлифә, көтмәгәндә ишеткән ҡурҡыныс хәбәрҙең аяуһыҙ дөрөҫлөгө әле яңы аңына барып етеп, тыйыла алмай, үкһеп илап ебәрҙе. Ҡасандан бирле йыйылған ҡайғы-һағыштары, үкенестәре – барыһы бергә әсе күҙ йәштәренә әйләнеп, бер туҡтауһыҙ аҡты ла аҡты…

*2*

…Зәлифә – ауыл ҡыҙы. Йәмле Инйәр буйында урынлашҡан Усаҡлытау ауылынан. Бигерәк матур шул уның ауылы. Исеме лә есеменә тура килеп кенә тора – Усаҡлытау! Ә ундағы усаҡтарҙың матурлығы! Бигерәк тә көҙөн улар, иҫ киткес күркәм булып, күҙҙең яуын ала. Ул үҙенең яратҡан тауы Шылғантүбәлә ошо ағастар араһында йөрөргә һәләк ярата. Шылғантүбә – ауылдың ситендә генә, Бағарышты йылғаһынан һуң башлана. Әллә ни ҙур ҙа булмаған тау төрлө еләкбәшмәктәр менән тулы. Юғарыға менеп ҡараһаң, бөтә ауыл ус төбөндәгеләй күренә.

Зәлифә быйыл ун биш йәшен тултырҙы. Һигеҙенсе синыфты тамамлағас, әллә берәй ҡайҙа уҡырға барырғамы, тип уйлап та ҡуйғайны. Шул үҙенең оялсан, ҡыйыуһыҙ булыуы арҡаһында кире ҡайтауланы. Синыфташ ҡыҙҙары фельдшерлыҡҡа уҡырға инеп тә ҡайттылар инде.

Әллә ниңә бигерәк ҡыйыуһыҙ шул. Берәй ят кеше менән һөйләшергә тура килһә, үҙенең тауышын хатта үҙе лә ишетмәй, әллә нишләй ҙә ҡуя. Оялыуынан ҡыҙарып бөтә. Шуға, бер ҡайҙа ла китмәй, ауылда ҡалды. Ике йыл эсендә, бәлки, кешеләрҙән тартыныуы кәмер?

Тағы ул тиҙ генә ауылын ташлап сығып китә лә алмай. Ул да китһә, ҡустылары ни эшләр?

Аталары бәләгә осрап һәләк булғас, әсәләре биш бала менән тороп ҡалды. Эшләгән эше лә бик ауыр. Инде Зәлифә лә уҡырға китһә?

Зәлифәнең дүрт ҡустыһы бар. Юнир үҙенән ике йәшкә кесе, Булат бишенсегә бара, ә игеҙәктәргә бары бишәр йәш. Малайҙар бигерәк тиктормаҫ, арттарынан ҡарап ҡына өлгөр!

Ә Юнир – апаһының иң беренсе ярҙамсыһы. Ҡайһы саҡта уның көсө етмәгәнде «һә» тигәнсе эшләп тә ҡуя. Быйыл бесән мәлендә үҙен нисек күрһәтте! Салғыһын шул тиклем матур итеп, ирҙәрсә һелтәй… Әсәләре ҡыуанып ҡарап тора ла: «Эх, атайығыҙ ҙа күрһә икән!» – тип әрнеп әйтеп ҡуя.

Булат ҡустыһы ла  өй эштәрендә ярҙамлаша башланы. «Тағы нимә эшләргә, апай?» – тип йүгереп килеп етә. Иң яуаплы эштәр – барыбер Зәлифә иңендә.

Быйылғы йәй бигерәк матур килде. Әле генә йәшенләп-күкрәп ямғыр яуһа, артынса уҡ ялтырап ҡояш килеп сыға. Тиҙ арала матур итеп йәйғор ҡалҡа. Ә ундай йәшенләп яуған ямғырҙан һуң ниндәй матур була тирә-яҡ! Бөтә донъя сафланып, йәшелләнеп ҡала. Баҡсаларҙа хуш еҫ аңҡый, өҙҙөрөп ҡоштар һайрай, Зәлифәнең яратҡан тауында кәкүк саҡыра. Тик бына әсәһе генә  ниңәлер һөйһөнмәй ошо ҡошсоҡто. Ишетеп ҡалдымы, һуҡрана башлай. Моңло кәкүкһеҙ урман буламы икән ни? Тағы Зәлифә һандуғастарҙы тыңларға ярата. Хыялланырға яратҡан хисле ҡыҙыҡай урмандарҙа йөрөгәндә ниндәй генә ҡоштарҙы тыңламаны – һандуғасҡа еткергәндәрен ишеткәне булманы. Булмаҫтыр ҙа…

Ә быйыл бигерәк иләҫләнеп тыңлай ул йырсы ҡоштарҙы. Каникулдары башланғас, әхирәте Ғәлиә менән һәр кис һайын үҙҙәренең яратҡан тауына һандуғастар тыңларға ашыҡтылар. Яңғыҙ ҡайын төбөнә ултырып алалар ҙа көтә башлайҙар. Бына бер мәл аҫта, йылға буйындағы таллыҡта, «сут-сут» иткән тауыш ишетелә. Шунан һуң башлана!  Әхирәте менән тын алырға ла ҡыймай, һуштары китеп тыңлайҙар. Бер аҙҙан ҡоштар тына. Әхирәттәр хыяллана-хыяллана ҡайтырға сыға. Мөхәббәт тураһында серләшәләр.

– Китаптарҙағыса, киноларҙағыса мөхәббәт беҙгә лә килһә икән, эйеме, әхирәт? Берәйһенә үлеп ғашиҡ булырға ине! – тип шыбырҙай Ғәлиә, хисләнеп.

– Ысынында ундай мөхәббәт булмайҙыр ул? – ти Зәлифә, икеләнеп.

– Була икән шул! Ана, әсәйемдәр йәш саҡтағы әхирәттәре менән осраштылармы, тик шул турала һөйләшәләр. Үҙҙәренең тәүге мөхәббәттәрен һағынып, илашып та алалар. Атайҙар күрмәгәндә генә, кәнишнә. Һиңә лә сер итеп кенә әйтәм, һөйләй күрмә берәйһенә!

– Ҡуйсы, Ғәлиә, кемгә һөйләйем, ти? Мин ул турала кеше алдында әйтә аламдыр шул?

– Ярай, ярай, үпкәләмә! Былай ғына әйтәм!

Ғәлиә менән хушлашҡас, Зәлифә өйөнә ҡайтып еткәнсе ошо һөйләшеүҙе уйлап ҡайтты.

«Ысынлап та, уға ла шундай мөхәббәт килерме икән? Кем икән ул уның өҙөлөп һөйөр кешеһе? Ә нисек килә икән мөхәббәт тигәндәре? Зәлифәне лә өҙөлөп яратҡан кеше булырмы икән? Юҡтыр ҙа».

…Киләһе яҙға тиклем, эй, һағынырҙар инде һандуғастар моңон!

Тағы Зәлифә шишмә башына һыуға йөрөргә ярата. Уларҙың шишмәләре яҡындағы урман эсендә генә, ереклектәр араһында ағып ята. Күрше ағай ул шишмәгә матур итеп йорт та төҙөп ҡуйҙы.

Улаҡтан сылтырап ҡына аҡҡан һыуға биҙрәһен ҡуя ла тирә-яғына күҙ һала. Эй,

бигерәк рәхәт шул бында! Эргәлә генә мөһабәт еректәр, йәйге эҫелә һалҡынса күләгә биреп, әкрен генә тирбәлә. Тирә-яҡты тағы ла йәмләндереп ҡоштар һайрай, йәйҙең хозурлығына ҡыуанып, өйөрөлөп-өйөрөлөп төрлө-төрлө төҫтәге күбәләктәр оса. Бал ҡорттары иң хуш еҫле сәскәләрҙән тырышып-тырышып һут йыя.

Ул йүгерә-йүгерә күгәрсен күҙе, ҡыңғырау сәскәләрен йыйып ала ла сылтыр шишмә үҙенең һыуын ҡойған Бағарышты йылғаһына яҡын уҡ барып, уны күҙәтеп тора. Яҙын ул йылға бик ныҡ таша, хатта ярында баҫып тороуы ла ҡурҡыныс була. Ярына һыймаған йылға туғайҙарға йәйелә. Күпмелер ваҡытҡа ағастар һыу аҫтында ҡала. Зәлифә уның шулай ярһып-ташып аҡҡан ваҡытын ныҡ ярата. Ниңәлер күңеле шул сағын үҙ итә. Тәбиғәткә һушы китеп, иләҫләнеп йөрөгән Зәлифә күршеләренең һыуға төшкәнен күреп ҡалһа, тиҙерәк биҙрәләрен көйәнтәләп, ҡайтырға ашыға.

Йәйге каникулдары үтеп тә китте. Өс көндән мәктәпкә! Ни өсөндөр был юлы беренсе сентябрҙе бигерәк тулҡынланып көтә Зәлифә. Әллә ниҙәр булыр кеүек…

*3*

– Аһ, Айбулат, йәнем!

Зәлифә, асырғанып ҡысҡырып ебәреүенән һиҫкәнеп, тирә-яғына күҙ һалды. Хәтирәләргә бирелеп, урынынан да ҡуҙғалмай күпме ултырҙы икән? Ул стеналағы сәғәткә күҙ һалды. Юлға сығырға ла ваҡыт етеп килә икән. Ә ул әҙерләнмәгән дә! Ҡазандан Өфөгә поезд иртәнге алтыла ҡуҙғала. Бары ике сәғәт ваҡыты ҡалып бара.

Зәлифә тиҙ генә әйберҙәрен юл сумкаһына тултырҙы. Тамағына тәғәм ризыҡ ҡабаһы килмәһә лә, бер аҙ кофе эсеп алырға булды. Телефондан такси саҡыртты ла вокзалға йүнәлде. Бөгөн эш көнө булғанғамы, вокзалда кеше әллә ни күп түгел. Билетты тиҙ алды.

Бына ҡуҙғалырға ваҡыт. Вагонда кеше унда-һанда ғына. Зәлифәнең бер үҙенә бер купе тура килде. Әйберҙәрен урынлаштырғас, йоҡларға ятты. Тик, нисек кенә йоҡларға тырышһа ла, күҙенә йоҡо кермәне.

Бер аҙҙан ул хәтирәләренә кире әйләнеп ҡайтты.

*4*

…Бына 1 сентябрь ҙә етте. Мәктәп эсе гөж килеп тора. Зәлифә үҙенең синыфташтары янына килеп баҫты. Ни эшләптер Ғәлиә күренмәй. Әллә күрше районда йәшәгән өләсәһенән ҡайтып етмәгәнме?

Линейканан һуң һәр кем үҙ синыфына йүнәлде.

Зәлифә тәҙрә янындағы буш партаға барып ултырҙы. Линейка ваҡытында әллә ни иғтибар итмәгән икән: барыһы ла үҙгәреп, үҫеп киткән! Малайҙарҙың танау аҫтарында мыйыҡтары барлыҡҡа килгән, быға тиклем сибек кенә булған ҡыҙҙарҙың да кәүҙәләре тулышып үҙгәргән.

Барыһы ла шат, күҙҙәре ут булып яна. Бына бер саҡ ишектән… оҙон буйлы, ят егет килеп керҙе. Үҙе шул тиклем һөйкөмлө, кәүҙәһе лә баһадирҙарса көслө, матур, сөм-ҡара сәстәре тулҡынланып, елкәһенә үк төшөп тора. Шаян икәнлеге йөҙөнә сыҡҡан. Ихлас йылмайып, һаулыҡ һорашҡас, ул:

– Туғыҙынсы «Б» ошондамы? – тип һораны.

– Ошонда! – Синыф гөж килде.

Ул бер аҙ тапанып торҙо ла Зәлифә янындағы буш урынға килеп ултырҙы. Әллә ни булды шул саҡ Зәлифәгә. Биттәре ут булып янғанын тойоп, башын түбән эйҙе. Егет унан нимәлер һорашты, шикелле. Синыф етәксеһе килеп кергәс кенә, Зәлифә еңел тын ала алды.

Уҡытыусы барыһын да яңы уҡыу йылы башланыуы менән ҡотлап, уңыштар теләне. «Яңы уҡыусы ла бар икән», – тип, уның тураһындағы мәғлүмәттәрҙе журналына теркәгәс:

– Иртәгә уҡымайбыҙ. Бөтәбеҙ бергә походҡа барабыҙ. Йә, әйтегеҙ, ҡайҙа теләйһегеҙ: Инйәр буйынамы, әллә Оҫҡонтауғамы? – тип һораны.

– Оҫҡонтауға! – Ҡыуаныстан барыһы бер юлы ҡысҡырҙы.

– Ярай, әләйһә, әҙерләнегеҙ. Иртәгә сәғәт туғыҙға йыйылабыҙ. Үҙегеҙ менән ашарға алығыҙ. Урманда сәй ҡайнатып, бәрәңге бешерербеҙ.

Мәктәптән Зәлифә әхирәте Ғәлиә менән ҡайтты. Беренсе дәрескә ул, һуңлап булһа ла, килеп өлгөргән. Күптән күрешмәгәс, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне.

– Шунан, күршең менән таныштыңмы? – Шаян холоҡло Ғәлиә, мут йылмайып, әхирәтенә өндәште.

– Юҡсы! – Ҡырыҫ ҡына яуапланы Зәлифә.

– Бәй, ништәп улай асыуҙанаң ул? – Ғәлиә, аптырап, әхирәтенә төбәлде.

Бер ҙә юҡҡа әхирәтен үпкәләткәне өсөн Зәлифә үҙе лә уңайһыҙланды.

– Зинһар, ғәфү ит, һине үпкәләтермен тип уйламаным. Мин бит уны бөтөнләй белмәйем.

– Ә, беләһеңме, ул кем? – Әхирәте серле генә йылмайып, Зәлифәгә һүҙ ҡушты.

– Кем һуң? – Тиҙ генә һорағанын Зәлифә аңғармай ҙа ҡалды.

– Ул, ни, теге мәктәп урамында йәшәгән Илһам ағайҙың улы икән. Әсәләре ҡапыл ғына үлеп ҡалғас, өс баланы бер үҙенә ҡарауы ҡыйын тип, атаһының күрше ауылда йәшәгән бер туған һеңлеһе өс йәшлек Айбулатты үҙҙәренә уллыҡҡа алған, ти. Уларҙың ауылында һигеҙ йыллыҡ ҡына мәктәп, шуға быйыл бында уҡыясаҡ. Оло ағаһы өйләнгән, ситтә йәшәй. Аида исемле һеңлеһе менән атаһы ғына икән өйҙәрендә. Улының үҙҙәренә йәшәргә ҡайтҡанына ифрат ҡыуанған атаһы. Ул былай ҙа: «Яңылыштан улымды бирҙем дә ебәрҙем, хәҙер кире уйларға ла әллә нисегерәк бит әле?..» – тип гел ҡайғырып йәшәгән. Улын һәләк яратҡан. Ҡайһы саҡта барып та сыҡҡылаған һеңлеләренә. Әйтергә генә ҡыймаған эсендәген. Вәт!

– Ә һин быларҙы ҡайҙан белеп өлгөрҙөң һуң?

– Иртә менән күрше Мәсүрә апай беҙгә кергәйне, шул һөйҙәп сыҡты. Ә уның бит белмәгәне юҡ!

«Бына кем икән ул!»

Зәлифә Ғәлиәне ашыҡтырҙы:

– Әйҙә, ҡайта һалайыҡ. Ҡустылар үҙҙәре генә, иртәгәгә әҙерләнер кәрәк!

Ҡайтҡас, Зәлифә өй эштәрен, ни сәбәптәндер, осоп йөрөгәндәй тиҙ башҡарҙы. Үҙенең, ниңәлер, тик йырлағыһы ғына килеп тора. Кискегә картуф билмәне бешерҙе, ҡоймаҡ ҡойҙо. Аш өлгөрөүгә әсәһе лә ҡайтып етте. Походҡа барыуҙары тураһында әйткәс, әсәһе:

– Ярай, һин походыңа әҙерлән, ҡалған эштәрҙе үҙем эшләрмен, – тип ихатаға сығып китте.

Зәлифә үҙенә бер нисә йомортҡа, бәрәңге алырға булды. Ҡоймағын да өҫтәне.

Иртәнсәк Зәлифә арҡаһына төйөнсөгөн аҫып, башына яулыҡ бәйләгәс, аяҡтарына резина итектәрен кейеп алды ла мәктәбенә йүнәлде. Йүгерә-атлай ашығып барып етте, мәктәп ишеген асты. Ә унда – шау-шыу!

Ҡолаҡтарын ҡапларҙай булып, тиҙерәк үҙенең синыфына йүнәлде. Кереү менән, үҙе лә һиҙмәҫтән, тәҙрә яғына күҙ һалды. Ә унда… теге егет ишеккә генә ҡарап ултыра ине. Зәлифә шым ғына урынына барып ултырҙы.

«Сәләм!» – тип өндәште Айбулат. Яуап итеп ҡыҙ һиҙелер-һиҙелмәҫ баш ҡаҡты. Синыф етәксеһе килгәс, бер аҙ һөйләшеп, пландар ҡороп ултырҙылар ҙа юлға ҡуҙғалдылар. Юл арыу уҡ оҙон, тик тау үренә генә. Шулай ҙа дәррәү атлай барыһы ла. Юл буйы шаярышып-көлөшөп барҙылар.

– Зәлифә, бир төйөнсөгөңдө, үҙем күтәрәйем, – тигән тауышҡа боролоп ҡараһа, янында Айбулат баҫып тора.

– Ҡуй, үҙем!

– Юҡ инде, күршеңә ярҙам итмәү килешмәҫ. Беҙ бит парталаш күршеләр. Ҡайҙаһы, бир үҙемә!

Ҡыҙыҡай икеләнеп бер аҙ торҙо ла төйөнсөгөн егеткә һондо. Үҙе, башҡалар ни уйлар инде тип, яҡ-яғына ҡаранды. Былай, иғтибар иткән кеше тойолманы шикелле. Уға нисектер рәхәт тә, күңелле лә булып китте. Әйбере әллә ни ауыр түгел ине лә…

Айбулат юл буйы урмандағы йәнлектәр, уларҙың ғәҙәттәре тураһында һөйләп барҙы. Ул шундай мауыҡтырғыс итеп һүрәтләй! Зәлифә уны шулай ге-е-е-л генә тыңлар ине… Их, ниндәй яғымлы уның тауышы! Һөйләй-һөйләй ҙә йә берәй ҡоштоң, йә хайуандың ҡыланыштарын ҡабатлап күрһәтә. Бигерәк тә ҡоштарҙың тауыштарын килештереп әләкләй. Ысын ҡоштарҙан айырырмын тимә!

Бер аҙҙан уларҙы Ғәлиә ҡыуып етте:

– Ай-һай, әхирәт, мине әллә ҡайҙа ҡалдырып киттең дә барҙыңсы? Былдай егет барында минең турала оноттоң дамы? – тип шаяртты. Зәлифә уңайһыҙланып:

– Үҙең тороп ҡалдың бит, ҡыуып етергә ине, – тип аҡланды.

– Әйҙәгеҙ, улайһа, бергә атлайыҡ. Әхирәтебеҙ ни өсөндөр тик тыңлап ҡына килә, үҙе бер ни ҙә һөйләмәй! – Айбулат Ғәлиәне лә йәнәш барырға саҡырҙы. Хәҙер инде Ғәлиәнең дә әйберен күтәреп алды.

Бына тауҙың иң бейек түбәһенә менеп еттеләр. Унда күмәкләшеп фотоға төштөләр. Юғарыла ел бигерәк әсе булғас, оҙаҡ тотҡарланмай, тирә-яҡҡа һоҡланып, бер аҙ торҙолар ҙа түбәнгә ашыҡтылар.

Төшөп етеп, усаҡ яҡҡас, картуф бешерергә ҡуйып, сәйнүктәрен элделәр.

Төшкө аш бик күңелле үтте. Кемдер мәҙәк, кемдер йәйге мажараларын һөйләп көлдөрә. Ашап алғас, бер аҙ ял итергә булдылар.

Тау үренә менгән саҡта Зәлифә таштарға бик ҡыҙыҡҡайны. Әле, ваҡыт барҙа, уларҙы ентекләп тикшереп, вағыраҡтарын кеҫәләренә тултырҙы. «Айбулатҡа күрһәтмәҫмен, әтеү, тағы ла күтәрергә уйлаһа, оят булыр!» Айбулат уны күҙәтеп торғанмы, таштарын кеҫәһенән сығартып, үҙенең рюкзагына һалып та ҡуйҙы:

– Ҡайтып еткәс бирермен, – тип ихлас йылмайҙы үҙе…

*5*

Сыр-сыу килеп ҡысҡырышҡан, балалар илаған тауышҡа Зәлифәнең уйҙары бүленде. Поезд ниндәйҙер ҙур ғына станцияла туҡтаған. Вагонға кешеләр килеп тулды. Сәғәт ун бер ҙә булып киткән. Иртәгә иртә менән Өфөнән ауылы яғына поезд булырға тейеш. Ҡайтып ҡына өлгөрһә ине…

«Тыҡы-тыҡы, тыҡы-тыҡ…» Тәгәрмәстәрҙең шулай бер көйгә тыҡылдауына ойой башланы. Яңы килеп тулған кешеләр урынлашып бөttө.

Зәлифә уянғанда төн уртаһы ине. Поезд, ваҡытына ярашлы, һуңламай ғына килә былай. Өфөгә етергә лә күп ҡалмағандыр.

Ул, әҙ-мәҙ тамаҡ ялғап, кофе эсеп алғас, әйберҙәрен сумкаһына тултырҙы ла тәҙрә янына ултырҙы.

Оҙаҡламай Өфө күренде. Вагондан төшкәс, ҡайһы яҡҡа китергә тип туҡтап ҡалғас:

– Һеҙ Зәлифә апаймы? – тип янына утыҙ йәштәр самаһындағы егет килеп баҫты.
– Эйе.
– Уҫаҡлытауға юл тотаһығыҙ икән, тап һеҙҙе ҡаршыларға тейешмен! Әйҙәгеҙ, машинаға ултырығыҙ! Аида апай: «Һуңлап ҡуймаһын, Өфөнән үк ҡаршылар кәрәк!» – тип һеҙҙе алып ҡайтырға ебәрҙе.
– Өлгөрмәй ҡуйырмынмы икән, тип борсола инем, ҡайһылай уңай булды!
Юлда күпмелер ваҡыт һөйләшмәй генә барҙылар. Ахырҙа Зәлифә түҙмәне:
– Һеҙ мине нисек таныныығыҙ һуң? Мин бит һеҙҙе бөтөнләй белмәйем?
– Белмәйһегеҙҙер шул. Беҙгә бит аралашырға тура килмәне. Ә мин һеҙҙе бер ҡасан да онотманым. Беҙ, башланғыс синыф уҡыусылары, Айбулат ағай менән икегеҙҙең мөхәббәтегеҙгә һоҡланып, бергә йөрөгән сағығыҙға тура килһәк: «Эх, шулай Айбулат ағай кеүек ҙур үҫеп, ошо апай кеүек һылыу кәләшең булһын ине!» – тип хыяллана инек.
– Ҡуйығыҙсы, оялтмағыҙ мине, улай уҡ булмағандыр ҙа!
– Ысынды әйтәм. Тик... һуңынан бергә була алмауығыҙ эсте бошорҙо...
– Яҙмыштыр инде... Бәй, беҙ бит танышманыҡ та. Исемегеҙ кем һуң һеҙҙең?
– Мин – Илнур. Айбулат ағайҙарға күрше Азаматтың улы.
– Иҫләнем. Бер зәп-зәңгәр күҙле, бик шаян малай булып хәтеремдә ҡалғанһың.
– Эйе, шул малай инде. Шаянлығым әле лә шул уҡ минең, күҙҙәрем дә зәп-зәңгәр көйө! – Илнур үҙенең әйткәненән рәхәтләнеп көлөп алды.
– Илнур, бер һорауым бар ине... Аиданан һораша алманым. Ни булған һуң Айбулатҡа?
Илнурҙың йөҙөнә күләгә ятты:
– Эх-х! Ана шул «Иртә уңмаған – кис уңмаҫ» тигәндәре дөрөҫтөр инде.
Быйыл, тәүге тапҡыр, Афған һуғышында ҡатнашҡандар осрашыуына Айбулат ағайҙы ла саҡырғайнылар. Шул тиклем ҡыуанды! Дәртләнеп китеп, күптән йөрөтмәгән машинаһын ремонтланы. Ул машинаһын берәүҙән осһоҙ ғына хаҡҡа алғайны. Иҫке – иҫке инде, күпкә бармай ватылды ла, шул килеш ихатаһында торҙо. Ремонтлағанда мин дә буш сағымда ярҙамлаштым. Ҡайтып килгән саҡта, Елмерҙәктәге теге «Ҡәйнә теле»н үтеп барғанда, машинаһының бер тәгәрмәсе ысҡынып китеп, бик бейектән упҡынға осҡан. Эх!!! – Илнур ыңғырашып ҡуйҙы. – Башҡа бер урында, бәлки, тере ҡалған булыр ине лә... Машинаһын ныҡлап тикшергән кеүек инек, ул тәгәрмәсте нисек күрмәнек икән? Эй, үкенес! Машинаһын ремонтламаған булһа, үҙем генә йөрөтөп ҡайтыр инем дә. Айбулат ағай өсөн мин йәһәннәм тишегенә лә барырға риза инем бит!
– Әлеге шул яҙмыштыр инде. Ярай, ғазаплама үҙеңде, Илнур туғаным. Минең үҙемә бигерәк тә үкенесле. Быйыл ауылыма мотлаҡ ҡайтырға инем. Отпускыла булһам да, ҡайта алманым... Уның менән көрәшмәгәнгә ун ете йыл үтеп китте. Тик бер генә тапҡыр күреп ҡалһам да, үкенмәҫ инем.
– Эйе шул. Айбулат ағай үҙе лә һуңғы арала тик һеҙҙең турала һөйләне.
Тик бер генә тапҡыр күрергә ине, йомшаҡ ҡулдарынан тотоп, бер һүҙ өндәшмәй булһа ла, биш минут ҡына янында булһам, артабан йәшәүе лә еңеләйер ине, тип хыялланды. Ул бит ғүмере буйына тик һеҙҙе һағынып йәшәгән. Яҙмыштың шулай мәрхәмәтһеҙ булыуына рәнйене лә ҡайһы саҡта. Һеҙҙең ирегеҙҙән айырылғанығыҙҙы яңыраҡ Ғәлиә апай хәбәр иткән икән уға. Ул хәбәрҙе ишеткәс, тамам ҡанатланып: «Отпуск алам да барыбер бер күреп ҡайтам Зәлифәмде! Ә, бәлки... кем белә?! Ә, Илнур?» – тип серле генә йылмайып та алғайны. Их, бер булмағас булмай икән! – тип әсенеп ҡуйҙы Илнур. Ҡысҡырып илап ебәреүҙән үҙен саҡ тыйып килгән Зәлифәне уйҙар баҫты...

## 6

…Шулай шау-гөр килеп, мәктәптә уҡыу көндәре үтә торҙо. Айбулат һәр ваҡыт Зәлифәгә ярҙамға килергә әҙер. Дәресен аңламайыраҡ ҡалдымы, ихласлап аңлатырға тотона. Ә үҙе бигерәк тырыш, тик «яҡшы» билдәләренә генә уҡый. Яңы йыл алдынан синыф етәксеһе:

– Яңы йыл кисәһен ойоштороуҙы беҙгә йөкмәттеләр. Әйҙәгеҙ, яҡшы ғына номерҙар әҙерләп, барыһын да хайран итәйек әле! – тип барыһын да дәртләндерҙе.

Репетициялар башланды. Әлеге лә баяғы, Айбулат бик ихлас тотондо. Әллә ҡайһы арала ҡайта һалып, баянын күтәреп килгән. Ултырғысҡа ултырҙы. Һәм… Зәлифә шул минуттан бөтә донъяһын онотто. Берсә ул йәшел болондарҙы гиҙеп сәскәләр йыя, берсә, ярһып аҡҡан йылғаларҙы күҙәтеп, убылып китерҙәй яр башында тора, берсә урман эсендә өҙҙөрөп һайраған һандуғастарҙы һушы китеп тыңлай… Йөрәге шул тиклем ашҡынып тибә, бына-бына атылып сығыр кеүек!

Айбулат баянда иҫ киткес уйнай ине. Ул уйнап туҡтағас, барыһы ла дәррәү ҡул сапты. «Уйна әле тағы?» – тип үтенделәр. Айбулат инәлтеп торманы, шундай ҙа һағышлы, таныш түгел көйҙө уйнап ебәрҙе. Бер аҙҙан үҙе лә ҡушылды:

*Һандуғас, һандуғас,*
*Китмә, китмә, һандуғас?*
*Ҡанаттарың талдырып,*
*Тыуған ерҙе ҡалдырып…*

Зәлифә йырҙы шундай иләҫләнеп тыңлай, Айбулаттан күҙен дә алмай. Ҡапыл, кемдер терһәгенә төрткәнгә һиҫкәнеп, әйләнеп ҡараһа, янында Ғәлиә баҫып тора һәм:

– Шәп бит, әхирәт, эйеме?– тип шыбырҙай. Йыр тәьҫиренән арына алмаған Зәлифә бер һүҙ ҙә өндәшә алманы. Өйөнә ҡайтҡас та, шул йыр ҡолағында яңғырап тик торҙо.

Яңы йыл кисәһе бик күңелле үтте. Уларҙың концертын да оҡшаттылар. Ә Айбулаттың баянына ҡушылып йырлауы барыһын да әсир итте. Уны бик оҙаҡ сәхнәнән төшөрмәнеләр. Ошо концерттан һуң Айбулатты исеме менән түгел, күберәк «Һандуғас» тип йөрөттөләр. Баянында өҙҙөрөп уйнағанында һандуғастан һис тә кәм түгел ине шул…

Айбулатҡа Зәлифә тәү күреүҙән ғашиҡ… Тәүге мәлдә уның янында ҡапыл юғалып ҡалһа, сәбәбен аңлай алмай, үҙ-үҙенә аптырай ине. Ҡайҙа ғына йөрөһә лә, тик уның тураһында уйлай, ҡолағынан яғымлы тауышы китмәй. Айбулат берәйһе менән һөйләшкәндә башын артҡа ташлап, ихлас күңелдән ҡысҡырып көлә! Уның шулай көлгәнен ишетһә, Зәлифәгә шундай рәхәт. Өйөнә ҡайтҡас та, тик ул күҙ алдында тора. Уның тураһында уйламаған минуты юҡ. Айбулатты осратҡаны бирле уның күңелендә ниндәйҙер үтә һағышлы бер моң яралды төҫлө.

Йөрәгенең ярһыуҙарын баҫмаҫмы тип, йүгерә-йүгерә шишмәгә һыуға йүнәлә. Һыу буйынан ҡайтҡас, өйөндәге бар эштәрен тиҙ арала емертеп эшләп ҡуя. Ҡайҙан уға шул тиклем көс килә? Яңғыҙы ғына ҡалған сағында ул йырлаған йырҙарҙы эсенән генә көйләп йөрөй. Һуңғы арала уның гел йырлағыһы килә. Тик бына… ҡысҡырып йырларға ғына ояла шул! Их, шул оялыу-тартыныуҙарынан берәй ҡасан арына алырмы икән?

Ә бына Ғәлиә – бөтөнләй икенсе. Ул – ҙур йәшел күҙле, ҡылғандай һары сәсле, үтә лә шаян, сая, ҡыйыу ҡыҙ. Һүҙгә лә аптырап тормай, әйтер һүҙҙәрен сәсрәтеп әйтә лә ҡуя. Үҙен бер кемдән дә йәберләтергә бирмәй. Кәрәк икән, егеттәрҙең дә кәрәген бирә. Бәләкәйҙән малайҙар менән футбол, волейбол уйнап үҫте. Зәлифә

уның шундай булғанына бер үк ваҡытта һоҡлана ла, көнләшә лә. Икеһе бөтөнләй ҡапма-ҡаршы холоҡло булһалар ҙа, айырылғыһыҙ әхирәттәр улар. Бәлки, шул кире яҡтары уларҙы бер-береһенә тарталыр ҙа. Тик Зәлифә, ни сәбәптәндер, үҙенең Айбулатҡа ғашиҡ икәнлеген әлегә тиклем Ғәлиәгә әйтергә баҙнат итмәй. Ниңә икәнен үҙе лә аңламай.

Хыялдарына сумып, бик уйланып йөрөһә, әсәһе борсолоп һорап та ҡуя:

– Нишләп һин, балтаһын һыуға төшөргән кешеләй, аптырайһың да йөрөйһөң ул?

– Юҡсы, бер ҙә улай түгелсе! – ти уңайһыҙланып Зәлифә. – Барыһы ла яҡшы.

Ғәлиә менән икәүһенең хыялдарында ғына булған мөхәббәт тигәндәре шулай ҡапыл килдеме әллә Зәлифәгә?

Иртән ул мәктәбенә шундай ашҡынып бара. Хәҙер ул уны күрмәй бер көн дә йәшәй алмаҫтыр кеүек. Ана теге юлы һалҡын тейҙереп, ныҡ ҡына ауырып алды. Яҡшылап төҙәлеп тә етмәйенсә уҡырға барҙы. Һуңынан оҙаҡ ҡына йүтәлләп йөрөнө.

Айбулат үҙе лә уға һәр саҡ иғтибарлы. Ни өсөндөр, Зәлифә ҡайҙа, ул да тик шунда булып сыға. Берәй ярҙам кәрәкһә, әллә ҡайһы арала янына килеп етә.

Әллә... Ғәлиә дөрөҫтө әйтә микән? «Айбулат ярата ла инде һине!? Күрмәйһеңме ни үҙең?» – ти ҙә ҡуясы.

Шулай, хыял донъяһында иләҫләнеп йөрөп, ике йылға яҡын ваҡыт уҙып киткәне һиҙелмәй ҙә ҡалды. Ошо ғына ваҡыт эсендә мәктәп уҡытыусыларының, синыфташтарының ғына түгел, бөтә ауыл халҡының һөйкөмлө һөйәгенә әйләнде лә ҡуйҙы Айбулат. Кесе йәштәгеләргә – вожатый, ярҙам итер кешеһе булмаған оло йәштәгеләргә утын ярып, һыу ташып биреүҙе лә ул ойоштора. Ә унынсы синыфта уҡығанда тағы барыһын шаҡ ҡатырҙы.

Көҙгө һалҡын кистә, ниндәйҙер эше менән йөрөп, һуңға ҡалып ҡайтып килгәнендә, кемдеңдер ярҙам һорап ҡысҡырғанын ишетеп ҡала. Күрше йортта оло ғына йәштәге ҡарт менән ҡарсыҡ көн күрә. Бала-сағалары – ситтә. Айбулат йыш ҡына уларға кереп, кәрәк икән, тиҙ арала ярҙам ойоштора. Һуңғы арала икәүһе лә бик бирешеп киткәйнеләр.

Айбулат, борсолоп, уларҙың өйҙәренә табан йүгерҙе. Солан ишеген асып ебәрһә, күҙ асҡыһыҙ төтөн тулған. Янғын сыҡҡан! Мейестән ишек яғына үрмәләгән ялҡын элгестә торған кейем-һалымға ҡабып та өлгөргән.

Айбулат тауыш килгән яҡҡа ашыҡты. Быуындары хәлһеҙләнгән ҡарт караватта ятҡан ҡарсығын күтәрергә маташа, үҙе, иламһырап, ярҙам саҡыра. Айбулат ҡарсыҡты күтәреп алды ла ихатаға сығарҙы, бар көсөнә: «Янғын!» – тип ҡысҡырҙы. Кире әйләнгәнендә, өйгә инерлек тә түгел, ут-ялҡын ишекте ялмап алғайны. Ул соланда ҡулына эләккән кейемде башынан аша ҡапланы һәм өй эсенә атылып инде. Инде тамам хәлһеҙләнгән ҡарт иҙән буйлап ишеккә ҡарай шыуыша. Айбулат уға юрған ҡапланы ла, күтәреп алып, сығыу юлына ашыҡты. Ҡулдарының түҙеп торғоһоҙ әрнеүен тойҙо. Бабайҙың да, үҙенең дә кейемдәренә ут ҡапҡайны. Тиҙ генә уны ергә һалды, икеһенең дә кейемдәрендәге утты һүндерергә тотондо. Кемдер Айбулатты башынан аша һыу менән ҡойондорҙо. Шунда ғына Айбулат тирә-яғына абайлап күҙ һалды. Инде ныҡлап яна башлаған йортҡа кешеләр дәррәү һыу һибә... Ул үҙенең хәле бөтә башлағанын тойоп, янындағы бүрәнәгә сүгәләне. Кемдер уға нашатыр тамыҙылған ҡулъяулығын һуҙҙы. Ҡарт менән ҡарсыҡты күтәреп ҡайҙалыр алып киттеләр. Бер аҙҙан Айбулат янына кешеләр йыйылды:

– Янғынды һүндерҙек. Ярай ҙа, артыҡ янып өлгөрмәгән. Таҙартып-ағартып бирһәк, йәшәргә яраҡлы, – тинеләр. Барыһы ла уға маҡтау һүҙҙәре яуҙыра.

Шул саҡта, ярай ҙа, Айбулаттың ҡулдары ныҡ янманы. Бер нисә көн ҡыҙарып, әсетеп торғас, уңалды.

Ошо ваҡиғанан һуң Айбулат ауылдаштарының ғорурлығына әүерелде. Уның хаҡында хатта район гәзитенә лә яҙып сығарҙылар. Ә ул һаман шаян, өлгөр, моңло тауышлы «Һандуғас» булып ҡала бирҙе. Бына кемгә үлеп ғашиҡ булды Зәлифә! Уның һөйөүе көндән-көн арта ғына бара.

Унынсы синыфты Зәлифә тик «яҡшы» билдәләренә тамамланы. Артабан яҙмыш елдәре ҡайҙа ғына илтеп ташлар икән? Өләсәһе әйтмешләй: «Маңлайыңа яҙылғанды күрелә инде...» Тик бына Айбулаттан айырылыуын башына һыйҙыра алмай шул ул. Уны бөтөнләй күрмәһә, нисек йәшәр һуң? Эй алла, әгәр юлдары айырылып, Айбулатты бөтөнләй күрмәҫ булһа? Эйе, түҙә алмаҫ унһыҙ бер көн дә!

...Сығарылыш кисәһе яҡынлашты. Зәлифәгә әсәһе Белореттан бик матур күлдәк алып ҡайтты. Итәктәре оҙон итеп тегелгән, зәңгәр төҫтә. Кейеп ҡарағайны, бик килешә үҙенә! Әсәһе:

– Ҡара, минең ҡыҙым хәс тә аҡҡош балаһына оҡшанысы! – тип телен шартлатты.

«Аҡҡош балаһы» – әсәһенең иң маҡтаулы һүҙе.

Кисә башланғас, иң тәүҙә мәктәп директоры сығарылыш уҡыусыларын ҡотланы. Унан һуң уҡытыусылар, синыф етәкселәре күҙ йәштәре аралаш уларға уңыштар, яҡты киләсәк теләне.

Бына мәктәп тамамлаусылар уҡытыусылары хөрмәтенә әҙерләгән концерттарын башланы.

Ниһайәт, баянын күтәреп Айбулат сәхнәгә сыҡты. Өҙҙөрөп «Ҡыңғыраулы мәктәп йылдары»н уйнап ебәрҙе. Берәм-берәм егеттәр, ҡыҙҙар сығып, баянға ҡушылып йырланылар. Йәштәрҙең барыһының да күҙҙәрендә йәш, саҡ тыйылып торалар. Улар йырлап бөткәс, зал бер аҙға тын ҡалды. Унан гөрләтеп ҡул саба башланылар.

Айбулат сәхнәлә бер үҙе ҡалды. Баянында һағышлы итеп «Китмә, һандуғас!»ты уйнаны. Тын да алмайынса тыңланылар.

Бына моң өҙөлдө. Айбулат башын эйҙе лә әкрен генә сәхнәнән сығып китте.

Алҡышлап күпме саҡырһалар ҙа, ҡабат сыҡманы. Үҙенең дә күңеле ныҡ тулышҡан инеме? Бәлки...

## *7*

– Тиҙҙән теге ҡәһәрле урынға етәбеҙ.

– Ә? – Илнурҙың тауышынан Зәлифә ҡапыл һиҫкәнде.

– «Ҡәйнә теле»нә етәбеҙ, тим. Айбулат ағай һәләк булған урынға...

– Илнур, мөмкин булһа, бер аҙға ғына туҡталмаҫһыңмы? Айбулаттың һуңғы минуттары уҙған урында аҙыраҡ тороп китһәк...

– Мин дә шуны уйлап килдем. Эх, бая сәскәләр алырға башҡа етмәгән.

– Эйе шул...

Айбулат һәләкәткә осраған урынға етеп туҡтанылар. Ә унда... сәскәләр тауҙай өйөлгәйне. «Бергә хеҙмәт иткән иптәштәреңдән», «Афганцу – от нас», тигән яҙыулылары ла бар.

«Ҡайһы арала ишетеп, килеп өлгөргән улар?»

– Ул турала кисә көнө буйына телевидениенан да, радионан да һөйләп торҙолар. Исем-фамилияһын да әйттеләр, – уның уйын аңлағандай, Илнур шым ғына әйтеп ҡуйҙы.

Уйҙарына сумып Зәлифә хәтһеҙ генә торҙо был урында...

## 8

...Кисәнән һуң синыфташтар барыһы бергә таң ҡаршыларға, йылға буйына, йүнәлде. Айбулат баянын күтәреп алдан бара. Йәштәр берсә үҙҙәренең яратҡан йырҙарын йырлай, берсә тыпырҙатып бейеп алалар. Килеп еткәс, егеттәр ҙур итеп усаҡ яҡты. Кемдер үҙе менән килтергән магнитофонды ҡабыҙҙы ла вальс иғлан итте.

Парлашып вальс әйләнергә керештеләр. Зәлифә оялып ҡына бер ситтә, ҡайын янында, баҫып тора. Бөгөн ул үҙенең зәңгәр күлдәгендә иҫ киткес сибәр! Күлдәге килешә үҙенә! Оҙон ҡара сәстәренән күрше апай уға матур прическа яһаны. Тағы ул үҙенең ҡупшы аҡ туфлийҙарын да биреп торҙо. Шунан Зәлифәне тегеләй ҙә, былай ҙа әйләндереп ҡараны ла, телен шартлатып:

– Әстәғәфирулла! Тьфү-тьфү, күҙ генә теймәһен үҙеңә! Бигерәк матур булып үҫеп, еләктәй бешкәнһең бит? – тип әйтеп һалды. Зәлифәне оялтып, ҡыҙартып бөттө хатта. Әсәһе менән күрше апай үҙҙәренең йәшлек йылдарын хәтерләп, үкенеп тә алдылар.

«Шулай инде, йәш саҡтар бер мәл генә була, күҙ асып-йомғансы үтә лә китә...» – тип ҡуйҙы әсәһе, бошоноп. Зәлифәгә бөгөн берсә бик күңелле, берсә, ниңәлер, үтә яманһыу. Әллә... Айбулат менән тиҙҙән айырылышырға тура киләсәге эсен бошора микән?

Бына ул Айбулаттың үҙенә табан килгәнен күрҙе. Егет килеп етте лә:

– Рөхсәт ит, һылыу ҡыҙ, һеҙҙе вальсҡа саҡырырға! – тип ҡулдарын һуҙҙы.

Зәлифә үҙе лә һиҙмәҫтән уға ҡаршы атланы. Бер аҙҙан улар икәүләшеп вальс әйләнә ине.

– Их, ошолай бергә вальс әйләнгәндә күрер көнөм дә бар икән! – Айбулат, хисләнеп, уның ҡолағына шыбырлай.

«Миңә лә ниндәй рәхәт һинең менән!» – тип әйтәһе килде ғашиҡ ҡыҙҙың.

– Зәлифәкәй, әйҙә, таң атҡансы икәүләп кенә йөрөйөк? Төн дә матур бөгөн.

– Ярай, – тип ризалашты ҡыҙ.

Улар һиҙҙермәй генә башҡаларҙан айырылып, яр буйлап атланы.

– Зәлифә, мин һине тәү күргән минуттан бирле яратам! Ике йылға яҡын... Тик әйтергә генә ҡыйманым.

– Ә бөгөн нишләп әйтергә булдың һуң?

– Бөгөнмө? Бөгөн дә әйтмәһәм, һуң булып ҡуйыуы ихтимал. Уҡырға китһәк, ул һүҙҙәрҙе һиңә башҡа берәү әйтеп ҡуйыр, – Айбулат яңғыратып көлөп ебәрҙе.

«Мин дә һине тәү күреүҙән яраттым бит, Айбулат! Аһ, Айбулат!»

– Өшөмәйһеңме? – Айбулат уның арҡаһына пинжәген япты, ипләп кенә ҡосаҡлап алды: – Зәлифәкәй, мин бит һине ысынлап яратам, бер көн күрмәй торһам, үтә лә ҡыйын миңә!

– Миңә лә... – тип шыбырлай Зәлифәнең ирендәре. Үҙенең дә уға әллә күпме наҙлы һүҙҙәр әйткеһе килә...

Айбулат уны ҡәҙерләп, наҙлап ҡына күкрәгенә ҡыҫа. Бығаса бер ҡасан да тоймаған, аңлашылмаған хистәр солғанышында ҡалды Зәлифә. Ҡасандыр янына килергә лә ҡыймаған Айбулатҡа яҡын тороуҙан уға шундай рәхәт!

Икеһенең дә йөрәге, күкрәк ситлектәрен йырып сығырҙай булып, шундай ашҡынып-ярһып тибә! Ике йыл буйына бер-береһенә талпынған ике ғашиҡ йөрәк.

Бына уларҙың ирендәре үҙҙәренән үҙҙәре бер-береһенә үрелде. Аһ! Зәлифәнең аяҡтары аҫтында ер убылдымы ни? Ул, үҙ-үҙен белештермәй, Айбулатты муйынынан ныҡ итеп һығып ҡосаҡлай...

Улар шулай бер-береһенән айырыла алмай оҙаҡ торҙо.

Һушына килгәндә, Айбулат, уны ҡәҙерләп кенә күтәреп алып, яр буйлап атлай ине.

– Ҡуй, төшөр, кеше күрер бит?

– Юҡ инде, төшөрмәйем! Мин ошолай, һине күтәреп, ғүмерем буйына барырға ла риза!

– Ҡуй, оялтма мине, төшөр, тим, зинһар, тип әйтәм, – Зәлифә тыпырсынды.

– Зинһар, тигәс, төшөрөргә тура килә инде, – ихлас көлөп, Айбулат уны ергә баҫтырҙы. Етәкләшеп атланылар. Яр буйы йәштәрҙең шат тауыштарынан, музыканан яңғырап тора.

Зәлифәнең Айбулаттан айырылғыһы килмәй. Уның янында шундай рәхәт, иркәләнеп, ҡосағына һыйынаһы ғына килеп тора. «Ҡарасы һин уны, бығаса яҡын килергә лә ояла ине, инде айырылғыһы килмәй?!»

Синыфташтары уларҙың юғалып торғанын әллә һиҙмәй ҙә ҡалды инде, уларға иғтибар итеүсе булманы… Бына, билдәһеҙ киләсәккә сәфәргә сыҡҡан йәштәрҙең күңелдәрен иләҫләндереп, тирә-яҡты ҡыҙғылт төҫкә ҡойондороп, ҡояш та ҡалҡты…

*9*

– Ҡуҙғалайыҡмы? Ҡайтып етергә лә күп ҡалманы, – Илнур, Зәлифәне уйҙарынан бүлдерергә ҡурҡҡандай, һаҡ ҡына өндәште.

– Уй, Илнур аҡыллым, нишләп торам һуң әле мин? Беҙгә бит ашығырға кәрәк!

– Әйҙәгеҙ, көтәләрҙер.

Машина геүелдәп алға ынтылды. Юл тигеҙ түгел, соҡор-саҡырҙарҙы үткәндә һикертеп-һикертеп ала.

Эх, бигерәк күркәм шул уның тыуып-үҫкән яғы! Ана бит, ҡайһылай борғоланып-борғоланып Инйәре ағып ята.

Текә, ғорур ҡаялар – тәбиғәтте һаҡларға ҡуйылған һалдаттармы ни? Күккә ашҡан тауҙарҙа урман шундай ҡуйы булып үҫә был яҡтарҙа, эсенә кереп китһәң, әйләнеп сыға ла алмаҫһың төҫлө. Тик Зәлифә белә инде быны улай түгел икәнен. Урмандарҙа күп йөрөнө ул. Йәш сағында ла, һуңынан эше буйынса ла…

Тыуған төбәгенең иҫ киткес гүзәл тәбиғәтенә һоҡланып килгән Зәлифәне йәнә уйҙар баҫты…

*10*

…Сығарылыш кисәһенән һуң «Ҡайҙа уҡырға барырға?» тигән һорау тыуҙы. Зәлифәнең бығаса бер кемгә лә әйтмәгән хыялы бар: ул тик геолог булырға теләй. Тәбиғәттең, тауҙарҙың, таштарҙың серҙәренә төшөнгәһө килә. Уҡырға инер өсөн Магниткаға барырға кәрәк икән. Үҙенә кәрәген белешеп бөттө лә инде. Тик «яҡшы» билдәләре менән конкурсһыҙ ҙа инеп була, тиҙәр. Әсәһе генә ни тиер? Нисек тә уны күндерергә ине.

– Миңә бер үҙемә ҡыйын буласаҡ. Ауылда ҡал, эш табылыр әле, – ти ҙә ҡуясы.

Әсәһен бик йәлләй шул Зәлифә. Ҡайһы саҡта, әллә ауылда ҡалырғамы, тип тә уйлап ҡуя. Әле, ҡыҙы ярҙамлашҡас, әсәһенә еңел. Кис, ихаталағы эштәрҙе бөтөргәс, теген машинаһы артына ултырырға ваҡыт таба. Уның шул сағын бигерәк ярата Зәлифә. Ниңәлер, машина артына ултырҙымы, әсәһе моңло итеп йырлай башлай. Йырҙары ниндәй бит әле! Дәресен әҙерләп ултырған Зәлифә уның йырҙарын йотлоғоп тыңлай. Йырҙың тәьҫиренәнме, әллә әсәһен йәлләүҙәнме, күҙҙәренә йәш тула. Юҡ, ул барыбер уҡырға китәсәк! Кисә серен

Айбулатҡа асты. Ул үҙе лә шунда барырға йыйына икән. Документтарын бергә барып тапшырырға килештеләр. Бөгөн Зәлифә әсәһенә барыһын да әйтергә ниәтләй. Теге кистән һуң Айбулат менән көн дә осрашалар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Зәлифәнең дә унан тартыныуы бөттө. Айбулаттың һөйләгән мәҙәктәренән шул тиклем ихлас көлә! Егет уғата ҡылана бирә. Бер-береһенән айырыла алмай бер булалар.

Әсәһе белеп ҡалыуынан бик ҡурҡа ине, ул кемдәндер ишеткән дә:

– Ярай, алдың-артыңды ҡарап йөрө! Башһыҙ бала түгелһең. Былай... яҡшы ғаиләнән ул егет, – тип кенә ҡуйҙы.

Үткән шәмбелә хатта клубҡа бергә барҙылар.

Беренсе тапҡыр кеше араһында Зәлифә рәхәтләнеп бейене. Һәләк ҡыҙыҡ йәштәр араһында! Ни генә ҡыланмайҙар үҙҙәре, береһенән-береһе уҙҙыра. Бейей башланылармы, саң күтәрелә хатта. Егеттәр биҙрә менән һыу алып, тиҙ генә иҙәнгә һибәләр ҙә тағы теттерәләр генә!

Айбулатты, өҙмәй ҙә ҡуймай, баяны менән ултыртып ҡуйҙылар. Таҡмаҡ әйтеп тә, «Өсмөйөш», «Змейка», «Байыҡ» – тағы әллә күпме бейеү бейенеләр.

Улар ялдан һуң Магниткаға китергә һөйләште. Әсәһен дә күндерә алды. «Ярар, һәр кемдең үҙ яҙмышы инде», – тип ризалығын бирҙе. Зәлифәнең ҡыуаныуы быға!

Бөгөн Айбулат менән урман-яландар ҡыҙырып килергә булдылар. Осрашҡас, ул Зәлифәгә бер нисә шоколад бирҙе. Күрше ауылдан апаһы ҡунаҡҡа килгән икән, уның күстәнәсе, ти. Бигерәк тәмле кәнфите.

Һуңынан кәнфит ҡағыҙҙарын матур итеп тигеҙләп, төрлө фигуралар яһап ултырҙылар. Һары фольгаһынан Зәлифә үҙенә «йөҙөк» эшләп, бармағына кейҙерә һалды ла:

– Килешәме? Бигерәк матур була, эйеме? – тип һораны Айбулаттан.

– Килешә, бик килешә, Зәлифә. Бына, уҡып сығып, эш башлайым әле, мин һиңә ул йөҙөктәрҙең иң шәптәрен алып бирәсәкмен! – тип иркәләп вәғәҙәләне Айбулат.

– Ярай, – тип ризалаша һалды Зәлифә.

Икеһенә лә ифрат ҡыҙыҡ булып, рәхәтләнеп көлөштөләр.

Ә был йөҙөктәрҙе һуңынан икеһенә лә эшләп, кис буйына бармаҡтарына кейеп йөрөнөләр...

*11*

... Машина ҡапыл туҡтап ҡалғас, Зәлифә күҙҙәрен асты. Ауылға еткәндәр бит. Бына Айбулаттарҙың өйө.

Кешенең күплеге! Зәлифә ҡайһы берәүҙәрен төҫмөрләгәндәй ҙә була. Ана, бер урынға синыфташтары йыйылған.

– Әйҙәгеҙ, апай, өйгә инәйек. Аида апай ҙа белер беҙҙең ҡайтып еткәнде.

Зәлифә тиҙ генә машинанан төштө. Илнурға эйәреп йорт яғына атланы. Ишектән ингәс, уны илауҙан шешенеп бөткән мөләйем генә ҡатын килеп ҡосаҡлап алды:

– Рәхмәт, Зәлифә апай, килгәнегеҙ өсөн! Шул хәтлем көттөм. Әйтер, һөйләр һүҙҙәрем күп һеҙгә. Йә, ярай, аҙаҡ ул турала... Әйҙәгеҙ, Айбулат ағай менән хушлашып ҡалығыҙ ҙа...

Зәлифә, күләгә төҫлө, Аиданың артынан эйәрҙе. Айбулаттың аварияһынан һуң танымаҫлыҡ булып үҙгәргән йөҙөн күргәс, тыйыла алмай, һыҡтап ебәрҙе: «Эй, Айбулат, һине тик шундай хәлеңдә генә күреп ҡалыр өсөн йәшәнемме мин ошоға саҡлы? Әгәр уны... йәшәү тип әйтеп булһа?!»

Үҙе бер туҡтауһыҙ Айбулаттың сәстәренән, биттәренән һыйпаны…

Айбулаттың кәүҙәһен сығара башлағанда ҡапҡа янына ниндәйҙер машина килеп туҡтаны. Бер төркөм ят кешеләр мәйет янына килеп, тын ҡалды. Уларҙы оҙатып килгән ауыл Советы рәйесе Аида менән Робертҡа мөрәжәғәт итте:

– Митинг яһап алырға кәрәк! – Унан: – Ауылдаштар, туғандар! – тип дауам итте һүҙен, – бөгөн беҙ һөйөклө ағайыбыҙ, улыбыҙ, синыфташыбыҙ, әле йәшәргә лә йәшәргә тейешле булған моңло һандуғасыбыҙ Айбулат Мортазинды һуңғы юлға оҙатабыҙ. Ниндәй үкенес, ғүмере шулай ҡыҫҡа булды. Уны барыбыҙ ҙа яратып өлгөргәйнек. Уның бар шатлыҡ-көйөнөстәре беҙҙең күҙ алдында үтте. Беҙ бер ҡасан да уның яҡты иҫтәлегенә хыянат итмәбеҙ, ауыр тупрағы еңел булһын, мәңгелек дан уға! Әле бына, һуңғы юлға оҙатырға тип, уның яуҙаш дуҫтары килгән. Әйҙәгеҙ, уларға һүҙ бирәйек.

Ап-аҡ сәсле, мыҡты кәүҙәле яугир һүҙ башланы:

– Мин Айбулаттың взвод командиры инем. Тәүге көндән үк ул үҙенең ихласлығы, эскерһеҙлеге менән үҙенә тартты. Кешеләргә тик яҡшылыҡ ҡына теләгән Айбулатҡа Афғанстанға һуғышҡа барып эләгеү бик ныҡ тәьҫир итте – ҡоралға тотоноуы ауыр ине уға. Ни хәл итәһең: һуғыш – һуғыш була инде, кем беренсе атып өлгөрә – шул тере ҡала.

Бер мәл беҙҙең эшелонға «душмандар» һөжүм итте. Юлды дауам итергә мөмкинселек юҡ – алда ла, артта ла беренсе барған машиналарҙы иң тәүҙә шартлаттылар. Бер нисә тиҫтә хәрби машиналарҙан торған эшелон ут аҫтында ҡалды. Атыш-ҡырылыш оҙаҡ барҙы. Шул саҡта Айбулат эшелон командирын үлемдән ҡотҡарҙы. Ҡая-таш артында торған «душман» командирҙы «мушка»ға алған. Айбулат күреп ҡалып, автоматынан унан алда атып өлгөрҙө. Күп юғалтыуҙар менән бәрелеш тамамланды. Беҙҙең унлаған машина шартлатылғайны. «Душмандар» сигенде. Беҙ, үҙебеҙҙең яралыларҙы йыйып, госпиталгә оҙаттыҡ. Айбулаттың ни үле, ни тере кәүҙәһен тапманыҡ. Алдан килешеү буйынса, пленға эләкмәҫ өсөн, һуңғы сиккә тиклем һәр беребеҙҙә үҙе өсөн бер граната ҡалырға тейеш. Бик күптәр машиналары менән бергә янғайны. Кәүҙәләрен танырлыҡ та түгел, кейемдәре янып бөткән. Танып булғандарын цинк гробтарҙа тыуған яҡтарына оҙаттыҡ. Айбулаттың иҫән булып сығыуы беҙҙең өсөн көтөлмәгән хәл ине. Беҙ уны һәләк булғандар иҫәбенә кереттек…

Бына бөгөн шул саҡтағы батырлығы өсөн уға боевой наградаһын алып килдек. Теге осрашыуҙа Айбулат был турала белде. Тик ул саҡта награда Мәскәүҙән килеп етмәгәйне. Хәҙер ошо миҙалды һеҙгә, туғандарына, тапшырабыҙ! – типҡумтаны Аидаға һуҙҙы.

Өнһөҙ-тынһыҙ ап-аҡ булып баҫып торған Аида бәрхәт тышлы ҡумтаны ҡәҙерләп күкрәгенә ҡыҫты ла:

– Рәхмәт!.. – тине шыбырлап ҡына.

Тәрән уйға сумып бер яҡ ситтә баҫып торған арыған сырайлы, ҡарағусҡыл йөҙлө мөләйем ир-егет Айбулаттың кәүҙәһе янына яҡын уҡ килеп баҫты. Аҡ япма менән ҡапланған кәүҙәгә һаҡ ҡына ҡағылып, һөйөп ҡуйғандай иткәс, бер аҙ шымып торҙо. Шунан ҡалтыранған тауыш менән һүҙ башланы:

– Мин – Тимур, Үзбәкстандан килдем, – икенсе милләттән икәне аңлашыла, әммә үҙе башҡорт телендә арыу уҡ һөйләшә. – Ниндәй үкенес: Айбулаттың үҙе менән иҫән сағында күрешергә яҙмаған. Өфөгә осрашыуға килгән сағында ул минең менән бәйләнешкә инеп, телефондан аралашып өлгөрҙөк. Оҙаҡламай осрашырбыҙ, тип килештек шул саҡта.

Һәләк булғанлығын Өфөлә булған полкташтар хәбәр итте. Шунда уҡ самолетҡа билет алдым да юлға сыҡтым.

Әсирлектә Айбулат менән бергә булырға тура килде беҙгә. Шуға ла мин уның ниндәй тоғро иптәш, яҡшы кеше икәнлеген үҙем күреп, һынап беләм. Ireккә сығыр өсөн ниндәй генә юлдар эҙләмәне ул. Тик ҡасып ҡотолоп булмай шул ул ҡәбәхәттәрҙән. Бер нисә тапҡыр тотолғанында, уны вәхшиҙәрсә язаланылар. Күргәнһегеҙҙер ҡулдарын… – Тимур күҙҙәрен сытырайтып йомдо, бер аҙ шымып торҙо ла дауам итте. – Уның хаҡында бик оҙаҡ һөйләр инем мин. Бөгөн һүҙем икенсе нәмә хаҡында. Әсирҙә саҡта Айбулат ҡасып-боҫоп айҙар буйы ниҙер менән булашты. Ул хаҡта мин генә белә инем. Аҙ ғына буш ваҡыты булдымы, йәшерен генә ниҙер эшләй ҙә һуңынан уны ныҡлап таш аҫтына йәшереп ҡуя. Мин түҙмәй һораша башлаһам:

– Һуңынан, эшләп бөткәс күрһәтермен, түҙ, – тип серле генә йылмайыр ҙа ҡуйыр ине.

Бына бер көн ул, шат йылмайып:

– Хәҙер мин һиңә бер әйбер күрһәтәм, тик һин тауышланмай ғына ҡара, йәме? – тине.

Ниндәйҙер ташҡа ла, таҡтаға ла оҡшаған әйберҙе йәшереп ҡуйған урынынан сығарып, миңә һондо. Хайран ҡалдым: минең алдымда иҫ киткес һөйкөмлө, сибәр ҡыҙҙың портреты ине!

– Ошомо һинең Зәлифәң? – тинем, һоҡланыуымды йәшерә алмай.

– Эйе! Ошо минең Зәлифәм! – Айбулат шул минутта сикһеҙ бәхетле булып күренде миңә, әйтерһең дә, уның өҙөлөп һөйгән ҡыҙы янында ғына, бары ҡул һуҙымында баҫып тора.

– Нисек быны эшләй алдың һуң һин?! – тинем, яңы һушыма килеп.

– Беләһеңме? – тине ул шыбырлап ҡына, – миндә Зәлифәнең бер фоторәсеме лә юҡ бит. Шул хәтлем һағындым үҙен! Бер мәл уның портретын хәтеремдән генә эшләп ҡарарға булдым. Буяу-фәлән, ҡағыҙ-ҡәләм юҡ. Икмәк валсыҡтарынан, тары, балсыҡ, ҡом-таш бөртөктәренән әкренләп уның образын тергеҙҙем. Бына, эшләп бөтөргәс, миңә бер аҙ еңеләйҙе лә кеүек. Һөйөклө Зәлифәм һәр саҡ үҙем менән буласаҡ бит! Тик һин, зинһар, был турала бер кемгә лә белгертәһе булма! – Киҫәтте лә портретты яңынан ныҡлап йәшереп ҡуйҙы.

Ошо ваҡиғанан һуң күп тә үтмәне, Айбулатты икенсе урынға күсерҙеләр. Портретты үҙе менән алыу тураһында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел ине. Ә мин шул тарлауыҡта тороп ҡалдым. Беҙҙе үҙебеҙҙең һалдаттар, ниһайәт, килеп тапҡас, портретты үҙем менән алып сыҡтым. Теге юлы, Өфөлә сағында, уға ошо турала әйткәс, бик ныҡ ҡыуанды:

– Һай, маладис, Тимур, һин ысын дуҫ! Зәлифәмдең үҙен дә тиҙҙән күрәсәкмен. Ҡайтып ҡына етәм дә тиҙ арала Ҡазанға юлға сығам, тигәйне. Ниндәй аяныс, беребеҙгә лә осрашып күрешергә яҙмаған икән шул! – Быны әсенеп әйтте Тимур. Шунан, эйелеп, юл сумкаһынан бер төргәк сығарҙы ла ағарынып, тораташтай баҫып торған Зәлифәгә табан атланы:

– Һеҙ бит Зәлифә! Шунда уҡ танының мин һеҙҙе, – тине, һоҡланыулы ҡарашын айырып ала алмай, – бына кемде яратҡан икән Айбулат, йәненән дә артыҡ күреп! Тәүге мәлдә, шундай ҙа көслө мөхәббәт буламы икән ни, тип аптырай торғайным. Ә бөгөн, үҙегеҙҙе күргәс, ышандым. Була икән, була икән ундай мөхәббәт!

Хөрмәтле Зәлифә ханым! Был портретты һеҙҙең үҙегеҙгә тапшырам. Айбулаттың төҫө итеп һаҡларһығыҙ! – тине лә төргәкте асып ебәрҙе. Тирә-яҡта торған халыҡ «аһ» итеп ҡалды: улар алдында үҫмер ҡыҙ Зәлифәнең ҡойоп ҡуйғандай портреты ине. Зәлифә, бөтөнләй өнһөҙ ҡалып, илап ебәрмәҫ өсөн ирендәрен

нығ итеп тешләне лә, сикһеҙ рәхмәтен белдереп, башын ғына ҡаҡты.

Тимур дауам итте:

– Туғандар! Айбулат бик изге күңелле, ысын кеше ине. Тик уға оҙағыраҡ йәшәргә генә яҙмаған. Әйҙәгеҙ, уның хөрмәтенә, яҡты иҫтәлегенә бағышлап бер минут тын ғына янында баҫып торайыҡ!

Ауыл халҡы, баштарын эйеп, тынып ҡалды…

Айбулатты оло хөрмәт менән ерләгәндән һуң, бар йолаларын үтәп бөткәс, йыйылған халыҡ таралышты.

Зәлифә менән Аида икәүһе генә ҡалды. Аиданың ире Роберт күрше ауылға мулланы оҙатып киткән. Балалары – урамда.

– Бына шулай хәлдәр… Өҙөлөп яратҡан ағайым бер ҙә уйламағанда, ниһайәт, күңеле күтәрелеп, өмөтләнеп йәшәй башлағас ҡына, китте лә барҙы! – тине Аида, өҙгөләнеп.

Зәлифә, тыйыла алмай, һулҡылдап илап ебәрҙе:

– Ғәфү ит, Аида һылыу, – тип ниңәлер үҙе ғәфү үтенде.

– Зәлифә апай, һеҙгә әйтер һүҙҙәрем бар, тигән инем, – Аида комодты асып, унан бер төргәк килтереп сығарҙы. – Айбулат ағай ғүмере буйына тик һеҙҙе һағынып йәшәне. Тегенән ҡайтҡас та һеҙҙең турала һорашты. Кейәүҙә икәнлегегеҙҙе белгәс, төшөнкөлөккә бирелде. Шул саҡта үҙенә ҡатыраҡ бәрелдем, буғай. «Ярар, ҡулға ал инде үҙеңде! Зәлифә апайҙың һине нисек көткәнен минән дә яҡшыраҡ белгән кеше юҡ. Үҙем әйттем бит уға: «Йәшлегеңде заяға уҙғарма, кейәүгә сыҡ. Балалар үҫтер. Ғүмер ни, үтер ҙә китер, үкенерһең, тинем». Айбулат ағай ҡайтырҙан алда ғына һеҙҙең хатығыҙҙы алғайным, яуап яҙып өлгөрмәнем. Тапмаһын, тип утҡа ташланым.

Шул һөйләшеүҙән һуң төңөлгәндәй ҙә булды: «Эйе, Зәлифә бәхетле булырға хаҡлы. Исмаһам, уға яҙмыш йылмайһын ине. Мин, ни, элекке Айбулат та түгелдер хәҙер. Ауырыу-һыҙланыуҙан баш сыҡмай…» – тине, эсе бошоп, – Аида һулҡылдап ҡуйҙы ла дауам итте: – Айбулат ағай юғында мин уның баянын ҡәҙерләп һаҡланым. Тик, үҙе ҡайтҡас, уйнай ғына алманы!

– Нисек… алманы?! – Зәлифә ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

– Шулай, теге ҡәбәхәттәр уның ике ҡулында ла өсәр бармағын киҫкәндәр бит!? Бер нисә тапҡыр уйнап та маташты. «Булмай!» – тип бер ҡыҙғанында баянын күтәреп сығып киткәйне, клубта ҡалдырып ҡайтҡан. Әлдә шулай иткән икән! Бер мәл ауылға бик һәләтле художество етәксеһен ебәрҙеләр. Үҙе шәп баянсы. Ана шул егет, кешеләрҙән уның тураһында ишетеп ҡалып, Айбулат ағайҙы репетицияларға йөрөргә өгөтләй башланы.

Риза булды бит бер ваҡыт! Шул мәлдән ул шат йылмайып, элеккесә шаярып йөрөй башланы. Май байрамына концерт ҡуйҙылар.

Концерттарының иң һуңында:

– Хәҙер Айбулат Мортазин сығыш яһаясаҡ! – тип иғлан иттеләр.

Ауыл халҡы уны үтә лә ҡыуанып, ихлас алҡышлап ҡаршы алды.

…Сәхнә асылғанда Айбулат ағай декорация ҡайындары янында баҫып тора ине. Бер яҡ ситтә – баянсы егет. Бына баянсы егет, тап Айбулат ағай һымаҡ, уйнап ебәрмәһенме?! Бер аҙҙан уға Айбулат ағай ҡушылды. Ауылдаштары шул хәтлем уның йырлауын һағынған, тын алырға ла ҡурҡҡандай, бөтә зал тып-тын булып ҡалды.

Айбулат ағай иҫ киткес моңло тауышы менән берсә ярһып, берсә һағышланып, залда ултырған бар халыҡты илатып йырланы ла йырланы. Ауыл халҡы, әгәр хәленән килһә, таңға тиклем дә уны сәхнәнән төшөрмәҫ ине.

Бына шул турала ине минең әйтәһе һүҙем. Ә бөгөн иртән ул егет миңә аудиокассета биреп китте. Шул саҡта Айбулат ағайға һиҙҙермәй генә уның йырлағанын магнитофон таҫмаһына яҙҙырып ҡалған.

«Береһен үҙемә алып ҡалдым, ә быныһы – һеҙгә!» – тине. Ә мин, үҙ сиратымда, был кассетаны һеҙгә тапшырырға булдым. Үҙемә яңынан яҙҙыртып алырмын, – тип төргәкте Зәлифәгә һондо. Зәлифә бик ныҡ тулҡынланып аманатты ҡулына алды ла, күптән юғалтып йөрөгән иң ҡиммәтле әйберен тапҡандай, ҡәҙерләп күкрәгенә ҡыҫты.

«Бына бит! Айбулатым хәҙер гел минең менән буласаҡ!» – тигән уй йәшен тиҙлегендә мейеһендә сағылып уҙҙы. Үҙе:

– Рәхмәт, Аида һылыу, рәхмәт, бик ҙур рәхмәт һиңә! – тип өҙлөкһөҙ ҡабатланы. Унан: – Аида һылыуым, һин миңә үпкәләмәҫһеңме икән, мин бер аҙ йөрөп әйләнһәм? – тип ғәйепле төҫ менән Аиданан рөхсәт һораны.

– Бәй, уны нимәшләп минән һорап тораһығыҙ инде? Теләгән ерегеҙгә барып килегеҙ, ҡасан тағы ҡайтаһығыҙ әле… – Аида йәш аралаш ихлас йылмайҙы.

– Ярай улайһа, артыҡ оҙаҡламам.

Иң тәүҙә ул Айбулат менән икәүләшеп йөрөгән болондарға йүнәлде. Моңһоу күҙҙәре менән тирә-яҡты байҡап торҙо. Ҡыңғырау сәскәләрҙән генә ҙур итеп гөлләмә яһаны. Айбулат та ярата ине бит ошо сәскәләрҙе!

Зыяратҡа барып, гөлләмәһен Айбулаттың баш осона һалды: «Бына шулай, Айбулат йәнем. Беҙгә тере сағыңда осрашырға яҙмаған икән… Тик барыбер белергә тейешһең: көттөм мин, зарығып көттөм! Айбулат, ғүмерем буйына һине яраттым, яратасаҡмын… Хуш, Айбулат, йәнем, кисер…»

Зыяраттан сыҡҡас, үҙенең яратҡан тауына ҡарап торҙо. «Ҡайҙа, унда ла бармай китһәм, һуңынан бик ныҡ үкенермен», – тип тауға табан атланы.

Әхирәте Ғәлиә менән һандуғастар тыңлаған тәңгәлгә килеп баҫҡас: «Был ваҡытта һандуғастар һайрамайҙыр ҙа инде? Йәй урталарында был тирәнән бөтөнләйгә китә торған инеләр», – тип эсе бошто. «Сут-сут-сут». Шул тиклем йөрәккә яҡын, илатыр ҙа, йырлатыр ҙа таныш тауышты ишеткәс, Зәлифә һағайып ҡалды: «Әллә ҡолағыма ғына ишетеләме?»

Был – ысынлап та, һандуғас… Ул шул тиклем моңло һайрай! Ниндәйҙер бик ҙур ҡайғыһын һөйләргә ашыҡҡандай, өҙҙөрөп, ярһып-ярһып һайрай ине ул.

Әллә… илай ҙа инеме?! Ҡоштар ҙа әллә илай микән, тип йәне әрнеп уйлап ҡуйҙы Зәлифә. Ҡапыл уға был ҡош һис тә һандуғас түгел, ә Айбулаттың үҙелер кеүек тойолдо.

Айбулаттың йәне һандуғасҡа әйләнеп, Зәлифәһе янына осоп килдеме?

Зәлифә, йәштәренә төйөлөп:

– Мин таныным һине, Айбулат, йәнем, таныным! Һин дә мине эҙләп тапҡанһың, шулай бит? – тип йырсы ҡошҡа өндәште.

Бер аҙҙан һыҙылып ҡына, йөрәк түренән иңрәп сыҡҡан һағышлы моң ағылды:

*Һандуғас, һандуғас,*
*Һин китәһең, мин ҡалам.*
*Дуҫтарыма йырлар өсөн*
*Йырыңды отоп алам…*

…Һандуғас та, Зәлифәгә ҡушылып, уның менән бергә иланы, ярһыны, эс серҙәрен сәсеп өлгөрөргә ашыҡҡандай, талпынып-талпынып һайраны ла һайраны…

Хәтһеҙ генә ултырҙы Зәлифә һандуғастар төйәгендә. «Аида юғалтҡандыр, ҡайтайым. Иртүк юлға. Үҙебеҙҙең өйгә лә күҙ һалып китергә кәрәк. Ни хәлдәрҙә генә ултыра икән?» – тип ҡайтырға ашыҡты.

Ул ҡайтып кергәндә, Аида өй эштәрен бөтөрөп, өҫтәл әҙерләп йөрөй ине.

– Мин, юғалтып, борсола ла башлағайным, Роберт: «Әйҙә, күңеле булғансы йөрөһөн, ул бит Айбулат ағай менән хушлаша. Тынысла!» – тине.

Киске аштан һуң Аида менән икәүләп Зәлифәнең тыуып-үҫкән йортона йүнәлделәр.

Килеп еткәс, тирә-яғына күҙ һалды ла аптырап ҡалды. Ишек-тәҙрәләргә таҡта ҡаҙаҡланған булһа ла, бер ҙә кеше йәшәмәгән өйгә оҡшамаған. Ихатала сүп үләндәренең әҫәре лә юҡ. Баҡсала ла тәртип. Баҡсаның хатта рәшәткәләре лә яңыртылған.

Зәлифә ғәжәпләнгән күҙҙәрен Аидаға төбәне. Аида көрһөнөп ҡуйҙы ла:

– Ауылға ҡайтҡас, Айбулат ағай бер нисә тапҡыр дауаханала ятып сыҡты. Бик ныҡ бирешкәйне. Нервылары ла ҡаҡшаған. Үҙендә тире лә һөйәк. Шунан яйлап рәтләнә башланы. Төндәрен бик ныҡ ыҙаланы. Йоҡлап ҡына китә, һаташа башлай. «Ҡасығыҙ! Дошмандар! Ана, аталар, йәшенегеҙ! Бирегеҙ миңә автомат, хәҙер үҙем атам ҡәбәхәтте!» – Тағы әллә ниҙәр ҡысҡырып беҙҙе уята, һуңынан үҙе лә уянып, оҙаҡ йоҡлап китә алмаһа, тартырға сығып китер ине. Шулай, бер сыҡҡанында, оҙаҡ ҡына йөрөп, таңға ғына ҡайтып керҙе. Аҙ ғына ятып торам, тип ятҡайны, нисектер, бер ҙә булмағанса, тып-тыныс, хәтһеҙ генә йоҡланы. Уянғанда ла күңеле күтәренке ине. Ул һеҙҙең өйҙә булған икән. Зәлифәмде күргәндәй булдым, ти. Шул көндән һуң буш ваҡытында барып урай торғайны. Асҡыстың да ҡайҙа ятҡанын белгән. Зәлифәнең игеҙәк ҡустылары күрһәтте, ти. Йәй булһа елләтер, ҡышын ут яғып йылытыр ине. «Гел бикле торһа, сереп ҡуйыр. Зәлифәләр ҡайтып төшһә, йорттары ҡараулы торһа, күңелле булыр уларға», – тип ихлас йөрөр ине. Эй, ағайымды… – Аида һулҡылдап ҡуйҙы.

– Аида һылыу, бөгөн бында ғына ҡалам. Һеҙгә иртәгә иртүк барырмын. Үпкәләмә, йәме? – Зәлифә уңайһыҙланды.

– Ҡал, әлбиттә, нишләп мин үпкәләйем, ти? Үҙең генә үпкәләмә, рәтләп хөрмәт итеп тә ҡалалмайым бит.

– Юҡ-юҡ! Һеҙгә бик ҙур рәхмәт! Мине аңлауығыҙ өсөн, барыһы өсөн дә…

Зәлифә яңғыҙы ҡалды. Был йортта әле яңы ғына бар ергә лә Айбулатының ҡулы ҡағылған! Зәлифәгә нисектер шундай рәхәт булып китте. Ул баҡсаға сығып, муйыл ағасы төбөндәге эскәмйәгә ултырҙы. Тирә-яҡта ҡоштар сутылдаша, сиңерткәләр сырылдай.

Күк йөҙөндә йондоҙҙар ҡабынды. Зәлифә, ғәҙәте буйынса, Етегәнде эҙләне. Үҙенең йәшлек серҙәшен… Ул бит иң ауыр ваҡыттарында, Етегән йондоҙға төбәлеп, серҙәрен, ҡайғыларын һөйләр ине. Етегән шул саҡ, уны аңлағандай, тағы ла яҡтыраҡ емелдәргә тотона. Әле лә ул йондоҙ күңелгә шул тиклем яҡын!

Зәлифә өйгә инде. «Ятырға кәрәк, иртүк юлға!» Ул таңға тиклем, нисектер, бик тыныс йоҡланы. Әллә тыуып-үҫкән йортонда йоҡлағанғамы, әллә башҡа берәй сәбәптәнме, белмәҫһең.

Аида күптән аяҡ өҫтөндә ине. Ҡоймаҡ ҡойған. Зәлифәгә тип әллә күпме күстәнәс әҙерләгән. Алмаҫ ине, Аиданың хәтерен ҡалдырып ҡуймайым тип, барыһын да сумкаһына тултырҙы.

– Рәхмәт, Аида! Ә минән һеҙгә бына бер аҙ аҡса. Аят уҡытҡанда, минең исемдән дә уҡытығыҙ.

– Ҡуй, кәрәкмәҫ, үҙебеҙ! – Аида алмаҫҡа булғайны, Зәлифә ҡырт киҫте:

– Ал! Ауыл ерендә аҡса түләмәгәндәрен яҡшы беләм. Ә минең эш хаҡы үҙемә генә етерлек.

– Рәхмәт, Зәлифә апай!

Уны вокзалға тиклем оҙатып ҡуйҙылар. Аида, күҙ йәштәрен һөртә-һөртә, Зәлифәне ҡат-ҡат ҡосаҡланы:

– Зәлифә апай, беҙҙе онотмағыҙ, ҡунаҡҡа ҡайтып йөрөгөҙ!

– Онота алырмынмы икән? – Зәлифә быны уйсан ғына әйтеп ҡуйҙы.

Поезд ҡуҙғалды. Перронда моңһоу ғына оҙатып ҡалған Аида күҙҙән юғалғас, Зәлифәнең күңеле тулышты. Вокзалда, Аида янында, үҙен нисек тә тыйырға тырышҡайны… Күҙ йәштәрен ят пассажирҙарға күрһәтмәҫ өсөн оҙаҡ ҡына тамбурҙа баҫып торҙо. Бер туған һеңлеһеләй яҡын күргән ҡатынҡай менән хушлашыуы бик ауыр ине уға.

Яҙмыштың аяуһыҙ һынауҙары бушҡа үтмәгән – үҙгәргән Аида… Ҡасандыр юҡҡа ғына ла үпкәләп, сеңләп илап ебәрергә әҙер торған, иркә, наҙлы Аида ана ниндәй аҡыллы, сабыр ханымға әйләнгән. Әле яңы утыҙын тултырған ҡатындың буялған килеш тә күренеп торған ап-аҡ сәстәре уның кисерештәренең ни тиклем көслө, тетрәндергес булғанлығын һөйләй. Сабый ғына сағынан әсәһенән ҡалып, ҡанаттары нығынып та өлгөрмәҫтән атаһының ҡаты ауырыуҙан һуң вафаты… Һуңынан өҙөлөп яратҡан ағаһы Айбулат өсөн борсолоу-ҡайғырыуҙары! Ниһайәт, ағаһының иҫән-имен ҡайтыуына ҡыуанып, тынысланып йәшәй башлағанда – шундай ҙа оло ҡайғы… Исмаһам, иң оло ағаһы яҡында йәшәһә, еңелерәк булыр ине лә. Хәрби хеҙмәттән һуң Алыҫ Көнсығышта эшкә ҡалған ағаһы, өйләнеп, шунда төпләнде. Тыуған яҡтарына хәҙер һирәк ҡайта. Ҡустыһын ерләргә лә: «Барыбер өлгөрмәҫбеҙ», – тип аҡса ғына һалған.

Ярай, иренән уңды Аида. Тырыш, бөтә эш тә ҡулынан килгән Роберт ғаиләһе өсөн өҙөлөп тора. Берреһенән-береһе аҡыллы, матур ике ул тәрбиәләйҙәр.

Бер аҙ тынысланғас, Зәлифә вагонға керҙе. Тағы оҙаҡ ҡына юлда барырға. Их, тиҙерәк ҡайтып етеп, Айбулаттың яҙмаларын тыңларға ине…

Әйберҙәрен урынлаштырып бөттө лә, Зәлифә өҫтәл артына ултырҙы. Тирәяҡты ҡарап барһа, ваҡыт та тиҙерәк уҙыр. Поездың тиҙлеге артҡан һайын, урмандағы ағастар ҙа шәберәк әйләнә. Уларҙы күҙәтеп бара торғас, Зәлифә яңынан бынан бик йыраҡта ҡалған йылдарына әйләнеп ҡайтты…

Хәтирәләр, аһ, хәтирәләр…

*12*

Ул йәй бик тиҙ уҙып китте. Зәлифә менән Айбулат Магниткаға барып, уҡырға инеп ҡайттылар. Инде сентябргә тиклем ике айға яҡын ваҡыт бар. Кисте еткерә алмай бер була Зәлифә. Шул тиклем һағына Айбулатты! Һәр кис уларҙың һөйләшеп-серләшеп һүҙҙәре бөтмәй.

Һәләк ярата икән дә Айбулат һандуғастарҙы! Һушы китеп, донъяһын онотоп тыңлай. «Ҡайҙан шул хәтлем моң икән ошо бәләкәй генә ҡошсоҡта?» – тип аптырай.

Һандуғастар һайрауынан туҡтанымы, үҙе шуларға оҡшатып һайрарға тотона. Зәлифә шул тиклем ярата уның шул ҡыланыштарын! Ә Айбулат, хискә бирелеп:

– Их, Зәлифәкәй, бына уҡып ҡына сығайыҡ әле, беҙ һинең менән өйләнешеп, ғүмер буйына бергә буласаҡбыҙ! – тип хыяллана.

Быйыл бесәнде лә Зәлифәләр шундай тиҙ, анһат ҡына эшләне.

Әлеге лә баяғы Айбулат инде! Үҙҙәренең сабынлығынан бушаған арала ғына әллә күпме ярҙам итеп ташлай.

Быйыл ике ҡустыһы ла сапҡас, былай ҙа эш еңеләйгәйне. Кәбән ҡойорға кәрәкһә, Айбулат әллә ҡайһы арала килеп тә етә:

– Йә, Зәлифә, мен кәбән башына! Менеп өлгөрмәһәң, һәнәккә ултыртам да үҙем мендерәм! – тип шаярта.

Көслө шул Айбулат! Ана, нисегерәк күтәреп ала күбәләге бесәнде! Ҡулдары уйнап ҡына тора. Зәлифә лә бирешмәй, унын ырғытҡан бесәнен тырмаһы менән эләктереп тә ала. Ҡустыһы Юнир ҙә кәбән ҡойорға оҫтарып алды. Икәүләшеп «һә» тигәнсе ослап та ҡуялар. Ҡустылары Айбулатҡа бик тиҙ өйрәнде. «Еҙнә» лә «еҙнә» тип ирештерәләр үҙен. Зәлифәне оялтып бөтәләр.

Бына сентябрь яҡынлашты. Китергә лә ваҡыт етеп килә. Бер кис Айбулат Зәлифәләргә күңелһеҙ генә килеп инде.

– Их, Зәлифә, нишләргә лә белмәйем. Атайҙың ауырығанын беләһең. Хәҙер бөтөнләй насарайҙы. Табиптар, оҙаҡҡа бармаҫ, тиҙәр, – егет үҙенең ҡайғыһын һөйләп бирҙе.

– Айбулат, һин үҙең ҡалайтырға уйлайһың һуң? – тине Зәлифә, бошоноп.

– Уҡырға бармаҫҡа кәрәктер, тим. Нисек уны ташлап китәйем? Аидаға ла ауыр булыр.

Уҡырға Зәлифә үҙе генә китте. Айбулаттың атаһы ныҡ ыҙаланып, тағы ике айға яҡын йәшәне. Яман шеш осланы яҙмышын.

Уҡырға китә алмағас, Айбулат урман хужалығына эшкә урынлашты. Улар, буш ваҡыттары һайын бер-береһенә хат яҙыр булдылар. Һағыныуына түҙә алмаһа, Айбулат ялында Зәлифә янына килеп тә етә.

Октябрь байрамына Зәлифә ашҡынып ҡайтты. Айбулат Зәлифәне моңһоу ғына ҡаршыланы:

– Зәлифәкәй, һине алдан борсомайым тип, хатҡа яҙмағайным. Ҡайтырыңды белдем бит? Ике көндән миңә – армия хеҙмәтенә…

– Уй, Айбулат, һине оҙаҡ күрмәй торһам, ҡалайтып мин түҙермен һуң? – Зәлифә, иламһырап, Айбулатына һыйынды.

– Көтөрһөңмө мине, Зәлифә?

– Көтөрмөн! Мин һине ғүмерем буйына көтөргә лә риза!

– Ҡуй, улай тип әйтмә! – Айбулат Зәлифәнең ирендәрен бармаҡтары менән баҫты. – «Ике генә йыл!» тип әйт. Унан да күбенә минең түҙемлегем етмәҫ. Һинһеҙ мин бөтөнләй йәшәй алмайым хәҙер. Ял көндәрен көскә еткерәм.

– Мин дә ниҙәр генә ҡылырмын һуң, һин янымда булмаһаң? – Зәлифәнең күҙҙәренән туҡтамай йәштәре тәгәрәй.

– Көтәм, тип вәғәҙәнде биреп ҡалһаң, миңә лә хеҙмәт итеүе еңелерәк булыр. Көтөрһөңмө мине, Зәлифә?

– Көтөрмөн, тип әйттем бит? Ике йыл ғына! – Зәлифә шелтәләгән төҫлө әйтеп ҡуйғас, икәүһе лә, ҡыҙыҡ табып, көлөп ебәрҙеләр. Айырылыша алмай, бик оҙаҡ йөрөнөләр. Зәлифә, тыйыла алмай, һулҡылдап илай ҙа ебәрә. Айбулаттың үҙенең дә илағыһы килә лә бит, нисек егет башы менән илаһын, түҙә инде…

…Кис еткәс, Айбулаттарҙың өйөнә йәштәр йыйылды. Юлына күстәнәстәр килтергәндәр. Бик матур итеп оҙатыу кисәһе ойошторҙолар. Зәлифәнең әхирәттәре илашып та алды. Зәлифә нисек тә түҙергә тырышты. Айбулатына күҙҙәре талғансы ҡарап ҡалғыһы килде унын.

– Эй Хоҙайым, ул ике йылды нисек кенә уҙғарырмын икән? – тип уфтанды.

– Ҡайғырма, Зәлифә, яҡшы хеҙмәт итһә, отпускыға ла ҡайтарырҙар, – тине яңы ғына әрменән ҡайтҡан берәү.

– Ике йыл ни «һә» тигәнсе үтә лә китә ул! – тине бүтән бер егет.

– Ауыҙыңа бал да май! – тиеште ҡыҙҙар.

Иртәгә Айбулат, күрше ауылдан тағы ике егет төнгө икелә юлға сығасаҡ. Апаһы ла киләсәк оҙатырға.

Айбулатты әрмегә оҙатҡас, донъя һүнгәндәй тойолдо Зәлифәгә. Ҡулына эш бармай. Илағыһы килеп тик тора. Әсәһе һуҡрана:

– Ҡайтмасҡа тип китмәгәндер бит? Әрменән ни алынған береһе ҡайтып тораһы?

Зәлифә, байрамға ғына ҡайтҡан ерҙән, кире китте Магниткаға.

* * *

Хеҙмәткә китеүенә бер аҙна ла үтмәне, Айбулаттың беренсе хаты килде. Шул хәтлем өҙөлөп-һағынып яҙған. «Комиссияны үттем. Ҡайҙа ебәрерҙәрен әлегә белмәйбеҙ. Ни өсөндөр бик ентекләп әҙерләйҙәр. Әгәр ҙә хатым оҙағыраҡ килмәй торһа, борсолма, карантин тигәндәрендә булырмын. Шунан яҙырмын», – тигән.

Хатты алғас, Зәлифә ҡыуанысынан осоп-ҡунып бер булды. Ҡабат-ҡабат уҡып, хатты ятлап бөттө.

Ике ай ваҡыт уҙғас, ниһайәт, Айбулаттан бер ҡосаҡ хат килде. Ғашиҡ егеттең бар хаты ла тик һөйөү менән генә һуғарылғайны, әйтәгүр.

Бына Айбулаттың карантиндан һуң беренсе хаты. Ни өсөндөр адресы юҡ. «Ялан почтаһы» тип кенә яҙылған. Хаты ҡыҫҡа: «Йылы яҡтарға эләктем. Климат беҙҙәгенән бөтөнләй башҡа. Зәлифә, һин мине көт, мин ҡайтырмын, тик һин генә мине көт!» – тип ҡабатлаған.

Борсолорға әллә ни сәбәп юҡ та кеүек. Әммә, ни сәбәптәндер, Айбулат өсөн йөрәге шул тиклем өҙөлә. Әйтеп аңлатҡыһыҙ ауыр ине уға…

Башҡа хаты килмәне Айбулаттың. Зәлифә ни эшләргә лә белмәне. Шул тиклем һағына ине Айбулатты. Күңеле лә, ниҙер һиҙенгәндәй, болоҡһой ҙа тора. Зәлифәнең тик бер төрлө, мәғәнәһеҙ көндәре башланды. Аҙна һайын ауылына ҡайтырға тырыша. Бәлки, Аидаға берәй хәбәре барҙыр? Юҡ шул!

Аида үҙе лә көн дә хат көтә. Ағаһын һағына. Һағыныуына түҙә алмай башлаһа, сеңләп кенә илап та ала. Зәлифәне лә ул ихлас ярата. Оҙағыраҡ күрмәй торһа, юҡһына башлай.

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, йәштәр араһында имеш-мимеш хәбәрҙәр ишетелә башланы. Ҡайҙалыр һуғыш бара икән, бик күп һалдаттарҙы шунда ебәргәндәр. Имеш, Айбулат та шул һуғыш барған ергә эләккән. Унан, ай-һай, тере ҡайта алырмы икән, тип борсола икән хеҙмәт итеп ҡайтҡан һалдаттар. Зәлифә ышанмай, дөрөҫөрәге, быға ышанғыһы килмәй. Әгәр ул хәбәр дөрөҫ булһа, күптән радионан да, телевидениенан да һөйләрҙәр ине, тип уйлай. Үҙенең икеләнеүен егеттәргә лә еткерҙе. «Эх!» – тип кенә ҡуйҙы егеттәр. Йылға яҡын ваҡыт шулай уҙып китте. Зәлифә ул саҡтарҙы нисек кенә үткәрә алды икән? Эй Хоҙайым, күрәһеләре әле алда булған икән шул…

Бер ялында ауылға ҡайтҡас, Аида йүгереп килеп етте. Илауҙан шешенеп бөткән. Ауыл Советынан килеп, уға: «Ағайыңдың кәүҙәһен ҡайтарасаҡтар, цинк гробта», – тип әйтеп киткәндәр. Аида бер ни ҙә аңламаған, аңлатып биргәндәр. Ошо көндәрҙә килеп етәсәк, тигәндәр…

…Зәлифә күҙен асҡанда, янындағы ултырғыста әсәһе ултыра ине. Күҙҙәре йомоҡ, үҙе нисектер ябығып, ҡарайып киткән кеүек. Зәлифә, үҙе менән ни булғанын аңлай алмай, оҙаҡ ҡына ятты. Ни сәбәптәндер йөрәге өҙөлөп һыҙлай ине… Иҫенә килгәс, Зәлифә:

– Аһ, Айбулат йәнем! – тип асырғанып ҡысҡырып ебәрҙе. Үҙен тыйырлыҡ хәлдә түгел ине ул. Әсәһе, тиҙ генә һикереп тороп, Зәлифәгә эйелде. Биттәренән, ҡулдарынан һыйпап, йыуатырға тырышты:

– Зәлифә, балам, түҙергә тырыш! Бәлә кеше башынан йөрөй инде. Һинең өсөн былай ҙа бына нисә көн йәнем өҙөлә. Һин бит дүртенсе көн иҫһеҙ ятаһың?

– Нисә көн?

– Аида килеп киткәне бирле, нисек һушһыҙ ауҙың, бына бөгөн беренсе тапҡыр күҙеңде астың. Ярай ҙа, фельдшер ҡыҙ янында булырға тырышты. Хәленән килгәндең барыһын да эшләне.

– Ә… Айбулат? – Зәлифә шундай өмөт менән әсәһенә төбәлде.

– Ҡыҙым, түҙергә тырыш, зинһар. Уны ике көн элек ерләнеләр. Бөтә ауыл ерләште. Барыһы ла хәленән килгәнсә ярҙамлашты. Военкоматтан да килделәр. Аида, бахырҡай, шул хәтлем илай. Ярай ҙа, күрше ауылдағы апалары килеп, ҡайғыһын уртаҡлашып, янында булдылар. Апаһы үҙе лә бик ныҡ ауырый икән. Айбулат өсөн ҡайғырып, тағы ла нығыраҡ биреште. Эй, Аллам! Бисара Аида һинең өсөн дә өҙгөләнә. Зәлифә апай, исмаһам, терелһен ине, тип илай. Ниҙәр генә ҡылһаң да, үҙгәртеп булмай шул яҙмышты!

…Зәлифә өсөн көн дә, төн дә буталды: йоҡларға ятһа, йоҡо алмаҫ булды. Ярай ҙа, каникулдары башланды. Өй эштәре менән нисек тә ваҡыт уҙғарҙы.

Көн дә зыяратҡа, Айбулаттың ҡәберенә, йөрөр булды. Әсәһе тиргәп тә бөтә ине, ә Зәлифә тыңламаны. Унда барып ҡайтмаһа, уға тағы ауырыраҡ.

Ошо хәлдәрҙән һуң бер аҙ ваҡыт уҙғас, Аида йүгереп килгән дә:

– Зәлифә апай! Военкоматтан Айбулат ағайҙың әйберҙәрен килеп алырға ҡушҡандар. Хеҙмәт иткән еренән документтарын ебәргәндәр. Шуны барып алырға кәрәк. Биләриттә мин бер үҙем йөрөй белмәйем шул, – тине иламһырап.

– Тыныслан, Аида һылыуым, икәүләшеп барырбыҙ. Иртәгә үк. – Зәлифә, йыуатып, Аиданы ҡосаҡланы. Иртәгәһенә Белорецҡа киттеләр.

Военкоматта уларҙан ни өсөндөр ғәйепле төҫ менән ғәфү үтенделәр. Бер бәләкәй генә төргәк тотторҙолар. Был – асылмаған бандероль ине.

Өйгә ҡайтып еткәс, Аида ипләп кенә төргәкте асты. Унан блокнот, документ-фәлән, ниндәйҙер фотолар сығарҙы. Бер аҙҙан ул ҡысҡырып ебәрҙе:

– Мин бер ни ҙә аңламайым, Зәлифә апай! Былар ни Айбулат ағайҙың әйберҙәре түгелсе…

– Туҡта, Аида, яҡшылап ҡарайыҡ әле.

Ысынлап та, документтар ҙа, фотолар ҙа бөтөнләй икенсе кешенеке ине. Зәлифәнең башына йәшен тиҙлегендә: «Әллә… зыяратта Айбулат түгелме?!» – тигән уй килде.

Үҙенең уйына үҙе аптырап, һораулы ҡарашын Аидаға төбәне:

– Аида, был ниҙе аңлата?

– Был әйберҙәрҙе киренән военкоматҡа илтер кәрәк. Бүтән кешенеке бит! – тине Аида, ниһайәт.

Үҙҙәренең яңылығы менән иртәгәһен ауыл Советына килделәр. Ундағы апай-ағайҙар, гүйә, уларҙы өмөтләндереп ҡайтарҙы.

Зәлифәнең башында тик бер генә уй: «Тереме әллә уның Айбулаты? Улайһа, зыяратта кемде ерләнеләр икән? Уй, уйлауы ла хатта ҡурҡыныс!»

Зәлифәнең, күпме ваҡыттан һуң беренсе тапҡыр күңеле күтәрелеп, өйөнә лә ҡыуаныслы уйҙар менән ҡайтып инде, күңелендәге ҡара болоттар таралғандай булды.

Айбулаттан башҡаса бер хәбәр ҙә булманы. Ниҙәр генә кисермәне Зәлифә

ошо йылдарҙа. Айбулаттың йәштәштәре хеҙмәт итеп ҡайтып бөттө. Зәлифә менән Аида военкоматҡа барып, һорашып та ҡаранылар. Тик уларҙан һәр ваҡыт бер үк яуап: «Беҙ һеҙгә бер нисек тә ярҙам итә алмайбыҙ. Үҙебеҙ ҙә һеҙҙең сама ғына беләбеҙ». Һуңғы барғандарында: «Тере булһа, шунса ваҡыт эсендә бер хәбәре булыр ине, юҡ менән булашып йөрөмәгеҙ!» – тип тиргәп тә ташланылар.

Хеҙмәт итеп ҡайтҡан егеттәрҙән дә бер ни белешеп булмай. «Ҡуйығыҙ, һорашмағыҙ, ул турала беҙгә һөйләргә ярамай!» – ти ҙә ҡуялар. Ҡайһы саҡта барыбер хәбәрҙәре ишетелеп ҡала: «Бигерәк ҡот осҡос һуғыш бара ул илдә, беҙҙең һалдаттар бик күпләп ҡырыла унда!»

Тик ул турала бер ҡайҙа ла яҙмайҙар ҙа, телевидениенан да һөйләмәйҙәр.

* * *

Зәлифә, уҡыуын тамамлағас, Белорет районында геологияла эшләне. Ялдарында ауылына ҡайтҡылап торҙо.

«Ҡайғы бер ҡасан да бер үҙе генә йөрөмәй», – ти ине өләсәһе. Ысынында ла шулай икән…

Көтмәгәндә Зәлифәләрҙең өйөнә оло ҡайғылар ябырылды. Юл һәләкәтенә осрап, бер юлы ике ҡустыһы – Юнир һәм Булат һәләк булды. Әсәләре, ҡайғыны күтәрә алмай, түшәккә ятты, күп тә үтмәй, яратҡан улдары артынан үҙе лә гүргә инде. Игеҙәктәр был ваҡытта Мәскәүҙә уҡыйҙар ине. Ағайҙарын, әсәләрен һуңғы юлға оҙатырға ҡайтып өлгөрҙөләр.

Университетты тамамлағас, уларҙы сит илгә эшкә ебәрҙеләр. Унда бик уңышлы эшләп йөрөйҙәр, икеһе лә өйләнеп, бала-саға үҫтерәләр.

Зәлифәнең атлығып, һағынып ҡайтыр кешеһе лә ҡалманы ауылда. Сит райондан килеп урынлашҡас, уларҙың туғандары ла юҡ ине. Әхирәте Ғәлиә мәктәпте тамамлағас уҡ кейәүгә сығып, Үзбәкстанға күсеп китте. Аида кейәүгә сыҡты. Зәлифә, ауылға ҡайтҡанында, уларға барғылай. Бәлки, ниндәй ҙә булһа хәбәре барҙыр, тип ашығып-ашығып барып керә. Уның өмөт тулы ҡарашына Аида һәр ваҡыттағыса баш сайҡай. Ауылға ҡайтып, Аиданың ҡайғыһын ҡабат-ҡабат яңыртып йөрөгәне өсөн Зәлифәгә уңайһыҙ ине ҡайһы саҡта.

…Ул ваҡиғаларҙан һуң ун йылдан ашыу ваҡыт уҙҙы.

Бына бер саҡ Зәлифәне Татарстанға эшкә саҡырҙылар. Бер курсташы Ҡазанда ҙур ғына урынды биләй икән. Эш буйынса осрашҡанда үҙе янына эшкә саҡырғайны, Зәлифә шунда уҡ ризалашты. Ауылда көтөп торған кешеһе лә булмағас, уға барыбер ине. Айбулаттың ҡайтырына ла өмөтөн өҙҙө. Ниндәйҙер мөғжизәләргә ышаныр йәштән уҙҙы Зәлифә.

Килеп урынлашыу менән, уға бер бүлмәле фатир бирҙеләр. Эшен бик яратты. Фатиры ла яңғыҙ башына таман ғына. Шулай онотолоп эшләп йөрөгәнендә, уның артынан бер тотам ҡалмай, Самат исемле егет йөрөй башланы.

Зәлифәгә Белоретта ла күҙе төшкәндәр бар ине. Тик ул барыһын да гел кире борҙо. Ниңәлер уға һәр саҡ Айбулат ҡайтыр төҫлө ине. Ә был егет, Зәлифә нисек кенә ҡаршылашмаһын, артынан ҡалмай. Ай-вайына ҡарамай, бер ялында үҙҙәре яғына бергә ҡайтырға күндерҙе. Туған-тыумасаһы ихлас ҡаршылап, матур итеп оҙатып ҡалды. Самат, ауылдан ҡайтҡас, өйләнешергә тәҡдим яһаны.

«Әллә яҙмышым ошомо икән?» Зәлифә, ниһайәт, ризалығын бирҙе. Туйһыҙниһеҙ генә яҙылыштылар ҙа йәшәп киттеләр. Яратмай ине ул ирен, нисек тә өйрәнеп китермен, тип өмөтләнде.

Кейәүгә сыҡҡас, барыһын да аңлатып, Аидаға хат яҙып һалды. Тик, ниңәлер,

күпме көтһә лә, Аиданан яуап килмәне. Әллә бик ныҡ хәтере ҡалдымы яратҡан Зәлифә апаһына?

Белореттан күсенгән саҡта Фәлиәнең дә адресын юғалтҡайны. Бына шулай барыһы менән бер юлы араһы өҙөлдө лә ҡуйҙы.

Зәлифә нисек тә яҙмышына күнергә тырыша. Ире Самат бик яғымлы, иғтибарлы кеше. Зәлифәне өрмәгән ергә ултыртмай.

Ауырға ҡалғас, Зәлифә үҙен ҡулға алды. Тормошоноң бынан һуң яҡшы яҡҡа үҙгәреренә өмөтләнеп, ире менән дә ихлас мөғәләмәлә булырға тырышты. Тик, ни сәбәптәндер, балалары үле тыуҙы. Айбулат алдында үҙен былай ҙа ғәйепле тойған Зәлифә тағы төшөнкөлөккә бирелде. Ире нисек тә уның күңелен күтәрергә тырыша. Икәүләшеп ял йорттарына барып, ял итеп ҡайталар. Яңынан ауырға ҡалғас, тик дауаханала ғына ятты. Ниңәлер, ошо бала тыуһа, тормошона йәм өҫтәлеп, барыһы ла ыңғай яҡҡа үҙгәрер төҫлө уға. Йәне-тәне менән тик шуны ғына теләй. Икенсе балалары ла үле тыуҙы. Дауалаусы табип, аптырап: «Барыһы ла яҡшы ине бит, нишләп улай булды һуң әле?» – тип үҙен ғәйепле һананы. Ошо хәлдәрҙән һуң Зәлифәнең тағы ла йәнһеҙ, төҫһөҙ тормошо башланды. Эшенән ҡайта ла ары һуғыла, бире һуғыла… Ире лә ундай тормоштан арыны, буғай. Һуңғы арала өйгә бик атлыҡмай, ҡалып эшләй. Ҡайһы саҡта эсеп ҡайтып, үпкәләргә тотона.

Зәлифә менән тормошон бәйләгәненә үҙе лә үкенә ине, күрәһең…

*13*

…Поезд ниндәйҙер станцияла туҡтаны. Тирә-яҡты солғап алған томан таралып, ҡояш әллә күпме күтәрелгән. Архангелгә еткәндәр икән. Вагонға бер нисә кеше инде. Зәлифә янында урын алған мыҡты кәүҙәле ир, ихлас йылмайып, уны төрлөсә әүрәтергә тырыша. Ғаиләһе, дүрт балаһы бар икән. Эш эҙләп Өфө яҡтарына китеп барышы. Ауылда эш юҡ, тип уфтана. Ҡатынын, балаларын ҡалдырып сығып китеүе зерә ҡыйын икәнлегенә зарланып алды.

Зәлифәнең әллә ни һөйләшкеһе килмәгәнен аңлағас, ары-бире йөрөштөрҙө лә ятып йоҡлап китте. Зәлифә лә, бер аҙ серем итеп булмаҫмы тип, урынына янтайҙы.

…Ул уянғанда поезд Өфөлә  ине. Тиҙ генә сумкаһына әйберҙәрен тултырҙы һәм сығыу юлына ашыҡты.

Кассаға барып, Ҡазанға тиклем билет алды. Оҙаҡламай уның рейсын иғлан иттеләр. Бына поезд ҡуҙғалды. Алда тағы ла оҙон-оҙаҡ юл. Отпускыһы бөтөп, эшенә сығырға ике генә көн ҡалып бара. Яратҡан эше лә булмаһа, нисек кенә йәшәр ине икән ул?

Бер аҙҙан Өфө лә артта ҡалды. Зәлифә, инде нисәнсегәлер, хәтирәләр даръяһына сумды.

*14*

…Бер кис эштән һуң күңелһеҙ генә ҡайтып ингәйне, телефон шылтыраны:

– Алло! Зәлифә әхирәт, был һинме?

«Фәлиә!!!»

Зәлифә, шатлығынан сәсәрҙәй булып, ҡысҡырып ебәрҙе:

– Эйе, эйе, Фәлиә, мин был!

– Вәт, суҡынсыҡ, әллә ҡайҙарға олағып киткәнһең – көскә эҙләп таптым.  Әле, ярай, эш урыныңдан эҙләштеләр.

– Ой, Ғәлиә-ә! Ҡайһылай һәйбәт иттең шылтыратып. Адресыңды юғалтҡан инем бит!

– Зәлифәкәй, мин бит ауылда отпускыла булдым. Ҡайтырға ваҡыт. Әле мин Өфөлә ҡунаҡта. Иртәгә өйҙә булаһыңмы, килеп сыҡһам?

– Эйе, өйҙә булам. Шәмбе бит иртәгә! Ҡайһылай шәп була, килеп сыҡһаң!

– Улайһа, хәҙер үк билет алам да юлға сығам. Вокзалда ҡаршы алырһың, йәме?

– Ҡаршылайым, әлбиттә. Их, Ғәлиә, ҡыуандырҙың мине!

– Иртәгә осрашҡанға тиклем!

Телефонды һалғас, Зәлифә шатлығынан зыр әйләнеп бейеп алды.

«Ҡайһылай күңелле булып китте! Их, йәшлек әхирәте, серҙәше Ғәлиә киләсәк! Иртәгә!» Кәйефе шул ҡәҙәре күтәрелде. Күптән өй эштәренә ҡулы бармай ине. Әле тиҙ генә иҙәндәрен йыуып сығарҙы, магазинға барып әйләнде.

Ғәлиә килгәс ҡыуанышып күрешеүҙәре! Уларҙың күптән осрашҡандары юҡ. Ғәлиә кейәүгә сығып, Үзбәкстанға йәшәргә күскәндән һуң, ара-тирә хат аша аралаша инеләр, һуңынан бәйләнештәре бөтөнләй өҙөлдө шул.

Әле һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Зәлифәнең ире үҙҙәре яғына ялға ҡайтҡайны, аулаҡта рәхәтләнеп күңел астылар.

Бына бер мәл Ғәлиә:

– Әхирәт, мин һиңә былай ғына килгән тиһеңдер инде. Юҡ, шул! Һиңә әйтер хәбәрем булмаһа, ҡайтып та китер инем, бәлки… – Аһ-аһ, уратып ҡына һүҙ башланысы.

– Һөйлә, тиҙерәк… – тип үтенде Зәлифә.

– Ауылға ҡайтҡас, ундағы хәлдәргә иҫем китте. Һинең ауылда күптән булмағаныңды белгәс, аңланым инде. Тимәк, Зәлифәкәй ошоғаса бер ни ҙә белмәй, тинем…

– Йә, инде, һуҙма! – Зәлифә түҙмәй. Йөрәге, ни сәбәптәндер, ярһып туларға тотондо.

– Әхирәт! Һин… ишетмәгәнһеңдер ҙә? Айбулат ҡайтҡан даһа!

– Ай-бу-булат ҡ-ҡайтҡан?! – Көтөлмәгән яңылыҡтан иҫәңгерәп ҡалған Зәлифә, тотлоға-тотлоға, көскә һорай алды.

– Шулай, Зәлифә, ысынлап та, ауылда Айбулат. Мин дә тәүҙә шаңҡып ҡалдым. Ә уның ҡайтыуына өс йыл. Исмаһам, берәйһе хатҡа яҙһасы! Үҙең беләһең, мин ауылда һирәк булам. Ә быйылғы отпускымда бер нигә ҡарамай юлға сыҡтым. Унда саҡта, Айбулат тураһында ишетеп, уның менән осраштым. Һинең әлегә тиклем ишетмәгәнеңде белгәс, нисек тә адресыңды табып, хәбәр итергә булдым. Тәүҙә шылтыратып ҡына әйтергә йыйынғайным, һуңынан кире уйланым. Беренсенән, телефондан ғына нимә әйтеп өлгөрәһең инде. Икенсенән, ул күргәндәрҙе Хоҙайым күрһәтмәһен!.. Уның өсөн һинең нисек өҙгөләнгәнеңде беләм бит инде, шундай ваҡытта янында булғым килде, – Ғәлиә Зәлифәне яратып ҡосаҡланы.

Күпме йылдар буйына өҙөлөп көткән, инде ҡайтырына өмөтө тамам өҙөлгәндән һуң Айбулаттың иҫән-һау ауылында йәшәп ятыуын ишетеү Зәлифәгә бик ныҡ тәьҫир итте:

– Рәхмәт, Ғәлиә… Һөйлә тиҙерәк уның тураһында, зинһар.

– Их, Зәлифә, һөйләргә лә ҡыйын шул. Ә ул үҙе ҡалайтып сыҙаны икән бығаса? Бер хәйерһеҙ мәлдә «дошмандар» ҡулына эләгеп, әллә күпме ваҡыт тотҡонлоҡта йәшәгән. Ҡасырға ла, берәй хәбәр ебәрергә лә мөмкинселеге булмаған.

Беҙҙең һалдаттар нисектер ул ҡәбәхәттәрҙең эҙенә төшөп алып, Айбулат ыҙаланған урынға барып сыҡҡандар. Уны тапҡас та әле әллә күпме ваҡыт үтеп киткән. Төрлө килешеүҙәрҙән һуң ғына ireккә сығарғандар. Нимә кисергәндәрен һөйләгеһе килмәй, былай ҙа күренә шул. Әле яңы хәл керә башланы, ти һеңлеһе Аида. Һиңә хәбәр итеүҙән тыйҙы Аида: «Ҡуй, белмәһен, ғаиләһен боҙоп ҡуйырбыҙ. Ағайыма ла уны эҙләп китергә рөхсәт итмәнем!» – тине. Ә Айбулат һине бер ҙә оноторға йыйынмай. Һөйләшкәндә шуны аңланым.

Ғәлиә ҡайтып киткәс, Зәлифә тағы төшөнкөлөккә бирелде. Ире ҡайтты. Ул да һуңғы осорҙа үҙ-үҙенә бикләнгәйне. Зәлифә Айбулат тураһында әйтергә булды.

– Яҡшы булған ҡайтҡас, – быны һалҡын ғына әйтеп ҡуйҙы ире. – Һиңә, күрәм, ул ҡәҙерле. Ә минең кәрәгем бөткәндер инде.

* * *

Зәлифә ире менән айырылышырға булды. Бер-береһе өсөн өҙөлөп тормағас, бергә йәшәүҙең ни йәме? Бәлки, минән китһә, Самат та яҙмышын ыңғай яҡҡа көйләр, тип үҙе үк барып ғариза бирҙе. Уйларға бирелгән бер ай ваҡыт уҙғас, ғаилә тормоштары өҙөлдө.

Зәлифә, ауылына ҡайтып, Айбулат менән бик ныҡ осрашҡыһы килһә лә, үҙен ғәйепле һанап, юлға сығырға ашыҡманы. Өҙөлөп яратҡан кешеһенә биргән вәғәҙәһенә тоғролоҡ һаҡламағанына үкенеү тойғоһомо, яуаплылыҡ хисеме – ниҙер йөрәген аяуһыҙ телгеләне.

Быйылғы отпускыһында ҡайтырға тип йыйынып та бөткәйне. Бөтә йәне, тәне менән тик Айбулаты янында булһа ла, үҙен еңергә көс тапманы.

Их, шул саҡта вәғәҙәһен боҙоп, кейәүгә сыҡмаған булһа, осоп ҡына ҡайтып етер ине лә…

«Их, Айбулат, йәнем!! Бер нәмәгә лә ҡарамай ҡайтып, тубыҡланып кисереүеңде ялбарырға кәрәк булған да бит!.

Ә һин үҙең… мине күптән кисергән булғанһың икән?!»

*15*

Ҡазанға ҡайтып еткәс, күстәнәстәрен урынлаштырҙы ла Зәлифә тиҙ генә душ кереп сыҡты.

«Тиҙерәк! Тиҙерәк!»

Ул Аида биргән аудио-кассетаны ашығып магнитофонға ҡуйҙы.

…Бер аҙҙан магнитофонда көслө алҡыштар ишетелде. Гөж килеп: «Бис», «Браво», «Маладис! Афарин, Айбулат!" – тип ҡысҡыралар, Айбулатты сәхнәгә саҡырып ҡул сабалар ине. Яҙмаларҙың концерттың башынан уҡ яҙылмағанлығын Зәлифә аңланы.

Бына баянда үтә лә моңло көй ағыла башланы. Бер аҙ уйнағас, баянсы егет туҡтаны ла:

– Ә был йырҙы Айбулат ағай яңы ғына ижад итте. Рәхим итеп тыңлағыҙ! – тине.

Баянсы яңынан өҙҙөрөп уйнап ебәрҙе. Уға шул тиклем дә яҡын, үҙәктәрҙе өҙөрҙәй таныш тауыш ҡушылды:

*…Өҙҙөрөп тә һайрай бер һандуғас*
*Шылғантүбә таллыҡтарында.*
*Бер тыңлайһым килеп, килдем тағы*
*Йәшлекте һағынған сағымда…*

Айбулат был йырҙы шундай тулҡынланып, хисләнеп йырлай ине, йыры ла тик һағыш менән һуғарылғайны.

Зәлифә, үҙ-үҙенә ышанмай, магнитофонға төбәлде. Уға хәҙер үк, ошо минутта уҡ Айбулат килеп инер ҙә, уны күтәреп алып, бүлмә буйлап зыр өйөрөлтөр: «Зәлифәм, аҡҡошом минең, бына килеп таптым да һине!» – тип әйтер төҫлө ине…

Зәлифә шул тиклем ярһып иланы. Яңаҡтары буйлап туҡтауһыҙ аҡҡан ҡайнар күҙ йәштәрен тыйырға ла тырышманы.

Айбулат йырлап бөткәс, зал бер аҙға тын ҡалды. Унан дәррәү ҡул саба башланылар. Оҙаҡ тынманы алҡыштар.

Бер аҙҙан Айбулаттың үҙенең тауышы ишетелде:

– Рәхмәт! Был һуңғы йыр – минең тәүге һәм һуңғы мөхәббәтемә арналған. Рәхмәт һеҙгә, ауылдаштар, ихлас алҡышлағанығыҙ өсөн! Был йыр Зәлифәгә лә оҡшар, тип ышанам!

Тағы көслө ҡул сабыуҙар ишетелде.

…Зәлифә бик оҙаҡ иҫәңгерәп ултырҙы. Күпме йылдар уҙғандан һуң Айбулаттың үҙенең тауышын ишетеү уның күңелен шул хәтлем иләҫләндерҙе:

– Бына беҙ осраштыҡ, Айбулат! Хәҙер инде бер ҡасан да айырылмаясаҡбыҙ. Ишетәһеңме, Айбулат? Гел бергә буласаҡбыҙ, икәүҙән-икәү, икәүҙән-икәү… ғүмерем буйына… Һин йырларһың, мин тыңлармын… Унан мин дә түҙмәм, һиңә ҡушылып йырлармын… Йырлармын да, илармын…

*Һандуғас, һандуғас,*
*Китмә, китмә, һандуғас…*
*Ҡанаттарың талдырып,*
*Тыуған ерҙе ҡалдырып…*

…Был – йөрәгенең әрнеүенә түҙә алмай, ғүмере буйына күңел түрендә генә йөрөткән йырҙы үҙәктәрҙе өҙөрҙәй моңло тауыш менән Зәлифә үҙе йырлай ине.

## Эпилог – һандар телендә

*Афған һуғышы… Бик оҙаҡ, ун йыл буйына барған ҡот осҡос һуғыш…*

*Тәүге йылдарҙа, цензура арҡаһында, был турала бер ҡайҙа ла яҙмайҙар.*

*Ун йыл буйы барған һуғышта СССР-ҙан* **546 мең һалдат** *ҡатнаша.* **13833 һалдат** *һәләк була.* **417 яугир** *хәбәрһеҙ юғала. Һуңынан, һуғышта алған яраларҙан, ауырыуҙарҙан вафат булғандар менән бергә, һәләк булғандарҙың һаны* **26 меңгә** *етә.* **54 мең һалдат яралана**, *контузия ала.* **416 мең һалдат** *төрлө ауырыуҙарҙан интегә. Бик күптәренә психологик реабилитация кәрәк була.*

*Башҡортостандан Афған һуғышында* **9,5 мең һалдат** *ҡатнаша.* **335 яугир** *һәләк була. Әлеге ваҡытҡа тиклем* **6 һалдат** *хәбәрһеҙ юғалған иҫәпләнә…*

*СССР-ҙан* **200 мең яугир** *орден-миҙалдар менән наградлана,* **71 һалдат** *– Советтар Союзы Геройы.*

*Был – статистика… Ә улар эсендә күпме өҙөлгән ғүмер, ҡайғы-һағыш, ҡыйралған яҙмыштар! Әҫәремдең геройы Айбулат та улар араһында ине…*

*Эй Илаһым, һуғыштар бер ҡасан да булмаһын ине?!*

**Мәүлит КӘРИМОВ**

## *ЯҘМЫШТАРҘАН УҘМЫШ ЮҠ!*

### Ҡайҙа наҙым?

*Булмағанда якты көндәр,*
*Бар микән һуң татлы төндәр?!*
*Көтөп алыр татлы кистәр,*
*Кисерәһе наҙлы хистәр?!*
*Наҙлы хистәр, татлы кистәр,*
*Һөйөшәләр парлы иштәр.*
*Яңғыҙ йөрәк! Ҡайҙа наҙы –*
*Мөхәббәттең һөйөү яҙы?*

### Тамсы ғына

*Ағиҙел аша сыҡҡанда*
*Ҡараным ағын һыуға.*
*Үткәл йылғам йыраҡ, нисек*
*Түҙәйем һағыныуға?!*
*Һинең дә бит ошо һыуҙа*
*Бар ҡатнашың, ағышың.*
*Ағиҙел тулҡындарында*
*Сағылалыр һағышың.*
*Их, күрһәмсе бер тамсыңды*
*Ағиҙелдә, Үткәлем!*

---

*Мәүлит Кәримов (1962) Белорет районы Үткәл ауылынан. Өфөлә йәшәй. Заводта эшләй.*

*Күҙ алдыма баҫыр ине*
*Бала сағым, үткәнем.*
*Тормоштоң да ағышында*
*Мин үҙем – тамсы ғына.*
*Беҙҙе айырған яҙмыштың*
*Ҡулында ҡамсы ғына.*

## Ҡалам, йәнем, яныңда!

*Эстәрлеһән йыраҡ Иҙелбашы,*
*Борма-борма юлдар араһы.*
*Эх, осаһы ине туры ғына,*
*Һыҙлағанда йөрәк яраһы.*
*Тик булмай шул бер ҡанатһыҙ осоп –*
*Һынып ҡалды бында ҡанатым.*
*Борма юлдарҙан да үтер өсөн,*
*Яндарыңда кәрәк пар атың.*
*Балыҡ булып китәйемме йөҙөп*
*Эстәрлеһән Иҙелбашына?*
*Ҡаршы аҡҡан Иҙел һыуын еңеп,*
*Етер инем нигеҙ ташыма.*
*Юк, китмәйем, йәнем, һине ташлап,*
*Һин өй иткән ғәзиз был ерҙе.*
*Китеп кенә онотолоп булһа,*
*Юйып булһа икән хәтерҙе...*

## Күләгәлә...

*Күләгәлә ҡар һуң ирей,*
*Күләгәлә боҙлауыҡ.*
*Күләгәлә күңелде лә*
*Өшөттөрә был һыуыҡ.*
*Боҙлауығында тайһам да,*
*Йығылманым тормошта!*
*Күләгәнән сыҡты күңел*
*Ныгып тормош-ҡормошҡа.*

**Әхмәт НУРЕТДИНОВ**

## *Китмәйем*

*Юл эҙләйҙәр бит Йыһанға*
*Ғалимдар.*
*Күсеп китер, тип теләге*
*Булғандар.*
*Бай әҙәмдәр йыйыналар*
*Күсергә.*
*Ерҙе ташлап, Айға китеп*
*Үрсергә.*
*Ә мин үҙем китмәйем бер*
*Ҡайҙа ла.*
*Әҙер байлыҡ көтмәй беҙҙе*
*Айҙа ла.*
*Ерҙә үҫтем. Ул бит – минең*
*Төйәгем.*
*Ерҙә ҡалам, ерҙә ятыр*
*Һөйәгем.*

## *Юҡ, тимә*

*Был донъяла бәхет ҡошо*
*Юҡ, тимә.*
*Тырыш булһаң, үҙе килер*
*Ул һиңә.*
*Тормош ауыр, етешһеҙлек*
*Күп, тимә.*
*Әҙер байлыҡ күктән төшмәҫ*
*Ул һиңә.*
*Тирләп-бешеп эшләргә эш*
*Юҡ, тимә.*
*Яҡшылыҡтар ҡылаң икән,*
*Мин, тимә.*
*Башҡайыңа ҡайғы төшһә,*
*Төн, тимә.*
*Төндәр үтә, ә унан һуң*
*Көн килә.*
*Ауырлыҡты яурыныңа*
*Һала бел.*
*Ғүмер буйы кеше булып*
*Ҡала бел.*

---

*Әхмәт Нуретдинов Учалы районының Ыстамғол ауылында тыуған. Мәғариф ветераны: оҙаҡ йылдар Учалы районында һәм Силәбе өлкәһендә балалар уҡытты. Бөгөнгө көндә хаҡлы ялда. Верхнеурал ҡалаһында йәшәй.*

## Киткән юлдарыңа ҡарайым

*Мин ҡайтырмын, улым, көт һин, тиеп*
*Хушлашҡайның, атай, ул саҡта.*
*Нисә тиҫтә йылдар уҙһалар ҙа,*
*Шул һүҙҙәрең сыңлай ҡолаҡта.*
*Хушлашҡанда, бәлки, һиҙгәнһеңдер*
*Күрмәҫеңде мине ғүмергә.*
*Беҙ йәшәһен тиеп, утҡа инеп,*
*Ятып ҡалырыңды сит ерҙә.*
*Күптән инде мин дә малай түгел,*
*Олатаймын хәҙер, атайым.*
*Ҡайтып төшмәҫ микән, тиеп һаман*
*Киткән юлдарыңа ҡарайым.*

* * *

*Унда атыш, бында һатыш*
*Китте ошо арала.*
*Әҙәм йәне бер тин тормай –*
*Көслөнөкө замана.*

* * *

*Был донъяның серен асыр*
*Белем бар.*
*Шул серҙәрҙе аңлатырлыҡ*
*Телем бар.*

* * *

*Эшем тиеп яндым-көйҙөм,*
*Ярһыуымды тыйманым.*
*Ғүмер үтте, ҡартлыҡ етте,*
*Һаман эштән туйманым.*

* * *

*Хоҙай һиңә тел биргән,*
*Ҡыҫҡа һөйләй бел, тигән.*
*Артыҡ һүҙҙең тәме юҡ,*
*Тәмһеҙ һүҙҙең йәме юҡ.*

## Ришат ВАХИТОВ

### *Яҙҙар етһә...*

*Йәшлегемә ҡайтам,*
*Яҙҙар етһә,*
*Туп-туп ҡошҡайҙарга тагылып.*
*Аҡ ҡайындар сыга алдарыма*
*Йәшел яулыҡтарын ябынып.*
*Йәшлегемә ҡайтам,*
*Яҙҙар етһә,*
*Нөгөшкәйем әрселгәндә боҙҙан.*
*Үләндәргә ялан аяҡ баҫып,*
*Бала сагым яланына уҙам.*
*Йәшлегемә ҡайтам,*
*Яҙҙар етһә,*
*Аяҙ күктә табаҡ ай гына.*
*Йәшлек тоҡандырган усаҡ яна,*
*Болондарҙа саба тай гына.*

***

*Боҙло сулпыларын сылтыратып*
*Өнһөҙ башын эйгән һылыу ҡайын.*
*Ташлап киткәс дуҫы – һандугасы,*
*Әйтә кеүек: миңә яңгыҙ ҡыйын.*

### *Үпкәм юҡ*

*Бер үпкәм юҡ үткәндәргә –*
*Үткәне үткән инде.*
*Ҡайгы-һагыш, шатлыҡтарым*
*Ел булып уҫкән инде.*
*Бер үпкәм юҡ йәшлегемә –*
*Йәшнәп йәшәлгән инде.*
*Әсеһе лә, сөсөһө лә*
*Бер үк кәсәнән инде.*
*Бер үпкәм юҡ һөйгәнемә –*
*Яҙмышым бүләгенә...*
*Таңдан-таңга, тауҙан-тауга*
*Еләм дә еләм генә.*

***

*Быуаттанмы, болоттанмы саллангандай,*
*Ҡая соңҡаһына баҫҡан ҡарт ҡарагай.*
*Тарагандыр шырт сәстәрен заман еле –*
*Һөйләр ине, көйләр ине – булһа теле.*

---

*Ришат Вахитов Ишембай районы Яңы Һәйет ауылынан. Әҙәби ижад менән әүҙем шөгөлләнә.*

# БАШҠОРТ ТА УЛ, РОССИЯН ДА

*(Ирек Кинйәбулатовҡа – 75 йәш)*

Бынан күп йылдар элек Ирек Кинйәбулатовтың «Мин – башҡорт!» тигән шиғырын уҡып ултырғанда, Мостай Кәримдең «Россиянмын» тигән шиғыры хәтергә төшөп йөҙәткәне иҫтә ҡалған. Яҙылыу мәлдәре буйынса уларҙы бер-береһенән дүрт тиҫтә йыл айырып торһа ла, был шиғырҙарҙың мотивтарында ниндәйҙер яҡынлыҡ һәм уртаҡлыҡ бар һымаҡ тойолғайны. Шиғырҙарҙың икеһендә лә һүҙ милләт яҙмышы, уның үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге хаҡында бара. Әгәр Мостай Кәрим ун бер строфанан торған шиғырында:

*Күңелемдә минең көн сыуағы,*
*Күҙҙәремдә – ҡояш нурҙары,*
*Йөрәгемдә – мең йыл тоткнлокто*
*Үтеп сыҡҡан өмөт йырҙары, –*

тип яҙһа, Ирек Кинйәбулатов иһә ун өс строфанан торған әҫәрен бындай юлдар менән тамамлап ҡуйған:

*Мин – күптәнге,*
*Киләсәккә башҡорт –*
*Меңәр йыллыҡ юлым артымда.*
*Үткәндәре барҙың – киләһе бар,*
*Шуны белһен йәшем, ҡартым да.*

Шулай ҙа, мотивтар уртаҡлығы менән бергә, был ике шиғыр араһында күпмелер айырмалыҡ та һиҙелә кеүек ине. Мостай Кәримдең «Россиянмын»ы башлыса күтәренке рух менән һуғарылған һәм ул уҡыусыла һис шикһеҙ ыңғай эмоция уята. «Россиянмын» шиғыры,– тип билдәләгәйне үҙ ваҡытында Ғ. Хөсәйенов,– тамырҙары дүрт быуат элгәре бергә тоташҡан, яҙмыштарын иш иткән, юлда юлдаш, яуҙа яуҙаш, дандаш һәм ҡәберҙәш башҡорт менән рус халыҡтарының мәңгелек дуҫлығына алтын һүҙҙәрҙән ҡойолған поэтик һәйкәл дәрәжәһендә». Танылған ғалимдың был билдәләмәһенә байтаҡ йылдар үтеп китһә лә, ул әле лә үҙенең әһәмиәтен юғалтмаған, минеңсә.

Әгәр, Мостай Кәримдең «Россиянмын»ы уҡыусыла ыңғай эмоция уята, тигәнмен икән, был һис кенә лә Ирек Кинйәбулатовтың «Мин – башҡорт!»о гел кире эмоцияға ғына ҡоролған икән, тигән һүҙ түгел, әлбиттә. Дөрөҫ, унда кире эмоцияға ла урын юҡ түгел. Ләкин уның үҙ сәбәптәре булыуын да онотоп ташларға ярамайҙыр. Мостай Кәримдең «Россиянмын»ы дүрт йылға һуҙылған ҡаты һуғыштан һуң илде аяҡҡа

баҫтырыу өсөн барған көрәш дәүерендә ижад ителгән булһа, Ирек Кинйәбулатовтың шиғыры быға тиклем донъя күләмендә дан тотҡан бөйөк державаны төрлө һылтауҙар менән юҡҡа сығарған осорға тура килә.

«Мин – башҡорт!» тигән шиғырына автор үҙе лә битараф түгел шикелле. 1993 йылда донъя күргән бер китабына ул ошо исемде ҡушты. Юл ыңғайында шуны ла иҫкә төшөрөп уҙайыҡ: быға тиклем Ирек Кинйәбулатов «Баҫыу юлы», «Сыйырсыҡтар бала осора», «Һөйөү иртәһе» тигән йыйынтыҡтарын бүләк иткәйне уҡыусыға. Артабан иһә, «Мин – башҡорт!»тан һуң, «Арғымаҡта», «Замана тауышы», «Ғүмер китабы» тигән йыйынтыҡтар донъяға килде. Уларға шағирҙың рус телендә баҫылып сыҡҡан «Доброе утро!», «Слово» тигән китаптары килеп өҫтәлде.

И. Кинйәбулатовтың поэзияһы менән яҡынданыраҡ танышҡанда, «Мин – башҡорт!» тигән һөйләмдең, ысынлап та, тиктомалға күкрәк һуғыу түгеллегенә ышанаһың. Шаҡтай элегерәк яҙылған «Рәсәй» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, бындай юлдарҙы уҡырға мөмкин:

*Үҙ иленде – илем тиһәң,*
*Ирендәре уның кибә.*
*Үҙ телеңдә һөйләгәнде*
*Ул сит күрә, ситкә тибә.*

Ләкин, заманында бик тә ҡыйыу һәм уҫал яңғыраған был юлдар хасил булғанда, ун–ун биш йылдан һуң беҙҙе ниҙәр көтәсәген шағир күҙ алдына ла килтермәгәндер. Әгәр килтерһә, Рәсәйҙе «Беҙ тыумыштан белмәгәнбеҙ: ул булған бит үгәй әсәй» тимәҫ тә ине, бәлки. Илде «үҙгәртеп ҡороу эпопеяһы» башланғас, ҡасандыр уның көньяҡ сиктәрен һаҡлауға дүрт йыл ғүмерен сарыф иткән хәрби моряк Ирек Кинйәбулатов был мәхшәргә күҙ йомоп ҡала алманы, әлбиттә. Сөнки быға тиклем үгәй әсәләй тойолған Рәсәйҙең хәле ни тиклем мөшкөл икәнлеген шағир яҡшы аңлай ине. Жанры буйынса эпитафияға тартҡан «Егерменсе быуат» тигән әҫәрендә ул үҙгәртеп ҡороу алып килгән «мөғжизә»гә үҙенең ҡараштарын бер ниндәй икеләнеүһеҙ, туранан-тура ярып һалды. Был шиғырҙың һәр строфаһы уты һүнеп өлгөрмәгән ҡуҙ һымаҡ өтөп ала:

*Ярышып, сәмләнеп,*
*Булғанды таратып,*
*Һорайбыҙ хәйерҙәр,*
*Донъяны аптыратып.*
.............................
*Егерменсе быуат,*
*Түгелме ни оят?*
*Түңкәрелмәҫ элек*
*Выждаының уят!*

Тарих төпкөлөнә йүнәлгәндә үҙе артынан иҫәпһеҙ-хисапһыҙ сүпсар, күтәлмәгән мәшәҡәттәр, иңгә-башҡа һыймаҫлыҡ ҡайғы-хәсрәт ҡалдырып киткән быуат шағир йөрәгендә бик күп ҡатмарлы хистәр, бөтмәҫ-төкәнмәҫ һорауҙар уята: «Ҡайҙа баҫма – кәртә, ҡайҙа баҡма –

упҡын»; «Ер өҫтөндә дөрләй күпме тамуҡ уты…»; «Юлдар алға түгел, бары артҡа илтә»; «Ирҙәре йомшаны, ҡатындар ҡаттылар»; «Арттары ал булып, алдары арт булды…»; «Алтындың өҫтөндә ас беҙ, яланғас беҙ» һ.б. Был метафораларҙың бөтәһе лә беҙҙең шул осорҙағы ысынбарлығыбыҙҙан үҫеп сыҡҡан, һәм уларҙа бер ниндәй ҙә арттырыу ҙа, күпертеү ҙә юҡ. «Ер өҫтөндә дөрләй күпме тамуҡ уты…», «Аңларға һуң нисек, ҡор башында – иблис», «Ғазаптың башымы быуаттың аҙағы?» тигәндәре айырыуса көслө яңғырай. Былай тип әйтергә образлы фекерләү маһирлығы ғына түгел, күпмелер кимәлдә ҡыйыулыҡ та кәрәктер.

Һорауҙар, уйланыуҙар, борсолоуҙар Ирек Кинйәбулатовтың «Иң мөһимен генә яҙ һин!..» тигән шиғырында ла тулып ята. Шиғыр үҙенең сюжет ҡоролошо менән иғтибарҙы йәлеп итә: иң мөһимен генә яҙырға ҡушыусыларға (улар, бәлки, ҡушыусылар, кәңәш итеүселәр генә түгел, ә бойороҡ биреүселәрҙәлер!) автор көтөлмәгән, ләкин бик урынлы һәм тәғәйен генә яуабын ҡайтара. Шул яуапта шағирҙың үҙ һыны ла сағылып китә: заманыбыҙға хас булған башбаштаҡлыҡтар, ғәмһеҙлек, битарафлыҡ арҡаһында тирә-йүн мөхитебеҙҙең күҙгә күренеп ярлылана һәм төҫһеҙләнә барыуын ул тыныс ҡына кисерә алмай. Үләндәргә ләйсән урынына көнө-төнө туҙан яуыуына, эсер һыуҙар буръяҡланып, һулар һауаның торған һайын бысрана барыуына, һыуға сарсағанда йылғалар кәмеп, күлдәр ҡороуына нисек инде битараф ҡалһын үҙен шағирмын тигән шағир һәм нисек инде шулар тураһында әсенеп яҙмайынса түҙә алһын ул? «Әҙәм балаһы өсөн был донъяла ер-һыуҙан да ҡәҙерлерәк нимә бар» тигән һығымтаға килтерә автор уҡыусыһын. Шағирҙың бына был борсолоуҙары менән тәнендә йәне булған кем генә килешмәҫ тә кем генә уның менән бергә һыҙланмаҫ икән:

*Һыҙланыу арта йөрәгемдә,*
*Төйәгемдән кейек китһә,*
*Етем торһа ҡош ояһы,*
*Сәскә ҡоймай үлән кипһә.*

*Арта бара күҙ алдымда*
*Ҡыуаҡһыҙ ҡош, ҡошһоҙ ҡыуаҡ.*
*Ниңә кәмей ерем йәме,*
*Уның ҡотон кем һуң ҡыуа?*

Ошо һыҙланыуҙарҙан бер аҙға ғына булһа ла арынып торор өсөн, үҙен үҙе тынысландырырға тырышҡан саҡтары ла юҡ түгел шағирҙың. «Иркәләнер иртәләрем бар, тип…» исемле шиғырында, мәҫәлән:

*Һәр кем ерҙә үҙе йүнен күрә,*
*Кемдә, тиһең, минең ҡайғым бар.*
*Әлдә барын берҙәй тигеҙ күргән*
*Ал ҡояшым, яҡты айым бар, –*

тип йыуата ул үҙен. Ләкин, «ҡара төнөм аҡ өмөттән тора», «мин үҙемдең йәште үҙем һөртәм, мин үҙемде үҙем йыуатам» тиһә лә, уның

кәйефе барыбер ҙә болоҡһоу, сөнки үҙеңде көсләп, яһалма рәүештә күңелде күтәреп буламы ни? Беренсе апрелгә бағышлап яҙылған «Көлкө килмәй» тигән шиғырҙа кеше психологияһындағы ошо ҡатмарлы күренеш ифрат асыҡ сағылған. Әлбиттә, әлеге осраҡта беренсе апрель – шағир өсөн бер һылтау ғына. Шиғырҙы баштан-аяҡ иғтибар менән уҡып сыҡҡас, был һылтауҙың поэтик табышҡа әүерелеп киткәнлегенә төшөнәһең. Быға тиклем, шаяртып, алдау көнө, көлкө көнө тип йөрөтөлгән көн, шағирҙың осҡор ҡәләме аҫтында, үҙ эсенә ғәйәт тәрән йөкмәткене һыйҙырған әҙәби сара дәрәжәһенә күтәрелгән. Әйткән һүҙ – атҡан уҡ, тигәндәй, ул бушҡа яңғырамаһын өсөн, шиғырҙан ике генә строфа килтерәйек:

*Беҙ меҫкенгә, беҙ көлкөгә ҡалдыҡ,*
*Бөтә донъя эстән көлгәндә.*
*Көлөү ҡайғыһымы беҙҙә бөгөн,*
*Көләме ни бәндә бөлгәндә?*
*........................................................*
*Көн-төн көлә торғас көнбайыштан,*
*Тороп ҡалманыҡмы көлкөгә?*
*Уларға беҙ хәҙер һыйынабыҙ,*
*Тауыҡ барған һымаҡ төлкөгә.*

Стиле буйынса эзопсараҡ яңғыраған «Илде һағыныу» ҙа ошо юҫыҡтағы шиғыр. Күләме йәһәтенән (24 строфа!) бер аҙ күңелде ҡырһа ла, ниміәһе менәндер бәйеткә оҡшабыраҡ торған был әҫәр «баштарға һыймаҫлыҡ талаш, тартыш, һуғыш» мәлендә йәшәгән зирәк аҡыллы уҡыусыны һис кенә лә битараф ҡалдырмайҙыр. Әҫәр тамамланыр алдынарыраҡ килеп кергән «Гөрләп торған илдән нимә тороп ҡалды? Былдай тарҡалыуҙан халыҡ нимә алды?» тигән юлдарҙа ла дөрөҫлөк юҡ түгел, әлбиттә.

Шул уҡ буталсыҡ йылдарҙа ижад ителгән «Был үҙгәртеп ҡороуҙар…»ҙың стиле башҡасараҡ. Ул башҡалыҡ әҫәрҙең атамаһынан һуң ҡуйылған тыныш билдәһенән үк һиҙелеп тора: күп нөктәләр урынына «шул тиклем теңкәгә тейҙе» тип өҫтәйһе генә ҡала. Стиль үҙгәлеген шиғырҙан бөркөп торған юмор саҡҡыһында ла күрергә була. Ул саҡҡы тәүге строфала уҡ ялтлай башлай:

*Үҙәктәргә үтте тамам*
*Был үҙгәртеп ҡороуҙар…*
*Берәй нәмә үҙгәрерме*
*Уны уйлап тороуҙан?*

Ләкин «Был үҙгәртеп ҡороуҙар…» – һис кенә лә юмористик әҫәр түгел. Икенсе строфала, әйтәйек, ниндәй юмор булһын? Унда юмор түгел, ә асы хәҡиҡәтте асып һалған сағыу метафора – үтә көслө метафора:

*Ыңғай түгел, тик кирегә*
*Үҙгәртеүҙәр йышайҙы.*
*Өҫтә ҡыйыҡ саҡ-саҡ тора,*
*Аҫта нигеҙ ҡыйшайҙы.*

Шиғыр артабан да шулай дауам итә: һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙағы хәл-ваҡиғаларҙы автор юморист күҙлеге аша үткәрә, был ваҡиғаларға үҙенең ҡарашын да асыҡтан-асыҡ белдерә:

*Үҙгәрҙеләр кешеләр ҙә,*
*Танымаҫһың ҡайһыһын;*
*Бөтәһен дә күреп тора,*
*Күрмәй илдең ҡайғыһын.*
*..........................................*
*Үҙгәрмәнем тик мин генә,*
*Сәбәптәр ҙур уға ла.*
*Көнгә лайыҡ һүҙ тапмайым,*
*Яҙам, гүйә, доғалар.*

Элегерәк, нәфис әҙәбиәт – тарихҡа иллюстрация булырға тейеш түгел, тигәнерәк фекер ишетергә тура килгеләй ине. Дөйөм алғанда, был фекерҙең нигеҙендә дөрөҫлөк юҡ түгелдер. Ләкин әҙәбиәтте тарихтан, тарихи ваҡиғаларҙан бөтөнләй үк айырып ҡарарға ла ярамайҙыр. Сөнки әҙәби әҫәрҙәрҙә (айырыуса уларҙың юғары кимәлләрендә) тормош дөрөҫлөгө, заман үҙенсәлектәре күпмелер дәрәжәлә үҙҙәренең сағылышын тапмай ҡалмай бит. Тарих булмаһа, тарихи ваҡиғалар бер-береһен алмаштырып тормаһа һәм шул рәүешсә тормош дауам итмәһә, әҙәбиәт үҙе лә булмаҫ ине.

Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, әҙәбиәт тарихҡа иллюстрация булырға тейеш түгел икән, уның көҙгөһө булып торорға хаҡлылыр. Шуға күрә, ваҡыт мәнфәғәттәренән сығып, тарихты, тарихи ваҡиғаларҙы «яңынан уҡырға» тырышҡанда (ә ул ғүмергә шулай булған!), әҙәбиәт тарих дөрөҫлөгөн, тормош дөрөҫлөгөн ҡулынан һәм көсөнән килгәнсә сағылдырған һәм ҡағыҙ битенә теркәп барған берҙән-бер сығанаҡҡа әүерелә түгелме һуң? Пушкин, Лермонтов, Гоголь, Некрасов, Толстой, Достоевский әҫәрҙәренән башҡа рус дәүләтенең ун туғыҙынсы быуат тарихын бөтә нескәлектәрендә һәм ҡаршылыҡтарында күҙ алдына баҫтыра алыр инек микән.

Был уй-фекерҙәр И. Кинйәбулатовтың сәйәси лирикаһы менән иркенләберәк танышып ултырғанда тыуҙы. Ул да бит әле һүҙ барған шиғырҙарында (уларҙың һаны иһә өҫтә иҫкә алынғандар менән генә сикләнмәй) рәсми тел менән түгел, ә художество саралары ярҙамында үҙе йәшәгән дәүергә хас хәл-ваҡиғаларҙы теркәп ҡуйған. Шағир булараҡ, Ирек Кинйәбулатов әҙәбиәттең заман көҙгөһө икәнлеген ҡәләмдәштәре миҫалында ла иҫбатлай. «Мәжит Ғафури һәйкәле алдында» тигән шиғыр быға асыҡ миҫал булып торорлоҡ:

*Һин аяҡҡа баҫтың, хаҡлыҡ өсөн*
*Үҙеңдә бер ғәжәп көс табып.*
*Ярлы, зарлыларҙы яҡлау өсөн,*
*Шашҡандарға тейеш үс табып.*

*Яҙғандарың – шул осорҙоң үҙе,*
*Йөрәгеңдән алғас күсереп.*

*Барыһына үҙең шаһит булып,*
*Үҙең күреп, үҙең кисереп.*

Ошо урында И. Кинйәбулатовтың «Көлкө килмәй»тигән шиғырына яңынан әйләнеп ҡайтырға һәм унан бынауы строфаны күсерергә булдым:

*Көлгән булдыҡ, ауыҙ ҡыйшаймаған,*
*Ҡушма Штаттарҙы мыҫҡыллап;*
*Беҙҙән улар нисек көлә икән,*
*Хәйер ебәргәндә мыҫҡаллап?*

Шиғырҙың һуңғы юлы иғтибарымды йәлеп итте. Мин ишеткәнде Ирек тә ишетмәй булмаҫ: күп йылдар алдан төҙөп ҡуйған маҡсаттарына ирешеү өсөн илебеҙ нигеҙен көнө-төнө ҡаҡшата башлағас, көнбайыш «дуҫтар» беҙгә үҙҙәренең кейелгән, керләнеп-таушалып бөткән кейем-һалымдарын һалып ебәрә башланылар түгелме һуң? Шуға күрә, өҫтә килтерелгән строфаның һуңғы юлын «Хәйер ебәргәндә мыҫҡыллап» тип әйтеү дөрөҫөрәккә тура килмәҫ ине микән? Бер үк һүҙҙең дүртенсе юлда ла ҡабатланыуҙан шиғырҙың архитектоникаһына әллә ни зыян килмәй, ә бына уның мәғәнәһе ҡырҡа үҙгәрә. Йыйып ҡына әйткәндә, И. Кинйәбулатовтың сәйәси лирикаһы – көслө лирика. «Юл сатында» исемле китабыма баш һүҙҙә «донъялар аҡтарылғанда юл сатына сығарып ташланһалар ҙа, шағирҙарыбыҙҙың күбеһе ҡойолоп төшмәне, ошо иҫ китмәле болғауыр һәм ҡатмарлы осорҙа ла үҙҙәре булып ҡалдылар һәм ҡала киләләр» тип яҙғайным. Ирек Кинйәбулатов ана шул ҡойолоп төшмәүселәр һәм үҙҙәре булып ҡалыусылар сафында.

Әҙәбиәт майҙанына И. Кинйәбулатов «Баҫыу юлы» тигән китабы менән килеп инде. Иллеләп шиғырҙы үҙ эсенә алған был йыйынтыҡ донъя күргәндә уның авторына утыҙ ике йәш ине. Бик иртә лә түгел, артыҡ һуңламаған да. «Май сүлмәге тышынан билдәле» тиҙәр халыҡ телендә. И. Кинйәбулатовтың тәүге китабына ингән шиғырҙар ҙа ана шул халыҡ әйтемен ҡеүәтләгәндәй. Тәүгеләрҙән һаналған «Ерем» тигән шиғырға ҡолаҡ һалайыҡ. Ун алты ғына юлдан торған ошо әҫәрҙә бала сағын сабый ҡолонға тиңләгән, хәҙер инде егет ҡорона ингән лирик герой образы килеп баҫа беҙҙең алға. Тыуған еренең урманына, тауҙарына, йәшел болонона ғашиҡ булған был егет хистәргә бирелергә һәләтле, шуға ла ул, теге бала сағындағы ҡолондай оса-елеп, барын күреп, донъяла «йәшәү сере»н һүтергә иҫәп тота.

«Ерем» тигән шиғырҙы И.Кинйәбулатовтың бөтә ижадына инеш һүҙ ҙә, программа рәүешендәрәк яңғыраған лейтмотив һымаҡ та ҡабул итергә мөмкин. Сөнки был образ менән артабан да шаҡтай йыш осрашырға тура килә. «Игенсе ҡулдары» тигән шиғырҙа, әйтәйек, игендең яртыһы ерҙә, яртыһы ошо ҡулдарҙа үҫкәндәй тойола уға. «Ирәндектә иртә»лә таңдан алда торған игенселәр «бүлдерҙеләр ерҙең йоҡоһон» тип уфтанып ҡуя шағир, әҫәрҙең ахырында иһә «Ә ҡара ер таңда тиртеп тора, тәүге бала көткән әсәләй» тигән иҫ киткес матур сағыштырыуға тап булабыҙ. «Һағынып ҡайтам еремде»лә шағир «Баҫыуҙарым,

туғайҙарым минең, һәр һулышым һеҙгә береккән. Күңелемә яңы йырҙар килә, йырҙарым да ергә ереккән…» тип эске кисерештерен, уй-тойғоларын асып һалыу менән генә сикләнмәй, «Баҫкан көйө оҙағыраҡ торһам, тамыр йәйер һымаҡ аяҡтар…» тигән тәрән йөкмәткеле поэтик табышы менән дә уртаҡлаша.

Ер образы менән бергә, И. Кинйәбулатовтың тәүге китабына тупланған шиғырҙарында юл образы ла моронлай. Китапҡа исем ҡушҡан әҫәрҙә ул айырыуса көслө яңғырай һәм символ дәрәжәһенә күтәрелә: «Баҫыу юлы – минең сабый сағым, йәшәүемдең тәүге аҙымы». Был шиғыр тураһында һүҙ сыҡҡанда, ғәҙәттә, уның «Ҡамыллы ҡыр шул саҡ атайымдың яңаҡтары төҫлө тойолдо» тигән һуңғы ике юлына баҫым яһап әйтеүсәндәр. Һүҙ юҡ, һуғыш яланында һәләк булған атай образы бында хәтергә мәңгегә һеңеп ҡалырлыҡ итеп һүрәтләнгән. Әммә әле һүҙ барған шиғырҙа бынан башҡа ла көслө яңғыраған юлдар бар. Бәлки, фекер тығыҙлығынан, бер нисә шиғырҙа әйтер һүҙҙе бер шиғырға һыйҙырыуҙан шулай килеп сыҡҡандыр. Мәҫәлән, «Юлдар миңә, мин юлдарға юлдаш, тик үткенсе булмам тормошта…» тигән һүҙҙәр Горькийса яңғырай ҙа баһа. Ул да бит ер йөҙөндә йәшәүсе кешеләрҙе, уларҙың ҡылыҡтарынан, холоҡ-фиғелдәренән сығып, ике төргә бүлеп ҡараған: «үткенселәр» («прохожие») һәм «атлап үтеүселәр» («проходящие»). «Атлап үтеүселәр» иҫәбенә бөйөк рус яҙыусыһы донъяла йәшәү дәүерендә үҙҙәре артынан ниндәй ҙә булһа эҙ ҡалдырыусыларҙы, «үткенселәр»гә иһә үҙ яйына, үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртып йәшәгәндәрҙе индергән.

«Урам көйө», «Ғүмер», «Тыуған көнөм», «Зәңгәр юлдар», «Ауылымдың оло юлы», «Киткәнемдә» һәм тағы әллә күпме шиғыр юл стихияһы менән һуғарылған. Миңә бының сәбәбен тәғәйен генә, бәхәскә инеп тормаҫлыҡ итеп кенә асып һалыуы ҡыйын. Бәлки, әлегә кәрәге лә юҡтыр. Уны шағирҙың журналист булып эшләгән дәүерҙә республикабыҙҙы иңләп-буйлап йөрөүе менән аңлатырға тырышһаҡ, бер яҡлыраҡ килеп сығыр төҫлө. Иңләп-буйлап йөрөүселәр күп ул, ләкин, нишләптер, уларҙы юл мотивы оҙата барыуы ғына һиҙелмәй. Күрәһең, сәбәп ҡайҙалыр алыҫтараҡ, төптәрәк яталыр. «Урам көйө» менән «Ғүмер» тигән шиғырҙар ҙа мине шулайыраҡ уйларға мәжбүр итә. Әгәр «Урам көйө»ндә шағир, атаһын һуғышҡа оҙатҡан көндө хәтерләп, «Саңлы юлдан аттар китте, китте… Урам көйө күпкә баҫылды» тип көрһөнһә, әлегә йәш авторҙар исемлегендә йөрөтөлгән Иректең «Ғүмер» тигән шиғырынан иһә фәлсәфәүи фекер һирпелеп киткәндәй була: уҙған ғүмерҙе ағым һыу менән сағыштырып, шағир, һыу юлынан айырмалы буларак, кеше ғүмеренең урау-урау икәнлегенә иғтибарҙы йүнәлтә; шул уҡ ваҡытта ғүмерҙең керпек ҡаҡҡансы үтеп китерен яҡшы аңлаған шағир күберәк юлда булыуҙы хәйерлерәк күрә.

Ошо урында ирекһеҙҙән «Ғүмер үтә, тибеҙ» исемле шиғыр иҫкә килеп төшә. Уның төбөндә лә фәлсәфә ята. Һүҙҙе «һүҙ юҡтан – һүҙ булһын» тип уйнатыуҙан түгел, ә төптән уйлап, уның мәғәнәһен тәрәнерәк аңларға тырышыуҙан килеп тыуған фәлсәфә. Ҡарап тороуға шиғырҙың йөкмәткеһе ҡатмарлы түгел.Тик быға тиклем шул йөкмәткегә

төрөлгән күренешкә иғтибар иткәнебеҙ булды микән? Һөҙөмтә ябай-ҙарҙан-ябай: донъяла бөтә нәмә лә хәрәкәттә. Шуға күрә ел – иҫергә, һыуҙар – ағырға, ҡар – яуырға, бөрө – тумалырға, сәскә – атырға тейеш. Улар менән бергә ғүмер ҙә үтә һәм үтергә тейеш. Әгәр үтмәһә, ул туҡтала. Шағирҙың «Ғүмер үткәненә үкенмәйем, бушҡа үтһә генә үкенәм» тигән һығымтаға килеүе лә тәбиғи.

Күләме йәһәтенән ҙурыраҡ булһа ла, «Ауылымдың оло юлы» ла ҡыҙыҡһыныуы уятмаҫлыҡ түгел: әлегә ҡәҙәр имгәкләгән сабый, уға табан сабып килгән тайҙан ҡурҡып, ҡапыл ике аяғына баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡала. Шиғырҙың һуңғы строфаһы ҙур мәғәнәгә эйә:

*Әҙер юлдан юлға сыҡҡас,*
*Үҙем дә юл һалһам ине.*
*Һуңғы аҙымды баҫҡансы*
*Оло юлда ҡалһам ине.*

Ә бына ике генә строфанан торған «Киткәнемдә…» тигән шиғыр бер ниндәй ҙә комментарийға мохтаж түгел. Уны бында тулы килеш күсерһәк тә яҙыҡ булмаҫ:

*Алыҫтарға тағы юлға сығам,*
*Сәфәрҙәрҙе килмәй һанағым.*
*Күҙҙәремә ниңә моң һарыла,*
*Ниңә кибә әле тамағым?*

*Ынтыламын үҙем офоҡтарға,*
*Юлдарымдың юҡтай тамамы.*
*Барыр ерҙәремә етмәгәнмен,*
*Ҡайтырымды уйлап янамын…*

Теге йәки был шағирҙың тормош һәм ижад юлын өйрәнгәндә, уны осорҙарға бүлеүсәндәр. Ирек Кинйәбулатовтың ижадына киңерәк ҡараш ташлаһаң, бындай мохтажлыҡ юҡ һымаҡ, сөнки ул үҙ ижадын үҙе осорҙарға бүлә бара. Өҫтә «Баҫыу юлы» тигән шиғырҙың да, шул исем аҫтында баҫылып сыҡҡан тәүге китаптың да символик мәғәнәгә эйә булыуы хаҡында һүҙ ҡуҙғатып ҡуйылғайны инде. Икенсе китаптың атамаһында ла («Сыйырсыҡтар бала осора») һәм уға ингән әҫәрҙәрҙә лә символика юҡ түгел: баҫыуҙы ауыл менән тоташтырған оло юлда ҡурҡыуынан тәү тапҡыр аяҡтарына баҫып, үҙ аллы атлап киткән сабыйға ҡанаттар үҫеп сығыр ваҡыт та еткән.

Иллеһе тулған йылда донъя күргән «Һөйөү иртәһе» тигән өсөнсө китабының атамаһына ла хикмәтле мәғәнә төрөлмәй ҡалмаған. «Мин – башҡорт!» тураһында һөйләп тә тораһы юҡ – дүртенсе китаптың исеме генә түгел, уға тупланған әҫәрҙәр ҙә авторҙың тамам өлгөрөп етеүен, үҙендә урғылып торған көс һиҙеүен, шуға күрә лә уны солғап алған ысынбарлыҡ менән аяҡ терәп һөйләшергә баҙнат итеүен раҫлап тора.

«Арғымаҡта» менән «Замана тауышы» (Ирек Кинйәбулатовтың бишенсе һәм алтынсы китаптары) – шағир ижадындағы артабанғы артылыш. «Мин – башҡорт!» менән сағыштырғанда, был китаптарында автор бер ни тиклем тыныслана төшһә лә, унын тауышы барыбер ҙә

баҙыҡлығын юғалтмай, һәм ул ижадтағы үҙ принциптарына тоғро ҡала. Ә бына етмеш биш йәше тулыу айҡанлы сығарылған «Ғүмер китабы» – ҙур тормош юлы үткән, күпте күргән, күпте белгән олпат шағирҙың уҡыусыһы алдында тотҡан сираттағы хисабы.

Ирек Кинйәбулатовтың һәр яңы китабы уға ҡәҙәр сыҡҡан китаптары менән тулыландырыла бара, йәғни бер тышлыҡ эсендә бер нисә китап хасил була. Әлбиттә, ҙур юбилейыңды билдәләгәндә, әҫәрҙәреңде томлап та сығарып  була торғандыр һәм ул саҡта бындай томдар күҙгә нығыраҡ та ташланалыр.Әммә Ирек Кинйәбулатов уйлап тапҡан һәм нәшриәт практикаһына индергән ысулдың үҙ өҫтөнлөктәре бар: шағирҙың бөтә ижады ус төбөндә ялтырап ятҡандай тойола.

Теге йәки был шағирҙың ижадын тикшергәндә ғәҙәткә ингән тағы бер үҙенсәлек йәшәп килә: башлап яҙыусының тәүге әҫәрҙәре мотлаҡ  «өйрәнсеклек осоро» тип аталған барьер аша үтә. Бындай дәүерҙе Ирек Кинйәбулатов та кисергәндер, моғайын, кисермәй булмаҫ. Иллә мәгәр «Баҫыу юлы»на ингән шиғырҙарҙың күбеһе иғтибарҙы үҙенә тартмай ҡалмай. Уларҙың ҡайһы берҙәре тураһында һүҙ булды инде. Шуларға тағы «Яңы йылға аяҡ баҫҡанда», «Яҙын ҡар китһә…», «Киләсәк», «Борсаҡ ямғыр», «Ҡаяларҙа», «Уралда таң», «Иҫкән елдәр», «Ҡаҙҙар китә», «Бейеклектәр тартһын», «Рәхмәт, буран» тигәндәрен дә өҫтәр инем. Әгәр күңел биреп уҡыһаң, уларҙың һәр ҡайһыһында ла тапҡыр әйтемгә төрөлгән  аҡыллы фекергә юлығаһың.

«Яңы йылға аяҡ баҫҡанда»ның ваҡыт алдында яуаплылыҡ тойоп йәшәргә күнеккән лирик геройы, мәҫәлән, уҙған йылда ахырына тиклем эшләп бөтөрөлмәгән эштәре өсөн көйөнһә, «Ҡаяларҙа»ның лирик геройы иһә ерҙә йәшәү йәме хаҡында уйлана һәм, уның ҡәҙерен ғүмереңҡыл өҫтөндә ҡалған саҡта нығыраҡ та, тәрәнерәк тә аңлайһың икән, тигән һөҙөмтәгә килә. Шағирҙың «Яуһын, әйҙә, борсаҡ ямғыр, ҡоймаһын тик ҡурғаш ямғыр», «Эй, йәшәһен ерҙә ҡар бураны, булмаһын тик тормош бураны» тигән уй-теләктәре лә  аңлашыла.

Тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына тойолған күренештәрҙән көтөлмәгән һығымта яһап ҡуйған осраҡтар ҙа бар: яҙын ҡар китә икән, уны, яңынан әйләнеп ҡайтмаҫ, тимә; ерҙе ҡар ҡаплай икән, яҙ килмәҫ, тимә; дуҫың алдаһа, хаҡлыҡ юҡ, тимә; «Ҡул ҡаушырып әгәр көтөп ятһаҡ, килерме икән беҙгә киләсәк?» Тәбиғәт күренештәренә һылтанып, лирик геройҙың үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап эҙләгән мәлдәре лә булғылай: «Иҫкән елдәр, ҡайҙа һеҙҙең илдәр, ҡайҙан сығып, ҡайҙа киттегеҙ? ‹…› Илай-илай ары елдегеҙ ҙә, өйөрөлөп, кире килдегеҙ»; «Йәшлегенә ерем йыл да ҡайта, ә беҙ ниңә икән  –  бер генә?» һ.б. Был һорауҙар авторҙың ихлас ҡыҙыҡһыныусанлығын да, күҙәтеүсәнлеген дә иҫбатлап торалар.

И. Кинйәбулатовтың «өйрәнсеклек осоро»на (шартлы рәүештә, әлбиттә) ҡараған тағы ике шиғырына – «Тәүге ямғыр» һәм «Сынығыу» тигәндәренә туҡталырға булдым. «Ҡайтһам, иң тәү тимерлеккә киләм» тигән юлдан башлана «Сынығыу». Һис йәшермәйем, «тимерлеккә» тигән һүҙҙе күреү менән, хәтер төпкөлөндә уҙған быуаттың егерменсе йылдар башында ижад ителгән ҡайһы бер поэтик әҫәрҙәр

ҡыбырлап ҡуйҙы. Түҙемлек һаҡлап, Иректең әле һүҙ барған шиғырын ахырына тиклем уҡып сыҡҡас, унда сағыу образ тыуҙырылғанлығын һәм теге йылдарҙағы шиғриәттән байтаҡҡа айырылып торғанлығын тойғандай булдым. Үҙенең замандаштарын-быуындаштарын күҙ уңында тотоп, «Тормош икән беҙгә тимерлек, шуның өсөндөр ҙә тормоштоң беҙ уты, һыуына ла инерлек» тигән юлдар менән тамамлап ҡуя шағир әҫәрен.

«Тәүге ямғыр»ҙың жанрын автор йәйәләр эсендә «этюд» тип билдәләгән. Тышҡы формаһы менән ул Иректең башҡа шиғырҙарынан күпкә айырыла: аралаш рифмаларға ҡоролған һигеҙ һәм дүрт ижекле юлдарҙан тора. Ләкин әҫәр, минең уйымса, формаһына ҡарағанда, йөкмәткеһе менән отошло. Уны мин, пейзаж лирикаһының һөйөп кенә уҡыла торған матур бер үрнәге, тиер инем. Тәбиғәттең әкренләп йәйгә табан ауышыуын шағир бына нисек һүрәтләгән:

*Бөтә донъя шыпырт ҡына*
*Алмашына,*
*Ямғыр теле бөтәһенә*
*Аңлашыла.*

Форма тураһында һүҙ сыҡҡас, тағы шул да мәғлүм булһын: Ирек Кинйәбулатовтың тәүге йыйынтығында традицион дүртәр юллы строфа менән яҙылған шиғырҙар бик һирәк осрай, уларҙы хатта бармаҡ менән дә һанарға була («Яңы йылға аяҡ баҫҡанда», «Йондоҙло ер», «Һыу-һүл сағы етте тағы…», «Рәхмәт, буран», «Туҡай урамы»). Был йыйынтыҡҡа хас икенсе үҙенсәлек: унда шағирҙың артабанғы ижадында төп урындарҙың береһен алып торасаҡ «арнау» жанры моронлай башлай («Яҡшы атың ҡалған», «Һабантурғай»). Арнауҙы «жанр» тип атауым бәғзеләргә, бәлки, мәҙәгерәк тә тойолор, оҡшап та бөтмәҫ, саманан тыш ҡыйыулыҡ күрһәтеү булып та күренер. Ләкин, уйлай китһәң, арнау-бағышлауҙарҙың, башҡа жанрҙарға хас булған шикелле, үҙ ҡанундары, үҙ талаптары, үҙ ауырлыҡтары һәм ҡатмарлыҡтары, эске закондары бар түгелме һуң? Дөрөҫөн генә әйткәндә, был жанр бөтә әҙипкә лә бигүк буйһоноп та бармай кеүек. «Ирек Кинйәбулатов, – тип яҙа Ғайса Хөсәйенов ошо айҡанлы, – кешеләргә, күренекле шәхестәребеҙгә бына тигән арнау-бағышлау шиғырҙары бүләк иткән киң күңелле, шәфҡәтле шағир».

Ни ҡәҙәр генә ҡырыҫ холоҡло кеше булһа ла, заманында Назар Нәжми ҙә ошо жанрға ҡараған әҫәрҙәрҙе күп яҙҙы. Уның ижадын өйрәнеүгә бағышланған бер китабымда уларҙы бергә туплап, «Арнау шиғырҙары – үҙенсәлекле мини-портреттар галереяһы» тип атағайным. Ирек Кинйәбулатов иһә Назар Нәжмиҙән уҙҙырып та ебәрҙе. Ҡайһы бер шәхестәргә бер генә түгел, бер нисә шиғыр бағышланған осраҡтары ла бар.

Назар Нәжмиҙән айырмалы булараҡ, Ирек Кинйәбулатов был жанрҙа мини-портреттар ғына түгел, поэмалар менән балладалар ҙа ижад итә. Шундайҙарҙың иң тәүгеһе – шағирҙың икенсе китабына исем биргән «Сыйырсыҡтар бала осора» тигәне. Әсәһенә бағышланған

был әҫәрен автор «лирик поэма» тип атаған. Артабан уға Башҡортостандың тәүге халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваға бағышланған «Йөрәктәге һәйкәлдәр», башҡорт халҡының легендар улы генерал Таһир Күсимовҡа арналған «Арғымаҡта», Динис Бүләковҡа бағышланған «Ғаләм һаҡсыһы» (һуңыраҡ уның атамаһы «Ир яҡшыһы илгә ярай» тип үҙгәртелде), «Бородино», Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмигә арналған «Йыр яҡтыһы» исемле күләмле әҫәрҙәр килеп өҫтәлде. Был поэмалар һәм балладаларҙың ҡайһы берҙәре хаҡында тәнҡит мәҡәләләрендә һүҙ булғыланы булыуын, ләкин әлегә береһе лә ныҡлап тикшерелмәгән.

«Йыр яҡтыһы» тигән поэма – өр-яңыларҙан. Уға ойоҡоно бынан элегерәк яҙылған «Уты һүнде ҡапыл күршемдең» исемле шиғыр һалған, тиһәк тә, хата булмаҫтыр. Дүртәр юллы алты, ике юллы бер строфанан торған был әҫәрендә Ирек Кинйәбулатов үҙе ихтирам иткән шағирҙың образын пунктир менән билдәләп ҡуйғандай:

*Өмөт менән гел ашҡынып барҙыҡ,*
*Һүнеп барһа көндөң ҡоттары.*
*Йә ул көндөң утын тоҡандырҙы,*
*Йә уттарҙан алды ҡотҡарып.*

«Йыр яҡтыһы»н автор хәтер-поэма тип атаған. Әҫәрҙең жанрын былай тип билдәләүҙең үҙ сәбәбе бар, әлбиттә: ул башлыса поэманың төп геройы хаҡындағы хәтерләүҙәргә ҡоролған. Поэма бер-береһенән Рим һандары менән айырылған алты бүлектән тора. Улар, үҙ сиратында, юлдар һәм строфалар һаны менән бер-береһенән айырыла. Әйтәйек, инеш һүҙ һымағыраҡ яңғыраған тәүге бүлек – утыҙ биш юлдан, икенсеһе – туҡһан биш, өсөнсөһө – етмеш алты, дүртенсеһе – йөҙ ҙә ете, бишенсеһе – йөҙ ҙә ун туғыҙ, һуңғыһы етмеш дүрт юлдан тора. Әҫәрҙең строфикаһы ла бер төрлө генә түгел: өсөнсө бүлек традицион дүртәр юллы строфа менән яҙылған булһа,ҡалғандары, Ким Әхмәтйәнов әйтеүенә ҡарағанда, башҡорт халыҡ ижадында ла, яҙма поэзияла ла һирәк осрай торған биш юллы строфа менән яҙылған.

Поэма геройы тураһындағы тәүге мәғлүмәт (уның холоҡ-фиғеле, характер үҙенсәлеге, әҙәбиәт майҙанында хаҡлы рәүештә яулаған урыны) төш формаһында килтерелгән инеш һүҙҙә үк бирелә. Ошонда уҡ авторҙың үҙ геройына ҡарата булған мөнәсәбәте лә, төштә генә булһа ла уның менән осрашыу ниәтенең сәбәбе лә асыҡлана:

*Ҡай сағында,*
*Беләм, һөйләп тормай,*
*Етә ине тик бер ҡарауың.*
*Еңел түгел ине оҡшауҙары,*
*Еңел түгел ине ярауы.*

*Мин ярарға,*
*Оҡшарға ла түгел,*
*Килдем йөрәк һүҙен әйтергә.*

*Кешеләрҙең бөтмәҫ мөхәббәтен*
*Төшөрөргә һинең хәтергә.*

Инеш һүҙҙә ҡулланылған автор менән герой араһындағы диалог иһә уҡыусыға әҫәрҙең идея-художество концепцияһын тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итерҙәй бер сара булып тора:

*…Уҡып бөттөм. Агай:*
*– Рәхмәт, – тине. –*
*Күп кәрәкмәй минең ишегә.*
*Шәплегемде мин үҙем дә беләм,*
*Һин шәп булһаң – уҡы кешегә…*

«Йыр яҡтыһы»нда Назар Нәжмиҙең тормошон һәм ижадын бөтә тулылығында һүрәтләү бурыс итеп ҡуйылмаған, әлбиттә. Сөнки поэма– ғилми тикшереү хеҙмәте түгел, ә нәфис әҙәбиәт емеше. (Бағышлау-арнауҙарҙы «биографик лирика» тип атауҙың сикләнгәнерәк булыуын дәлилләп тороусы миҫал түгелме икән был?) Шағирҙың ҡабатланмаҫ образын тыуҙырыу һәм уны күҙ алдына баҫтырыу өсөн, автор герой шәхесенә хас айырым һыҙаттарҙы ғына иҫләй.

Экспозиция ла, бер үк ваҡытта инеш һүҙ ҙә ролен үтәгән беренсе бүлектә моронлап ҡуйған был һыҙаттар икенсе бүлектә инде киңерәк планда тасуирлана. Бында шуларҙың ҡайһы берҙәрен һанап китһәк, яҙыҡ булмаҫ. Әйтәйек, шағир тик йыр менән йәшәгән, уның һәр көнө тик йыр менән үткән. Бер ҡарағанда, ул авторға – йүкә һымаҡ йомшаҡ, икенсеһендә иһә имән кеүек ҡаты тойолған. Шағирҙың хаҡ һүҙенән нахаҡтың юҡҡа сығыуы, ҙур таланты менән өрәктәрҙе өркөтөүе, һүҙ әйткәндә лә, һүҙһеҙ торғанда ла сал бөркөттө хәтерләтеүе һыҙыҡ өҫтөнә алынған. Кәңәш ҡорғанда уның атайҙарса хәстәрлекле булыуы, кәңәшенең дә үҙенсә булыуы, берҙе һөйләп, икенсене эшләү уға ят нәмә булыуы ла автор иғтибарынан ситтә ҡалмаған. Назар Нәжмиҙең хаҡһыҙлыҡта уҫал булыуы, баш эйеүҙе килештермәүе, һөйләгәндә ут сәсрәтеп һөйләүе һәм шуның кеүек башҡа сифаттары ла иҫкә алына. Был бүлектең һуңғы строфаһында шағирҙың шағирға биргән баһаһы былайыраҡ яңғырай:

*Ерҙә йырҙы*
*Мәңге йәшәтергә,*
*Тик йыр өсөн донъя ҡыуғайның.*
*Һин әсәнән генә түгел, агай,*
*Һин бит ергә йырҙан тыуғайның.*

Поэманың идея-художество структураһында иң мөһим урынды өсөнсө бүлек алып тора. Әгәр рәсмиләштереберәк әйтһәк, был бүлектә автор поэма геройы менән уны тыуҙырып-үҫтергән йырлы-моңло ерһыу араһында ниндәйҙер илаһи, күҙгә күренеп бармаҫ ептәр һуҙылғанлығына ишаралай. Хәйер, ишаралап ҡына ҡалмай, баҫым да яһай: «Дүртөйләнөң дүрт тарафы – шиғыр иле, йыр иле»; «Тирә-йүнең йырмоң булғас, шағир тыумай кем тыуһын». Артабан был фекер уғата ла көсәйтелә һәм анығыраҡ төҫ ала:

*Һине бары йырҙан тыуған,*
*Тип әйтергә хаҡым бар.*
*Быны тотош раҫлай алған,*
*Һин яратҡан халҡың бар.*

Уҡыусыны үҙенең ошо фараздарына тамам ышандырыр өсөн һәм «йырҙан тыуған» геройының сығанаҡтарын үҙ күҙҙәре менән күрергә ниәтләп, автор шиғыр Мәккәһенә тиңләнгән Миңеште яҡтарына юл тота. Ләкин, «шағир серен табам, тиеп», шағир тыуып-үҫкән ерҙәрҙе, урман-тауҙарҙы «арҡыры-буй йөрөп» сыҡһа ла, ахыр сиктә автор «тел асҡысын тапманым бит мин ер тигән ағайҙың» тип танырға мәжбүр була. Сөнки:

*Ер һәм шағир мөхәббәтен*
*Түгел асып бирерлек;*
*Булһын күктәргә ашырлыҡ,*
*Булһын таштар ирерлек.*

Поэманың тәүге бүлектәрендә Назар Нәжми образы башлыса автор баһаламалары ярҙамында тыуҙырылһа, дүртенсе һәм бишенсе бүлектәрҙә иһә шағирҙың һынын кәүҙәләндергәндә йәнле тормоштан алынған хәл-ваҡиғалар ҙа уңышлы ғына ҡулланыла. Дүртенсе бүлектә, мәҫәлән, «Йыр тураһында баллада»ға бәйле күренеш хәтергә һеңеп ҡалырлыҡ. Назар Нәжмиҙең яңы ғына яҙылып бөткән ошо поэмаһын авторҙың үҙе уҡыуында Ирек Кинйәбулатов менән Вафа Әхмәҙиевҡа тәүгеләрҙән булып ишетеү бәхете тейә. Уйламаған-нитмәгән ерҙән осрашыуҙа алған тәьҫораттарын «Йыр яҡтыһы»ның авторы бындай юлдарға һалған:

*...Беҙҙең өсөн*
*Был осрашыу булды*
*Иң тәүге ҙур шиғыр байрамы.*
*Нисек яҙыуҙар – бер, нисек уҡыу –*
*Беҙҙең өсөн иң ныҡ хайраны.*

*Ул яҙа ла,*
*Ул уҡый ҙа белде,*
*Хатта артистарҙан уҙҙырып.*
*Уҡыу нимә – яҙа белмәгәнде*
*Ташланы ул байтаҡ туҙҙырып.*

Поэма геройының характер үҙенсәлектәре, уға ғына хас кешелек сифаттары, уның ғәжәп ябайлығы һәм алсаҡлығы Яҡутстан сәфәренә бәйле бишенсе бүлектә ифрат матур һәм сағыу итеп һүрәтләнгән. Юмор саткылары ла ялтлап киткәндәй була бында. Колыма ярына «баҫып өнһөҙ ҡалғанда», болоҡһоу уйҙар ҙа ситләп үтмәй һымаҡ уны. Был бүлектәрҙең икеһендә лә Назар Нәжмиҙең тағы бер һәләтенә иғтибар ителә: «Шунда тәүгә белеп, иҫтәр китте йырсы икәнен дә ағайҙың. Ә һуңынан күрҙем, ул булғанда күп йырсылар унан һағайҙы». Был – дүртенсе бүлектә. Бишенсе бүлектә автор йәнә йыр темаһына әйләнеп ҡайта һәм һүҙен бындай юлдар менән тамамлап ҡуя:

*Яҡут ерҙәрендә*
*Башҡорт йыры*
*Яңғыраны ҡупҡан бурандай.*
*Тороп ҡалды шулай «Сәлимәкәй»,*
*Тороп ҡалды шулай «Буранбай».*

Әҫәрҙең һуңғы, алтынсы бүлегендә автор беҙҙе бөгөнгө көндәргә алып ҡайта. Формаһы йәһәтенән был бүлек инеш бүлекте хәтерләтә: тегеһендә автор үҙ геройы менән диалогты төшөндә ҡорһа, быныһында ул геройға уның тыуған төйәгендә ҡуйылған мәрмәр һәйкәл менән һөйләшә. Һөйләшеү – киҫкен:

*Һәйкәл телгә килеп һорай һымаҡ:*
*– Нисегерәк бөгөн хәлегеҙ?*
*Ҙурларлыҡмы, әллә хурларлыҡмы,*
*Әле ниндәйерәк мәлегеҙ?*

*– Шундай көндәр,*
*Төндәр килә, ағай,*
*Кешелә юҡ шиғыр ҡайғыһы.*
*Эшһеҙ ҡалған илдең егеттәре*
*Себерҙәргә килә тайғыһы.*
.................................................
*Ғәфү үтенергә*
*Килдем бында,*
*Кәпәсемде сисеп алдым да.*
*Оят бөгөн, ағай, һинең алда,*
*Оят бөгөн Хоҙай алдында.*

Поэма – роман түгел, әлбиттә. Роман менән сағыштырғанда, уның һүрәтләү мөмкинлектәре күпкә сикләнгән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Ирек Кинйәбулатовтың документтарға, хәтерләүҙәргә таянып яҙылған «Йыр яҡтыһы» исемле поэмаһында халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең художестволы образы шәхес булараҡ та, ижадсы булараҡ та ярайһы уҡ ышандырырлыҡ итеп күҙ алдына баҫтырылған. Поэмала тасуирланған айырым күренештәр һәм хәл-ваҡиғалар шағирҙың «Кем уйлаған…» тигән автобиографик яҙмаларын, әҙәби тәнҡит мәҡәләләрен, мемуар әҫәрҙәрен, дөйөм алғанда – уның бөтә ижади мираҫын өряңынан йәнләндереп, уға нур өҫтәп ебәргәндәй була. Кем белә, ваҡыты еткәс, оло шағирыбыҙ хаҡында «Арҙаҡлы кешеләр тормошо» тигән серияла китап яҙылыуы һәм баҫылып сығыуы ла бик ихтимал.

Совет заманында беҙҙең оло быуын шағирҙарыбыҙ, тәү сиратта ҡанлы һуғыш юлдары буйлап үткәндәре, әҙәбиәттәр һәм сәнғәттәр араһында дуҫлыҡ ептәре урынлаштырыу һәм уларҙы әленән-әле яңыртып тороу маҡсатында, яҡын һәм алыҫ илдәргә сәйәхәткә сығып, сәфәр ҡылып ҡайта торғайнылар. Сәфәрҙән һуң мотлаҡ шиғырҙар шәлкеме (ҡайһы саҡта – күләмлерәк әҫәр ҙә) тыуыр ине. Хәҙер ундай мөмкинлектәр юҡ. Күп тигәндә, ҡайһы бер ҡәләмдәштәребеҙ күрше Татарстанға, Яҡутстанға, Ҡаҙаҡстанға, һирәк-мирәк Төркиәгә барып ҡайтҡылай.

Шуға күрә лә һуңғы егерме биш – утыҙ йыл дәүерендә әҙәбиәтебеҙ майҙанында республикабыҙҙың теге йәки был төйәгенә арналған шиғырҙар шәлкеме күренгеләп ҡала икән, һис тә ғәжәп түгел. Сөнки сит илдәргә, сит ерҙәргә барыуға ҡарағанда, Әбйәлил, Хәйбулла яҡтарынан урап ҡайтыу күпкә арзанырак та, еңелерәк тә. Ләкин ғиллә арзанлыкта һәм еңеллектә генә түгел. Беҙҙең тыуып-үҫкән йорт-илебеҙ башҡаларҙан һис кенә лә кәм түгел. Тик ундағы матурлыкты ла, байлыкты ла күрә белергә генә кәрәк.

Республикабыҙҙың төрлө төйәктәренә, ауыл-ҡасабаларына, иң мөһиме – унда йәшәгән билдәле кешеләргә арнап яҙылған шиғырҙар һәм шиғри шәлкемдәр Ирек Кинйәбулатов ижадында күп. Шуларҙың иң тәүгеһе һәм иң берәгәйлеһе «Бөрйән – минең менән бер йән» тигәнелер, моғайын. Ул тыуһанынсы йылдар башында уҡ әле «Мин – башҡорт!» исемле йыйынтыкта донъя күргәйне. Утыҙлап шиғырҙы эсенә алған был шәлкем Бөрйән яҡтарында булмаған кешене лә битараф ҡалдырмаҫ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ни сәбәптәндер, уға автор үҙе битарафлыҡ күрһәтә. Сөнки артабанғы китаптарында шәлкемдең хатта исеме лә аталмай – «Был юлдан, тим, кемдәр йөрөмәгән…» тигән шиғырҙан башланып китә. Һуңыраҡ, «Бөрйән – минең менән бер йән»гә «Ҡырмыҫкалы дәфтәренән», «Хәйбулла дәфтәре», «Бәләбәй ҡалҡыулығы», «Туймазы дәфтәренән» тигән шәлкемдәр килеп өҫтәлде. Ә инде үҙ эсенә егерменән ашыу шиғырҙы туплаған һәм республика күләмендә билдәлелек яулаған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға бағышланған шәлкем тураһында һөйләп тороуҙың кәрәге лә юктыр. Быға тиклем бындай күренештең башҡорт шиғриәтендә булғанлығын хәтерләмәйем.

Ирек Кинйәбулатов шиғырҙарының абсолют күпселеге – исемле шиғырҙар. Был үҙенсәлеккә иғтибар итеп, уны һыҙыҡ өҫтөнә алыуыма йылмайыбыраҡ ҡараусылар ҙа табылыр, бәлки. Әммә, уйлай китһәң, шиғырға лайыҡлы, тәғәйен исем ҡушыу – еңел эш түгел. Сөнки исем – әҫәрҙең темаһын һәм идеяһын сағылдырыусы, уға асыҡлыҡ индереүсе компонент. Исемһеҙ шиғыр – үкһеҙ бала шикелле ул.

Ижад өлкәһендә шаҡтай тәжрибә туплаған Ирек Кинйәбулатов, тыуһанынсы йылдар ахырында айырым шиғырҙарының ғына түгел, тотош китабының да төп йүнәлешен билдәләргә тырыша башланы. Иң тәүҙә был үҙенсәлек «Арғымаҡта» йыйынтығында кәүҙәләнеш тапты. Китапҡа асҡыс ролен үтәүсе курсив менән йыйылған шиғырҙы бында тулы килеш күсермәй булдыра алмамдыр:

*Бер уйлаһаң – тағы ниндәй ирек,*
*Кәрәк тағы ниндәй иркенлек?*
*Айырылып яңғыҙ тороп ҡалһаң,*
*Тотош донъя, гүйә, бер тинлек.*

*Бәлки, шунан оло бәхет юктыр,*
*Торалыр, тим, нисек булеүҙән.*
*Халкың араһында көндәр күреп,*
*Халкың араһында үлеүҙән.*

*Йөрәгемдә ни барлығын әйтәм,*
*Эсемдәге тышта – серем юҡ.*
*Арҡа терәр башҡа халҡым да юҡ,*
*Барып үлер башҡа ерем юҡ.*

«Замана тауышы» тигән китаптың «асҡысы» уғата ла матурыраҡ, уғата ла зауыҡлыраҡ тойола кеүек. Уҡыусынан ғәфү үтенеп, уны ла тулыһынса килтерергә булдым:

*Эй, кешеләр, һеҙгә ашығамын,*
*Бармы икән миндә әшегеҙ?*
*Мин бит һеҙһеҙ бер кем түгел ерҙә,*
*Мин бит кеше түгел кешеһеҙ.*

*Күҙҙәремдә – һеҙҙең ҡыуаныстар,*
*Хәсрәтегеҙ – минең алҡымда.*
*Барыр юлым – һеҙ бараһы юлдар,*
*Йөрәгемдә – һеҙҙең ялҡындар.*

*Бар шатлығым һеҙҙең менән бергә,*
*Бергә булһам – ҡайғым тарала.*
*Һәр саҡ сарсап осрашыуҙар көтәм,*
*Ҡалғым килә һеҙҙең арала,*
*Ҡалғым килә һеҙҙең арала.*

И. Кинйәбулатовтың «Ғүмер китабы» тип аталған яңы йыйынтығы – шулай уҡ «асҡыслы» китап. Ете строфанан торған был шиғри асҡыс та уҡыусының иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмаҫ. Сөнки унда шағирҙың бөтә булмышы сағылыш тапҡан һәм күҙ алдына баҫтырылған. Әйҙәгеҙ, был юлы асҡысты яртылаш ҡына бороп, шиғырҙан ике генә строфа (тәүгеһен һәм һуңғыһын) килтереү менән сикләнәйек:

*Күргән-кисергән –*
*Йәнде өтөрлөк;*
*Түгелдәр улар*
*Һөйләп бөтөрлөк.*
................................
*Күпте юғалтып,*
*Ләкин тиң табып,*
*Алдашмай яҙҙым*
*Ғүмер китабын.*

Һүҙ эйәрә һүҙ сыҡҡанда, И. Кинйәбулатов ижадына бәйле тағын бер үҙенсәлеккә иғтибарҙы йүнәлтһәк, яҙыҡ булмаҫ: уның рус теленә тәржемә ителгән поэтик әҫәрҙәре лә, ҡәләмдәштәре хаҡындағы мәҡәләләре лә ыңғай тәьҫир ҡалдыра. Бында шағир менән тығыҙ элемтәлә торған Ю. Андрианов, Ғ. Шафиҡов, А. Филиппов, В. Денисов, Р. Паль, Д. Дәминов, А. Кривошеев, Ф. Ғөбәйҙуллина, А. Хөсәйенов кеүек тәржемәселәрҙең хеҙмәтен айырыуса билдәләп үтергә кәрәктер. Уларҙың тырышлығы

менән Ирек Кинйәбулатовтың байтаҡ шиғырҙары, күпселек поэмалары, ижади портреттары рус телле уҡыусының уртаҡ хазинаһына әүерелде. Был әҫәрҙәрҙе ул юғары зауыҡ менән нәшер ителгән «Доброе утро» (2004) һәм «Слово»(2011) тигән китаптарҙа таба ала.

Ирек Кинйәбулатов үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап йәшәүселәрҙән түгел. «Баҫыу юлы» тип аталған тәүге китабында уҡ әле ул рус шағирҙары Майя Борисоваға һәм Всеволод Азаровҡа эйәреп яҙылған «Үлән һүҙе» һәм «Диңгеҙ» исемле шиғырҙары менән уртаҡлашҡайны. Шул уҡ китапта татар халҡының бөйөк улы Ғабдулла Туҡайға арналған шиғыр ҙа И.Кинйәбулатовтың тәрән фекер йөрөтөүсе әҙип икәнлеген кире ҡаҡҡыһыҙ итеп раҫлап тора. Был тәрәнлек «Мин – башҡорт!» тигән китаптағы «Аттарға атланайыҡ» исемле шиғырҙа оторо ла көслө сағылған. Бында, күрәһең, әҫәргә эпиграф итеп алынған «Ике туған талаша, атҡа менһә – яраша» тигән халыҡ мәҡәле лә үҙ ролен уйнамай ҡалмағандыр. Рус шағиры Р. Рождественскийға эйәреп яҙылған һәм ошо уҡ китапҡа ингән «Һорау», үҙебеҙҙең Александр Филипповҡа арналған «Башҡортомдан былайыраҡ», тажиҡ яҙыусыһы Аҫҡар Хәкимовҡа адресланған һәм «Һөйөү иртәһе» тигән китапҡа ингән «Йөрәктәрҙә ҡалыр һүҙ», күренекле сыуаш шағирәһе Рәйсә Сәрбигә бағышланған һәм «Замана тауышы» тип аталған китап биттәрендә үҙенең лайыҡ урынын биләгән «Бик килешә» тигән шиғырҙар ҙа – Ирек Кинйәбулатовтың ижад офоҡтарын билдәләүсе күрһәткестер. Ә инде «Ғүмер китабы»ндағы «Алыҫтағы йондоҙ һымаҡ» (күренекле татар шағиры Харрас Әйүп иҫтәлегенә бағышланған), «Мәңге кәрәк шағир аҡылы» (Татарстандың халыҡ шағиры Роберт Миңнуллинға асыҡ хат), «Бына шулай» (Рәдиф Ғаташҡа), «Туфандар бар», «Туҡай һүҙе» тигән шиғырҙар был офоҡтарҙы уғата ла киңәйтеп, төрлө милләттәрҙе бергә тупларға саҡырылған әҙәбиәт һәм сәнғәт көмбәҙен артабан да балҡытып ебәрә.

Ирек Кинйәбулатовтың ижады – үҙенсәлекле ижад. Ул үҙенсәлек әҙиптең шиғырҙарында ла, поэма менән балладаларында ла, арнаубағышлауҙарында ла, хатта китаптарының баҫылып сығыу тарихында ла (мәҫәлән, «Сыйырсыҡтар бала осора» менән «Һөйөү иртәһе» тигәндәре араһында ун биш йыллыҡ бушлыҡ ята) сағыла. Бер мәҡәлә сиктәрендә уларҙың бөтәһен дә ентекләп күҙаллау мөмкин түгел, әлбиттә. Дөйөмләштереберәк әйткәндә, И. Кинйәбулатовтың әҫәрҙәре шағирҙың тамам формалашҡан үҙ стиле, үҙ темаһы, шул темаға үҙ ҡарашы бар, тип раҫларға хоҡуҡ бирә. Уның әҫәрҙәренә ҡат-ҡат әйләнеп ҡайтырға, уларҙы күңел биреп уҡырға, идея-художество үҙенсәлектәрен тәрәнерәк аңларға тырышырға кәрәк. Әлбиттә, был ижадта ҡытыршылыҡтар ҙа (хәйер, кемдә генә юҡ ул!), ҡабатлауҙар ҙа күҙгә һирпелеп киткеләй. Ләкин шағирҙың ысын поэтик йөҙөн был ҡытыршылыҡтар һәм ҡабатлауҙар түгел, ә оҙайлы ижад дәүерендә ирешкән уңыштары билдәләй.

Ирек Кинйәбулатовтың «Замана тауышы» тигән китабын битләп ултырғанда, иғтибарымды «Мәскәүҙә Башҡортостан көндәре» исемле

шиғыр йәлеп итте. Миңә ул был мәҡәләнең башындараҡ телгә алынған «Рәсәй» тигән шиғырҙың ҡапма-ҡаршыһы һымағыраҡ тойолдо. Быға ышаныу өсөн, миҫал итеп, шиғырҙан бер строфа килтерәйек:

*Яҡшылыҡҡа, яҡтылыҡҡа булды*
*Рәсәй менән беҙҙең бергәлек.*
*Беҙ атлайбыҙ ҡулдар тотоношоп,*
*Иңдәребеҙ иңгә терәлеп.*

Күрәһең, ваҡыт һынауы аша үткәндә, шағир тормошонда һәм ижадында ана шундай метаморфозалар булыуы ла ихтималдыр. Бәлки, Ирек Кинйәбулатов кисергән метаморфозаның сәбәптәре уның бына был юлдарында яталыр:

*Мин төрлөсә, мин мең төрлө,*
*Мин ҡай саҡта – көслө дауыл.*
*Гүйә, үҙем – шаулы ҡала,*
*Ә ҡай саҡта – һүнгән ауыл.*

*Мин ҡай саҡта – көслө ялҡын,*
*Бер ҡараһаң – әсе төтөн.*
*Бер минутта – мин хәйерсе,*
*Бер ҡараһаң – донъям бөтөн.*

Ошо һорауҙарға һәм икеләнеүҙәргә яуап табырға тырышып ултырғанда, «Мин – башҡорт!» тигән шиғырға яңынан әйләнеп ҡайтмай сарам ҡалманы. Был шиғырҙы ла, Ирек Кинйәбулатовтың башҡа шиғырҙарын да, уларҙың идея-эстетик асылдарына мөмкин тиклем тәрәнерәк төшөргә теләп, иғтибар менән уҡып сыҡҡас, шундай һөҙөмтәгә килдем: «Юҡ, Ирек, һин – башҡорт ҡына түгел, бер үк ваҡытта һин – россиян да!» Әгәр беҙҙең көнитмешебеҙҙә көтөлмәгән бәлә-ҡазалар, ҡытыршылыҡтар, уңайһыҙлыҡтар тыуып тора икән, бында Рәсәйҙең ни ғәйебе? Рәсәй – беҙҙең оло илебеҙ. Ул ни күрә, беҙгә лә шуны күрергә насип иткән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быны ни өсөн шулай икәнлеген әле бер кем дә (образлы фекер йөрөтөүсе әҙәбиәт һәм сәнғәт әһелдәре генә түгел, хатта тарихи факттарға таянып эш итеүсе сәйәсмәндәр ҙә) аңлата алмаған. Бәлки, аңлатырға теләмәйҙәрҙер. Рустың тынғыһыҙ бөйөк шағиры Александр Блок та юҡтан ғына 1916 йылдың мартында «Ҡарсыға» тип аталған ҡыҫҡа, әммә уйға ҡалдыра торған шиғырын яҙырға мәжбүр булмағандыр.

**Әнғәм ХӘБИРОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**
**Бөрө ҡалаһы.**

**Әнисә**
**ТАҺИРОВА**

## *Муза ситкә тибәрмәне һине...*

Ирек Кинйәбулатовҡа

*Ҡырҡ йыл йәнәш  һуҡмаҡтарҙан атлап,*
*Аңлап   булмай һине – йомаҡты.*
*Бер ҡараһаң – һин бер ҡатлы, көләс,*
*Бер ҡараһаң – йомоҡ, ҡырҡ ҡатлы.*

*Бер ҡараһаң, үҙең атлап уҙған*
*Баҫыу  юлы кеүек ябайһың,*
*Ҡайһы саҡта диңгеҙ ярып үткән*
*Сәмсел матрос булып ҡарайһың.*

*Ҡайһы саҡта һинең ҡулдарыңда,*
*Гүйә, күрәм иген усмаһын.*
*Була мәлдәр: тоям булмышыңды*
*Сәйер, уйнаҡ тулҡын ҡасҡанын.*

*Ләкин гүмер буйы шиғриәтте*
*Күңел түрҙәреңдә йөрөттөң,*
*Ырыҫ урған бер игенсе төҫлө,*
*Һағыш, шатлыҡтарҙы йыр иттең.*

*Муза ситкә тибәрмәне һине –*
*Һуғыш йылдарының балаһын.*
*75-ең ишек ҡаҡҡанда ла,*
*Һаман алғы сафта бараһың.*

**Май, 2013**

## Юмор һәм сатира оҫтаһы

*(Зөлфәр Хисмәтуллиндың тыуыуына – 90 йыл)*



Һәр ваҡыт асыҡ сырайлы, көләкәс йөҙлө, баҫалҡы һәм тыныс тәбиғәтле ине Зөлфәр ағай. Уның берәйһенә асыулы һүҙ әйткәнен йәки тупаҫ мөғәмәләһен күргән дә, ишеткән дә булманы. Үҙе сикһеҙ ярҙамсыл һәм ихлас ине.

Зөлфәр Фазылетдин улы Хисмәтуллин 1933 йылдың 11 июлендә Башҡортостандың хәҙерге Белорет районы Сермән ауылында тыуған. Ошонда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Белорет металлургия техникумына уҡырға инә. 1941 йылда диплом ала һәм Белорет металлургия заводында техник булып эшләй башлай. Бөйөк Ватан һуғышы тоҡаныу менән, ул Ҡыҙыл Армия сафына алына. Тәүҙә Өфө пехота училищеһында уҡый, унан хәрәкәт итеүсе армияға оҙатыла. Рота командиры булараҡ, 1-се гвардия танк армияһы составында Мәскәүҙән алып Берлинғаса ауыр алыштарҙа ҡатнаша, биш тапҡыр яралана. Хәрби батырлыҡтары өсөн II дәрәжә Ватан һуғышы, ике Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары, күп кенә миҙалдар менән наградлана.

1946 йылда армиянан ҡайта һәм партияның Белорет райкомында инструктор, һуңыраҡ Өфө трахматоз балалар йортонда директор булып эшләй. 1947 йылда «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһына әҙәби хеҙмәткәр итеп алына. «Ленинсы» гәзите сыға башлағас, 1950 йылда, мөхәррир урынбаҫары итеп үрләтелә. Башҡорт дәүләт педагогия институтын ситтән тороп тамамлай. 1956 йылдан алып Зөлфәр Хисмәтуллин «Һәнәк» журналының яуаплы сәркәтибе була. Һуңынан Башҡортостан Яҙыусылар союзы ҡарамағындағы Әҙәби фонд директоры вазифаһын башҡарҙы.

Әҙәбиәткә Зөлфәр Хисмәтуллин журналистика аша килә. Тәүге хикәйәһе 1947 йылда «Совет Башҡортостаны» гәзитендә баҫыла. Артабан «Пионер», «Ағиҙел», «Һәнәк», «Крокодил» (Мәскәү), «Чаян» (Ҡазан) журналдарында уның үҙенсәлекле хикәйәләре һәм фельетондары йыш донъя күрә башлай.

Зөлфәр Хисмәтуллиндың «Тау шишмәһе» тигән тәүге хикәйәләр йыйынтығы 1959 йылда сыға. Был китапҡа ингән әҫәрҙәрҙән уның ҡыҫҡа хикәйәләр оҫтаһы икәнен күреп була. Шулай ҙа әҙиптең таланты юмористик һәм сатирик жанрҙа ныҒыраҡ асылды. «Әбейҙәр сыуағы» (1967), «Ҡунаҡта» (1974), «Шундай-шундай эштәр» (1980), «Мөхәббәт серҙәре» (1983) китаптарына ингән әҫәрҙәрендә яҙыусы ысынбарлыҡтағы кире күренештәрҙән әсе көлә; ялағайҙар, әрәмтамаҡтар, спекулянттарҙың сатирик образдарын тыуҙыра; ябай кешеләрҙең көлкөлө хәлдәрен, холоҡтарының эскерһеҙ һыҙаттарын аныҡ, теүәл деталдәр ярҙамында һүрәтләй.

Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Зөлфәр Хисмәтуллиндың байтаҡ хикәйәләре һәм фельетондары урыҫ, үзбәк, сыуаш, татар, украин, әзербайжан, тажиҡ телдәрендә баҫылды. Ул үҙе лә урыҫ әҙиптәренең әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемәләне.

**Әхмәт МӘХМҮТОВ.**

## ВАҠЫТТЫ ЭЙӘРЛӘГӘН ҺЫБАЙЛЫ



«Унынсыны бөткәндән бирле аттан төшкәнем юҡ, сабам да сабам», – юғары категориялы хирург Әхтәм Фәйзуллин һуңғы ҡырҡ йыллап ғүмеренең көсөргәнешлеген шулай баһалай. Әҙәби ижад мөхитендә ҡәләм һынап ҡараған кеше булмаһа ла, бик тапҡыр, образлы әйтә алған. «Урта мәктәпте тамамлап, өлгөргәнлек аттестаты ҡулына килеп эләккәндән бирле йән менән тәнемдең тынғылыҡ күргәне юҡ» тигәндә аңлата ул. Бәләкәй генә төҙәтмә индерәйек, сөнки табипҡа, ғөмүмән, ат өҫтөндә түгел, ә үҙенең ике аяғында сабырға тура килә. Әлбиттә, яйы килгәндә, еңел машинаһын да «эйәрләп» ала. Ни ҡылмаҡ кәрәк, хирург ярҙамына күҙ терәп тороусыларҙың арта барыуы технократик үҫеш юлынан тайпылышһыҙ барған йәмғиәтебеҙҙә ғәрипләнеүселәрҙең һуңғы «автомобилләштереү» йылдарында айырыуса юғары тиҙлектә күбәйеүенә бәйле. Үкенесле, әлбиттә, еңел тормошто күҙе тоноп ҡыуған йәмғиәтебеҙ әлегә бының менән иҫәпләшергә теләмәй. Әхтәм Әнәс улының һүҙҙәренә ҡарағанда, ауыр һәм еңел техника мыжғып торған юлдарҙа ҡазаға осрап имгәнеү арҡаһында операция өҫтәленә һалыныусылар ул эшләгән 21-се дауаханала ғына тәүлегенә өс-дүрт кешенән дә кәм түгел.  Ә ҡыш һәм яҙҙарын боҙло юлдарҙа тайып йығылып, аяҡ-ҡулын һындырыусылар, теге йәки был ауырыу арҡаһында операцияға мохтаждар – уларҙан да күберәк. Бер һүҙ менән әйткәндә, Өфө ҡалаһының 21-се дауаханаһында имгәнгән ауырыуҙарҙы дауалау (травмотология) бүлеге мөдире Әхтәм Фәйзуллин – меңәрләгән кешенең кисектергеһеҙ йомошо төшкән иң кәрәкле, иң ихтирамлы табиптарҙың береһе.

«Сабам да сабам…» Хирург менән өс тапҡыр осрашып, мотлаҡ асыҡларға кәрәкле байтаҡ һорауҙар әҙерләп барһам да, барыһына ла яуап алыу мөмкинлеге тәтемәне. Табиптың өҫтәлдәге эш йәки кеҫә телефоны бер өҙлөкһөҙ шылтырауы етмәгән – кабинетына рөхсәт һорап та, унһыҙ ҙа инергә атлығып тороусылар тынғы бирмәй. Һуңғы тапҡыр хушлашҡанда: Моғайын, төнгө йоҡоғоҙҙо боҙоп мөрәжәғәт итеүселәр ҙә барҙыр?» – тигән һорау тыуғайны ла, табиптың үҙенә биреүҙе кәрәк тапманым. Былай ҙа күренеп тора бит.

Тынғыһыҙ эштән күптәрҙең түҙемлеге шартлап һыныр ине. Әммә: «Һайлаған һөнәрегеҙ өсөн үкенергә тура килмәнеме?» – тигән һорауға Әхтәм Әнәс улы, уйланып та тормай: «Юҡ, үкенмәйем», – тигән ышаныслы һәм тәүәккәл яуап ҡайтарҙы. Бындай мөһим һорау, ғәҙәттә, кешене уйға һала, сөнки үткән ғүмерене барлап, ҡылыҡ-фиғелеңде үлсәп ҡарау, нигеҙле һығымта яһау өсөн күпмелер ваҡыт кәрәк була. Бәғзе берәүҙәр «әлләсе» тип яуаплай, «әлегә – юҡ», хатта, «булғыланы» тиеүселәр ҙә осрай. Геройыбыҙҙың эш урынында үҙен иркен тотоуы, ҡатмарлы шарттарҙа ла юғалып ҡалмай, хәлдән еңел сыға белеүе кеүек

күҙгә бәрелеп торған һыҙаттары уның ысынлап та «Аллаһы Тәғәләнән – хирург» икәнлегенә шик ҡалдырмай. Тимәк, ул, боронғолар әйтмешләй, тыуғанда уҡ маңлайына яҙылған ҡанунға тоғро. Хәйер, бар булмышын әҙәм балаһының иң ҙур байлығы тип хаҡлы рәүештә һаналған һаулыҡ һаҡлауға арнаған шәхестәрҙә үкенеү тойғоһо кисерерлек сәбәп-ерлек тә булмай торғандыр. Ә хирург иһә, ғөмүмән, – һирәк талант эйәһе, кешенең теләһә ҡайһы ағзаһына үтеп, «реконструкция яһау»ға меңдәрсә ҡәүемдең береһе генә ҡыйыулыҡ итә. Был фекергә дауахананың 5-се ҡатында урынлашҡан киң коридорҙан теләһә ҡайһы палата ишеген асып ҡарап, унда ятыусыларҙың хәленә бер күҙ һалыу ҙа етә. Гипсҡа ҡатырылған аяҡ-ҡулдар, хирург скальпеле һалған тәрән йөйҙәр, ауырыуҙарҙың һыҙланыуҙан сирышҡан йөҙҙәре, тынсыу һауа һәм һирәк кеше генә тойорға һәләтле аура-мөхит. Һуңғыһы айырыуса ауыр тәьҫир ҡалдырып, дауахананан сыҡҡандан һуң да унан оҙаҡ ҡына арына алмай йөрөйһөң. Ошоларҙы тоймау өсөн унда көн һайын һигеҙ – ун сәғәт үткәргән кешелә һәр кемдә осрамаған ниндәйҙер айырым сифаттар булыуы кәрәктер.

Ғаиләлә ир бала тыуыу барлыҡ халыҡтарҙа ла борон отошлораҡ һаналған, сөнки уны нәҫелде дауам итеүсе тип кенә түгел, ҡартайған ата-әсәһен тәрбиәләйәсәк йән тип тә ҡабул иткәндәр. Аҫабалыҡ институтына эйә булған башҡорттарҙа, мәҫәлән, 1917 йылғы Октябрь инҡилабына тиклем ир бала тыуһа, ғаиләгә 4 дисәтинәләп ер бүлеп бирелгән. Был тәртиптең асылы ҡатын-ҡыҙҙарҙың дәрәжәһен төшөрөүгә түгел, ә донъяны ғәмәлдә ғаилә башлығы – ир кешенең алып барыуына тоташа. Көйөргәҙе районының Тимербай ауылында көн иткән 25 йәшлек колхозсы Әнәс Фәйзуллиндың да 1954 йылда улы донъяға килгәс, моғайын, атай кеше шатлыҡ тойғоһо кисергәндер, сөнки хәрби хеҙмәткә саҡлы уҡ өйләнеп өлгөргән йәш ғаилә башлығының тәүге улы Рузит йәш ярымлыҡ саҡта уҡ, ата-әсәһен ауыр ҡайғыға һалып, донъя ҡуя. Икенсе улына атаһы Тәлғәт тигән исем ҡуша. Тормошта һирәкләп булһа ла осрай торған күренеш: унынсы класты тамамлағансы геройыбыҙ, ата-әсәһе ҡушҡанса, Тәлғәт Фәйзуллин булып йөрөй. Баҡтиһәң, ул донъяға килгәс тултырылған тыуыу тураһында таныҡлыҡҡа ауыл Советында эшләүселәрҙең ҡайһыһылыр, атаһының исеменә оҡшаш булһын тип, «Әхтәм» тип яҙып ҡуйған, имеш. Эйе, ташҡа баҫылған документ – көслө ҡорал, уның менән бәхәсләшеү урынһыҙ, егеткә яңы исеменә яраҡлашмай сара ҡалмай.

Әнәс Фәйзуллин колхозда мал ҡарай, улының һөйләүенсә, ҡыйыу тәбиғәтле кеше була. Әсәһе Миңлеямал да ауыл ҡатын-ҡыҙҙары араһында ҡатыраҡ холоҡлолоғо, ҡыйыулығы менән айырылып тора, колхозда һауынсы булып эшләй. Миңлеямал Фәйзуллинаның ауыл Советы депутаты итеп һайланыуы ла, моғайын, ошондай приниципаллеге менән бәйлелер. Олатаһы Миңлеғәли тураһында иһә геройыбыҙҙың хәтерендә өҙөк-йыртыҡ ҡына мәғлүмәт һаҡланып ҡалған. Ҡурай тартҡан, йырға оҫта булып, аҙыраҡ эскеләп тә ебәргән. Улы Әнәс бәләкәй саҡта уҡ ҡайһылыр тарафҡа сығып киткән дә эҙһеҙ юғалған.

Ырымбур яҡтарының киң далаһын төйәк иткән Тимербайҙа мал салыуҙа Әнәстең алдына сыҡҡан кеше, моғайын, булмағандыр. Ҡырҡ минут эсендә һуйып, тиреһен тунап, эс-ҡарынын алырға өлгөрөү – үҙенә күрә таҫыллыҡ, етеҙлек талап итә. Һәр эштең үҙ яйы булғандай, ҡорбан салыу ҙа теләһә кемдең ҡулынан килә торған эш түгел, мал аҫраған халыҡтарҙа йәшәп килгән традиция буйынса, һуғымды ҡул арты еңел, йәғни «ҡулы тәмле» кешенән генә салдыралар.

Һуғым бысағы менән скальпель араһында, әлбиттә, уртаҡлыҡ самалы, әммә улар менән эш итә белеүҙә, моғайын, оҡшашлыҡ юҡ тип раҫлау ауырыраҡ. Совет власы осоронда инҡар ителеп, «буржуаз фән» мөһөрө һуғылған генетика ғилеме бар, йәғни теге йәки был кешеләгә сифаттар киләсәк быуындарға генетик кимәлдә ата-бабаларҙан бирелә. Мотлаҡ атаһы йәки әсәһенән генә түгел, алыҫыраҡ нәҫел остоҡтарынан да. Өләсәһе менән атаһынан геройыбыҙ ҡыйыулыҡ

һәм тәүәккәллекте мираҫ итеп алһа, табип һөнәрен һайлауында, моғайын, әсәһе яҡлап өләсәһе, Яҡшымбәт ауылы кешеһе Сәғиҙә инәйҙең гендары хәл иткес булғандыр. Бер ниндәй уҡыу йорто тамамламаһа ла, ейәненең хәтерендә ул бик йомшаҡ, изге күңелле быуын ултыртыусы, кендек инәйе, ауылдаштарын төрлө юлдар менән дауалаусы шәхес булып һаҡланып ҡалған. Тәлғәт-Әхтәмдең холоҡ-фиғелендә, донъяға ҡарашы барлыҡҡа килеүе һәм интеллекты үҫеүендә атап киткән кешеләрҙең ниндәйҙер сифаттары, һис шикһеҙ, күҙәтелә торғандыр.

«Ояһында ни күрһә, осҡанында ла шуны күрә» ти халыҡ мәҡәле. Ата-әсәһенең тәрбиәһен тәжрибәле хирург ихтирам менән телгә ала. «Күршеләр менән бик татыу йәшәнеләр, бер кемгә лә ауыр һүҙ әйтмәнеләр, миңә лә өгөт-нәсихәт яһап ултырманылар», – ти ул. «Тәлғәт, бар әле бәрәңге баҡсаһын ута!» йәки «Тәлғәт! Утын ярып индер!» кеүек әмер-бойороҡтар ишетмәй генә үҫә ул, сөнки барыһын да үҙе белеп атҡара. Ғаиләлә берҙән-бер бала булыуға ҡарамаҫтан, ата-әсәһе уны иркәләп, осондороп бармай. Дөрөҫ, күп балалы ғаиләләрҙә тәрбиә алған тиҫтерҙәре кеүек ямалған йәки үҙенән өлкән туғандары яурынынан төшкән кейем-һалым менән ҡәнәғәтләнеү кеүек яҙмыш уны урап үтә.

«Атанан күргән – уҡ юнған» тигәндәй, Тәлғәт-Әхтәмдең атаһы оҫта файҙаланған һуғым бысағын скальпелгә алмаштырыуын Фәйзуллиндар тоҡомоноң прогресы тип баһаларға кәрәктер. Сабый әле сәңгелдәктә ятҡанда, Тимербай ауылына берәй маһир күрәҙәсе килеп сығып, Әнәскә: «Улың хирург буласаҡ», – тиһә, атаһы, моғайын, әкиәт һөйләп йөрөмә әле, тип уны өйөнән ҡыуып сығарыр ине. Дөрөҫ, ундай мөғжизәләр ҙә була, ләкин – һирәк. Ниндәй «хирург» ти ул, ата-әсәһе күҙ терәп торған берҙән-бер улдарының агроном йәки зоотехник һөнәрен үҙләштереп, ерҙә эшләүенә, тимәк, ауылда үҙ яндарында ҡалыуына өмөтләнә.

– Мин элек, йә уҡытыусы, йә, атайымдар теләгәнсә, агроном йәки зоотехник булырмын, тип уйлай торғайным, – тип ул йылдарҙы иҫенә ала геройыбыҙ дауахананың оҙон коридоры буйлап атлағанда. – Сөнки баҡсала эшләргә, үҙебеҙ аҫраған кроликтар өсөн оя яһарға ярата инем. Уҡырға китмәһәм, умартасылыҡ менән шөғөлләнергә лә иҫәп бар ине.

Ата-әсәһе һүҙен йығырға өйрәнмәһә лә, Әхтәм, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршымы, әллә бәхетенә күрәме, һөнәр һайлауҙа уларҙың өмөтөн аҡламай. Хәйер, бала һәм үҫмер саҡтар кем ниндәй һөнәр эйәһе булыу тураһында ғына хыялланмай! Һауала киҫкен боролоштар яһап осҡан самолетты күреп, мин летчик булам, тип аңынтоңон белмәй хыялланған малай-шалай аҙмы ни! Хәтерҙә, беҙҙең Табылды ауылында (Стәрлебаш районы) бер уҡыусы һөнәр һайлауға бағышланған дәрестә «Мин Чапаев булам!» тигән һүҙ ысҡындырып, ғүмерлеккә Чапай Тәлғәт булып ҡалды. Әхтәм Фәйзуллиндың улы Аяздың һүҙҙәре буйынса, ул хирургтар һөнәренә АҠШ телесериалдарын ҡарап ғашиҡ булған. Сериал – ихтимал, әммә хәл иткес йоғонто, әлбиттә, медицина институтында белем алған ата-әсәһенең гендары булғандыр.

Үкенескә ҡаршы, күптәр теге йәки был һөнәр эйәһе булып китеүендә мәктәптең ролен баһалап еткермәй кеүек. Ятҡан предметтар, уҡытыусылар был йәһәттән бөтәбеҙ өсөн дә йүнәлеш биргән маяҡ түгелме ни? Тимербай башланғыс мәктәбендә ғилем донъяһына ауыл балаларының күҙен асҡан Ләлә Әҙеһәмова-Тимербаеваның мауыҡтырғыс һәм фәһемле дәрестәрен элекке уҡыусыһы Тәлғәт Фәйзуллин ихтирам менән телгә ала: «Бөтә ауыл балаларын уҡытты, талапсан булды». Свобода урта мәктәбендә географиянан дәрес биргән Кинйәабыҙ ауылы ҡыҙы Зифа Арыҫланованың үрнәктәре тураһында ла элекке уҡыусыһы яҡты иҫтәлектәр һаҡлай. Үҙ ауылында башланғыс мәктәпте тамамлағас, бишенсегә, күп ауылдаштары кеүек үк, 15 саҡрымдағы Абдул мәктәбенә уҡырға йыйынып йөрөгәндә, атаһы улының яҙмышын икенсе төрлө хәл ҡыла.

– Ул ат екте лә, бер нисә класташым менән бергә арбаһына тейәп, алты

саҡрымдағы Кузьминовка ауылына алып китте, – тип иҫкә ала Әхтәм Әнәс улы. – Бер ауыҙ һүҙ белмәһәк тә, русса уҡырға тура килде.

Ырымбур өлкәһенә ҡараған был ауыл мәктәбендә, әлбиттә, дәрестәр уларҙың теле асылған татар телендә алып барылмай. Ләкин атай ихтыяры – закон, уҡыусыларға яҙмыштарына күнеп, урыҫсаны яҡшылап өйрәнеүҙән башҡа юл ҡалмай. Эйе, 60 – 70-се йылдарҙа ауылдарҙа ата-әсәләр араһында «балам урыҫса уҡымаһа, кеше була алмаясаҡ» тигән бер яҡлы ҡараш ныҡлы урынлашып алғайны. «Кеше булыу» төшөнсәһе яҡшы, ҡулдан килерлек булһа, юғары белемгә эйә булып, «урында» эшләүҙе аңлатты. Ҡайһы берәүҙәр, ысынлап та, балаларын күрше урыҫ ауылдары мәктәптәренә биреп уҡытты. Беҙҙең Табылдыла һигеҙ йыллыҡ башҡорт мәктәбе була тороп, дүрт саҡрымдағы Раевка урыҫ мәктәбенә йөрөп урыҫса белем алғандар араһында минән алты йәшкә оло Әхмәтша ағайым да бар ине. Тәлғәт Фәйзуллинға ла ошо үҙенсәлекле һынау-тәжрибәне үҙ елкәһендә татырға тура килә. Иң мөһиме, ата-әсә иғтибарынан, тыуған нигеҙҙән айырылып йәшәгән алты йылға һуҙыласаҡ өр-яңы тормош башлана, сөнки Кузьминовка һигеҙ йыллыҡ, Свобода урта мәктәптәрендә улар көн һайын өйгә ҡайтып түгел, интернатта ятып белем ала. Ә быныһы инде тиҫтерҙәрең араһында өҙлөкһөҙ ҡайнап йәшәү, башҡалар араһында юғалып ҡалмау өсөн, үҙеңдә ниндәйҙер өр-яңы сифаттар, иң элек үҙаллылыҡ тәрбиәләү тигән һүҙ.

Артабанғы тормош юлы шуны раҫлай: геройыбыҙ күберәк ыңғай сифаттар үҙләштерә, сөнки етенсе класта уҡығанда уҡ ике йыл элек кенә бер ауыҙ һүҙ урыҫса белмәгән үҫмер урыҫ мәктәбенең комсомол ойошмаһы секретары итеп һайлана. Сит ауылда, ғөмүмән ят мөхиттә балалыҡтан сығып та өлгөрмәгән кешелә ошондай юғары сифатты таныһындар өсөн ниндәй дәрәжәлә өлгөргән булыуҙы иҫбатлап тороу кәрәкме икән?

Ҡайһы бер тиҫтерҙәре кеүек, мәктәптән ҡайтып инеү менән тамаҡ ялғап алғас, китап-дәфтәрҙәре һалынған портфелен бер яҡ ситкә ырғытып, урамға сығып йүгермәй Тәлғәт Фәйзуллин.

– Көн һайын бер сәғәт-сәғәт ярым дәрес әҙерләй торғайным, – тип хәтерләй ул бала сағын. – Ул мәлдәрҙә миңә бер кем дә ҡамасауламаны.

Яҡшы әҙерлек үткән уҡыусы, билдәле, төплө белем алып сыға. Кузьминовка һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә уҡығанда математиканан «бишле»гә генә өлгәшә. Юғарыраҡ кластарҙа иһә геройыбыҙ дәрес әҙерләү генә түгел, матур әҙәбиәткә лә өлөш сығара.

– «Ағиҙел» журналын беҙҙең өйҙә һәр саҡ алдыралар ине, – ти табип. – Зәйнәб Биишеваның «Кәмһетелгәндәр», Булат Рафиҡовтың «Ҡараһаҡал» романдарын, башҡа яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен ошо баҫманан уҡып белдем.

Ниндәй генә яҡты хистәргә тулы булмаһын, һуғыш уйындары менән мауығып, хатта мәктәпкә лә ағастан эшләнгән ҡорал тағып йөрөгән бала саҡ, үҫмер йылдар барыбер артта ҡала. Тәлғәткә лә был юлы Әхтәм Фәйзуллин исеменә документтар тотоп, киләсәктә үтәсәк оло юлға сығыу мәле етә. Ғүмеренең асылын тәшкил итәсәк һөнәр һайлағанда, егет ҡорона аяҡ баҫҡан үҫмер үҙен юлдар сатындағы кеүек хис итмәй: «Мин врач буласаҡмын!» Ауылдаш егет менән Өфө ҡалаһына килгәс, ул документтарын ауыл хужалығы институтына түгел, ә медицина институтының дауалау факультетына тапшыра. «Агроном йәки зоотехник булып эшләһәм, кеше өсөн дә яуап бирергә тура киләсәк, – тип аңлата ул бөгөн ошо тәртибен, – ә врач үҙ эше өсөн генә яуаплы». Был ашығыс һығымтаһын ул, колхоз эшмәкәрлеген йылдар буйы күҙәтеп йөрөгәнлектән, шулай бик ябай ғына яһағандыр. Йылдар үтеп, бүлек мөдире вазифаһына ҡуйылғас ҡына, ул фекеренең тәрән уйлап еткерелмәгәнлеген таный. Етәксе табип өҫтөнә төшкән яуаплылыҡ ауыл хужалығы белгесенеке ише генә түгел: һүҙ бит һаулыҡ, ғөмүмән кеше ғүмере тураһында бара. Шулай булмаһа, юғары категориялы хирургҡа «сабам да сабам» тип әйтергә урын да ҡалмаҫ ине.

Әллә ауыл мәктәбендә үҙләштергән белем самалыраҡ булып сыға, әллә башҡа объектив сәбәптәр ҡамасаулай – абитуриент Әхтәм Фәйзуллинды «конкурс» тип аталған иләктән үткәрмәйҙәр. Егет кеше өсөн артабанғыһы яҡшы билдәле: хәрби форма, казарма һәм – «с места строевым шагом марш!» Һигеҙ йыллыҡ мәктәптә комсомол секретары вазифаһын атҡарыу осраҡлы булмаған икән. Хәрби хеҙмәттә лә уның был яҡлап әҙерлекле булыуын тиҙ самалап алалар. Взвод командиры урынбаҫары, ВЛКСМ комитеты секретары урынбаҫары кеүек ябай һалдат өсөн үтә лә абруйлы вазифаларҙы алып бара. Киләсәктә яҙмышын медицина менән бәйләйәсәге шунда ла үҙен күрһәтә биреп ҡуя: махсус таныҡлығы булмаһа ла, сержант Әхтәм Фәйзуллин ваҡытлыса фельдшер эшен дә атҡара. Ваҡыт тығыҙлана, күберәк сабырға тура килә. Фани донъяла бер ни ҙә осраҡлы түгел, юртаҡтарға йәки сабыш аттарына, көн һайын булмаһа ла, даими күнекмә үткәреү кәрәк булған кеүек, туҡтауһыҙ «сапҡан» юғары класлы хирург Әхтәм Фәйзуллин да, ошо күнекмәһе етерлек булмаһа, ҡырҡ йыл буйы ваҡытты эйәрләп саба алмаҫ ине.

«Ныҡышмалылыҡ ҡалалар ала» тигән әйтем бар. Хеҙмәтен тамамлап, Свердловск ҡалаһынан тыуған ауылына ҡайтып барышлай уҡ хыял иткән һөнәрен, ниһайәт, тормошҡа ашырыу ваҡыты еткәнен самалап, хәрби кейемдәге геройыбыҙ Өфөгә һуғыла. Һигеҙ айлыҡ әҙерлек курстарына урынлашыу өсөн кисәге взвод командиры урынбаҫарына ныҡышмалылыҡ ҡына түгел, хәрбиҙәрсә ҡыйыулыҡ та күрһәтеп алырға тура килә, һәм ул маҡсатына ирешә. Юғары уҡыу йортоноң беренсе курсына ҡабул ителеү – бик ныҡ тырышлыҡ һәм көс түгеүҙе талап иткән социаль статус, уға теләһә кем өлгәшә алмай. Алты йыл дауам иткән студент тормошо ла Әхтәм Фәйзуллин өсөн «сабам да сабам» сериалының дауамы булып сыға, сөнки егеттәр самалы уҡыған медицина институтында уларҙың һәр береһе иҫәптә. Ятаҡта студенттар советының алмаштырғыһыҙ рәйесе, институттың ВЛКСМ комитетында яуаплы эштә өҙлөкһөҙ ҡатнашыу, төрлө кисәләр ойоштороу, йәйге хеҙмәт семестрҙарында райондарға сығып эшләү, өлгәлө хеҙмәт өсөн наградалар… Былар бөтәһе лә – ана шул өҙлөкһөҙ сабыу емеше, «Иң аҙаҡҡы булып йоҡларға ятам, беренселәрҙән булып торам», – тип хәтерләй ул йыраҡ йәшлек йылдарының иң матур миҙгелдәрен.

«Сабам да сабам». Әллә уҡыу менән мауығып китеп, әллә башҡа төрлө сәбәп менән геройыбыҙ ғаилә ҡороу кеүек финиш-ваҡыттың да уҙып барыуын шәйләмәй ҡала. Атаһы:

– Улым, егерме ете йәшкә еттең бит инде! Ҡасан өйләнәһең?! – тип ирекһеҙләмәһә, кем белә...

Ата-әсәһенең һүҙен йығырға өйрәнмәгән улдары атай ихтыяры менән бәхәскә инмәй, күндәм ғәмәлгә ашыра: тормош иптәше Диананы ла үҙе кеүек ғүмерен һаулыҡ һаҡлауға арнарға йыйынғаны өсөн һайлай. Дөрөҫ, был осорҙа әле ул үҙенең ҡыҙы менән улы тыуасағы, уларҙың да ата-әсәһе юлынан китәсәге, үҙенең табип Фәйзуллиндар тоҡомона нигеҙ һалыусы буласағы хаҡында уйланмай. Бөгөн генә ул ҡыҙы Гүзәлиә – медицина фәндәре кандидаты, улы Аяз – атаһы янында уҡ хирург, ҡатыны Диана – теш табибы, кейәүе Асҡар – гинеколог.

Ниһайәт, ҡулда – юғары белем тураһында диплом һәм институтта алған белемеңде һынап, үҙ аллы хеҙмәт юлын башлап ебәреү. Баш ҡаланың 6-сы дауаханаһында хирургия буйынса интернатура үткәс, геройыбыҙҙы 21-се больницаға эшкә ебәрәләр. Тәүҙә ул бер нисә йыл имгәнгән ауырыуҙарҙы ҡабул итеү пунктында эшләп, бер ни тиклем тәжрибә туплай. «Көн һайын 70-ләгән ауырыу килә ине», – тип иҫләй ул мәлдәрҙе Әхтәм Әнәс улы.

Баш ҡаланың Урман паркы зонаһында урынлашҡан 21-се дауахананың П хәрефенә оҡшатып һалынған ғәләмәт ҙур бинаһы, ситтән ҡарағанда, ҙур комбинатты хәтерләтә, ә уның тығыҙ ҡатындағы дауалау бүлектәре – цехтарҙы.

Хәйер, бындағы дауаланыусылар ҙа меңәрләптер. Мәҫәлән, Әхтәм Әнәс улы мөдирлек иткән бүлектә генә 75 койка-урын иҫәпләнә. Бүлек мөдире үҙе генә аҙнаһына 8 – 10 кешегә төрлө ҡатмарлыҡтағы операция яһай. Бүлектә йылына 2700 самаһы ауырыу дауаланып сыға. «Ат аунаған ерҙә төк ҡала» тигәндәй, хирург скальпеле тейгән урында мотлаҡ йөйө ҡала. Эйе, яралар йөйһөҙ булмай, тик ул йөйҙәрҙең тәбиғәте лә – кеше һаулығын нығытыу йәки һаҡлап ҡалыу.

Операция өҫтәлендә дүрт тапҡыр ятырға тура килеүгә ҡарамаҫтан, уның ни рәүешле үтеүен күрергә тура килмәне. Шул хаҡта үҙенә белдергәс, тәжрибәле хирург ҡаршы килмәне, ләкин ҡарашында: «Ниңә кәрәк инде ул? Бер әһәмиәтен дә тапмайым», – тигән яуапты уҡырға мөмкин ине.

...Иртәнге сәғәт 10. Серле, хатта ниндәйҙер дәрәжәлә шомлолоҡ эркелгән операция залына тиҫтәгә яҡын аҡ халатлы йәки йәшел костюмлы медицина персоналы йыйылған. Был күренеш – тәжрибәле хирургтың көндәлек, тиҫтәләрсә йылдар дауам иткән сағылышы. Операция өҫтәлендә ятҡан илле йәштәр тирәһендәге ирҙең таз һөйәгенә тоташҡан һул аяҡ һөйәгенең йомро башы тамам ашалып, түҙерлек әмәле ҡалмағас, операцияға килергә мәжбүр иткән. Хәҙер ана шул аяҡ һөйәгенең йомро осон махсус инструменттар менән киҫеп алып, сит илдә эшләнгән махсус металл конструкцияға алмаштырырға кәрәк. Хирургик операция менән таныш булмаған кеше уның ни рәүешле атҡарылыуын күҙ алдына ла баҫтыра алмай.

Тәүҙә операция эшләнәсәк урын оҙаҡ ҡына дезинфекциялана, ауырыу ҡуҙғалып ҡамасауламаһын өсөн, төрлө штативтар менән кәүҙәһен операция өҫтәленә нығытып ҡуялар. Бына операцияны яһаусы хирург ҡулына скальпель алып, ауырыуҙың оса тиреһен тәрән генә ярып ебәрә. Ярылған эҙ буйлап тамсытамсы ҡуйы ҡан һарҡый. Был күренеш, әлбиттә, нескә нервылы кешеләр өсөн түгел. Ҡан, ара-тирә операция залын баҫып киткән көйгән ит еҫенә бер булып, Әхтәм Фәйзуллин сәғәт дауамында ауырыуға яңы «аяҡ» яһап биреү өсөн көс түгә. Дөрөҫ, махсус битлек аша уның йөҙөндә ниндәй кисерештәр сағылғанын күреү мөмкин түгел, күҙҙәре генә ялтырап күренә.

Юғары категориялы табип, медицина фәндәре кандидаты, БР-ҙың атҡаҙанған табибы Әхтәм Әнәс улы Фәйзуллин киң профилле һаулыҡ һаҡлау тармағының иң тынғыһыҙ ҡаҙанында ҡайнай. Таныштары һанап бөтөргөһөҙ булһа ла, дуҫтары, йырҙа йырланғанса, тормош көтә торғандары, бер нисә генә. Институтта саҡта уҡ бер «һуҡмаҡтар»ҙан йөрөгән Альфред Ғәтиәтов хәҙер – Өфөнөң 22-се дауаханаһында баш табип урынбаҫары, Самат Ғарифуллин – Сипайлово биҫтәһендәге теш поликлиникаһында баш табип, Энгель Ғатиндың Туймазы ҡалаһында үҙ клиникаһы бар, Зәбир Шәйәхмәтов – Бөрө ҡалаһындағы поликлиникала баш табип урынбаҫары. Вәрис Богданов, Алберт Шәрәфетдинов... Барыһы ла – ҡасандыр Гиппократ анты биргән һәм уға тоғролоҡ һаҡлаған егеттәр.

Ирмен тигән кеше өй һалырға, балалар үҫтерергә, ағас ултыртырға бурыслы. Киң мәғәнә һалынған был һүҙҙәргә. Өйһөҙ тормош көтөү мөмкин булмаған кеүек, балаларһыҙ нәҫел ҡорой, ә ағас – тәбиғәт һынланышы. Шуларһыҙ әҙәм балаһы аҡыллы йән эйәһеләй ғүмер итерлек мөхитте күҙ алдына баҫтырып булмай. Күрә-белә торопмо, әллә эске кисерештәре менән аңлапмы, Әхтәм Фәйзуллин был шарттарҙың барыһын да үтәп сыҡҡан. Ҡасандыр Тимербай ауылы урамы ғына белгән үҫмерҙән исеме меңдәргә билдәле, көн-сәғәт һайын эскерһеҙ рәхмәт һүҙҙәре ишеткән абруйлы шәхес үҫеп сыҡҡан. Тимәк, ғүмерҙең бер генә минуты ла бушҡа үтмәгән. Ә бит, уйлап ҡараһаң, ҡаҙанған уңыштарының барыһы өсөн дә ул тәүәккәллек кеүек үҙ шәхесенең төп сифатына бурыслы. Хәйер, ирмен тигән ир кеше өсөн тәүәккәллек, моғайын, иң мөһим һыҙаттыр.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

# АКРИЛ ПРОЕКТЫ:
## *мул тормошмо, әллә өҫтәмә мәшәҡәттәрме?*

*Имен мөхит – кеше һәр яҡлап уңайлы ғүмер кисерһен өсөн мотлаҡ шарттарҙың береһе. БР Президенты Рөстәм Хәмитов БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайға мөрәжәғәтендә ошо проблеманы алға ҡуйып, ағымдағы йылды тирә-яҡ мөхитте һаҡлауға бағышларға саҡырғайны. Әлбиттә, был төшөнсә беҙҙе уратып алған тәбиғи мөхитте генә түгел, күберәк әҙәм балаһының уға мөнәсәбәтен үҙ эсенә ала. Ресурстарҙы һаҡсыл тотоноу, атмосфера һауаһын ағыуламау, һыу ятҡылыҡтарын бысратмау, тәбиғәттә балансты һаҡлау һ.б. – шулар рәтендә.*

*Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Башҡортостанда сәнәғәттең йылдам үҫеше, ҡалалар күпләп төҙөлөү менән бергә, тирә-яҡ мөхиттең быға тиклем күрелмәгән дәрәжәлә бысраныуына килтерҙе. 80-се йылдар аҙағында Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат ҡалаларында экологик хәлде сәләмәтләндереү буйынса КПСС Үҙәк Комитеты һәм СССР Министрҙар Советының берлектәге ҡарары донъя күреүе мәсьәләнең ниндәй дәрәжәлә ҡатмарланыуы хаҡында һөйләй. Дөрөҫ, ул ваҡыттарҙан һуң хәл күпкә, шул иҫәптән ыңғай яҡҡа ла, үҙгәрҙе. Ләкин Салауат ҡалаһында һуңғы осорҙа, акрил кислотаһы етештереү линияһы төҙөү менән бәйле, граждандарҙың ризаһыҙлыҡ акциялары булып үтте. Ғөмүмән, башҡорт халҡының легендар улының исемен йөрөткән был ҡалала экологик хәл ни рәүешле? Журналист Рима Ҡотлоғәлләмова тап шул хаҡта яҙа.*

Салауат – индустриаль яҡтан үҫешкән ҡала, һәм уның бөгөнгөһө лә, киләсәге лә сәнәғәт предприятиелары эшмәкәрлегенән башҡа күҙалланмай. Ҡала тормошоноң ыңғай яҡтары ла, кире күренештәре лә тап ошо өлкәгә бәйле. Сәнәғәт предприятиеларында эшләгәндәрҙең хеҙмәт хаҡы ла башҡаларҙыҡынан юғары, һәм тормош кимәле буйынса ла ҡалабыҙ республикала, Өфөнән һуң, икенсе урынды биләй. Ә экологик хәлде, тирә - яҡ мөхиттең таҙалығын байҡаһаҡ, был юҫыҡта ла Салауат "төшөп ҡалған"дарҙан түгел. Шуға күрә лә ҡалала акрил эшләп сығарыу буйынса эш башланасағын ишеткәс, салауаттар ҡапма-ҡаршы ике төркөмгә бүленде. Берәүҙәр ҡаланың үҫешенә, яңы эш урындары барлыҡҡа килеүгә һөйөнһә, икенселәре, был экологик хәлдең насарайыуына, ҡалала артабан йәшәү мөмкин булмаясағына инанып, саң ҡаҡты. Икенсе төркөм яҡлылар, халыҡты өгөтләп, митинг ойоштороҙо, төҙөлөштө башлауға ҡаршы 4000-дән ашыу ҡултамға йыйып, социаль селтәрҙәрҙә фекер алышыуҙар ойоштороҙо.

Килеп тыуған хәлгә асыҡлыҡ индереү, ҡала халҡы менән осрашыу өсөн Салауатҡа юлланыр алдынан БР Президенты Рөстәм Хәмитов йәмәғәтселек фекерен өйрәнеүҙе ойошторорға ҡушҡайны. Һөҙөмтәлә респонденттарҙың 70 проценты акрил заводы төҙөлөүгә ҡаршы икәне асыҡланды. Рөстәм Зәки улы билдәләүенсә, был – халыҡ менән аңлатыу эше, асыҡ һөйләшеүҙәр алып барылмағанлыҡ арҡаһында килеп тыуған хәл.

«ГазпромнефтехимСалауат» предприятиеһының генераль директоры Дамир Шәүәлиевтың фекеренсә, бөгөн завод цехтарында акрил кислотаһынан күпкә етдиерәк продукция етештерелә, һәм был ғәйәт ҙур яуаплылыҡ талап итә. Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа ғына сәнәғәт предприятиеһында бер нисә яңы етештереү линияһы төҙөлдө, ҡорамалдар яңыртылды. 2009 йылдан бында нефть эшкәртеү заводында висбрекинг ҡоролмаһы комплексы эш башлаһа, 2010 йылда түбән баҫымлы полиэтилен етештереү буйынса тәүге продукция алынды, 2011 йылда нефть эшкәртеү заводында һыу таҙартыу ҡоролмаһы ҡайтанан ҡоролдо һәм ЭП-300 ҡоролмаһында пиролиз мейестәре алыштырылды. Былтыр иһә йылына 6 млн. тонна етештереү ҡеүәте булған ЭЛОУ АВТ-6 ҡоролмаһы сафҡа инде.

«Акрил кислотаһы» проекты тураһында хәбәр ҡала халҡы араһында йәшен тиҙлеге менән таралып, Салауаттың киләсәге тураһында түбәндәге имеш-мимештәр ишетелә башланы:

1. Акрил сәнәғәтенән ауырыуҙар һәм үлем осраҡтары ҡырҡа артасаҡ.
2. Салауат ҡала статусын юғалтып, ябыҡ биләмәгә әйләнәсәк.
3. Төрлө дәүләт структураларының, мәҫәлән, һалым инспекцияһы һәм почтамптың Ишембайға күсерелеүе – Салауаттың перспективаһыҙ ҡала булыуына бәйле.
4. Экологик һәм медицина программаларын финанслау буйынса ҡалаға республика ярҙамы күрһәтелмәйәсәк.
5. Фатирҙарға хаҡ төшәсәк, халыҡтың байтағы әле үк ҡаланан күсенеп китеү яғын ҡарай.

БР Президенты менән осрашыу ваҡытында Рөстәм Хәмитов, ундай хәлдәргә юл ҡуйылмаясаҡ, тип яуапланы. 15 майҙа ҡала округы хакимиәте бинаһында тағы «Таҙа ҡала» инициатив төркөмөнөң хакимиәт етәкселәре, «ГазпромнефтехимСалауат» предприятиеһы асыҡ акционерҙар йәмғиәте вәкилдәре һәм депутаттар менән сираттағы осрашыуы булды. Предприятиеның генераль директоры урынбаҫары Павел Алюшкин фекеренсә, 1 майҙа митингыла белдерелгән өс талаптың икеһен ҡәнәғәтләндереү мөмкин түгел. Мәҫәлән, төҙөлөш хаҡында йәмәғәтселек иғтибарына бер нисә тапҡыр еткерелде. Ә инде проектҡа йәмәғәт экспертизаһы тәғәйенләү һәм референдум ойоштороу, П. Алюшкин раҫлауынса, законға ярашлы түгел. Бөтөн документтар эксперттар тарафынан законға ярашлы тапшырылғанда ғына төҙөлөш башлауға рөхсәт бирелә. «Акрил кислотаһы» проектының тейешле документтары әҙер, һәм төҙөлөштө башлап ебәреүгә рөхсәт алыу референдум үткәреүгә сәбәп була алмай. Дәүләт экспертизаһының дөрөҫлөгөнә шикләнеп, бер ниндәй орган да өҫтәмә тикшереү башлау хоҡуғына эйә түгел. Тик РФ Президенты ғына төҙөлөштө туҡтатып, өҫтәмә экспертиза тәғәйенләй ала, әлбиттә, быны өсөн етди дәлилдәр кәрәк буласаҡ.

Шулай уҡ Павел Алюшкин, халыҡ араһында ҡотҡо таратып йөрөүселәрҙең эшмәкәрлеге экологик рейдерҙы хәтерләтә, тип билдәләне. Асыҡлап әйткәндә,

рейдерҙар ҙур төҙөлөш барышында, халыҡты уға ҡаршы ҡотортоп, яһалма ҡаршылыҡ тыуҙыра, һөҙөмтәлә сәйәси карьера йәки матди килемгә эйә була.

Осрашыуҙа шул да аңлашылды: әле «Акрил кислотаһы» проекты буйынса бәхәстәр тамамланмағанға оҡшай. Төҙөлөшкә ҡаршы сыҡҡан активистар үҙ фекеренән тайпылырға йыйынмай, ә властың һәм төҙөлөш өсөн яуаплы предприятиеның һәр һорауға нигеҙле аңлатмаһы бар.

Салауат ҡалаһында йәшәүселәр йыш ҡына торлаҡ кварталдарын зәңгәр төтөн ҡаплауына, атмосфера һауаһында насар еҫтең күбәйеүенә, баш ауыртыуына зарлана. Алдынғы сәнәғәтле ҡалала йәшәү кеше һаулығы өсөн зарарлы, тигән фекерҙе лә йыш ишетергә тура килә. Эре нефть эшкәртеү предприятиеһы менән торлаҡ йорттарҙың йәнәш булыуы үҙенең кире эҙемтәләрен бирә, әлбиттә. Һулаған һауаның кеше сәләмәтлегенә зыянлымы-түгелме икәнлеген тикшереүсе белгестәр был турала нимә һөйләй һуң? Салауат ҡалаһының тирә-яҡ мөхиттең бысраныуын күҙәтеү буйынса комплекслы лаборатория начальнигы Әминә Аҙнаева менән әңгәмәнән һуң, бына нимәләр асыҡланды.

Һауа составында Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы тарафынан билдәләнгән түбәндәге матдәләр бар: туҙан, углерод, аммиак һ.б. Көнкүреш ҡалдыҡтары булараҡ, улар Ер шарының һәр нөктәһендә осрай. Бынан тыш, һәр ҡала һәм билдәле төбәктә сәнәғәт предприятиелары тарафынан атмосфераға сығарылған ҡалдыҡтар исемлеге лә билдәләнгән. «ГазпромнефтехимСалауат» предприятиеһы, мәҫәлән, атмосфераға 200-ҙән ашыу атамалы ҡалдыҡтар сығара. Һауаға күтәрелеү менән был элементтар бер-береһенә ҡушылып, тағы ла бер нисә генә ҡатнашма барлыҡҡа килтерә: азот окисы, аммиак, көкөрт водороды, углеводород сеймалы. Санитар хеҙмәттәр тарафынан уларҙың һәр береһе өсөн концентрацияның рөхсәт ителә торған иң юғары кимәле (ПДК) билдәләнгән.

*Һауаның бысраныу индексы*




Тап ошо күрһәткесте белгестәр һәр ваҡыт күҙ уңында тоторға бурыслы икән.

– Атмосфера һауаһының ағыуланыуы бер нисә режимда билдәләнә, – тип аңлата Әминә Аҙнаева. – Беренсе режим – һауаның бысраныу ихтамаллығы өсөн шарттар булдырылған. Был хаҡта барлыҡ сәнәғәт предприятиелары етәкселәре шунда уҡ хәбәрҙар булып, улар үҙ эшмәкәрлеген анализлап, хәлде тағы ла ҡатмарландырмаҫ өсөн саралар күрергә бурыслы. Һауа шарттары «уңайлы», мәҫәлән,

елһеҙ, ҡояшлы икән, барыһы ла ҡала өҫтөндә насар һауа тупланыуға сәбәпсе була. Һөҙөмтәлә атмосфераның бысраныуы икенсе режим менән билдәләнә. Был осраҡта предприятиеларҙа ҡайһы бер эштәрҙең туҡтатылыуы мотлаҡ. Өсөнсө режим ваҡытында ҡала өҫтөн ҡуйы томан ҡаплай, кешеләр ағыуланған һауа һулауын шунда уҡ һиҙә, табиптарға мөрәжәғәт итеү йышая. Тап ошо режим килеп тыуғанда ғына ПДК табиптар билдәләгән кимәлгә яҡынлаша.

Өсөнсө режим ҡалала, ғәҙәттә, яҙын, ҡар дәррәү эрегән ваҡытта күҙәтелә. Ҡыш буйы ҡарға һеңгән зарарлы матдәләр йылы ҡояш нурҙары аҫтында парға әйләнеп, яңынан атмосфераға күтәрелә. Йөрәк сирлеләр тап ошо ваҡытта йыш ауырый.

ПДК-ның юғары нөктәһе тип дүртенсе һәм бишенсе режим иҫәпләнә. Бишенсе ПДК –иң ҙур дәүмәл – кеше һаулығы өсөн хәүеф тыуҙыра. Тын ҡыҫылыу, күҙҙәрҙән йәш ағыу, йөрәк сирлеләрҙең һаулығы насарланыуы ихтимал. Был осраҡта кисекмәҫтән сәләмәтләндереү саралары күрелергә тейеш. Әминә Аҙнаева белдереүенсә, беҙҙең ҡалала ПДК-ның бындәй кимәлгә еткәне күҙәтелмәгән. Шулай ҙа, Салауат – экологик яҡтан хәүефле ҡалалар иҫәбендә. Атмосфера ағыуланыуын билдәләү өсөн махсус төшөнсә «бысраныу индексы» тип атала һәм йыл һайын иҫәпләнеп тора. 2011 йылда ҡалабыҙҙа бысраныу индексы 5,3 булған. Дөрөҫ, 2006 йыл менән сағыштырғанда аҙыраҡ, шулай ҙа саманан юғары, ти белгестәр.

Ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын ҡала биләмәләренән сығарыу өсөн махсус полигондар булдырылған. Бөгөн ҡаланың ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын урынлаштырыу өсөн 8 гектар ер биләгән полигон тулып бара. Уның 30 йыл элек файҙаланыла башлауын иҫәпкә алһаҡ, был ғәжәп тә түгел. Әлегә бында буш урындар ҡалдыҡтарҙың сереүе иҫәбенә генә барлыҡҡа килә. Полигонда, оҙаҡҡа һуҙмай, рекультивация эштәрен башҡарырға, йәғни тирә-яғын нығытып, талаптарға ярашлы эшкәртеп, уңдырышлы тупраҡ менән ябырға кәрәк. Ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын ҡаланан ситкә сығарыу өсөн яңы полигон проектлау бурысы һис ҡасан булмағанса киҫкен тора. Әлегә ҡала хакимиәте уның өсөн билдәләнгән биш урын араһынан береһен һайлап алып, эш башлау өсөн һөйләшеүҙәр алып бара.

Салауатта көнкүреш ҡалдыҡтарын йыйыу һәм полигонға ташыу менән «Махсус автохужалыҡ» шөғөлләнә. Тейешенсә йыһазландырылған 26 йөк машинаһы йыл һайын полигонға 216 мең кубик метр ҡалдыҡтар сығара. Торлаҡ йорттар тирәләй сүп-сар һалыу өсөн 900-гә яҡын контейнер урынлаштырылған.

Бынан тыш, яуаплылығы сикләнгән «Ресурс» ширҡәте аккумуляторҙар, алюмин банкалар, макулатура, автомобиль покрышкалары, полипропилен һәм быяла һауыттар йыйыуҙы яйға һалған. Эшҡыуар Владимир Егоровтың сәнәғәт зонаһында урынлашҡан предприятиеһы эшселәре халыҡтан һәм предприятиеларҙан йыйған бер нисә төр ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын айырыу – сорттарға бүлеү менән шөғөлләнә. Ғәҙәттә, бында пластик шешәләр, ҡатырға, алюмин банкалар йыялар. Күптән түгел фирма бушаған шампунь һәм төрлө биҙәнеү һауыттарын да йыя башланы. Илдә һәм беҙҙең яҡта ла уларҙы ҡайтанан эшкәртеү технологияһы барлыҡҡа килде.

Келәттәрҙең береһендә тотонолған люминецент лампалары һаҡлана. Предприятие, ҡала мәктәптәре, балалар баҡсалары, сауҙа нөктәләре менән килешеү төҙөп, йылына 25 меңдән ашыу лампа йыя һәм уларҙы эшкәртеүгә

тапшыра. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҡаланың экологик хәлен ҡайғыртып, ошо юҫыҡта эш башларға теләүсе эшҡыуарҙар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Ошонда теркәлгән 4000-дән ашыу эшҡыуарҙың 20-һе генә был йүнәлеш менән ҡыҙыҡһыныуын белдергән.

Салауат ҡалаһы ҡала Советының рәсми сайтында май урталарында сираттағы социологик һорау алыу тамамланды. Тирә-яҡ мөхиттең хәл-торошона арналған тикшеренеүҙә 300-ҙән күберәк кеше ҡатнашты. Респонденттарҙың 95 процентында тыуған ҡалаһының экологик хәле хаҡында хәүеф тыуҙыра, ә 97 проценты, тирә-яҡ мөхиттең бысраныуы уларҙың һаулығына зыян килтерә, тигән фекер белдерә. Граждандарҙың 35 проценты, экологик хәлде яҡшыртыу өсөн бер нисә сәнәғәт предприятиеһын ябырға кәрәк, тип иҫәпләй, ә 29 проценты быны өсөн ҡаланы тағы ла нығыраҡ йәшелләндереү менән шөғөлләнергә тәҡдим итә. Респонденттарҙың барыһы ла тип әйтерлек, ҡала биләмәләрен сүпсарҙан таҙартыу, экологик өмәләр ойоштороу мотлаҡ, тигән ҡараштa. Әйтергә кәрәк, ҡала хакимиәте был мәсьәләгә ҙур иғтибар бирә, дөйөм эшкә, ғәҙәттә, барлыҡ граждандар, мәктәп уҡыусылары, предпритие эшселәре, йәмәғәт ойошмалары һ.б. йәлеп ителә.

Экология проблемаһы ҡырҡыулашмаһын өсөн, ҙур мегаполистарҙа ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын айырып йыйыу өсөн махсус контейнерҙар ҡулланыла. Ошо хаҡтағы һорауға салауаттар төрлөсә яуап бирҙе: яртыһынан күберәге, бындай контейнерҙарҙы мотлаҡ ҡулланасаҡбыҙ, тиһә, 27 проценты бер ҡасан да бындай аҙымға бармаясағын белдерә, 17 проценты был һорауға яуап бирергә ҡыйынһына. Ҡала етәкселәре сүпте айырып йыйыуҙы ойоштороу мәсьәләһенә ыңғай ҡарай, тик ябай граждандарҙың яуабы был файҙалы эштең ыңғай һөҙөмтә бирәсәгенә шикләнә.

Ҡалабыҙҙың эргәһенән аҡҡан Ағиҙел йылғаһы ла бысраҡ. Был күренешкә тик предприятиеларҙың ғына эшмәкәрлеге ғәйепле, тип әйтеү ғәҙел булмаҫ ине. Йылға ярында машина йыуыу, тирә-яғын ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарына күмеү – былар барыһы ла йылғаның хәленә кире йоғонто яһай. Салауатта эшләп килгән балалар экология-биология станцияһына йөрөүселәр Ағиҙелдә гидробиологик тикшеренеү уҙғара һәм ҡала тирәләй һыуҙарҙың йылдан-йыл нығыраҡ бысраныуын асыҡлай. Был процесты таҙартыу ҡоролмаларының эшен яҡшыртыу, тотонолған һыуҙарҙы, ярҙарҙы көнкүреш ҡалдыҡтарынан таҙартыу буйынса өҫтәмә саралар күреп кенә туҡтатырға мөмкин, ти улар.

Тәбиғәтте һаҡлау – ололарҙың ғына түгел, шулай уҡ уҡыусыларҙың да изге бурысы, тигән фекерҙә үҫмерҙәр. Йылғаны таҙартыу маҡсатында, экология-биология станцияһына йөрөүселәр Ағиҙел буйындағы сүп-сарҙы йыйыштыра, ҡала халҡы менән агитация эше алып бара, «Йәшә, Ағиҙел!» стена гәзите сығарыла. Йылға буйында «Башҡортостандың тере һыуы», «Тағараҡ», «Сыйырсыҡ», «Яҙ гөлө», «Тәбиғәтте һаҡлау буйынса изге эштәр йылъяҙмаһы» тигән экологик акциялар уҙғара.

**Рима ҠОТЛОҒӘЛЛӘМОВА.**
**Салауат ҡалаһы.**



Хәлил
БАРЛЫБАЕВ

# Яҙмыш-һикәлтәле юл

## Сәйәсәт – үткеһеҙ һаҙлыҡ

Совет осоронда мин сәйәси тормошта бик әүҙем ҡатнашманым, бер ниндәй юғары органдарға ла һайланманым, нигеҙҙә уҡытыу һәм ғилми эш менән шөғөлләндем. Тик СССР менән КПСС-тың тарҡалыуы башланғас ҡына, мине сәйәси тормошҡа йәлеп итергә тотондолар. Илдә төрлө сәйәси ойошмалар төҙөлөп, Мәскәүҙәге иптәштәр мине «Марксистик платформа» тигән ойошмаға өгөтләп, шундай уҡ ойошма Башҡортостанда ла барлыҡҡа килгәс, мин уның етәксеһе булып киттем. 1990 йылдың июнендә РСФСР Коммунистар партияһының ойоштороу съезы булып, унда мин ойошманың контроль-ревизия комитеты ағзаһы итеп һайландым. И. Полозков, В. Купцов, Г. Зюганов партияның етәкселәре булып китте. Миңә яңы ойошма үҙәк комитетының, контроль-ревизия комитетының бер нисә пленумында ҡатнашырға насип булды. Бер йыл самаһы уҙғас, ГКЧП фетнәһе һөҙөмтәһендә СССР ҙа, КПСС та, РСФСР Компартияһы ла юҡҡа сыҡты.

Ошонан һуң мине төрлө ойошмаларҙың ревизия комиссияларына һайлау традицияға әүерелде. 2001 – 2004 йылдарҙа башта «Берҙәмлек һәм Ватан» – «Берҙәм Рәсәй», аҙаҡ «Берҙәм Рәсәй» партияһының контроль-ревизия комитеты рәйесе урынбаҫары булдым. 2003 йылда Рәсәй Шахмат федерацияһы съезында мине ойошманың контроль-ревизия комиссияһы рәйесе итеп һайланылар. Аҙаҡ тағы ике съезда яңынан һайланып, әле лә шул вазифаны үтәп йөрөйөм.

***

1991 йылдың февраль-мартында Мәскәү янындағы Морозовка тигән СССР етәкселеге резиденцияһында бөтә союздаш, Балтик буйы республикаларынан тыш, һәм автономиялы республикаларҙың вәкилдәре тарафынан яңы Союз килешеүе төҙөлдө. Уның йөкмәткеһен әҙерләүҙә Башҡортостандан ике вәкил: мин

*Аҙағы. Башы 6-сы һанда.*

һәм Зөфәр Йәнекәев ҡатнаштыҡ. Килешеүҙе эшләү бик көсөргәнешле көрәш, хатта талаш-тартҡылаш аша барҙы. РСФСР Юғары Советындағы низағтар арҡаһында, РСФСР-ҙың делегацияһы оҙаҡ ҡына ойошторолмай торҙо, хатта Морозовкала ҡыҙыу эш башланған ваҡытта ла вәкилдәр юҡ ине. Юғары Советтың ҙур залында делегацияны һайлау ултырышында Мортаза Рәхимов менән мин дә ҡатнаштым. Делегацияның етәксеһе итеп Рамазан Абдулатиповтымы, әллә Сергей Шахрайҙымы һайлау тураһында һүҙ сыҡҡас, Рәхимов бер нисә тапҡыр һикереп тороп: «Шахрая не надо! Шахрая не надо!» – тип ҡысҡырғанда, уға мин дә ҡушылдым. Ул ваҡытта демократия шулай сәскә атҡайны. Ахырҙа яңы Союз Килешеүен төҙөүҙә РСФСР делегацияһының етәксеһе итеп Р. Абдулатипов, ә ағзалары составына С. Шахрай һ. б. һайланды.

Ҡайһы бер союздаш республикаларҙың СССР-ҙан сығыу яғында булыуы шул саҡта уҡ күренә ине. Был йүнәлештә бигерәк тә Грузия, Украина вәкилдәренең ҡараштары ныҡышмалы булды. Беҙ, Татарстан вәкилдәре менән берләшеп, союздаш республика статусы өсөн ҡырталашып, ярайһы ғына уңышҡа өлгәштек. Союздаш республикалар беҙҙең яҡлы булһа, башҡа автономиялы республикалар етәкселәре, көнләшеп, ҡаршы төшөп маташты. Р. Абдулатипов етәкселегендәге РСФСР вәкилдәре лә, өҫтән күрһәтмә буйынса, беҙгә аяҡ салыу яғында булды. Шулай ҙа Килешеүҙә Башҡортостан һәм Татарстан союздаш республика кимәленә өлгәшерлек ярайһы отошло статьялар урын алды. Улар аҙаҡ мөстәҡиллек өсөн көрәштә ныҡлы нигеҙ булдырҙы.

Документтың төп нөсхәһен әҙерләү тамамланғас, делегациялар хөрмәтенә ҙур мәжлес ойошторолоп, унда республикалар исеменән тостар әйтелде. Башҡортстан Республикаһы исеменән һүҙ әйтеү, Зөфәр Йәнекәевтың тәҡдиме буйынса, миңә тура килде. Мин: «Башҡорт халҡы йырға бай, йырларға ярата һәм яҡын дуҫтарына йыр бүләк итеү йолаһын тота, шуға күрә мин һеҙгә, яңы дуҫтарыма, йыр бүләк итәм», – тип «Азамат»ты йырланым. Зал ҙур, акустика хайран ҡалырлыҡ, микрофон аша йыр, мин башҡа бер ваҡытта ла улай булдыра алмағанса, матур янғыраны. Оҙаҡ, дәррәү ҡул саптылар. Рамазан Абдулатипов йүгереп килеп, йырың иҫ киткес шәп булды, уның хаҡына арабыҙҙағы бөтә ҡапма-ҡаршылыҡтар буйынса һинең менән килешәм, тип ҡулды ҡыҫып, рюмкаһын сәкештереп, коньягын бөтөргәнсе эсеп ҡуйҙы.

Килешеү проекты яҙылып бөткәс, 1991 йылдың 19 авгусында уға бөтә республикалар делегациялары Кремлдә ҡул ҡуйырға тейеш ине. Шул көн иртәнсәк мин Өфө аэропортына китеп барғанда, радиоалғыс ГКЧП фетнәһе хаҡында хәбәр итте. Миңә кире боролоп ҡайтырға һәм көн буйына телевизорҙан «Лебединое озеро» балетын ҡарарға тура килде.

Был хәл илебеҙҙе аяныслы яҙмышҡа дусар иткән ваҡиғаларҙың һуңғы нөктәһе булды. Яңы Союз килешеүенең йөкмәткеһе, халыҡ-ара сәйәсәт нормаларына ярашлы, бөтә республикалар һәм халыҡтарҙың мәнфәғәтенә яуап бирерлек итеп төҙөлгәйне. Уға ҡул ҡуйылып, тормошҡа ашырылһа, СССР тарҡалмай ғына, яңы йөкмәтке алып, һуңғы йылдарҙа күҙәтелгән кире һәм аяныс хәлдәр барлыҡҡа килмәҫ ине. ГКЧП фетнәһе, әлбиттә, өс көндән баҫтырылды.

2011 йылдың апрелендә шул уҡ Морозовкала, хәҙер шәхси пансионатта, миңә Мәскәү Дәүләт эшмәкәрлеген администрациялау академияһының сит ил делегациялары менән берлектә үткәргән «Глобализация һәм социаль капитал» тигән ғилми конференция эшендә ҡатнашырға тура килде. Аҙаҡ ресторанда ойошторолған банкетта тост әйтеү өсөн һүҙ бирелгәс, мин 20 йыл элек ошонда

ниндәй тарихи ваҡиға булыуы хаҡында һөйләнем. Улар, бигерәк тә Германия делегаттары, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңлап, һорауҙар бирҙе. Йырлауымды ла өҫтәгәс, тағы ла йырлап күрһәтеүемде һоранылар. Инәлтеп торманым, «Азамат»ты башҡарҙым. Дәррәү ҡул саптылар.

***

1990 йылдың мартында Башҡорт АССР-ы Юғары Советына депутаттар һайлау булып үтте. Ул осорҙа демократияның нисек «сәскә атҡан»ын хәҙер күҙ алдына ла килтереп булмай торған шул күренештән белергә була: Борай районынан – Хөкүмәт Рәйесе урынбаҫары В. Байтурина, Баймаҡтан Хөкүмәт Рәйесе М. Мирғәзәмов үҙе, башҡа урындарҙан шулай уҡ күп кенә юғары власть вәкилдәре депутатлыҡҡа кандидат булып сығып, һайланмай тороп ҡалды. Баймаҡтар Радий Уралбаевты, райондағы геология-разведка ойошмаһы директорын – депутат итеп һайлап, Башҡортостан тарихын икенсе юлдан ебәрҙе. Улар М. Мирғәзәмов өсөн тауыш бирһә, һис шикһеҙ, республиканың беренсе етәксеһе булып оҙаҡ ваҡыт, бәлки, бөгөнгә тиклем ул ҡалыр ине. Шуға күрә, минең фаразым буйынса, Башҡортостандың 1990 – 2000 йылдарҙағы тарихы баймаҡтар тарафынан эшләнде.

***

Мортаза Рәхимовтың Башҡорт ССР-ы Юғары Советы Рәйесе итеп һайланыуы көсөргәнешле, асыҡтан-асыҡ, демократияның бөтә ҡанундарына тура килгән көрәш шарттарында үтте. Рәйеслеккә унан тыш дүрт кеше: Р. Ғимаев, М. Ишморатов, М. Резбаев һәм М. Шаһиев дәғүә итте. Ул саҡта мин Хөкүмәттең иҡтисад бүлеге мөдире вазифаһын башҡарып йөрөй инем. Һайлауға бер нисә көн алда миңә «Башкирхлебопродукт» идаралығының генераль директоры Дамир Ҡыуатов шылтырата: «Хәлил, беҙ Мортаза Ғөбәйҙуллович менән уның һайлау алды программаһын, сессияла яһаясаҡ сығышын яҙып ултырабыҙ. Ярҙам итһәң, яҡшы булыр ине». Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ваҡытым юҡ ине, программа һәм телмәр буйынса идеяларым менән уртаҡлашып, уларға уңыш теләнем. Мортаза Рәхимов – иң ҡулайлы кандидат, тип уға тауыш биреүгә өгөтләп йөрөүселәр ярайһы күп булып, С. Килдин, Д. Ҡыуатов, Ю. Садиҡов, Ю. Шәрипов, нефть эшкәртеү заводтары директорҙарының күпселеге ҙур тырышлыҡ күрһәтте. Шуныһы фәһемле: уларҙың барыһы ла аҙаҡ власть даирәләре тарафынан ситләштерелде.

Иртәгә һайлау тигән көндө М. Мирғәзәмов Хөкүмәт ағзалары, Юғары Совет депутаттары һәм күп кенә район хакимиәттәре етәкселәре ҡатнашлығында үткән кәңәшмәнең һуңында: «Коллегалар, Юғары Совет Рәйесе вазифаһына беҙ кемде күрһәтергә тейешбеҙ, шул турала кәңәшләшеп алайыҡ», – тине. Ул һүҙен тамамлап та өлгөрмәне, Сибай ҡалаһы хакимиәте башлығы Зиннур Йәрмөхәмәтов атылған уҡ һымаҡ һикереп торҙо ла: «Нисек кемде?! Ундай һорау булырға ла тейеш түгел! Әлбиттә, Рәхимовты яҡларға кәрәк», – тип һөрән һалды. Башҡа тәҡдимдәр булманы, ахыр сиктә Мирғәзәмов: «Улайһа, иртәгә Мортаза Рәхимовты яҡлайбыҙ», – тигән фатиха бирҙе.

Һайлауҙың тәүге турында бер кем дә Рәйес булып һайланырлыҡ 226 тауыш йыя алманы. Һуңғыһында ғына М. Рәхимов, кәрәккәндән ун тауышҡа күберәк йыйып, Башҡорт ССР-ы Юғары Советы Рәйесе булып һайланды. Был кампанияла Башҡортостан дәүләт телевидениеһы һәм радиоһы етәксеһе, депутаттар менән Талейран һымаҡ эш иткән С. Килдиндың ролен мотлаҡ билдәләп китеү урынлы.

***

Тағы бер теорияма ярашлы, Башҡортостандың ғына түгел, бөтә Рәсәйҙең яңы тарихы бер кеше тарафынан ныҡлы боҙолдо. Үткән быуаттың 80-се йылдары аҙағы – 90-сы йылдар башында СССР Юғары Советы һәм РСФСР Юғары Советы сессиялары телевидение аша көн дә туранан-тура күрһәтелә ине. Сәйәсәткә битараф кешеләр «Рабыня Изаура» сериалын ҡараһа, беҙ сессияларҙың береһен дә ҡалдырмаҫҡа тырышып, телевизорға йотлоғоп, текәлеп ултыра инек. Сөнки ундағы күренештәргә бер сериал да, спектакль дә тиңләшә алмағандыр: депутаттар һуғышып та китә, һүгенеп тә ебәрә, «иркен» микрофонға сират тороп, «сәсәнлек»тә ярыша, бер-береһенең телмәрҙәрен ҡул сабып өҙә ине. Иң ҡыҙыҡ тамаша, моғайын, РСФСР Юғары Советы Рәйесен һайлағанда булғандыр. Б. Ельцин менән И. Полозков, вазифаға дәғүә итеп, ике ай буйына тиҫтәләгән тауыш биреү үткәреп, ахыр сиктә бер нисә тауыш күберәк йыйып, Б. Ельцин РСФСР Юғары Советы Рәйесе итеп һайланғас, уға урынбаҫар тәғәйенләргә кәрәк булды. Күрәһең, иң ҙур һәм абруйлы республикаларҙың береһе күреп, ул юғары вазифаға Башҡортостан вәкиле, БАССР-ҙын ауыл хужалығы министры, депутат Исмәғил Ғәбитовты тәҡдим итте. Был фамилияны ишеткәс, шатланып һәм ғорурланып та өлгөрмәнем, Исмәғил ағайыбыҙ микрофон янына килеп: «Я с таким человеком как Ельцин вместе работать не желаю, беру самоотвод», – тине лә урынына барып ултырҙы.

Әлбиттә, был хәлде аңларға була, сөнки Ельцинды ул саҡта ғына түгел, унан һуң да өнәмәүселәр, хатта дошман күреүселәр булды, хәҙер ҙә күп. Әммә тыныс һәм тәрән уйлап ҡарағанда, И. Ғәбитов Рәсәй Юғары Советы Рәйесе урынбаҫары булһа, илдең тарихы бөтөнләй икенсе юлдан киткән булыр ине. Аҙаҡ ул вазифаны Р. Хасбулатов биләмәһә, бәлки, Парламент менән Президент араһындағы талаш-тартыш һәм Аҡ йортҡа танкынан атыу, хатта Чечен һуғышы ла ҡубып китмәҫ ине. Ә инде Башҡортостан вәкиле шундай юғары вазифаны тотоп торһа, республиканың хәле лә бөтөнләй икенсе булыуы шикһеҙ. Һығымта: яуаплы хәлдәрҙә тойғоларҙы тыйып эш итеү хәйерле.

***

1991 йылда РСФСР-ҙың яңы Парламенты һайланып, Федераль хөкүмәт ойоштороу барғанда, ҡайһы бер министрлыҡтарға етәксе итеп милли республикалар вәкилдәрен тәғәйенләргә булғандар. Милли эштәр һәм төбәк сәйәсәте министры вазифаһына Башҡортостандан кандидат итеп республикабыҙ етәкселеге мине тәҡдим итте. Аҡ йортта төрлө комиссиялар һәм комитеттарҙы урап сыҡҡас, РСФСР Министрҙар Советы Рәйесе И. С. Силаев менән йомғаҡлау әңгәмәһе ҡалды. Ҡабул итеү бүлмәһендә Ғәҙәттән тыш хәлдәр министры булып эшләгән Сергей Шойгу менән бергә саҡырғандарын көтөп ултырабыҙ. Иван Степанович мине ҡолас йәйеп ҡаршы алды. Яғымлы йылмайған йөҙ, йор һүҙҙәр менән өндәшеп, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырғандан һуң ул: «Биографияғыҙ ҡайһылай бай! Ауылдан сыҡҡанһығыҙ, армияла булғанһығыҙ, вузда, дәүләт органдарында эшләгәнһегеҙ, Мәскәү университетын тамамлағанһығыҙ!» Мин, һөйләшеүгә ҡеүәт өҫтәп: «Эйе, Иван Степанович, МГУ-ла беҙ Руслан Хасбулатов менән бергә уҡыныҡ», – тип ысҡындырҙым. «Шулаймы, туҡта улайһа, – тине лә ул тура телефон аша Хасбулатовҡа сыҡты: – Руслан Имранович, беҙ бында Һеҙҙең однокашнигығыҙ Барлыбаев менән һөйләшеп ултырабыҙ... Эйе...Эйе... Беҙ уны милли эштәр һәм төбәк сәйәсәте министры вазифаһына ҡарайбыҙ. Эйе... Шулаймы? Эйе... Ярай... Ярай, улайһа». Силаевтың йөҙөнән йылмайыу юҡҡа сыҡҡайны, тауышында ла элекке күтәренкелек һәм йорлоҡ юғалды. Шулай ҙа

ул, беҙ һеҙҙең кандидатурағыҙҙы ҡарауҙы дауам итербеҙ әле, тип яҡты йөҙ менән хушлашты. Әммә һөйләшеүҙең һөҙөмтәһе булманы.

Был тарихтың да әхлаҡи яғы шунда: теленде кәрәк-кәрәкмәгәндән тыйылып, урынына һәм ваҡытына ҡарап, үлсәп кенә асырға кәрәк. Хасбулатовтың исемен әңгәмәгә ҡыҫтырғанда, мин көнләшеү хисе барлығын, дуҫтарыңдың алдында берҙе һөйләп, артында бөтөнләй киреһен эшләүе ихтималлығын онотҡанмын. Ул осорҙа ниңәлер Кавказ республикалары вәкилдәре Башҡортостан һәм Татарстандың союздаш республика булып үҫергә ынтылыуына тыныс ҡарай алмай ине.

***

1990 йылдарҙың тәүге яртыһында республиканың үҙаллылығы өсөн көсөргәнешле көрәш алып барылды. Миңә СССР-ҙы яңыртып ҡороуға йүнәлтелгән яңы Союз килешеүен, Рәсәйҙең яңы Федератив килешеүен, Рәсәй Федерацияһы менән Башҡортостан араһындағы килешеүҙәрҙе төҙөүҙә ҡатнашырға насип булды. Төп ҡаршылыҡтар «Республикаға үҙаллылыҡты ниндәй кимәлдә алырға?» тигән мәсьәлә тирәһендә ҡуйырҙы. Министрҙар Советы Рәйесе М. Мирғәзәмов етәкселегендәге төркөм үҙ өҫтөбөҙгә артыҡ яуаплылыҡ алмай, Рәсәй законынан ары уҙмай, уларҙы үҙебеҙгә яраҡлаштырып эш итеү яғында ине. Икенсе төркөм, шул иҫәптән мин дә, суверенитетты, Б. Ельцин әйтмешләй, «йота алған тиклем» алыу, республиканың көслө һәм үҙ-аллы законы системаһын булдырыу яғында инем. Көрәш шул тиклем ҡыҙыу барҙы ки – 1991 йылдың декабрендә, минән ҡотолоу өсөн, беҙгә ҡаршылар Хөкүмәттә иҡтисад бүлеген бөтөрөп, үҙемде эшһеҙ ҡалдырҙылар. Мине иҡтисад буйынса докторлыҡ диссертацияһы яҡлауым ҡотҡарҙы: ғилемле кешене дәүләт органдарынан ситләтеү уңайһыҙ булғанға, тағы ла яуаплыраҡ эш тәҡдим ителде.

Шул ваҡиғаларҙан һуң бер аҙ ваҡыт үткәс, Хөкүмәттең иҡтисад бүлеген ябып, мине эштән сығарыуға ирешкән Хөкүмәт Рәйесе урынбаҫары менән Белорет ҡалаһында үткән ҙур кәңәшмәнән вертолетта Өфөгә ҡайтырға тура килде. Юлдашым ныҡ ҡына ауырый ине. Уны вертолеттың бер яҡ стенаһына теҙелгән ултырғыстарға һуҙып һалып, һыу эсереп, йығылып китмәһен өсөн янында ултырып килдем. Әйткәндәре бөгөнгөләй хәтеремдә: «Хәлил, мине ғәфү ит! Һиңә күп насарлыҡ ҡылдым. Һин үҙең бер кемгә лә зыян килтермәйһең, ә һиңә насарлыҡ теләгән кешенең башына бәлә килә...» Күпмелер ваҡыт үткәс, бахыр, ниндәйҙер хроник ауырыуҙан фани донъяны ҡалдырып китте, әйткәндәре тәүбә булған икән. Ерләшергә барып, ҡәберенә тупраҡ һалдым.

***

Сәйәсәттә әүҙем ҡатнашҡан кешенең кәйефе, урамдағы һауа торошо кеүек, үҙгәреп тороусан, холҡо ла хәл-торошоноң тәрән ҡанундарына бәйле була. Иртәнсәк уянғанда күңел үҙен төрлөсә тоя: йә тормошто сәскә баҡсаһылай күреп, тауҙар аҡтарып ташларҙай, йә ҡулдан бер эш тә килмәҫлек булып, хатта йәшәүҙән туйғандай. Яйлап тороп, эшкә тотона башлаһаң, Наполеондай ҡоролған планлы көнөң бик үк уңышлы булмай сыға, ә кәйефһеҙ уянған көндә, киреһенсә, бәхетле осраҡҡа тап булаһың. Шуға күрә кәйефкә бик буйһонмай, аңлы рәүештә уға баш булырға, уны үҙгәртә белергә кәрәк. Кәйефкә бирелеп йәшәү йыш ҡына яраҡһыҙ, хатта фажиғәле хәлдәргә килтереүе ихтимал. Әхмәр Үтәбайҙың үҙенә ҡул һалыусыларҙың күбәйеүе тураһындағы бәйәндәре был турала асыҡ һөйләй.

«Что? Где? Когда?» телевизион программаһы белгестәренә бирелгән һорау менән бәйле ваҡиға хәтергә һеңеп ҡалған. Һорау: «Бер Мысыр батшаһына уның дуҫы яҙыулы балдаҡ бүләк итеп, кәйефең ныҡ ҡырылған саҡта шул яҙыуҙы уҡып

йыуанырһың, тигән. Балдаҡ эсендә ниндәй һүҙҙәр яҙылған?» Белгестәр, күпме баш ватһа ла, яуапты таба алманы. Ә ул ябай ғына булып сыҡты, унда: «Был хәл барыбер үтеп китәсәк!» тип яҙылған икән. Кәйеф ныҡ хөртәйгән саҡта шул кәңәште һынап ҡарағаным булды, ысынлап та, тынысландыра.

## Дәүләт милке һағында

Дәүләт мөлкәтен хосусилаштырыуҙың энергетика, нефть һәм газ сығарыу, эре машиналар һәм авиация төҙөү тармаҡтарынан башланыуын күреп хайран ҡалдым. «Кемдеңдер шул тиклем икһеҙ-сикһеҙ байлыҡты һатып алырлыҡ аҡсаһы булһын да, илдең стратегик тармаҡтарын шәхси бизнес ҡулына биреп ҡуйыу кемгә кәрәк булғандыр? Был эште урлашыу аша ғәмәлгә ашырыуға намыҫы етерме икән ни?» – тип уйландым. Күренеүенсә, быларҙың бөтәһен дә беҙҙең илдә тормошҡа ашырып була. АҠШ-тың шул саҡтағы Дәүләт секретары Мадлен Олбрайттың фекеренсә, Рәсәйҙә үткән хосусилаштырыуҙы «егерменсе быуаттың иң ҙур енәйәте» тип баһаларға мөмкин. Хәҙер ҙә күп кенә юғары дәрәжәле кешеләр уны «енәйәтсел хосусилаштырыу» тип атай.

Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, Башҡортостанда был эштәр менән 1992 – 1995 йылдарҙа, Дәүләт милке фонды рәйесе, аҙаҡ Дәүләт милкенә идаралыҡ итеү комитеты етәксеһе булараҡ, үҙемә шөғөлләнергә тура килде. 1992 йылдың мартында эшкә тотонғанда, илдә хосусилаштырыу ҡыҙа башлағайны. Уның барышына анализ яһап, шул уҡ йылдың декабрендә БР Юғары Советы сессияһында сығышымда түбәндәгеләрҙе әйттем: «Анализдарҙан күренеүенсә, хосусилаштырыуҙың әлеге өлгөһө һәләкәткә, былай ҙа сирле иҡтисадтың емерелеүенә, предприятиеларҙың «бәйҙән ысҡыныу»ына, мөлкәттең социаль бурысы булмаған енәйәтсел төркөмдәр ҡулында тупланыуына, күптәрҙең эшһеҙ ҡалып, ярлыланыуына, социаль бәләләргә илтәсәк». Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был һүҙҙәр хаҡ булып сыҡты, һәм ул туралағы бөгөнгө фекерҙәр һыңлап, яуҙан һуң йоҙроҡ болғағандай яңғырай.

Бөтә ил, һарыҡ көтөүе кеүек, һөрлегешеп упҡынға китә башлай икән, айырым шәхесәр, хатта күп һанлы фирҡәләр ҙә бер ни ҡыла алмай, көтөүгә ҡушылып, уны упҡындан йолоп алыуҙы хәстәрләргә бурыслы. Хосусилаштырыу эшенә лә мин шул фекерҙән сығып тотондом, нисек тә булһа уны урлашыу юлынан ебәрмәҫкә, республикабыҙ өсөн уңышлы ысулын табырға тырыштым. Иң элек беҙ компанияларҙың күпселек акцияһын сит ҡулдарға бирмәй, республикабыҙ халҡына, коллективтарға һәм хеҙмәтсәндәренә тапшырырға, БР Хөкүмәте ҡарамағында ҡалдырырға ынтылдыҡ. Үҙебеҙҙә таратылған дүрт миллиондан ашыу ваучерҙың номерҙарын компьютер программаһына теркәп, уларҙың хаҡы 10 мең һум булһа, республика халҡына 40 мең һумлыҡ мөлкәт биреп йыйҙыҡ. Ә ситтән килгән номерлы ваучерҙарҙың хаҡын 10 мең һум менән сикләп, мөлкәттең ситкә китеүенә кәртә ҡуйҙыҡ. Рәсәй законы буйынса, элек ҡуртымға бирелгән мөлкәт бүтән өлкәләрҙә ҡуртымсыларға бушлай бирелһә, беҙ ундай мөлкәтте дөйөм хосусилаштырыуға йүнәлттек. Башҡа төрлө ысулдар ҙа ҡулланылып, һөҙөмтәлә илдең башҡа төбәктәренә ҡарағанда республика халҡы һәм Хөкүмәте ҡулында күберәк мөлкәт тупланды. Хөкүмәт ҡулындағы акциялар аҙаҡ, уларҙың капитализация хаҡы ун, хатта йөҙ тапҡырға артҡас, республика ҡаҙнаһын тулыландырырға, социаль мәсьәләләрҙе хәл итергә тейеш ине.

Беҙ күргән саралар Мәскәү даирәләренә оҡшаманы. РФ Дәүләт милкенә идара итеү комитеты рәйесе А. Чубайс беҙҙе ҡаты тәнҡитләне, мине вазифанан алырға маташты. Ул осорҙа БР Хөкүмәте Рәйесе булған А. Копсов шундай

ваҡиғаны һөйләне. Бер ваҡыт ул М. Рәхимов менән РФ Хөкүмәте Рәйесе В. Черномырдинға инеү өсөн ҡабул итеү бүлмәһендә ултырғанда, А. Чубайс килеп инә лә, һаулыҡ һорашып бөтөр-бөтмәҫтән, Рәхимовҡа: «Һеҙ ни эшләп Рәсәй закондарын боҙоп, хосусилаштырыуҙы үҙегеҙ уйлап сығарған юл менән алып бараһығыҙ, беҙҙең күрһәтмәләрҙе үтәмәйһегеҙ?» – тип бәйләнә башлай. Рәхимовтың яуабы бик ҡыҫҡа була: ул Чубайсты урыҫтың «өс хәреф»енә олаҡтыра.

Хосусилаштырыу кампанияһы аҙағында, төрлө даирәләр тарафынан сыҙап торғоһоҙ әсе тәнҡиткә дусар ителә башлағас, А.Чубайс бер осрашҡанда, һеҙ үткәргән хосусилаштырыу уңышлыраҡ булған икән, тип хаталарын бер аҙ танығандай итте. Беҙҙе шефың (М. Рәхимов – **Х. Б.**) менән дуҫлаштыр әле, тип тә әйткеләне. Бер нисә йылдан һуң А. Чубайс, «Рәсәй берҙәм энергетика системаһы» акционерҙар ойошмаһы етәксеһе булараҡ, беҙгә йыш ҡына килеп йөрөнө.

Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ахыр сиктә республикабыҙҙың мөлкәте өсөн булған көрәш, тырышлыҡтарыбыҙ тейешле һөҙөмтә бирмәне. БР Президенты хакимиәте тирәһендәге йәбешкәктәр, миңә төрлөсә яҡынлашырға маташып, янауҙар, яла яғыуҙар, ришүәт биреү аша дәүләт мөлкәтен бушлай үҙләштерә алмағас, мине вазифамдан ситләтеүгә өлгәште. Ул йылдарҙа кеше үлтереү тауыҡ салыуға тиң ине, шуға күрә хәҙер, еңел ҡотолғанмын икән, тип уйлайым. 1995 йылда мине Башҡорт дәүләт университетына проректор итеп эшкә саҡырҙылар.

***

90-сы йылдарҙың икенсе яртыһында хөкүмәт ҡарамағындағы акциялар, Рәсәй закондарын боҙоу һөҙөмтәһендә, төрлө кешеләрҙең шәхси мөлкәтенә әүерелде. Был осраҡта БР-ҙың тәүге Президентының ғәйебе бик үк ҙур ҙа түгелдер, сөнки, үткән заман кешеһе булараҡ, ул күп эштәрҙең асылын аңлап етмәне. Мәҫәлән, уның аңлауынса, мөлкәт нисек кенә хосусилаштырылмаһын, ул барыбер республика етәкселеге ҡарамағында ҡаласаҡ. Был турала ул һуңғы йылдарҙағы һәр интервьюһында тигәндәй әйтә килде. Бигерәк тә уның башын улы нығ бутаны. Юғары белемле йәш кеше булараҡ, ул законһыҙ хосусилаштырыуҙың аҙағы ни менән бөтөрөн аңларға тейеш ине. Мортаза Ғөбәйҙуллович улы менән конфликтҡа инеп йөрөгән осорҙа, уның ниндәй афера эшләгәнен аңлағандай булып, мөлкәтте кире дәүләткә ҡайтарырға маташҡан, әммә был эште еренә еткереп башҡарырға үҙенең дә, ярҙамсыларының да, күрәһең, ҡыйыулығы һәм һәләте етмәгән. Аҙаҡҡы сиктә Мәскәүҙең финанс магнаттары, республикала 90-сы йылдар аҙағында – 2000-се йылдар башында үткән хосусилаштырыуҙың законһыҙлығынан файҙаланып, республика мөлкәтенең күпселек өлөшөн үҙләштереүгә өлгәште.

***

Үрҙә әйтелгән янауҙар һәм ришүәттәр осраҡлы рәүештә иҫкә алынманы, сөнки уларҙың үҙҙәренә генә хас шомло йөкмәткеһе бар. Иң элек ришүәттәр тураһында. Шул осорҙа ҡайһы дәүләт даирәләрендә ниндәй һәм күпме ришүәт алыуҙары тураһында тарихҡа билдәһеҙ. Ул ваҡытта ундай эштәр, хәҙер ишетелгән шаҡ ҡатырлыҡ күренештәр менән сағыштырғанда, таралып өлгөрмәгәйне. Күрәһең, Совет власы осорондағы әхлаҡ ҡанундары бурһып, сереп өлгөрмәгәндер. Хәҙер ул ҡанундарҙың эҙе лә ҡалманы.

Үҙемә килгәндә, мауыҡтырғыс тәҡдимдәр аҙ булманы. Бер завод директоры ул ваҡытта иң ҡиммәт һаналған «Волга» машинаһы бирергә маташты. Икенсе бер база директоры, «Жигули-99» машинаһы базаның бер мөйөшөндә тора, барып ал, тип хәбәр итте. Шул уҡ база директоры комитетыбыҙҙа эшләгән бер

ҡатын аша ҡиммәтле бриллиант таштар, алтын ҡулсалар тултырылған ҙур моҡсай индерҙе. Бүләктәрен ҡулына тоттороп, ул ҡатынды ҡыуып сығарҙым. Мәскәү банкыларының бер вәкиле ул ваҡыттағы аҡса менән 400 миллиард (хәҙер 40 миллиард тирәһе) һум биреп, хеҙмәттәшлек итергә тәҡдим яһағас, ул тиклем аҡса менән эш итергә ваҡытым да, теләк тә, мөмкинлек тә юҡ, туғаным, тип баш тарттым. Башҡа төрлө тәҡдимдәр ҙә булды. Хәҙер һәр кемдең күңелендә, шулай уҡ минекендә лә була торған «ҡарышлауыҡ» тәьҫире аҫтында уйлап ҡуям: бушҡа үҙемде әүлиә итеп тотҡанымын икән, хәҙер кәм тигәндә урта хәлле олигарх булыр инем. Шулай ҙа икенсе яҡтан ҡарап уйланған уй еңеп ҡуя: аҡса һәм байлыҡ ҡоло булып йәшәгәнсе, донъяла саф намыҫ менән, булған матди хәлгә риза булып йәшәү күберәк ҡәнәғәтләнеү бирә. Ундайҙарҙы хәҙерге көндә иҫәр тип йөрөтәләр. Әммә Ер шарында шундай иҫәрҙәр күбәйеп, еңеүгә ирешмәһә, күпселеге аҡса һәм байлыҡ ҡоло булып йәшәгән кешелек донъяһы ҡотолғоһоҙ үлемгә табан бара.

Төрлө янауҙарға килгәндә, 1995 йылға тиклем Башҡортостанда кеше үлтереү кеүек енәйәттәр күҙәтелмәне, улар аҙаҡ башланды. Күберәк гәзиттәрҙә яла яғыу, эшеңде төрлө органдар тарафынан тикшертеү, вазифаңдан алыу менән ҡурҡытыу ысулдары ҡулланыла ине. Шулай, БР Министрҙар Советында ике йыл эшләгәндән һуң, 1991 йылдың декабрендә минән ҡотолоу өсөн генә иҡтисад бүлеге бөтөрөлдө. Дәүләт милке комитеты рәйесе булған осорҙа һалым органдары комитет эшмәкәрлеген бер нисә тапҡыр тикшереп, етешһеҙлек таба алманы. Ахыр сиктә, дәүләт милкен урлауға ҡамасауламаһын тип, үҙ теләгем менән эштән китеү тураһында ғариза яҙырға ҡуштылар. Үҙемдең дә теләгем шундай булғанға, БДУ ректоры, ураған һайын, ҡайт та ҡайт, тип саҡырып торғанға, 1995 йылда, кинәнеп, теләгән ғаризаларын яҙҙым.

## Тормош юлындағы юлдаштар

Тормош ниндәйҙер яғы менән купелы поезд вагонында оҙайлы сәйәхәтте хәтерләтә. Унда юлдаш булған кешеләрҙең ҡайһы берҙәре оҙаҡ ҡына һинең менән бергә бара, икенселәре ҡыҫҡа ваҡытҡа инеп, сығып китә. Шуның кеүек, тормошобоҙ юлында кем менәндер оҙаҡ ваҡыт ҡайғы-шатлыҡтарҙы уртаҡлашып, бергә барабыҙ, ҡайһылар менән аҙ ғына бергә булып та, уларҙан яҙмышыбыҙ үҙгәрерлек йоғонто кисерәбеҙ, ә ҡайһы берәүҙәр, осрашып та, иҫтә ҡалмай юғала. АҠШ социологтары үткәргән тикшеренеүҙәр шундай ҡыҙыҡ һәм фәһемле күрһәткестәр биргән: дөйөм алғанда дуҫ-иштәре күп кешеләр дуҫтары наҡыҫ булғандарға ҡарағанда тормошта карьера, ғаилә тормошо, матди именлек һәм башҡа өлкәләрҙә күберәк уңышҡа өлгәшә, бәхетлерәк ғүмер кисерә.

Үрҙәге «тормошомдоң һәр бер аҙымы иҫ киткес яҡшы кешеләр менән үтте, ямандары бер ҡул бармаҡтары менән һанарлыҡ» тигән һүҙҙәрҙе анализлап, шуны әйтергә кәрәк. Ысынлап та, үткән ғүмереңә әйләнеп ҡарап, аралашҡан һәр кешене иҫкә алып сыҡһаң, уларҙың бөтәһе лә тигәндәй шундай иҫ китмәле киң күңелле, ярҙамсыл, оло шәхестәр булғанлығына хайран ҡалаһың. Барыһы ла хәтер күгендә яҡты йондоҙҙар булып балҡый. Ҡайһы берҙәрен төркөмләштереп йә исемләп әйтһәң, бына улар: йөҙәрләгән ауылдаштарым («Һаҡмар» колхозы рәйесе Сәйфулла Самарбаев, партком секретары Мөхәммәт Байегетов, зоотехник Миңләхмәт Килдеғошов, бригадир Ильяс Байегетов, һауынсылар, мал ҡараусылар, механизаторҙар) һәм меңәрләгән райондаштарым; Йомаш ауылы мәктәбендә етенсене бергә тамамлаған класташтарым (Илгиз, Арсин, Мәүлихә, Фәррәх, Гөлшат, Фәнил) һәм үрҙә исемләп һанап үткән уҡытыусыларым;

Стәрлетамаҡ зооветтехникумында бергә уҡыған курсташтарым (Илгиз Шәйәхмәтов, Вассаф Абдрахманов, Роберт Сафин, Любовь Галанова, Любовь Асабина, Раиса Баруткина, Зиннур Мәрҙәнов, Галина Ковинцева һ.б.), курсыбыҙҙың кураторы Гончар Мария Федоровна, техникум директоры Сибряев Иван Федорович; армиялағы хеҙмәттәштәрем (Володя Барцев, Альберт Ғәйнетдинов, Валерий Зеленов, Валентин Зверев һ.б. күптәр), командирҙарым, шулар араһында рота командирым капитан Логачев Павел Михайлович, замполит майор Виноградов Виктор Николаевич, часть командиры полковник Михайлов Владимир Константинович; МДУ-лағы курсташтарым (Олег Ананьин, Рөстәм Нурыев, Александр Некипелов, Валентин Громыко һ.б. бик күптәр), уҡытыусылар һәм профессорҙар (экономика факультеты декандары Солодков Михаил Васильевич, Колесов Василий Петрович, профессорҙар Бузгалин Александр Владимирович, Хубиев Ҡайсын Азретович, Пороховский Анатолий Александрович һ.б.); аспирантуралағы фәнни етәксем Сажина Муза Аркадьевна, кафедра мөдире Радаев Валерий Викторович; БДУ-ла уҡытып сығарған бик күп уҡыусыларым һәм коллегаларым, шулар араһынан ректор Ғимаев Рәғиб Насретдин улы, проректорҙар Ғәлимов Баязит Сабирйән улы, Морозкин Николай Данилович, Солтанаев Йәүҙәт Тәлғәт улы, декандар Якшыбаев Роберт Әсғәт улы, Сөләймәнов Марат Ноғоман улы, Ғиләжев Фуат Ғарифулла улы, Исхаҡова Фәниә Сәғәҙи ҡыҙы, Ҡунафин Ғиниәт Сафиулла улы, Сәлихов Ғәфүр Ғөбәй улы, Мерәсев Рәхим Зәки улы, кафедра мөдирҙәре Аҡманов Ирек Ғайса улы, Аҡманов Алмас Ғайса улы, Мортазин Хәйрулла Хәбибулла улы, Зәйнуллин Марат Вәли улы, Бүкәнова Роза Ғаффан ҡыҙы, иҡтисад теорияһы кафедраһы ағзалары Мәхмүтов Әнәс Хөсәйен улы, Яҡупов Ғәббәс Исхаҡ улы, Сөнәғәтуллина Софья Ростислав ҡыҙы, Россинский Михаил Борисович, төрлө урында эшләгән профессорҙар һәм доценттар Камил Вәли улы Ғирфанов, Фәһим Бениамин улы Садиҡов, Камил Абдрахман улы Вәлиев һ.б. бик күптәр; Башҡортостан етәкселегендә бергә эшләгән арҡадаштар, шулар араһынан М.Ғ. Рәхимов, А. Я. Копсов, Р. И. Байдәүләтов, Р. С. Баҡыев, К. Б. Толкачев, В. П. Гаврилов, В. П. Василенко, В. Х. Байтурина, Х. Х. Ишморатов, И. Ә. Ғәбитов, С. Х. Әминев, Э. В. Ҡолмөхәмәтов, Ф. Ғ. Хантимеров, В. А. Власов, С. Р. Мортазин һ.б.; Рәсәй Дәүләт Думаһындағы донъя мәсьәләләрен бергәләп хәл иткән иптәштәр, шул иҫәптән Селезнев Геннадий Николаевич, Морозов Олег Викторович, Жуков Александр Дмитриевич, Рогозин Дмитрий Олегович, Севостьянов Виталий Иванович, Говорухин Станислав Сергеевич, Чилингаров Артур Николаевич, Сәйфуллин Франис Асҡарйән улы, Залиханов Михаил Чоккаевич һ.б. күп арҙаҡлы шәхестәр; Рәсәй Дәүләт хеҙмәте академияһындағы бергә эшләгән коллегаларым, бигерәк тә кафедра мөдире, академик Урсул Аркадий Дмитриевич, профессорҙар Гирусов Эдуард Владимирович, Делокаров Кадырбеч Хаджумарович, Мамедов Низами Мустафа оглы һ.б.; Рәсәй Фәндәр академияһының Философия институтындағы коллегаларым – профессорҙар Лисеев Игорь Константинович, Чумаков Александр Николаевич, институт директоры, академик Гусейнов Абдусалам Абдулкерим улы һәм бүтәндәр.

Әйтеп үтелгәндәрҙән тыш, эш, уҡыу йәки хеҙмәт менән бәйләнмәгән, ә төрлө тормош мәсьәләләренә уртаҡ ҡарашлы, дөйөм маҡсаттарыбыҙ булған, йәмғиәт эштәрен бергәләп башҡарған яҡын кешеләр бик күп булды. Улар араһында Мостай Кәрим ағай, Хөсәйен Әхмәтов ағай, Әхиәр Хәкимов ағай, Ғайса Хөсәйенов ағай, Абдулхаҡ Игебаев ағай, Нияз Мәжитов ағай, Билал Хәмит улы Юлдашбаев, Азат Абдуллин, Ғәзим Шафиҡов, Дамир Вәлиев, Роберт Байымов, Динис Бүләков, Рауил Бикбаев, Ғәлим Хисамов, Әмир Абдразаҡов, Аҫылғужа Баһуманов,

Рәшит Шәкүр, Ирек Кинйәбулатов, Абрар Ярлыҡапов, Зиннур Нурғәлин, Зөфәр Тимербулатов, Әхмәр Аҙнабаев, Әхнәф Дилмөхәмәтов, Салауат Күсимов, Рафаэль Зиннуров, Фәнил Фәйзуллин, Вил Тимербулатов, Әхәт Мостафин, Сәлиә Мырҙабаева, Роберт Ниғмәтуллин, Марат Илһамов, Ҡотдос Латипов, Венер Ғәлин, Мәхмүт Сәлимов, Егор Макаров, Вячеслав Мантатов, Әүхәт Мусин, Леонид Гринин, Хәмзә Ғәлиев, Әнүәр Әсфәндиәров, Абдрахман Ғәлләмов, Ғәли Сәйетбатталов, Нәғим Ишбулатов, Венер Хәлилов, Ирек Аблаев, Фәүҡәт Ҡыҙрасов, Вилким Мәҡсүтов, Рим Сырлыбаев, Илшат Ситдиҡов, Хәлит Сөләйманов, Рим Сынғыҙов, Данир Әхмәтйәнов, Заһир Ғәлин, Әкрәм Ниғмәтуллин, Зиннәт Хәйруллин, Рәсих Хәмитов, Зөфәр Мортазин, Рәмил Дилмөхәмәтов, Мирхәт Ҡәҙерғолов, Луиза Макшукова, Әхтәм Абушахманов, Әмир Әминев, Мазһар Иҫәнбаев, Нияз Сәлимов, Эльза Хорева, Сәлимйән һәм Вәлиәхмәт Бәҙретдиновтар, Зәйни һәм Булат Рафиковтар, Марат һәм Румил Аҙнабаевтар, Ирек, Нәғимә, Рифҡәт, Алмас һәм Айтуған Аҡмановтар, Иҙел, Рафаэль һәм Вәкил Агишевтар, Йәүҙәт, Тәлғәт һәм Рудик Искужиндар, Ринат, Рәшиҙә һәм Ришат Йосоповтар, Шәрифйән, Рәшит һәм Мәжит Ишемовтар, Фәйзрахман һәм Батыр Хисмәтуллиндар, Марс, Хәйҙәр, Харис һәм Альберт Шаһиевтар, Мирас, Гөлфиә, Артур һәм Урал Иҙелбаевтар, Зиннур, Рәсимә һәм Урал Ураҡсиндар, Рим һәм Айбулат Йәнғужиндар, Альбина һәм Фәнис Исхаҡовтар, Риф, Рәхим һәм Марсель Тойғоновтар, Сергей һәм Әлфиә Семеновтар, Сәфәрғәле, Вилүрә һәм Урал Йәнтүриндәр, Фәрит һәм Риф Ғәбитовтар, Флүрә Ноғоманова, Төхвәт Аслаев, Нурмөхәмәт хәҙрәт Ниғмәтуллин, Сәбилә Сөләйманова, Фирҙәүес Хисаметдинова, Сәриә Миржанова, Нәжибә Мәҡсүтова, Розалия Солтангәрәева, Тамара Ғәниева, Зөлфиә Ханнанова, Әҙһәм Исҡужин, Байтимер Агеев, Венер Аҙнағолов, Зиннур Йәрмөхәмәтов, Салауат Килдин, Әмир Юлдашбаев, Рәмил Исҡужин, Салауат Ғүмәров, Данир Үзбәков, Фәнил Күзбәков, Әхәт Хисмәтуллин, Миҙхәт Мәмбәтов, Азамат Дәүләткилдин, Рифҡәт Исрафилов, Олег Ханов, Резеда Саҙрыева, Рәшиҙә Туйсина, Гөлли Мөбәрәкова, Эльвира Юнысова, Хөрмәтулла Үтәшев, Тимер Йосопов, Радик Бирҙин, Зиннур Собханғолов, Рәмил Бәҙретдинов, Марат Ҡолшәрипов, Наил Ғәйетбаев, Илгиз Солтанморатов, Әхмәт Сөләйманов, Мәхмүт Хужин, Люциә Ғүмәрова, Гөлфиә Янбаева, Әхмәр Үтәбаев, Рәшиҙә Солтанова, Рафаэль Шафиҡов, Рәйес Исмәғилев, Мәрйәм Бураҡаева, Әкрәм Ғәниев, Рәйес Низамов, Закирйән Әминев, Йәлил Һөйөндөков, Әмир Әсфәндиәров, Салауат Низаметдинов, Ләйлә Исмәғилева, Рамаҙан Йәнбәков, Радик Гәрәев, Мәжит Алкин, Ғүмәр Әбделмәнов, Фәрит Бикбулатов, Ғәли Хәмзин, Фәйзрахман Ярышев, Валерий Фазлаев, Әҙеһәм Исҡужин, Азат Айытҡолов, Юлай Ғәйнетдинов, Флүрә Килдейәрова, Азамат Тимеров, Артур Туҡтағолов, Роберт Юлдашев, Рәсүл Ҡарабулатов, Рима Амангилдина, Батырхан Мырҙабаев, Ғәлимйән Баймырҙин, Ибраһим Мөхәмәтйәнов, Буранбай Күсәбаев, Мәжит Мәхмүтов, Әҙеһәм Барлыбаев, Мәжит Байегетов һ.б. һанап бөткөһөҙ бик ҡәҙерле кешеләрем. Яҡын дуҫтар араһында Төркиә Милли мәжлес (парламент) депутаты, профессор Невзәт Ялсынташ, Зәки Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә һәм улы Сүбидәй, украин профессоры Владимир Черняк, яҡут профессоры Егор Махаров, бурят профессоры Вячеслав Мантатов, сыуаш профессоры Геннадий Трифонов, Дағстан профессоры Мостафа Билалов һәм башҡа күп изге күңелле кешеләр бар.

Атап үтелгәндәр һәм аталмағандарҙың телевизор аша ғына таныш булып түгел, ә һәр береһе менән булған эскерһеҙ, туғандарса яҡын һәм матур шәхси мөнәсәбәтте һәм аралашыуҙы хәтерләй башлаһаң, донъя яҡтырып, күңелдә йылы тойғолар уянып китә. Бер кеше ғүмерендә шундай яҡын һәм ышаныслы

тормош юлдаштарының бик күп булыуы – үҙе үк ғәжәйеп күренеш! Ул кешеләрҙең ҡайһы берҙәре яҡты донъяла юҡ инде, тик барыбер улар йөрәктәребеҙҙең иң түрендә, күңелдәрҙе йылытып йәшәй. Был хәл үҙе үк уларҙың тормошо заяға үтмәгән, оло мәғәнәгә эйә булыуын күрһәтә. Шундай кешеләрҙең бер нисәһе менән аралашыу тураһында бәйән итке килә.

***

Мостай Кәрим ағай менән танышып, бер нисә осрашҡандан һуң, ул минән: «Ҡустым, һин ҡайһы районднан әле?» – тип һораны. Мин: «Баймаҡтан», – тигәс: «Ә-ә-ә... Улайһа һинең күкрәгең гел күгәргән көйө йөрөйҙөр», – тип мут ҡына йылмайып ҡуйҙы. Минең аптырашлы ҡарашыма яуап итеп: «Сөнки баймаҡтар ураған һайын «Мин – баймаҡ, мин – баймаҡ...» тип күкрәктәрен дөмбәҫләп йөрөй», – тине, кеткелдәп көлә биреп. Был лаҡапты тәүгә ишеткәнгә, мин дә рәхәтләнеп көлдөм. Һуңынаныраҡ Рәйес Түләктең ошо лаҡапҡа арналған шиғыр өҙөгөн ҡустым Әҙеһәм уҡып ишеттерҙе:

*Баймаҡтарҙың күкрәктәре*
*Күгәреп йөрөй, имеш.*
*Көнләшеп әйтә бит улар,*
*Әҙеһәм Әъзәмович!*

Икенсе юлы Аҡ йорттоң көньяҡ буфетында Мостафа Сафа улы, мин һәм тағы ла ике егет өҫтәл артында ашап, һөйләшеп ултырҙыҡ. Һүҙ тәмәке тартыуҙы, араҡы эсеүҙе ташлау тураһында сыҡҡас, Мостай ағай: «Егеттәр, мин ул алама ғәҙәттәрҙе әллә ҡасан ташланым инде», – тине лә шымды. Беҙ һүҙҙең дауамын көтә биреп ултырҙыҡ та, булмағас, бөтәбеҙ ҙә бер юлы тигәндәй: «Ә ҡатын-ҡыҙҙар менән эш нисек, Мостай ағай?» – тип һорай ҡуйҙыҡ. Шуны ғына көткәндәй, ағайыбыҙ мутлы-кайғылы тауыш менән: «Әйтәм бит, тар махсуслаштырыуҙы ғына ҡалдырырға тура килде, егеттәр», – тине. Ағай һигеҙенсе тиҫтәне ҡыуа ине.

Башҡорт дәүләт университетының проректоры вазифаһында эшләп йөрөгәндә, тыуған көнөмдән һуң бер аҙ ваҡыт үткәс, Мостай ағайҙан хат килеп төштө. Конверт эсендә маркаһы булмаған тағы бер конверттың тышына ҡулдан яҙылған: «Хөкүмәтте алдайым тип, тыуған көнөңә маркаһыҙ хат ебәргәйнем, кире килде. Яңынан, дөрөҫләп оҙатам. Мостай». Эстәге конвертта А-4 форматындағы ҡағыҙҙың уртаһына матур почерк менән түбәндәгеләр яҙылған:

**Хәлил Барлыбаевҡа объективка** *(характеристика)*

*Хәлил – изгелеккә дәлил:*
*Аты Хәлил, эше хәләл,*
*Исемдәре Барлы-Бай.*
*Күҙҙәрендә ғаҡыл нуры,*
*Телдәрендә – бал да май.*

Аҙаҡ был дүрт юллыҡ «Ағиҙел» журналында Мостай ағайҙын көндәлектәрендә донъя күрҙе. Тик уға бишенсе юл да өҫтәлгәйне: *«Ай-һай, шулаймы был!?»* Күрәһең, һуңғыһы мин түрәлектән сығып, ябай профессор булып киткәс өҫтәлгән. Ҡояшта ла тап булған кеүек, бөйөк кешеләрҙең дә йомшаҡ яҡтары була бит. 1999 йылдың көҙөндә мин РФ Дәүләт Думаһына һайланырға сыҡҡанда, Мостай ағай менән ҡулға-ҡул тотоношоп, матур итеп фотоға төшөп, календарь сығарҙыҡ. Унда өҫтәге дүрт юллыҡтың башын ағайҙың ҡулы менән яҙып, ҡултамғаһын ҡуйҙыҡ. 2003 йылда яңынан һайланырға сыҡҡас, ағай минең шул уҡ календарҙы ҡабатлап сығарырға тигән һорауыма риза булманы. Был

юлы БР Президенты хакимиәте лә кандидатурамды административ яҡлауҙан баш тартҡайны.

***

Сығышы Силәбе өлкәһе Арғаяш районынан булған, башҡорт халҡының әхлаҡи үҫеш нормаларын бик яҡшы белгән, халҡыбыҙҙың иң күренекле профессиональ философы Дамир Вәлиев: «Мин һине, үҙ һыҙаттарыңдан башҡа, тик Баймаҡ районынан булғаның өсөн генә лә ихтирам итәм. Баймаҡта булһаң, унда айырым үҙенсәлекле халыҡ йәшәгәнен күреп, кешеләрҙең эскерһеҙлегенә, һүҙгә тоғролоғона, асыҡ зиһенле һәм ышаныслы булыуҙарына, яҡты йөҙлөлөгөнә, ҡунаҡсыллығына хайран ҡалып йөрөйһөң», – тип әйтә ине. Был һүҙҙәрҙең «күкрәктәре күгәреп йөрөгән» баймаҡтар үҙҙәре йә сит илдән килеп комплимент һөйләгән ҡунаҡ түгел, ә кеше һәм халыҡтар этикаһын, бигерәк тә башҡорттоң әхлаҡ ҡанундарын профессиональ кимәлдә яҡшы аңлаған белгес, философия фәндәре докторы тарафынан әйтелеүе мөһим. Ысынлап та, райондаштарым һәм ауылдаштарым минең өсөн бер туған кешеләр кеүек ҡәҙерле. Күпме ерҙәрҙә булып та, уларҙың Кеше тигән оло исемгә тап төшөргәнен күргәнем булманы. Бәлки, икенсе берәү башҡа миҫал килтерә алыр, ә мин Дамир Жәүәт улына ҡарата үҙемдең шәхси тәьҫораттарым хаҡында ғына әйтәм.

Дамир дуҫтың яҡты донъянан бик иртә китеүе уның һанап бөткөһөҙ күп дуҫтары, коллегалары, уҡыусылары өсөн генә түгел, халҡыбыҙ өсөн ысын мәғәнәһендә сикһеҙ юғалтыу булды. Уның әллә күпме эшләнә торған ҡиммәтле хеҙмәттәре тамамланмай ҡалды. Уны ерләү көнөндә һөйләгән хушлашыу телмәремдә шул һүҙҙәрҙе әйттем: «Дамир Жәүәт улының дуҫтары бик күп булды, бер шәхси дошманы ла булманы. Тик башҡорт халҡының дошмандары ғына уның дошмандары ине».

***

Абдулхаҡ Игебаев ағай менән яҡшы дуҫтарбыҙ. 80-се йылдарҙа Р. Зорге урамының ике яғында ҡапма-ҡаршы йорттарҙа йәшәнек. Йыш ҡына телефон аша шылтыратышып, саф һауала йөрөштөрөп ала инек. Шағир кеше булараҡ, сабый бала һымаҡ, саф күңелле кеше. Ҡайһы саҡ урамда тыныс ҡына китеп барғанда ағайыбыҙ эргәнән юҡ була. Әйләнеп ҡараһаң, ағай: «Ҡустым, ғәфү ит, илһам килде, илһам...» – тип атлай-йүгерә ҡайтып китә ине. Күрәһең, һөйләшеүҙәребеҙ уны илһамландырып ебәрә торғандыр. Хәтерләйем, бер саҡ ул бейегерәк ҡар өйөмөнә баҫып, яңы шиғырын уҡырға тотондо: «...Еребеҙҙән дә айырылһаҡ, илебеҙән дә айырылһаҡ, инде беҙгә ни ҡала?..» Мин: «Ағай, әгәр ҙә: «Телебеҙҙән дә айырылһаҡ», – тип өҫтәһәң, шәп булмаҫмы?» – тинем. Ул ризалашты һәм шул шиғырын аҙаҡ мин тәҡдим иткәнсә баҫтырып сығарҙы. Шулай итеп, мин дә башҡорт шиғриәтенә бер юл өҫтәнем.

Яңылышам. Тағы ла ике шиғыр яҙып баҫтырыуға өлгәштем икән. Береһе 90-сы йылдарҙа «Йәшлек» гәзитендә донъя күрҙе. Абдулхаҡ ағай менән бергә илһамланып, мөстәҡиллек өсөн көрәшеп йөрөгәндә, 23 март – Республика көнөнә арналғайны. Икенсеһе «Халҡыбыҙ яҙмышы һәр беребеҙ ҡулында» исемле брошюрамда инеш һүҙ итеп «Йәшә, халҡым» тигән баш аҫтында баҫылды.

*Композитор халҡым*
*Операнан бөйөк,*
*Мәңге үлмәҫ йырҙар сығарған.*
*Шағир-сәсән халҡым*
*Бәйет-риүәйәттәр*

*Томдар итеп ташҡа баҫылған.*
*Моңло-зарлы халҡым*
*Донъяла бер*
*Ҡурай мөъжизәһен тыуҙырған.*
*Зирәк-айныҡ халҡым*
*Геродотҡа*
*Тиңләп, уны гений һоҡланған.*
*Өс меңенсе йылда*
*Яңы йырҙар,*
*Яңы уйҙар талап ителер.*
*Артыласаҡ үрҙәр*
*Күбәйерҙәр,*
*Тормош лабиринтҡа әүрелер.*
*Шикләнмәйем,*
*Халҡым ул үрҙәрҙе*
*Ҡаһарманлыҡ менән артылыр.*
*Тормош лабиринтын етеҙ үтеп,*
*Һүнмәҫ мәңгелеккә ынтылыр.*

Брошюра 1998 һәм 2003 йылдарҙа башҡорт һәм урыҫ телдәрендә нәшер ителде. Унан алда «Башҡортостан» гәзите биттәрендә донъя күрҙе. Брошюра халҡыбыҙҙың матди көнкүрешенә, әхлаҡи хәленә, башҡа күп төрлө проблемаларға арналды. Унда республикала тәүгеләрҙән булып эскелектең халҡыбыҙға ниндәй ҡаза килтереп, иң яуыз дошмандарының береһенә әүерелеүе, уға ҡаршы кисектергеһеҙ һәм киҫкен көрәш зарурлығы тураһында мәсьәлә бик үткер күтәрелгәйне. «Йәшел йылан» менән дуҫ булған ҡайһы берәүҙәр миңә, араҡы эскәндәрҙе бигерәк мәсхәрәләп, түбәнһетеп күрһәткәнһең, тип үпкә белдереп йөрөнө. Мин, яҙылғандар көҙгө кеүек, ысынбарлыҡты һүрәтләй, көҙгөгә түгел, үҙ ҡиәфәтеңә үпкәләргә кәрәк, тип яуап бирә инем. Беҙ Абдулхаҡ ағай менән был темаға ла күп һөйләштек.

Ағай ысын күңелдән, тик үҙ көсөң, һәләтең һәм хеҙмәтең менән тапҡан мал ғына хәләл, ә ниндәйҙер осраҡлы юл йә мутлыҡ менән табылған табыш харам була, тип әйтер ине. Һүҙҙәрен раҫлап, үҙе һәм ғаиләһе кисергән бер хәлде һөйләне: «Күптән түгел еңгәйең менән санаторийҙа ял иттек. Бер кис саф һауала йөрөгәндә, юлыбыҙҙа 10 һум аҡса күренде (хәҙер 2000 һум тирәһе – ул саҡта Өфөнән Мәскәүгә осоу 27 һум тора ине – **Х.Б.**). Мин, еңгәйеңдең ул аҡсаны алырға самаһы барлығын һиҙеп: «Теймә. Харам!» – тинем. Еңгәйең тыңламаны: «Кит, Хоҙай Тәғәлә юлыңа сығарып ҡуйған нәмәне нишләп алмаҫҡа!» – тип аҡсаны алды. Шунда уҡ кафеға инеп, нимәләр һатып алды. Мин принципиаль рәүештә ризыҡҡа ҡағылманым. Иртәгәһенә еңгәйең ниндәйҙер аҙыҡтан ағыуланып, бу ғай, ҡаты сирләп китте. Санаторийҙа дауалап булмағанлыҡтан, уны Өфөгә осорға тура килде. Шулай, ҡустым, тик хәләл көсөңә генә ышанып йәшәргә кәрәк». Ағайҙың һөйләгәндәре шундай бик фәһемле, фәлсәфәүи мәғәнәле һәм күңелде арбай ине.

***

Башҡорт халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәкимов ағай менән беҙ үткән быуаттың 70-се йылдары башында, мин МДУ студенты саҡта, аралаша башланыҡ. Башҡортостандан университетта уҡыусы аспиранттар, студенттар, квалификацияһын камиллаштырыусы белгестәр бергәләп йыш ҡына республикабыҙҙан килгән йә Мәскәүҙә йәшәгән күренекле яҡташтар менән осрашыуҙар үткәрә инек.

Улар араһында Хәким Ғиләжев, Билал Юлдашбаев, Ғайса Хөсәйенов, Динис Бүләков, Ирек Аҡманов, Дамир Вәлиев, Рәшит Шәкүр, Роберт Байымов, Азат Абдуллин, Әмир Юлдашбаев, Тимер Йосопов һ.б. арҙаҡлы шәхестәр була торғайны. Әхиәр ағай менән аралашыу беҙҙең өсөн бигерәк тә ҡыҙыҡлы һәм фәһемле ине. Осрашыуҙар рәсми түгел, хатта ҙур булмаған студент һәм аспирант бүлмәләрендә сәй эсеү һәм оҙон-оҙаҡ фекер алышыуҙар, әңгәмәләшеүҙәр рәүешендә лә үтә. Ҡайһы бер фекере зәғиф кешеләрҙең: «Беләбеҙ инде ниндәй сәй эскәнегеҙҙе», – тип төрттөрөүе ихтимал. Был төптән хата, уйҙырма. Әхиәр ағай эскелектең халҡыбыҙҙың дошманы, иҫерек кеше – мәсхәрә күренеш, иҫерек компания – ахмаҡтар өйөрө икәнен үҙе беҙгә анлата ине.

Әхиәр ағай фронтовик, күренекле яҙыусы, төрлө данлыҡлы премиялар лауреаты, РСФСР Яҙыусылар берлеге секретары, Советтар Союзындағы ин юғары интеллектуаль кимәлле «Литературная газета»ның редакция коллегияһы ағзаһы, СССР милли әҙәбиәттәре бүлегенең етәксеһе булып эшләүсе кеше булараҡ ҡына түгел, ә шул уҡ ваҡытта ысын мәғәнәһендәге юғары интеллигентлы шәхес булыуы һәм үҙен башҡорт ауылдарында йәшәгән ағайҙарыбыҙ кеүек ябай, иғтибарлы һәм олпат тотоуы менән күнелдәребеҙҙе арбай ине. Һөйләшеүҙәр ағайҙың һуғыш иҫтәлектәре, әҙәбиәт мәсьәләләре, студент тормошо, республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың яҙмышы, башҡа бөтмәҫ-төкәнмәҫ темалар һәм проблемалар тирәһендә урала торғайны.

Мәскәү университетын тамамлап, Өфөлә эшләй башлағандан һуң да, мин – Мәскәүҙә йәки Әхиәр ағай Өфөлә булғанда беҙ йыш ҡына осрашып, аралашып йәшәнек. Иң үҙенсәлекле, әһәмиәтле, фәһемле һәм хәтерҙә ныҡ ҡалған осрашыуҙар 1994 йылдын май-июнендә булды. Ул ваҡытта беҙ өс кеше – Башҡортостандың Конституцион Суды рәйесе Ирек Мөҡсинов, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайы депутаты Зөфәр Йәнекәев һәм мин (ул ваҡытта БР Дәүләт милкенә идара итеү комитеты рәйесе) Рәсәй дәүләт органдары менән Башҡортостан дәүләт органдары араһында вәкәләттәрҙе бүлешеү тураһындағы килешеүҙе нисек итеп яҙыу тураһында һөйләшеүҙәр алып бара инек. Һөйләшеүҙәр бик көсөргәнешле барҙы, документтың һәр һүҙе, хәрефе һәм өтөрнөктәһе өсөн бәхәсләшергә тура килде. Килешеүҙең урыҫсаһын эшләү менән бер үк ваҡытта, башҡортсаһын яҙыу кәрәк ине. Зөфәр Ирғәле улы менән Килешеүҙе тырыша-тырыша башҡортсаға тәржемә итә алһаҡ та, тәржемәнең юғары профессиональ кимәлдәлеге, аҙаҡ ниндәйҙер кәмселектәр асыҡланыу ихтималлығы бар ине.

Шул саҡ, телебеҙҙе камил белгән яҙыусы Әхиәр ағай менән осрашып, Килешеүҙең йөкмәткеһе тураһында кәнәшләшергә кәрәк, тигән уй тыуҙы. Ваҡыт бик тығыҙ, документ иртәгә иртә менән һөйләшеүҙәрҙең сираттағы сессияһына әҙер булырға тейеш ине. Киске сәғәт 10-дар тирәһендә Әхиәр ағайға шылтыратып, мәсьәләнең асылын аңлатҡас, ул шунда уҡ мине үҙенең фатирына саҡырҙы. Төн буйына, йәғни таңға тиклем икәүләп Килешеүҙең башҡортса нөсхәһен энәһенән ебенәсә тикшереп, төҙәтмәләр индереп, арыу ғына шымарттыҡ. Яҙыусыбыҙ етәкселегендә беҙ документты грамматик төҙөлөш күҙлегенән генә түгел, йөкмәткеһе буйынса ла ныҡлы иғтибар биреп эшкәрттек. Ағайыбыҙ менән икәүләп башҡарған эш Рәсәй делегацияһы менән артабанғы һөйләшеүҙәрҙә ныҡ ярҙам итте. Әхиәр Хәсән улын 1994 йылда Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан хөкүмәттәре араһында төҙөлгән Килешеү авторҙарының береһе тип иҫәпләргә мөмкин.

Тормош тәжрибәһенә бай шәхес булараҡ, Әхиәр ағай был документтың оло тарихи әһәмиәткә эйә булыуын әйтте, шул уҡ ваҡытта уның оҙаҡ эш итә алы-

рына шик белдерҙе. Унынса, Рәсәй даирәләре һәр саҡ үҙҙәренең хәле сетерекле, ауыр саҡтарҙа башҡорттар менән уртаҡ тел табырға, килешеүҙәр төҙөргә ынтылған, ә инде хәтәр осорҙар үтә барған һайын килешеүҙәрҙе боҙорға, уларҙан баш тартырға теләүселәр алға сыҡҡан. Былдай хәл XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдарынан һуң да, 1917 йылғы ике инҡилаптан һуң да күҙәтелде. Әхиәр ағайҙың, Килешеүҙең яҙмышы оҙаҡ булырмы, ун йылға барырмы икән, тигән фекере урынлы булып сыҡты: документ халҡыбыҙға ярайһы ғына ҡаҙаныштар килтерһә лә, оҙаҡ ғүмерле булманы.

Хәтерҙә ҡалған икенсе осрашыу Әхиәр ағай госпиталдә дауаланып ятҡан саҡта булды. Һуңғы йылдарҙы ул йыш ҡына ауырыштыра ине. Мәскәүҙә булғанымда, ғәҙәттәгесә, йортона шылтыраттым. Лидия еңгәй уның госпиталдә ятыуын әйтеп, унда нисек барырға кәрәклеген өйрәтте. Күстәнәскә башҡорт балы һәм башҡа тәм-том алып, Боткин исемендәге дауаханаға йүнәлдем. Яҡташыбыҙ ғазаплы һуғыш йылдары һөҙөмтәһе булған йөрәк ауырыуынан интегә ине. Оҙаҡ ҡына төрлө темаларға һөйләшеп ултырҙыҡ. Ағай Өфөнән хәл белешергә килеүсе булмауына бошондо, миңә рәхмәттәр әйтте. Тыуған ерен, Дәүләкәнен, Дим буйы туғайҙарын һағыныуын һөйләне. Ағайҙың: «Бигерәк тә ауылда эс-ҡарындан бешерелгән бишбармаҡты һағындырҙы», – тигәне әле лә хәтерҙә. Был һүҙҙәр уның Мәскәүҙә донъя көтһә лә, ғәмәлдә башҡорт көнкүрешенә берегеп йәшәгәнен раҫлай ине.

Еңеү көнө еткән һайын иң элек атайым менән Әхиәр ағай, башҡа яҡын олатайҙар, ағайҙар иҫкә төшә. Улар һуғышта еңеп, беҙгә тыныс тормош биреп, тәрбиәләп кешe итте. Әхиәр ағайҙың баҫалҡы тауышы, тәрән аҡыллы ҡарашы, яғымлы йылмайыуы – һәр ваҡыт күҙ алдында. Бөгөн – Интернет заманы. Яҡташымды юҡһынған саҡта «поисковый сайт»ҡа инәм дә «Хакимов Ахияр Хасанович» тигән һүҙҙәрҙе йыям. Шунда уның матур һүрәттәрен ҡарап, ҡаһарман тормош юлын, бай һәм юғары ижадын сағылдырған хикәйәләрен уҡып кинәнәм. «Википедия»ла бирелгән хәбәрҙә, яҡташыбыҙ һуғышҡан 103-сө гвардия уҡсылар дивизияһының «һуғыштан һуң күренеклек яулаған ике кешенең береһе – Хәкимов Әхиәр Хәсән улы» тиелгән. Икенсеһе – Именлек хеҙмәтенең Тышҡы разведка академияһы профессоры, генерал Вадим Кирпиченко икән. «Литературная газета»ның фронтовиктарға бағышланған сайтында яҡташыбыҙҙың «Памятник», «Весенние грезы» исемле шиғырҙары иң тәүге рәттә бирелгән. Улар ағайҙың, ҙур яҙыусы булыу менән бергә, талантлы шағир икәнен дә раҫлай.

***

Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовты тәү тапҡыр 1989 йылдың яҙында СССР Юғары Совет депутаттары исеменән Башҡортостанға союздаш республика статусы юллау тураһындағы мөрәжәғәткә ҡултамғалар йыйып йөрөгәндә күрҙем. Ул эште төп башҡарыусы Мәүҙиғә апай Ғәбитова «Россия» ҡунаҡханаһының фойеһында Кремлдән ҡайтып килгән депутаттар араһындағы табаҡ битле, ҡыҫыҡ күҙле һәм ҙур кәүҙәле ағай янына йүгереп барҙы ла: «Мортаза ағай, ошо мөрәжәғәткә ҡул ҡуйырға кәрәк», – тип уға ҡағыҙ битен һондо. Документҡа бер нисә секунд күҙ йүгертеп, ағай миңә күҙ ташланы ла: «Юҡ менән булып йөрөйһөгөҙ, егеттәр», – тип китеп тә барҙы. Шулай ҙа, 1990 йылдың мартында БАССР Юғары Советының Рәйесе итеп һайланғандан һуң, Мортаза Ғөбәйҙулла улы Башҡортостандың мөстәҡиллеге тураһындағы декларацияны ҡабул итеү, автономия статусынан ҡотолоу өсөн күп көс һалды.

***

Ул осорҙа республикала ижтимағи тормош бик көсөргәнешле ине. Хәтерләйем, Башҡорт ССР-ы Юғары Советы һәм Өфө ҡала Советының берләштерелгән сессияһында ҡала Советының артҡы рәттәрҙә ултырған һаҡаллы депутаты, ултырышты алып барған М. Рәхимовҡа ҡысҡырып, һүҙен бүлдереп тәртипһеҙләнде. «Эргәһенә барып, яғаһынан алырғамы әллә?» – тип ултыра инем, тегене күршеләре тынысландырып өлгөрҙө. Шул уҡ сессияла республиканың мөстәҡиллеген милли мәсьәлә менән бутап, шау-шыу башларға теләүселәр ҙә күп ине. Ундай баш баштаҡлыҡты Мортаза Ғөбәйҙулла улы бик оҫта, урынлы шаярыу менән иҫкәртә белде: «Милли мәсьәләне ҡыҫтырып, башты ҡатырмағыҙ! Һүҙ милләттәр түгел, берҙәм республика халҡы тураһында бара. Ниндәй милли мәсьәлә?! Бөтәбеҙ буталышып, аралашып, эшләп, йәшәп ятабыҙ! Әллә күпме ҡатнаш милләтле ғаиләләр бар! Ә инде бөтәгеҙҙең дә ниндәй милләтле һөйәркәләрегеҙ бар икәнен әйтеп тә тороу кәрәкмәй!» Халыҡ көлә-көлә тынысланып, ул осорҙа бик яуаплы булған сессия эшлекле рәүештә дауам итте, һәм тейешле ҡарарҙар ҡабул ителде.

Мортаза Рәхимов сәйәсәт өлкәһен тәрәндән белмәһә лә, крәҫтиәндәргә хас хәйләкәрлек менән ағымдағы конъюнктураны яҡшы һиҙә ине. Мәҫәлән, М. Горбачев менән ул һәйбәт мөнәсәбәттә булды. ГКЧП фетнәһе көндәрендә икеләнеп йөрөһә лә, аҙаҡ Б.Ельцин менән дә дуҫлашты. Хәтерләйем, 1999 йылдың көҙөндә, Дәүләт Думаһына һайлау алды кампанияһы менән бергә, киләһе йылдың мартында Рәсәй Президентын һайлау буласағы ла күҙ уңында тотола ине. В. Путин үҙенең Президентлыҡҡа кандидат буласағын иғлан итә лә, Премьер-министр вазифаһын үтәүсе булараҡ, Ырымбур ҡалаһында Урал-Волга буйы етәкселәре менән кәңәшмә үткәрә. Унда ҡатнашҡан М. Рәхимов, беренселәрҙән булып телмәр тотоп, залдағыларҙы әле танылып өлгөрмәгән Владимир Путинды Президент һайлауҙарында яҡларға саҡыра. Был алдан күрә белеүсәнлек булған, сөнки ул осорҙа М. Рәхимов, Ю. Лужков, М. Шәймиев, Е. Примаков бер төркөм булып сыҡҡайны. В. Путиндың хәтере бик яҡшы, үҙенә һәйбәт мөнәсәбәт күрһәткән кешеләрҙе онотмағаны билдәле. Был артабан Башҡортостан Президентының яҙмышында ла яҡшы күренде. 2010 йылда В. Путин Рәсәй Президенты булһа, бәлки, М. Рәхимовты вазифаһынан ситләтмәҫтәр ине.

М. Рәхимовтың БР Юғары Совет Рәйесе, аҙаҡ Президенты булып һайланыуы – ҙур ҡаҙаныш, ҡаһарманлыҡ һәм аҡыл билдәһе. Юғары етәксе үҙе барыһын да яҡшы белергә, универсаль һәләтле кеше булырға бурыслы түгел. Президентлыҡҡа уҡытмайҙар, уның төп һәләте – тейешле урынға һәләтле кешене ҡуя белеү, шундайҙарҙан үҙенә команда төҙөү, һәр кемдең эшенә тейешле баһа бирә белеү. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Мортаза Ғөбәйҙулла улының эшмәкәрлегендә кәмселектәр булмай булманы. Уның янында ниндәй генә йәбешкәктәр, карьеристар, мут һәм шикле шәхестәр булып китмәне. Күптәренең аҙаҡ уның дошманына әүерелеү генә түгел, хатта халҡыбыҙҙы һәм республиканы күрә алмаусылар икәне асыҡланды.

Әлбиттә, Мортаза ағайҙы «интеллектуал» тип әйтеүселәр булманы. Ижтимағи фәндәрҙе яратмаған, әммә зиһене менән инженер һәм завод директоры булып эшләрлек кимәлгә еткән шәхес ул. 1994 йылдың көҙөндә мин, Мәскәү даирәләренең Чечняла хәрби кампания башлап ебәреүҙәренә ныҡ шомланып, Мортаза Ғөбәйҙулла улына, был һуғыш – иҫәрҙәр авантюраһы, Рәсәй халҡына бик күп бәлә килтерәсәк, ошо фекерҙе Б. Ельцинға күмәкләп еткерергә кәрәк ине, тигәс, ул бөтөнләй вайымһыҙ тәҫтә, ул эшкә беҙҙең бер ниндәй ҙә ҡыҫылышыбыҙ юҡ, тип яуап бирҙе. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул ҡанлы бәрелештә Башҡортостандың күп

кенә егеттәре лә башын һалды. Дәүләт Думаһы депутаты булараҡ, һайлаусыларҙың һорауы буйынса шул һуғышта ҡатнашҡан һәм ғәйеп булған һалдаттарҙың яҙмышы менән күп шөғөлләнергә тура килгәйне.

БР Юғары Советы Рәйесе, Президенты булып эшләүенең тәүге осоронда Мортаза Рәхимов үҙен ярайһы ғына халыҡсан, ябай һәм тәбиғи тотҡан, совет осоронда алған яҡшы һыҙаттар менән эш итеүсе етәксе итеп күрһәтте. Был осорҙа уның төркөмөндә юғары кимәлдәге белгестәр ҙә йыйылғайны. Улар араһынан И. Мөҡсиновты, И. Әҙеһәмовты, В. Сәмиғуллинды, С. Әминевты, С. Килдинды, И. Ғәбитовтарҙы атап әйтергә мөмкин. Ирек Шәриф улы – М. Горбачев менән МДУ-ның юридик факультетында бер курста белем алған, Рәсәй кимәлендәге юғары әҙерлекле белгес һәм хәҙерге Башҡортостан хоҡуҡ системаһына нигеҙ һалыусы. Уға В. Сәмиғуллин яҡшы ярҙам күрһәтте. Хосусилаштырыу буйынса мин әҙерләгән указ проекттарының күбеһен М. Рәхимов бер кемдән дә раҫлатмай, туранан-тура ҡул ҡуйып сығара ине.

Тик бер ни тиклем ваҡыт үткәндән һуң, үтә оло һәм сиктәре күренмәгән власть йөгө аҫтында, ағайҙың башы әйләнә башланы шикелле. Ҡайһы бер мәсьәлә буйынса: «Ағай, улай эшләү законһыҙ була бит әле», – тиһәң, ул: «Ниндәй закон? Бына мин һиңә закон!» – тип әйтер ине. Ҡайһы бер сығыштары ла хайран ҡалырлыҡ булды. 2002 йылда ул, мәҫәлән, улы тарафынан республикала ниндәйҙер «фетнә» ойошторолоуы тураһында һүҙ таратты. Шул уҡ осорҙа бер ниндәй нигеҙһеҙ, Башҡортостанды парламент республикаһы итәм, тип маташты.

Башҡортостандың беренсе Президентының иң «йомшаҡ» урыны – кемдер уға икенсе берәү хаҡында ниндәйҙер хәбәр еткерһә, уның дөрөҫмө-түгелме икәнен тикшереп тормай, сабый балаларса ышанып, шул ишеткәненән башҡа хәҡиҡәт юҡ, тип ҡәтғи рәүештә эш итеүе. Шул арҡала М. Рәхимов күп кешеләргә яңылыш мөнәсәбәт күрһәтеп, уларға ла, үҙенә лә, иң мөһиме, республикала эш барышына ныҡ зыян килтерҙе. Бер мәл, мин БР Дәүләт милкенә идара итеү комитеты рәйесе булып эшләгәндә, ул телефондан шылтырата: «Һин нишләп Ҡадиров (Рәфис Ҡадиров **– Х. Б.**) менән бергәләп миңә ҡаршы эш алып бараһың?» Һорау шул тиклем мәғәнәһеҙ яңғыраны, ҡапылғара үҙем дә көтмәгән һүҙҙәр ысҡындырҙым: «Аҡылығыҙҙан шаштығыҙмы әллә?! Ул әкиәтте кем һөйләне? Мин Ҡадировты ғүмеремдә беренсе тапҡыр күреп, үткән аҙнала ғына унан «Восток» ЧИФ-ын (Р. Ҡадиров ошо ЧИФ-тың һәм шул исемле банктың етәксеһе ине – **ред**.) Хөкүмәткә тартып алыуҙы ойошторҙом!"

Мортаза Ғөбәйҙулла улының Рәсәйҙең өсөнсө Президенты Д. Медведев менән уртаҡ тел таба алмай, уны, президент ил менән компьютер аша етәкселек итә алмай, тип тәнҡитләүе тормоштан артта ҡалғанлығын тоймаһа ла, республика етәксеһе вазифаһындағы көндәренең һанаулылығын һиҙгәнлектән килгәндер. Ә инде 2010 йылдың йәйендә Башҡорттарҙың Бөтә донъя ҡоролтайын йыйып, унда, халыҡтың етди проблемаларын хәл итеү урынына, күпселек һүҙҙе үҙен яҡлатыуға, Кремлгә бармаҡ янауға, кеҫәнән йоҙроҡ күрһәтеүгә йүнәлтеүе уның вазифаһына һуңғы нөктә ҡуйғандыр.

Әлбиттә, М. Ғ. Рәхимов гонаһыҙ фәрештә түгел, унда күптәргә хас дөйөм ыңғай һәм кире һыҙаттарҙың бөтәһе лә бар. Ҡайһы бер хаталары өсөн ғәйеп беҙҙә лә юҡ түгелдер, уларҙы булдырмаҫ өсөн тейешле эш алып бара белмәгәнбеҙҙер. Әлбиттә, беҙ һәм беҙҙән һуң килгәндәр уның тураһында нимә генә яҙып, һөйләмәйек, ул 20 йылға яҡын Башҡортостанды етәкләп, илебеҙ тарихына күренекле шәхес булып инде. М.Рәхимовтың эштәренә объектив баһа биреп, үҙен ихтирам итергә кәрәк. Уның Рәсәй тарихына күренекле шәхес булып инеүе халҡыбыҙ тарихын байытасаҡ.

***

Ғалим һәм яҙыусы Роберт Байымов менән Мәскәү дәүләт университетенда ул аспирант, мин студент саҡта аралаша башланыҡ. Булмышы менән философ ҡиәфәтле, уйсан, йомшаҡ күңелле, үтә баҫалҡы кеше. Өфөнөң Зорге урамындағы ҡапма-ҡаршы йорттарҙа йәшәгәндә, йыш ҡына медицина училищеһы артындағы урмандың һәр һуҡмағынан үтеп, әңгәмәләшеп йөрөй торғайныҡ. 1979 йылда мин МДУ-ла Квалификация күтәреү институтында уҡып, Африка илдәренә эшкә барыу өсөн әҙерлек үттем. Бер Африка белгесенең Европа һәм Африка кешеләре араһындағы айырмалыҡтарҙы күрһәткән көләмәс һөйләгәне хәтеремдә. Өфөгә ҡайтҡас, мин уны, африканды – башҡортҡа, европалыны урыҫҡа әүерелдереп, Роберт Нурмөхәмәт улына һөйләнем. «Бер башҡорт йәйләүҙә ҡурай тартып ултыра. Уның янына урыҫ килә лә:«Ниңә ҡурай уйнап ултыраһың, башҡорт?» – тип һорай. «Ә нимә эшләргә?» – ти башҡорт. «Нисек нимә эшләргә? Ана, күпме ерең йәйрәп ята», – ти урыҫ. «Шунан?» «Нисек шунан, шул ереңде һөрөр инең». «Шунан?» – ти башҡорт. «Шунда иген сәсер инең?» «Шунан?» «Игенде йыйып, баҙарҙа һатыр инең». «Шунан?» «Йорт һалып, ғаиләң менән шунда йәшәр инең». «Шунан?» «Шунан ҡурай тартып ултырыр инең». Башҡорт ысын күңелдән аптырай: «Ә һуң мин нимә эшләп ултырам?!» Көләмәс Роберт Байымовҡа  ныҡ оҡшаны, аҙаҡ шуның нигеҙендә хикәйә яҙып, «Ағиҙел» журналында баҫтырҙы. Уның геройы – трамвай йөрөтөүсе егет эшендә төрлө мажараларға осрай. Әҫәрҙең төп идеяһы кешенең изге йәки яуыз эштәре уның үҙенә  әйләнеп ҡайтыуы тураһында. Был турала шағирыбыҙ Рауил Бикбаев «Хазина» поэмаһында бик уҫал, әммә ғәҙел хикәйәтте теркәй:

*Яңы урыҫ илде талай,*
*Аҡса һуға яңы татар,*
*Иҫке башҡорт ҡурай тарта,*
*Йырлай, бейей, моң тарата.*
*Иҫке башҡорт иҫереп ята,*
*Яңы башҡорт ерен һата.*

***

Күренекле яҙыусыбыҙ Ғәлим Хисамов 90-сы йылдарҙа БР матбуғат һәм киң мәғлүмәт министры булып эшләне. Йыш ҡына төрлө сараларҙа, йыйылыштарҙа, театр-концерттарҙа бергә ултырып аралашырға ярата инек. Әммә уны оҙаҡ эшләтмәнеләр, ниндәйҙер сәбәптән кире ижад менән шөғөлләнергә ебәрҙеләр. Элек ул министр сағында саралар бара торған залдарҙа уның тирә-яғы кеше менән туп-тулы, эргәһенә яҡын барыуы ҡыйын була торғайны. Министрлыҡтан төшкәс, бының тирә-яғы гел буп-буш, бер нисә тиҫтә урын иркен була башланы. Ундай осраҡтарҙа мин уның янына еңел генә, бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ барып ултыра башланым. Шулай бер саҡ Ғәлим көлә-көлә миңә өндәшә: «Слушай, хәҙер минең янға һин генә килеп ултыраһың. Ә мин министр саҡта эргәлә өйөрөлөп йөрөгән бәндәләр әллә ҡайҙа юҡ булды!» Мин уға: «Эйе, дуҫ, йәшәйештең ҡануны шулай, һин көслө саҡта янында көслөһөнән көсһөҙҙәре күберәк өйөрөлә. Һин көсһеҙләнгәс, элек күп булған көсһөҙҙәр юғала ла, ысын дуҫ булған аҙ ғына көслөләр тороп ҡала», – тинем.

***

Матбуғат  һәм киң мәғлүмәт  министрлығын Зөфәр Тимербулатов,  Ғәлим Хисамов һәм Борис Мелкоедов алмаш-тилмәш етәкләне. Бер ваҡыт Зөфәр Мөхтәр

улы мине, БР Дәүләт милкенә идара итеү комитеты етәксеһе булараҡ, Чехия-Австрия фирмаһынан Башҡортостан өсөн полиграфия комплексы һатып алып, монтажлау эшенә йәлеп итергә булды. 1993 йылдың сентябре–октябрь башында полиграфкомбинат инженерын эйәртеп, комплекс менән урында танышыу өсөн, тәүҙә Прага ҡалаһына остоҡ, аҙаҡ автомобилдә Венаға килдек. Эш менән генә булып йөрөмәнек, әлбиттә, төрлө экскурсияларҙа булдыҡ. Венаның тирә-яғындағы элекке Австро-Венгрия королдәре төҙөткән, иҫ китерлек итеп йыһазланған замоктар, усадьбалар, музей ҡаласыҡтары һоҡландырғыс тәьҫир ҡалдырҙы. Австрия кешеләре лә ҡыҙыҡ күренде: немецса һөйләшһәләр ҙә, немецтарға бөтөнләй оҡшамағандар, итальяндар һымаҡ, хис-тойғоло халыҡ икән. Октябрь башында телевизорҙан Рәсәйҙә Президент менән Юғары Совет араһында бәрелеш башланғанын, Аҡ йортҡа танкынан атҡандарын күрһәтә башланылар. Беҙ аптыраšта ҡалдыҡ:«Низағ нимә менән бөтөр? Кем еңеп, ниндәй власть урынлаштырыр? Бәрелеш көсәйеп, граждандар һуғышына әүерелмәҫме? Беҙҙе Мәскәүҙә нимә көтә?» кеүек һорауҙар борсой ине. Бер нисә урынға шылтыратып, хәбәрләшергә тура килде, бәхеткә күрә, Мәскәүгә ҡайтып төшкәндә фетнә баҫтырылып, барыһы ла тынысланғайны.

***

Зорге урамында Зыя Нуриевтың ауылдашы – Бөрө районы Үрге Ыласынтау ауылында тыуып үҫкән Илһам Яхин ағай менән фатир ишектәре ҡапма-ҡаршы булды. Омск ҡалаһында төҙөлөш институтында уҡып сығып, БНЗС тресында инженер булып эшләне ул. Ҡатыны Әнисә апай менән Лина исемле ҡыҙ, Айҙар исемле ул үҫтерҙеләр. Ситтә уҡығанда унда башҡорт патриотизмы тойғоһо көсәйеп китеп, был йәһәттән ул күптәргә өлгө булырлыҡ кеше ине. Заманында КПСС Үҙәк Комитетына, Өлкә комитетына, башҡа органдарға күп хаттар яҙып, ни өсөн мәктәптәребеҙҙә башҡорт телен уҡытмайҙар, ниңә башҡортса гәзит-журналдар, башҡа баҫмалар аҙ сыға, радио-телевидениела тапшырыуҙар минутлап ҡына бирелә һ.б. үткер проблемаларҙы күтәреп йөрөгән. Һөйләүенсә, бер саҡ уны КПСС Өлкә комитетына саҡыралар. Ни өсөн икәнен белмәгән Илһам ағай, матур кейенеп, галстук тағып, «йәшел йорт» тип аталған Өлкә комитетҡа йүнәлгән. Уны фән һәм уҡытыу бүлеге мөдире Фәйзулла Солтанов саҡырған икән. Һаулашып, танышып алғас, ул өҫтәл тартмаһынан Илһам ағайҙың Мәскәүгә яҙған хатын килтереп сығарған да: «Ҡустым, бына һин шундай-шундай хат яҙғанһың, ҡайһы бер күренештәрҙе, проблемаларҙы дөрөҫ күрһәткәнһең, афарин. Тик хаталы урындары ла етерлек, беҙҙә атҡарылған күп эштәрҙе тормошҡа ашмаған итеп һүрәтләгәнһең, – тип өгөт-нәсихәткә тотонған. Илһам ағай, килешмәйенсә, үҙ дәлилдәрен килтереп, бәхәсләшә башлаған. Оҙаҡ ҡына һүҙ көрәштергәндән һуң, Фәйзулла Вәли улы, бәхәскә сик ҡуйырға булалыр инде: – Ҡустым, бына һин, башҡорт теле лә, башҡорт теле, тип хәбәр һөйләйһең, ә үҙең башҡортса таҙа һөйләшә белмәйһең» – тигән. Илһам ағай ҡыҙыу кеше ине, түҙемен юғалтып, өҫтәлгә шап итеп һуҡҡан да ҡысҡырған: «Һеҙ бында кешенән издеваетесь! Үҙегеҙ беҙҙең башҡорт ауылын татарса уҡытаһығыҙ ҙа хәҙер мыҫҡыл итәһегеҙ! Мин тап шул турала яҙам да инде!» Фәйзулла Вәли улы, уны тынысландырырға була: «Тс-с-с, ҡустым, шаулама! Тегендә тыңлап торалар бит, – тип ишек яғына ымлаған. – Ярай, артабан яйлап донъя рәтләнер, бошонма», – тип бер аҙ тыныс ҡына әңгәмәләшеп, хушлашҡандар. Ҡыҫҡаһы, Мөхәммәт Искужин, Иҙел Агишев һ. б. кешеләр менән бергә, Илһам Яхин кеүек ағайҙар ҙа телебеҙҙе һаҡлап ҡалыуға үҙ өлөшөн индерергә тырышты.

***

Данлыҡлы артисыбыҙ Әхтәм Абушахманов, төрлө тантаналарҙа тост йә телмәр әйтергә булһа, минең яҡҡа ишаралап: «Был егетте күп тапҡыр «боҙорға» тырышып ҡаранылар, шуның өсөн министр ҙа, депутат та итеп, башҡа дәрәжәле урындарға ла ҡуйып ҡаранылар, әммә, күпме маташһалар ҙа, уны «боҙа» алманылар...» Маҡтана, тип уйламағыҙ, үҙенән һорағыҙ. Әхтәм Әхәт улы һүҙҙәрен елгә ташламай, һәр һүҙенең нигеҙендә бер нисә мәғәнә ята. Бер саҡ телевизорҙан сығыш яһап, Башҡортостан Президенты республика театрҙарына күп итеп, өс миллион һум аҡса биреп, «ҙур ярҙам» итте, тип уға «ҙур рәхмәт» әйтте.

***

Ҡайһы берәүҙәр ниндәйҙер идеяны үҙенең йәшәү маҡсаты итеп, тормошҡа ашырыуға мөкиббән ынтылып йәшәй. Шундайҙарҙың береһе – Әмир Юлдашбаев. Уның маҡсаты – халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы Зәки Вәлидиҙең исемен тарихи таптарҙан таҙартып, халҡы йылъяҙмаһының лайыҡлы урынына ҡайтарып, халыҡҡа рухи маяҡ тоҡандырыу булды. Был эште ул 1960 йылдарҙың аҙағында Мәскәүҙә аспирантурала уҡығанда уҡ башлағайны. Мин, МДУ студенты, уның Зәки Вәлидиҙең айырым махсус урында ғына һаҡланып, тыйылған әҫәрҙәрен уҡыған Әмир Мырҙағәле улының һөйләгәндәрен йотлоғоп тыңлай инем. Төркиәлә З. Вәлидиҙең «Хәтирәләр» китабы нәшер ителеп, Мәскәүҙә Ленин исемендәге китапхананың спецхранына килтерелгәйне. Совет власы «халыҡ дошманы» тип иғлан иткән был шәхестең ысын тормош юлын Юлдашбаевтан ишетеү үҙемә бик ныҡ тәьҫир иткәнен бөгөнгөләй хәтерләйем.

Һуңғы егерме йылдан ашыу осорҙа йәмғиәтебеҙҙә күп нәмәләр үҙгәреп, Әмир Юлдашбаевҡа йәшәү маҡсатын тормошҡа ашырыу өсөн ярайһы күп мөмкинлектәр асылды. Ул З. Вәлидиҙе һәм уның тураһындағы әҫәрҙәрҙе төрөксәнән башҡортсаға һәм руссаға тәржемә итеп, һирәк осраған, йөкмәткеле һәм ҡыҙыҡ материалдарҙы файҙаланып, шәхесебеҙ тураһында әҫәрҙәр яҙҙы. Ул аткарған эштәрҙе һанай китһәң, Әмир Мырҙағәле улы, докторлыҡ диссертацияһы яҙыуға ваҡыт әрәм итмәй, күп академик, фән докторҙарына ҡарағанда файҙалыраҡ эштәр башҡарҙы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы осорҙа З. Вәлидиҙең исеменә, Совет осорондағы кеүек яла яғып, тап төшөрөргә теләүсе «тиҙәк ҡорттары» күренә башланы. Әммә, алтын тутыҡмағандай, халыҡ күңеленә һеңгән данлыҡлы шәхесебеҙ исеменә бысраҡ ҡунмаясаҡ.

***

Кешеләрҙең төрлөһө бар. Минеңсә, уларҙы «яҡшы» һәм «яман»дарға бүлеүҙең аныҡ үлсәме юҡ, бының шартлы рәүештә, һәр кемдең шәхси фекеренән сығып эшләнгәнен иҫтә тотоп, түбәндәгеләрҙе әйтергә кәрәк. Минеңсә, кешеләрҙе шартлы рәүештә өс төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин. Беренсеһе – юғары әхлаҡлы, гуманлы һәм интеллигентлы, һәр ваҡыт игелек күрһәтергә әҙер, йәмғиәт тормошона битараф булмаған оло йөрәкле шәхестәр. Икенсеһе – күпселек, көндәлек тормошонда үҙ мәнфәғәтен күҙәтеп, игелектә лә, яуызлыҡта ла айырылып тормаған, ҡайһы саҡ осраҡлы ғына игелек, урыны менән яманлыҡ ҡылып йәшәй. Өсөнсө төркөм – әхлаҡ һәм кешелек нормаларын күрәләтә, аңлы йә аңһыҙ рәүештә даими боҙоп, аңға һыймаған яуызлыҡ ҡылырға һәләтле тар күңелleләр. Һәр төркөмгә күпме кеше инеүен шартлы рәүештә иҫәпләп ҡарағанда, минеңсә, тәүге төркөм йәмғиәтебеҙҙең 15 –20, икенсеһе – 70 – 75, ә өсөнсө төркөм 5-6 процентын тәшкил итә.

Күренеүенсә, тормошомда хәл иткес ролдәрҙә күберәк – беренсе төркөм, көндәлек тормошта – аҙмы-күпме икенсе төркөм һәм бик аҙ ғына өсөнсө төркөм кешеләр юлдаш булған. Һуңғы төркөмгә индерерлек кешеләрҙе хәтерләп, тик өсөһөн генә иҫләй алдым. Ҡағыҙ бысратып, фамилияларын атап, «пиар» яһарға, дандарын сығарырға йыйынмайым. Үҙҙәре лә, уларҙы белгән кешеләр ҙә, ошо юлдарҙы уҡып, кемдәр тураһында һүҙ барғанын аңлар.

***

90-сы йылдарҙың башында республикала эшҡыуарлыҡ хәрәкәте көсәйеп, рәсми ойошмалары барлыҡҡа килә башланы. Ярышып, Министрҙар Кабинеты янында республикалағы эшҡыуарлыҡты етәкләүсе – бер, Президент Хакимиәте ҡарамағында икенсе ойошма асып ебәрҙеләр, һәр береһенә айырым етәксе ҡуйылды. Ойошмалар ике юғары органдың «үҙ кешеләре һәм яҡлаусылары» булып китте. Президент янындағы ойошма етәксеһе, һәләтле генә эшҡыуар, тиҙ арала байып алды, йәмғиәт тормошонда әүҙем ҡатнаша башланы.

Дәүләт милкенә идара итеү комитеты рәйесе вазифаһында эшләгән сағымда, был әфәнде минең янға килеп инде. Тәүҙә был (үҙенең ниндәй «эре ҡош» икәнен күрһәтергә теләпмелер), Президент Хакимиәте тирәһендәге юғары дәрәжәле кешеләр менән дуҫлашып, аралашып, сауналарға һәм башҡа «емле» урындарға нисек йөрөгәнен һөйләп ташланы. Нимәлер һиҙенгәндәй, гәзит аҫтында ятҡан япон диктофонын тегегә белдермәй генә эшкә ҡуштым. Артабан был әфәнде, дәүләт милкен нисек бүлешеү, уға хужа булырға теләүсе кешеләр, миңә ҡаршы ниндәй «заговор» ҡоролоуы, нисек итеп яла яғыу һәм эштән алып ташлау пландары төҙөлөүе тураһында бәйән итте. Ахыр сиктә үҙенең дә теләге асыҡланды: республика кимәлендә шәхси тауар һәм фонд (ҡиммәтле ҡағыҙҙар) биржаһы төҙөргә, шунда бергәләп бизнес менән шөғөлләнергә тәҡдим итеп килгән икән. Мин, биржа тураһында әлегә закон юҡ, булһа ла, ул, минеңсә, шәхси ҡулда түгел, ә дәүләт ҡарамағында булырға тейеш, дәүләт хеҙмәткәре булараҡ, минең бизнес менән шөғөлләнергә хаҡым юҡ, тип уның тәҡдимдәренән баш тарттым. Иртәгәһенә, бына һеҙ кем менән дуҫ булып йөрөйһөгөҙ, тип магнитофон яҙмаһын Президент Хакимиәте етәксеһенә тапшырҙым.

Бер аҙҙан миңә Президент ҡултамғаһы ҡуйылған хат килтерҙеләр. Уны миндә булып киткән әфәнде яҙған. Йәнәһе, мин банкир Рәфис Ҡадиров менән Президентҡа ҡаршы эш алып барам. Күп кенә уйҙырма «дәлилдәр» ҙә килтерелгән. Мин һәр береһенең ҡаршыһына «ложь» «ложь» тип яҙҙым да хатты кире ебәрҙем. Президент миңә үпкәләне, нишләп минең резолюция ҡуйылған ҡағыҙ өҫтөнә «ложь» тигән яуап яҙҙың, тине һәм ошо хәлдәрҙән һуң миңә шикләнеп ҡарай башланы. 2000 йылдарҙа теге эшҡыуар Президенттың ҡан дошманына әүерелде. Хатта Интернетта айырым сайт асып, уға ҡаршы әҙәм ишетмәҫлек һүҙҙәр ҡулланып, аҡылы теүәл кеше ышанмаҫлыҡ хәбәр таратты. Ҡайһы бер хәбәрҙәре аҫтына мин булып ҡултамға ла ҡуйғылыны. Аҙаҡ уны, шундай эштәрендә енәйәтселек составы табып, хөкөмгә тарттырҙылар.

Үрҙә һүрәтләнгән әҙәм – урыҫ. Ә бына тағы өсөнсө төркөмгә ҡарағандарҙың икәүһе – башҡорттар. Береһе – республикала юғары ғына дәрәжәле кеше. Уның өсөнсө төркөмгә инеүенең сәбәбе – кешенән үлеп көнләшеү. Башҡа милләт кешеләре менән һөйләшкәндә, башҡорттар көнләшеүгә бай, тиһәм, ундайҙар беҙҙең арала ла етерлек, тип яуаплай ине. Бәлки, шулайҙыр ҙа, әммә халҡыбыҙ сығарған «Абдрахман» йырында:

*Атам дуҫы, тиеп ышанма, егет,*
*Атаң дуҫы етер башыңа.*
*Яҡын күргән дуҫтан яманы юҡ,*
*Ауыр саҡта һиңә ят булһа, –*

– тип бушҡа ғына ныҡ әсенеп йырланмайҙыр. Тимәк, халҡыбыҙ араһында һатлыҡ йәндәр, ике йөҙлөләр, алдаҡсылар, көнсөлдәр һәм ҡанһыҙҙар, күп булмаһа ла, табылған. Әлбиттә, ундайҙарға ҡарап, бар халыҡ шулай, тип әйтергә ярамай, әммә ундайҙарҙан һаҡ булып, ҡаршы тора белергә, уларҙы тәрбиәләргә кәрәк.

Һүҙ алып барылған егетебеҙгә бер ниндәй яманлыҡ ҡылмаһам да, ваҡ ҡына сәбәптән ҡотороноп, буштан-бушҡа кешене күрә алмай башлай. Төп сәбәптәрҙең береһе – кемдер берәү унан ҙурыраҡ уңышҡа өлгәшкән йә йәмғиәттә ихтирам ҡаҙанған. Үҙенең ҡарамағында булған гәзиттәрҙә миңә яла яҡҡан пасквилдәр яҙҙырып, башҡа төрлө интригалар ойоштороп маташты. Ләкин әллә ни уңышҡа өлгәшә алманы, көнсөл мәхлүк хәлендә ҡалды.

Ямандар төркөмөнә ингән икенсе башҡорт егете аҡса ҡоло булып сыҡты. Тыштан мөләйем генә күренеп, эстән намыҫҡа, иманға, мәрхәмәтлелеккә, башҡа әхлаҡ нормаларына төкөрөп ҡараған йә уларҙы бөтөнләй аңламаған, аҡса өсөн бер туған ағаһын да, кесе туғанын да һанламаған тиҙәк ҡорто. Кешеләрҙән күп төрлө ярҙам, бурысҡа аҡса алып, уларҙы эшҡыуарлыҡта тотоноп байлыҡ туплап алһа ла, бурысын ҡайтарыуҙан ҡасып йөрөгән бәндә. Ундайҙар бик аҙ, әммә милләтебеҙҙе хурлайҙар.

## Парламентарий

РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙар 90-сы йылдарҙа бер ни тиклем демократия ҡанундарына ярашлы, төрлө башбаштаҡлыҡҡа, законды боҙоуға юл ҡуймай үткәрелә килде. Законлылыҡтан тайпылыуҙар тик яңы быуат башында барлыҡҡа килә башланы. Мин Дума һайлауҙарында тәү тапҡыр 1995 йылда ҡатнаштым. «Өйөбөҙ Рәсәй» фирҡәһе һәм БР Президенты Хакимиәте мине депутатлыҡҡа бер мандатлы Сибай ҡала һайлау округынан кандидат итеп күтәрҙе. Дәғүәселәр араһында коммунист Р. Шөғөров, ЛДПР-ҙан А. Щербаков, «Яблоко» фирҡәһенән Р. Солтановтар бар ине. Һайлау кампанияһының иң ҡыҙығы минең өсөн шунда булды: Мәскәүҙән беҙҙең төркөм кандидаттары өсөн тауыш биреүгә өгөтләргә атҡаҙанған шәхестәрҙе ебәрҙеләр. Улар араһынан мине яҡлаусы булып билдәле кино актеры Леонид Куравлев килде. Беҙ уның менән, шаяра-көлә, водитель Рафиҡ Иркәбаевтың машинаһында ҡарлы буранда бата-сума, Мәләүез-Күмертау-Мораҡ-Исәнғол-Йылайыр-Баймак-Сибай юлын гиҙеп сыҡтыҡ. Һайлауға ҡыҙыу әҙерлек башланып күп тә үтмәне, шул уҡ округтан тағы ла бер кандидат итеп Башҡорт дәүләт медицина институтының элекке ректоры Венер Сәхәүетдинов теркәлде. Был хәбәрҙе ишетеү менән, бер көн мин Венер ағайҙың эшенә киттем. Венер Ғәзиз улы – бик ҡыҙыҡ, йор һүҙле, итәғәтле, ҡунаҡсыл, медицина өлкәһендә оло ихтирам ҡаҙанған шәхес. Бер нисә сәғәт уның өйөндә ҡунаҡ булып, күп төрлө темаға һөйләшеп, аралашып кинәндек. Мин уға: «Ағай, беҙ тауыштарҙы икәүләп бүлешһәк, еңеүсе башҡа кандидаттар араһынан буласаҡ. Мине, бик үк теләмәһәм дә, рәсми даирәләр сығарҙы. Беребеҙгә кандидатураһын исемлектән алыу килешмәҫме?» – тинем. Ул: «Мине лә Президент Хакимәтенә саҡырып, кандидат булырға тәҡдим иттеләр. Осраҡтан файҙаланып, мин бер ай тирәһе халыҡ менән аралашып, бер аҙ медицина хеҙмәте күрһәтәм дә кандидатурамды алырмын. Һин борсолма, һайлау кампанияһын дауам ит!» – тине. Президент Хакимиәтенә ағайҙы өҫтә әйтелгән көнсөл башҡорт саҡырған булып

сыҡты. Һайлау көнө килеп етте, әммә Венер ағай кандидатураһын алманы. Һөҙөмтәлә Сибай һайлау округынан РФ Дәүләт Думаһына депутат булып һайлаусыларҙың 29, 14 процентының тауышын йыйған Рәсүл Шөғөров һайланды. В. Сәхәүетдинов – 24,17, мин 21,32 процент тауыш алдыҡ.

Республика һәм округтағы район гәзиттәре аша мин депутатты йылы ҡотланым, юғары дәрәжәле эшендә уңыштар теләнем. Әбйәлил районы егете Рәсүл Шөғөров сәйәси яҡтан өлгөргән, компетентлы, дәрәжәле кешеләр алдында үҙен тота белгән, Рәсәй парламентында эшләргә һәләтле депутат итеп күрһәтте. Республикалағы етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡитләүҙән ситләшмәүсе һирәк кешеләрҙең береһе булды. БР Президенты һайлауҙарында кандидат булып сығып, республика етәкселеген ярайһы ғына шомландырып та алғыланы.

***

1999 йылдың көҙөндә мине РФ Дәүләт Думаһына һайлауҙарҙа «Ватаным – Бөтә Рәсәй» фирҡәһе составында ҡатнашырға саҡырҙылар. Республика етәкселегенең тәҡәтен ҡороҡҡан Шөғөровты еңергә кәрәк булғанғамылыр, был юлы миңә конкурент сығарылманы. Һөҙөмтәлә мин һайлаусыларҙың 56,32 процентының тауышын йыйып, III саҡырылыш РФ Дәүләт Думаһы депутаты булып киттем. 21,13 процент тауыш менән икенсе урынды Р. Шөғөров алды. Минән айырмалы, Рәсүл туған мине еңеү менән ҡотламаны.

Дәүләт Думаһында «Рәсәй төбәктәре» төркөмөндә эшләү тормошомдоң иң яуаплы осоро булды. Федераль закондар системаһын формалаштырыуҙың ныҡ ҡыҙған сағы. Тап шул осорҙа «Граждандар кодексы», «Һалым кодексы», «Ер кодексы», «Хеҙмәт кодексы», күп әһәмиәтле закондар ҡабул итеү, төҙәтмәләр индереү, дәүләт гербы, гимны, флагы статустарын раҫлау һ.б. күп яуаплы эштәр атҡарылды. Халыҡ-ара хәл дә ярайһы ҡатмарлы булып, шул йылдарҙа АҠШ даирәләре Ираҡҡа һөжүм ойоштorҙо. Миңә был хәрби акцияға ҡаршы мөрәжәғәт яҙыуҙа ҡатнашып, уны Рәсәй төбәктәре депутаттары исеменән трибунаға сығып уҡырға тура килде. Тикшереү барышында ЛДПР башлығы В. Жириновский ҡаршы сығып, үҙенең киҫкенерәк вариантын, тәҡдимдәрен индерергә маташты. Башҡаларҙы ҡуҙғытыр өсөндөр инде: «Барлыбаев, мосолман булараҡ, ундай йомшаҡ мөрәжәғәт яҙырға тейеш түгел ине», – тип тә ҡысҡырҙы. Йомғаҡлау һүҙендә мин: «Мөрәжәғәт буйынса фекер алышыуҙа ЛДПР-ҙың рәйесе Владимир Вольфович түгел, ә фракция етәксеһе Игорь Лебедев (Жириновскийҙың улы) сығыш яһарға тейеш ине. Ни өсөндөр ЛДПР, йәш кешегә сығыш яһарға бирмәй, гел Жириновскийҙың өҫтөнлөгөнә таяна. Лебедев та лайыҡлы егет, уның атаһы ғына түгел, хатта олатаһы ла юрист бит», – тинем. Был Жириновскийҙың «әсәйем урыҫ, атайым юрист» тигән һүҙҙәренә ишара ине. Депутаттар, көлә-көлә, мөрәжәғәттең беҙ тәҡдим иткән варианты өсөн тауыш бирҙе. Беҙҙең мөрәжәғәтте яҙыуға яуаплы булған, Халыҡ-ара эштәр комитеты рәйесе Д. Рогозин рәхәтләнеп, өҫтәлгә һуға-һуға көлдө. Думаның яҙғы сессияһын ябыу банкетында космонавт-депутат, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы В. И. Севостьянов һәм Жириновский менән бер швед өҫтәле артында фекер алыштыҡ. Минең: «Вольфович, һин нишләп башҡорттар менән татарҙарҙы Монголияға һөрөргә өндәйһең әле?» – тигән һорауға ул, юҡ-юҡ, мин улай тип әйтмәнем, фекеремде «журналюгалар» икенсегә бороп яҙғандар, тип, ғәҙәттәгесә, оҙон фәлсәфәгә бирелеп аҡланырға кереште. Виталий Иванович көтмәгәндә: «Жириновский! Ғалимдар иҫбат иткән: һәр йәмғиәттә аҡылы камил булмаған әҙәмдәр 9 процент тәшкил итә. Һинең партияң шул саҡлы тауыш йыя, беләһеңме?!» – тине. Тегеһе, һәр ваҡыттағыса шаталаҡланып: «Эйе, улар араһында фәхишәләр, бомждар,

алкоголиктар, наркомандар ҙа бар, улар бөтәһе лә минеке», – тип яуапланы.

III саҡырылыш Дума составында спорт әһелдәре, артистар булманы, байҙар ҙа күп түгел ине. Олигархтар араһынан Р. Абрамович һәм Б. Березовский ғына күренеп ҡалды ла, аҙаҡ тәүгеһе – Чукоткаға, икенсеһе Лондонға китеп барҙы. Парламентта фән эшмәкәрҙәре, юристар, иҡтисадсылар, сәйәсмәндәр, ижтимағи тормошта тәжрибә йыйған кешеләр күпселекте тәшкил итте. Думаның эшендә әүҙем ҡатнашыу, башлыса, депутаттың үҙенең эшсәнлегенә, яуаплылығына бәйле. Ярайһы ғына күп закон проекттары эшләп, парламент тыңлауҙарында һ.б. сараларҙа ҡатнашып, комиссиялар составына инеп, хәлемдән килгәнсә тырыштым. Республикала, округ райондарында үткәрелгән сараларҙа ҡатнашыу, үҙемдең инициатива аша һайлаусылар менән даими график буйынса осрашыуҙар ғәҙәти булды. Улар тураһында мин, башҡа депутаттарҙан айырмалы, һәр йыл һайын республика һәм округ ҡала-район гәзиттәрендә отчет яҙа, радио һәм телевидение аша сығыш яһай инем. Бер ваҡыт федераль матбуғат биттәрендә республикабыҙға, уның Президентына яла яғып, төрлө уйҙырмалар кампанияһы башланды. Башҡортостандан һайланған депутаттар исеменән өндәмә яҙып, уларҙан ҡултамға ҡуйҙырып, Дәүләт Думаһының пленар ултырышында трибунанан уҡып ишеттерҙем.

Депутатлыҡ осоронда Рәсәй Дәүләт Думаһының халыҡ-ара парламенттары бәйләнешендә актив ҡатнашыу форсаты эләкте. Парламент делегациялары составында Америка Ҡушма Штаттарына, Францияға, Төркиәгә, Тайванға, Финляндияға, Украинаға, Грузияға визит эшләнек. Төркиәнең Милли Мәжлесенә (парламентына) ике тапҡыр визит яһап, икеһендә лә Стамбулда Зәки Вәлидиҙең ҡәберенә барып сәскә һалыу, уның балалары Иҫәнбикә һәм Сүбидәй менән аралашыу бәхете эләкте. Дәүләт Думаһы етәкселеге миңә Финляндия парламентында Рәсәй парламенты вәкиле булараҡ инглиз телендә яуаплы сығыш яһау ышанысын тапшырҙы.

Сәйәси һәм ижади тормошомда Думаның «Тотороҡло үҫеш» комиссияһы рәйесе урынбаҫары вазифаһы мөһим роль уйнаны. Был йүнәлештә эшләп, тотороҡло үҫеш проблемаларына арнап төрлө баҫмаларҙа күп кенә мәҡәлә, ике монография сығарҙым. Һөҙөмтәлә III саҡырылыш Думаһының аҙағында төрлө социологик эҙләнеүҙәрҙең күрһәткестәре буйынса минең рейтинг парламентта иң юғарыларҙың береһе булды. «Киләһе Дәүләт Думаһына һайлауҙарҙа әлеге Башҡортостан депутаттарының ҡайһыһы сығасаҡ?» тигән мәсьәлә ҡуҙғатылғас, «Рәсәй төбәктәре» төркөмө етәксеһе О. В. Морозов, республика етәкселеге менән килешеп, «Берҙәм Рәсәй» фирҡәһенән Х. Ә. Барлыбаев һәм Ф. А. Сәйфуллин тәҡдим ителәсәк, тип белдерҙе. 2003 йылдың сентябрь башында уҡ декабрҙә үтәсәк һайлауға ҡыҙыу әҙерлек башланды.

«Берҙәм Рәсәй» фирҡәһенең сентябрь уртаһында йыйылған генераль советы ултырышында депутатлыҡҡа кандидаттар исемлеге раҫланды. Әммә иғлан ителгән исемлектә минең фамилия аталманы. Ултырышта сығыш яһаған О. В. Морозов аҙаҡ былай тине: «Исемлеккә һинең фамилияны индереүгә М. Рәхимов ҡаршы сыҡты». Шул саҡ С. Шойгу телгә килде: «Ты что, Муртаза, там у себя хан что-ли?! Лидер российской парламентской фракции по предварительному согласованию предлагает кандидатуру, а ты против. Я знаю Барлыбаева, хороший депутат, к нам постоянно обращается с разными предложениями». Рәхимов Шойгуны урыҫса өс хәрефкә оҙатты ла: «Я Президент республики! Это наше дело, кого предлагать!» – тип яуап бирҙе. Шойгу ла яуапһыҙ ҡалманы, талаш ҡупты. Б. Грызлов ҡыҫылып, туҡтатып ҡуйҙы. Күрәһең, Рәхимовтың башын

кемдер бутаған. Бер аҙна элек уға шылтыратып һөйләшкәндә минең кандидатураға ҡаршы түгел ине, хәҙер аптырайым, уға ни булғандыр. Минеңсә, Башҡортостанда киләсәк Президент һайлауҙары алдынан көрәш башланып, унда минең дә ҡатнашыуым ихтимал, тип уйлап, кәртә ҡуйып маташҡандар.

Алдан бирелгән ғариза буйынса мин бер мандатлы Күмертау округынан депутатлыҡҡа кандидат итеп теркәлгәйнем инде, шуға күрә һайлауҙа ҡатнашыуҙан баш тартманым. Быға тиклем беҙҙә һайлауҙар аҙмы-күпме демократияға ярашлы үтһә, 2003 йылдағы һайлауҙар тәү тапҡыр тулыһынса «нисек һайлау мөһим түгел – нисек һанау мөһим» тигән ҡағиҙә буйынса үтте. Ҡайһы бер ышаныслы кешеләрем былай һөйләне: «Төндә участкаларҙан килгән һөҙөмтәләрҙе иҫәпләгәндә һин беренсе инең, иртәнсәк протоколда өсөнсө булып сыҡтың». Үрҙә телгә алынған ваҡиғаларҙан һуң республикаға ҡайтыу мәсьәләһе сетерекле булғанға, О. В. Морозовтың тәҡдиме буйынса, 2004 йылдың мартында Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Рәсәй Федерацияһы Дәүләт хеҙмәте академияһына профессор булып эшкә сыҡтым.

## Зиһен мәктәптәре

Федераль кимәлдәге юғары уҡыу йортонда, бигерәк тә Рәсәй Президенты янындағы Дәүләт хеҙмәте академияһында эшләү – үҙе яҙмыш бүләге. Совет осорондағы Ижтимағи фәндәр академияһында күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре З. Аҡназаров, Ф. Солтанов, Ә. Дилмөхәмәтовтар уҡыған. Әле ул элекке кеүек бик ҙур әһәмиәткә эйә булмаһа ла, сәйәси һәм ижтимағи тормоштоң авангардында барған фән һәм уҡыу-уҡытыу системаһының үҙәге. Унда эшләү минең өсөн бик уңышлы булды. Глобалләшеү мәсьәләләре, тотороҡло үҫеш теорияһы һәм стратегияһы буйынса программалар эшләп, юғары орган етәкселәр алдында лекциялар уҡыным, төрлө дәрестәр үткәрҙем. Һигеҙ йылда төрлө темаға алты монография, күп кенә мәҡәлә яҙылды, конференция, форум, конгрестар эшендә ҡатнаштым. Шуларҙың иң әһәмиәтлеләре – 2008 йылда Сеул ҡалаһында (Көньяҡ Корея) үткән – Бөтә донъя, 2009 йылда – Новосибирскиҙа, 2012 йылда – Түбәнге Новгород ҡалаларында ойошторолған Рәсәй философия конгрестарында ҡатнашыу булды.

***

Кеше ғүмере – күп томлы китап йәки күп сериялы кинофильм кеүек. Бала саҡ һәм йәшлек осоронда тормош ябай күренештәрҙән, асыҡ төшөнсәләрҙән, ҡатмарлы булмаған маҡсат-теләктәрҙән тора. Йәштәр, шул маҡсаттарға ирешергә ынтылып, әллә ни тәрән, күп төрлө кисерештәргә бирелмәй, көндән-көн алға бара. Тик олоғайған һайын кисерештәр тәрәнәйә һәм күп төрлөгә әйләнә башлай, яҙмыш ҡатмарлана, донъяны аңлау диапазоны киңәйеп, аңлашылмаған күренештәр, төшөнсәләр күбәйә.

2012 йылдың 23 февралендә мин төп эш урыны итеп Рәсәй Фәндәр академияһының Философия институтын һайланым. Был аҙым аныҡ аң һәм ынтылышлы теләк менән яһалды. Дәүләт Думаһында осраҡлы ғына «Тотороҡло үҫеш» комиссияһы рәйесе урынбаҫары итеп тәғәйенләнгәс, был йүнәлеш буйынса вазифа бурысын үтәү өсөн генә шөғөлләнә башлағайным. Был проблемаларға үтеп инә барған һайын, ундағы мәсьәләләр яйлап арбай, эске донъямды яулай башланы. Тәрән тәьҫораттар йоғонтоһонда, бер йыл эшләгәндән һуң, 2001 йылда Дума нәшриәтендә «Путь человечества: самоуничтожение или устойчивое развитие» исемле туғыҙ табаҡлы 15 мең дана китап сығарҙым. Күтәрелгән мәсьәләләр күпселек фәлсәфәүи йөкмәткеле һәм һәр кешенең, ауыл-ҡаланың,

республиканың, илдең, бөтә кешелектең тормошона ҡағыла ине. Шуға күрә тотороҡло үҫеш проблемаһын глобалләшеү күренештәре менән бәйләп, ғилми тикшеренеү эшен алып киттем һәм 2003 йылда «Общая теория глобализации и устойчивого развития» тигән 336 битле 3 мең дана монография баҫтырҙым. Был эште Дәүләт хеҙмәте академияһында ла дауам иттем һәм, проблемаларҙы кеше темаһына бәйләп, 2007 йылда академия нәшриәтендә «Человек. Глобализация. Устойчивое развитие» исемле 320 битле 1000 дана тиражлы китабым донъя күрҙе. Ахыр сиктә 2011 йылдың ноябрендә, ғилми эштәремде дөйөмләштереп, Рәсәй Халыҡтар дуҫлығы университетында (РУДН) «Антропогенные факторы глобализации и устойчивого развития» тигән темаға философия буйынса докторлыҡ диссертацияһы яҡланым.

Ошо эштәр менән шөғөлләнгән 2004 йылдан башлап Философия институтында ай һайын үткәрелгән «Глобалләшеүҙең фәлсәфәүи проблемалары» тигән семинарҙа ҡатнашып, сығыштар яһаным, институттың күп кенә белгестәре менән хеҙмәттәшлек итеп, дуҫлашып алдым. Һуңғы бер нисә йылда институттың «Био һәм экофилософия үҙәге»нең етәксеһе профессор Игорь Лисеев эшкә саҡырып, глобалләшеү проблемаларын тикшереү буйынса төркөм ойошторорға тәҡдим итте. Бер ни тиклем ваҡыттан уның саҡырыуын институттың директоры академик А. Гусейнов та ҡабатланы. Хәҙер институтта элекке эҙләнеүҙәрҙе дауам итеп, оло ҡәнәғәтләнеү менән эшләп йөрөйөм.

## Икенсе президент

Башҡортостандың хәҙерге Президенты Рөстәм Хәмитовты ярайһы яҡшы беләм. 90-сы йылдарҙың башында бергәләп Башҡортостанға суверенитет даулап һәм яулап йөрөнөк, Рәсәй Федерацияһы менән республикабыҙ араһындағы килешеүҙәрҙе бергәләп төҙөнөк. Мин А. Чубайс менән мөлкәтте бүлешеү тураһындағы килешеүҙе әҙерләнем. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, көс-аҡылды, нервыларҙы йәлләмәй тырышып, үҙебеҙҙә ҡалдырған бай мөлкәт, республиканың элекке етәкселегенең яуапһыҙлығы арҡаһында, һуңғы йылдарҙа тәләфләнеп бөттө. Әйтәйек, Ырымбурҙағы Каруанһарай, килешеү буйынса, Ырымбур хакимиәте менән һөйләшеп, республикабыҙ мөлкәтенә әйләнергә тейеш булһа ла (уға алмашҡа Мәскәүгә өс заводты бирергә тура килгәйне), етәкселектең тарихи аңы түбән булыуы, вайымһыҙлығы, халҡыбыҙ мәнфәғәтен аңлап еткермәүе арҡаһында беҙгә эләкмәне. Мин М. Рәхимовҡа: «Каруанһарайҙы Башҡортостан мөлкәте итеүгә күп ҡалмаған, Мәскәү риза булғас, Ырымбур хакимиәте ҡаршы килеп тормаҫ. Ваҡытығыҙ булмаһа, миңә унда барып, һөйләшеп ҡайтырға ине», – тигәс, ағай ҡырт киҫте: «Каруанһарай ҡайғыһы юҡ, юҡ менән булашма».

Рөстәм Зәки улы экология өлкәһендәге вәкәләттәрҙе бүлешеү буйынса килешеүҙе әҙерләне. Бөгөн был өлкәлә лә күҙгә салынып бармаған, әммә киҫкен проблемалар бик күп, ул турала мин Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының 2009 йылда сыҡҡан «Башҡортостанда кеше потенциалы» тигән докладта яҙғайным. Ошо өлкәлә белгес булараҡ, республика башлығы экологияның үткер мәсьәләлрен эҙмә-эҙлекле яйға һалырға бурыслы. Буласаҡ Президент менән 90-сы йылдарҙа көндәлек тормошта йыш аралашырға тура килә ине. Ул баҫалҡы, юғары интеллектуаль кимәлдә мөғәмәлә итеүсе, аралашыуға еңел, эскерһеҙ кеше булараҡ танылғайны. Хәтерләйем, 1993 йылда уның менән бер машинала Өфө-Силәбе юлының тирә-яғында йорт төҙөргә урын ҡарап йөрөгәйнек. Башҡа түрәләр, ғәҙәттә, ул мәсьәләне кабинеттарҙан сыҡмай хәл итәләр ине. Рөстәм Зәки улы үҙенә йорт төҙөгәнмелер, белмәйем, ләкин үҙемә ундай форсат эләкмәне. Ул осорҙа машинаны үҙе йөрөткән юғары етәкселәр бик булмай торғайны.

Рөстәм Зәки улының бер хәбәре иҫтә ҡалған: «Ныҡ үкенеслеһе шул булды: мин юлдан тыныс, яй ғына, бер кемгә лә ҡамасауламай китеп барам. Мине лә һис кем борсомай, тирә-яҡта бер автомобиль дә юҡ. Көтмәгәндә ҡаршыға килгән бер машина аралағы киң һәм бейек газон аша һикереп сығып, минең машинаға бәрелде». Ярай әле, буласаҡ Президент үҙе имен ҡалған.

Р. Хәмитов Башҡортостанда Рәсәй Президентының тулы хоҡуҡлы вәкиле булып эшләгән осорҙа, (мин РФ Думаһында депутат саҡта) 2003 йылда, РФ Президентын һайлау башланғас килеп сыҡҡан сетерекле ваҡиғаларға бәйле, республика етәксеһен ҡаты тәнҡитләп, миңә Президентлыҡҡа кандидат булып сығырға тәҡдим иткәйне. Ундай эшкә ниәтем булмағанлыҡтан, көтөлмәгән тәҡдимгә бер ни тип тә яуап бирмәгәйнем. Хәҙер уйлайым: «Был тәҡдимең етди, рәсми булһа, әйҙә, тырышып ҡарайыҡ», – тип әйтмәгәнмен. Нисек яуап бирер ине – шуныһы ҡыҙыҡ.

***

Ул осорҙа Р. Хәмитов төрлө документтарҙа милләтен «татар» тип күрһәтеп йөрөнө. Президент итеп тәғәйенләнгәс иһә, ата-бабаларымдың башҡорт булғаны асыҡланды, тип үҙен «башҡорт» тип таныта башланы. Аптырырлыҡ хәл түгел был, сөнки беҙҙең милләт мәсьәләләре өлкәһендәге белгестәр, ысынлап та, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарҙы ҡасандыр яһалма рәүештә «татар» итеп яҙғандар, улар асылына ҡайтырға тейеш, тип иҫбат итә. Был фекерҙең Башҡортостан Президенты тарафынан иҫбатланыуы, уның бөгөнгө «беренсе башҡорт» булырға тырышыуы – ыңғай күренеш.

Р. Хәмитовтың ниндәй милләттән булыуынан мөһимерәк мәсьәлә – республиканың дәүләт телдәренең береһе – башҡорт телендә яҡшы аралаша алыуында. Был өлкәлә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, БР Президенты тейешле кимәлдә эшләп еткермәй. 2005 йылда Ҡазандың 1000 йыллығына арналған йыйылышта Рәсәй Президенты В. Путин телмәренең кескәй генә өлөшөн, вата-емерә, татарса һөйләп үткәйне. РФ Президентының бер эше лә: аҡкоштар менән осоуы, диңгеҙ төбөнән көршәктәр табыуы, төрлө йәнлектәр менән аралашыуы – осраҡлы тип әйтеп булмай. Уның һәр бер аҙымы фәһем булһын, йәмғиәт ҡайһылыр проблемаға иғтибар итһен өсөн яһала. Ҡазанда татар телендә телмәр һөйләп, Рәсәй Президенты Татарстандың татарса белмәгән етәкселәренә ғибрәтле миҫал күрһәтте. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙерге Башҡортостан Президенты башҡортса В. Путиндың татарсаһынан да «һаҡауыраҡ» һөйләшә. Тиҫтәләгән йылдар буйы ошонда йәшәп, дәүләт лидеры булып киткән кешелә шул дәүләттең телен оҙаҡҡа һуҙмай үҙләштерергә кәрәклеген иҫбат итеү зарурлығы юҡ. Ул күптән яҡшы кимәлдә башҡортса телмәр һөйләй алырға, был йүнәлешкә бөтә дәүләт хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итергә бурыслы ине. Был – теләк булмаһа – «ауыр», булһа – бер тинлек тә ҡыйынлығы булмаған мәсьәлә. Бигерәк тә башҡорт теленән фонетикаһы буйынса өс хәрефкә генә айырмалы татар телен белгән кешегә был бер ниндәй ҙә проблема түгел. Дәүләт телен дәүләт конституцияһының гаранты ла, бөгөнгө «беренсе башҡорт» та белмәгәс, уны белергә башҡа кемдәр ынтылһын да ул телде һаҡларға теләһен?! Р. Хәмитов хатта татар булып ҡалып та, республиканың дәүләт теле – башҡорт телендә радио һәм телевидение аша төрлө осрашыуҙарҙа яҡшы телмәр һөйләһә, насар булмаҫ ине. Әлбиттә, уға был эште Рауил Бикбаев кимәлендә атҡарыуы ауыр, әммә академик Роберт Ниғмәтуллинды уҙҙырыуы һис тә ҡыйын түгел. Әгәр ул был йәһәттән шундай уңышҡа өлгәшһә, әле ҡайһы берәүҙәрҙең уның «ысын» башҡорт булыуына ышанмауы кире ҡағылыр ине.

Р. Хәмитов өсөн ҡатмарлы икенсе проблема – кадрҙар булып сыҡты. Ысынлап та, яңы етәксенең ниндәй сәйәсәт үткәрәсәге, етәкселек һәләте үҙ эргәһенә ниндәй кешеләр туплауына бәйле, сөнки ул бөтә мәсьәләләрҙе лә үҙ белеме һәм көсө менән хәл итә алмай, бының өсөн уға яҡшы команда йыйырға кәрәк. Юҡҡа ғынамы ни, Америкала билдәле етәксе үлер алдынан үҙенең ҡәбер ташына шундай һүҙҙәрҙе яҙҙырған: «Был таш аҫтында үҙенән күпкә аҡыллыраҡ меңәрләгән кеше менән етәкселек иткән урта аҡыллы кеше ерләнгән». Бөгөнгө АҠШ-та Президент итеп яңынан һайланған Б. Обама илдең юғары етәкселеген тиҙ генә үҙгәртеп, элекке «ҡарсыға»ларҙы «күгәрсен»дәргә алмаштырып, ил сәйәсәтен яңы нигеҙгә күсерә башланы. Күптәр хәтерләйҙер: мәрхүм Борис Ельцин, илгә нисек идара итергә белмәй, һуңғы йылдарында хөкүмәт һәм башҡа тармаҡ етәкселәрен бейәләй кеүек алмаштырып яфаланды. М. Рәхимов та үҙе һайлап алған етәкселәрҙе ғәйепләп, бер-бер артлы эштән ҡыуа ине, тимәк, ул кемдәрҙе үрләткәнен алдан ентекле уйламаған. Шул уҡ ваҡытта В. Путин был тәңгәлдә кәрәкле кадрҙарҙы бик урынлы һайлап ала белеүе, уларға һаҡсыл ҡарауы, ахыр сиктә генә хушлашыуы, унан һуң да эшлектән сығарып ташламауы менән айырыла. Күҙәтеүселәрҙең иҫбатлауынса, Р. Хәмитов та ҡыҫҡа ваҡыт эсендә элеккесә дәүләт ҡоролошон йыш үҙгәртеп, хөкүмәт рәйесен, мөһим өлкәләрҙе етәкләүсе вице-премьерҙарҙы, министрҙарҙы, башҡа ведомстволар етәкселәрен бер нисә тапҡыр алмаштырып, республикала етәкселектең һөҙөмтәлелегенә ирешә алманы.

Шул уҡ ваҡытта уның әле һөҙөмтәһе күренмәгән үҙгәрештәрҙе оло ҡаҙаныштай итеп күрһәтеп, арттырып һөйләп ташлауы ла күптәр тарафынан күңелһеҙ йылмайып ҡабул ителә. Быға ла аптырырлыҡ түгел, сөнки власть халыҡты бала кеүек йыуатып, оптимистик кәйеф биреп тороу өсөн, «эштәр ал да гөл» тип, матур һүҙҙәр һөйләп эш итергә ынтыла. Шундай эште оҫта башҡара белеү оло ҡаҙаныш һанала, бигерәк тә юғарыраҡ кимәлдәге Мәскәү етәкселәре алдында. Был турала элегерәк итальян философы Макиавелли ҙа әйтеп үткән. Тик уның рецептары бөгөнгө көнгә тура килмәй.

## Йомғаҡлау

Әйтелгәндәрҙән сығып, ошо яҙмаларҙы уҡығанда шуны күҙ уңында тоторға кәрәк: донъяла бер кем дә фәрештәләй гонаһһыҙ түгел. Шулай булған хәлдә лә, һәр кемдең ҡылған изге һәм яман эштәре төрлө диапазонлы була. Кемдеңдер изге эштәре бик күп, ямандары юҡ кимәлендә, ә икенсе берәүҙәрҙең – киреһенсә. Ҡайһылар яҡшылыҡты ла, яманлыҡты ла мул башҡара, ә күптәр ундай эштәрҙең икеһенә лә битараф булып, ғүмерен үҙе өсөн генә йәшәп уҙғара. Әйтелгән нормаларға таянып, һәр кем көн дә башҡарған һәм алда күрһәтәсәк эштәренә ситтән ҡарап, ыңғай һәм етешһеҙ яҡтарын күрә белергә батырлығы етергә тейеш. Тәбиғи, кеше нисек кенә тырышмаһын, аныҡ һәм ғәҙел була алмай, ғәҙәттә, кеше үҙенең насар яҡтарын күрмәҫкә тырыша, уларҙы иҫләмәй, ыңғай һәм яҡшы хәлдәрҙе генә һанап китеүе ихтимал. Был бигерәк тә көндәлек тормошта күп кеше менән аралашҡанда күренә. Әлбиттә, үрҙә яҙылғандарҙы тормошҡа ашырыу өсөн кешелә тейешле интеллект, зиһен, әхлаҡ нормаларын күҙәтеү, эске яуаплылыҡ юғары булыуы фарыз. Быны тормошҡа ашырыу мәғарифтың үҫешенә, фәнгә мөнәсәбәткә, донъяуи хәлдәрҙе анализлап, уларға фәлсәфәүи ҡараш булдыра алыуға бәйле. Шуға күрә Мифтахетдин Аҡмулланың «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!» тигән һүҙҙәре бер ваҡытта ла үҙенең әһәмиәтен юғалтмай. Ошо яҙмалар уҡыусыларға уйланыуҙар өсөн ниндәйҙер кимәлдә фәһемле һәм файҙалы булыр, тип ышанғы килә.

# ТӨРКИ ДОНЪЯҺЫНЫҢ РУХИ МӘККӘҺЕ

Башҡорт телендә «төрки» тигән матур һүҙ бар. Ҡаҙаҡса – «түрік». Рус телендә иһә был һүҙ ике мәғәнәһен йәнәш ҡуйғанда ғына тулыһынса аңлашылыр: «тюрки» (с ударением на первый гласный звук) – «тюркские народы», «тюрки» (с ударением на второй) – «тюркские языки». Төрки телдәренең береһендә һөйләшкән, уны үҙ туған теле тип һанаған һәр кем, әгәр үҙенең тәрән тамырҙары менән ҡыҙыҡһынһа, үҙенең ошо һүҙгә мөнәсәбәтле икәнлеге менән ғорурлана алыр ине. Ә был телдәрҙә – төрки телдәрендә – 160 миллиондан ашыу кеше һөйләшә. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, бөгөнгө көндә үҙ телен дә һанға һуҡмаған, туған телендә бөтөнләй һөйләшә белмәгәндәр бар. Ошо ике рухи сиктә йәшәгәндәрҙең күңел байлығы нисбәтен күҙ алдына килтереп ҡарасы! – берәүҙәр үҙенең кем икәнлеген дә белмәйенсә бысҡый, төтәй; берәүҙәрҙең дәрт-дарманы, ҡөҙрәте, изге ынтылыштары ярты донъя кешеләренең күңелен йылытыуға етә.

Һүҙем – Ҡаҙағстан Республикаһының Төркстан ҡалаһында урынлашҡан Әхмәт Йәсәүи исемендәге Ҡаҙаҡ-төрөк университеты вице-президенты, филология фәндәре докторы, профессор Күлбәк Иргөбәк (Күлбек Ергөбек) хаҡында.

Күлбәктең үҙен, ижадын, фәнни эшмәкәрлеген яҡындан белгән олуғ шәхестәр, уның изге эшмәкәрлегенең киң ҡоласлығына, мул емешлелегенә хайран ҡалып, төрлөсә баһа бирәләр: «Төркиәт яугиры» (Академик Н. Васильев, Яҡут-Саха), «Төрки донъяһы рухиәтен ҡосағына һыйҙырыусы» (Намык Кемал Зейбек, Ҡаҙағстан Республикаһы Президенты хакимиәтенең яуаплы хеҙмәткәре), «Тонкий знаток и арбитр литератур нашей Центральной Азии» (Сыңғыҙ Айытматов). Эйе, ул – төрки халыҡтарының төпкөл борондан килгән тарихын, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен үҙенең усына һалып, хәҙерге көндә барлыҡ төркиҙәрҙең нәҫелдәре йәшәгән алыҫ тарафтарға таратыусы, үҙ тамырҙарына битараф булмағандарҙы изге ынтылыштарға рухландырыусы. Күлбәк Иргөбәк уҙаман менән берәй сарала осрашып, әҙ генә ваҡыт булһа ла аралашып өлгөргән һәр кемдә уның тураһында ошондай юғары фекер тыумай ҡалмайҙыр…

Төркстан – төркиҙәрҙең изге ере. Был ҡала – бик боронғо. Кәм тигәндә бер мең ярым йыллыҡ тарихы бар. Ул тарих – төрки халыҡтары тарихы. Яҙмышы шулайҙыр: ул төркиҙәрҙең оло сәйәси ваҡиғалары, дәһшәтле яуҙары, дини һәм мәҙәни тормошо үҙәгендә урынлашҡан. Хәҙергеһе – уның өсөнсө исеме. Тәүгеһе – Шагвар. XII – XV быуаттарҙа – Яссы. Дөйөм төрки шиғриәтендә суфыйсылыҡ идеологияһын таратыуҙы башлап ебәргән, тауышы быуаттар аша төркиҙәр йәшәгән алыҫ ҡитғаларға, шул иҫәптән XIII – XIV быуаттарҙа Башҡортостан еренә лә килеп еткән Әхмәт Йәсәүи тигән мәшһүр әҙиптең ижади ҡушаматына лайыҡ булған исем. Тап ошо ҡала уртаһында Әхмәт Йәсәүиҙең һәр кемде хайран ҡалдырырлыҡ мәғрур кәшәнәһе ултырыуы был төбәкте төркиҙәрҙең изге урынына, рухи үҙәгенә әүерелдергән. Ошо рухи үҙәк усағы һүрелмәһен өсөн бөгөнгө көндә уға даими рәүештә ҡуҙ өҫтәп торола.

Әйтеүе генә анһат, был изге эште асылда бер кеше тормошҡа ашыра, төрки халыҡтары йәшәгән башҡа төбәктәрҙә быҒаса күрелмәгән яңынан-яңы саралар уйлап таба; дәүләт, хөкүмәт органдарының ғына ҡөҙрәтенән килерҙәй иҫтәлекле фәнни-мәҙәни үҙәктәрҙе бер үҙе ойоштора.

2004 йылда Төркстандың үҙәк урамдарының береһендә ҡаҙаҡ халҡының данлы улы Бейсембай Кенжебаев исемендәге Төркиәт музейы барлыҡҡа килә. Бөгөнгө көндә уның фондтарында төрки халыҡтарының һәр береһенең арҙаҡлы шәхестәре тураһында ҡиммәтле мәғлүмәттәр тупланған, күргәҙмәгә үҙҙәренең портреттары, уларҙың тормошона, эшмәкәрлегенә, ижадына ҡағылышлы фотолар, документтар ҡуйылған. XIX быуаттың күренекле зыялыһы Әбүбәкер Диваевтан башлап башҡорт халҡының арҙаҡлы вәкилдәренә лә урын бирелгән. Музей Әхмәт Йәсәүи исемендәге Төркстан университетына ҡарай. Ойоштороусыһы, нигеҙ һалыусыһы, әлеге көндә үҙ балаһындай күреп хәстәрләп, фондтарын даими байытып тороусыһы – Күлбәк Иргөбәк.

2007 йылда Күлбәк Иргөбәктең шәхси китаптары иҫәбенә ҡалала Төрки телле халыҡтар китапханаһы асыла. Төркиәт музейы кеүек үк, ул да донъялағы берҙәнбер үҙенән башҡа, ҡабатланмаҫ мәҙәниәт усағы, тиһәк тә хата булмаҫ. Икеһе менән дә танышырға теләге булған берәй төрки сығышлы кеше, Мәккәгә барғандай барып күрһә, хажда алған рухи яңырыуға бәрәбәр тәьҫирҙәр тейәп ҡайтыр ине. Китапхана фондын хөрмәтле профессор, төрки телле халыҡтар йәшәгән төбәктәр менән бәйләнеш тотоп, үҙе өҙлөкһөҙ байытыу хәстәрлеген күрә. Хәҙер унда утыҙ меңдән ашыу баҫма һаҡлана. Һәр телдәге китаптар өсөн айырым бүлектәр тәғәйенләнгән, байраҡтарына махсус бүлмәләр бирелгән. Башҡорт телендәге китаптар бүлеге лә бар. Уларҙы Күлбәк, Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы менән бәйләнешкә инеп, бөртөкләп йыйған. Ҡыҙғаныска ҡаршы, башҡа бүлектәргә сағыштырғанда, башҡорт телендәге китаптар әлегә әҙерәк; быға ул бик борсола, беҙҙең әүҙемерәк ярҙам итеүебеҙҙе һорай. Шуныһы хайран ҡалырлыҡ: музейҙа Күлбәк Иргөбәктең үҙенең авторлығына ҡараған китаптар бүлеге лә бар; уның менән танышҡандан һуң, ғалимдың бай, һөҙөмтәле эшмәкәрлегенә хайран ҡалаһың. Бер мәҡәләлә уның бөтә ижадын байҡау, хатта фәнни эшмәкәрлек йүнәлештәрен дөйөм баһалау ҙа мөмкин түгел. Ни бары өс кенә йүнәлешенә иғтибар итеп ҡарайыҡ.

Ул – 2002 йылдан Әхмәт Йәсәүи исемендәге Ҡаҙаҡ-төрөк университетында сығып килгән «Төркиәт» («Тюркология») журналының баш мөхәррире. Журнал 2003 йылдан Париж ҡалаһындағы халыҡ-ара ISSN үҙәгендә теркәлгән. Мөхәрриәт исемлегендә Алжир, Анкара, Бейрут, Прага, Тараз, Мәскәү, Санкт-Петербург, Алматы, Төркстан, Абакан, Бишкек, Горно-Алтайск, Ҡазан, Кызыл, Күксәтау, Нальчик, Новосибирск, Нөкөс, Ташкент, Чебоксар, Өфө (Иҙелбаев М. Х., Ҡунафин Ғ. С.), Якутск ҡалалары ғалимдары бар. Журнал биттәрендә сығыш яһаған авторҙарҙың географик контингенты, әлбиттә, тағы ла киңерәк.

2003 – 2004 йылдарҙа профессор Күлбәк Иргөбәктең «Таяныстар һәм йүнәлештәр» («Арыстар мен ағыстар») исемле күп томлыҡ китаптар серияһы сыға. Улары – ҡаҙаҡ әҙәбиәте хаҡында. Ауыҙ-тел һәм яҙма әҙәбиәттең борондан бөгөнгәсә һуҙылған тарихы, бөтә әҙәби төрҙәр, ҡаҙаҡ әҙәбиәтенә бәйле киң ҡоласлы теоретик мәсьәләләр урын алған унда. Бер һүҙ менән әйткәндә – ҡаҙаҡ һүҙ сәнғәтенең энциклопедияһы.

Ошо мәҡәлә менән әйтергә теләгәнемдең иң мөһиме – хөрмәтле Күлбәк Иргөбәктең күп тармаҡлы фәнни эшмәкәрлегенең әлеге йүнәлештәренең өсөнсөһө. 2010 йылдан изге Төркстан ерендә «Түрикстан йыйнағы» тигән ҙур күләмле

серия сыға башлай. Ошоға тиклем ул йыл һайын баҫыла килә. Беҙҙеңсә, башҡортса, әйткәндә, ул – «Төркистан (йәғни Төрки донъяһы) йыйынтығы». Исеме үк әйтеп тора: бындай етди исемле йыйынтыҡтың йыл һайын донъя күреүендә күпселек төрки халыҡтарының ғалимдары ҡатнашырға тейеш һымаҡ. Совет заманында төрки халыҡтары ғалимдары өсөн Мәскәүҙә рус телендә (!) «Советская тюркология» журналы сыға торғайны. Күләме 15 табаҡ самаһы ине. Күҙ алдына килтерегеҙ: 30 табаҡҡа яҡын күләмле «Түрикстан жинағы»н Күлбәк Иргөбәк бер үҙе сығара. Барлыҡ төрки донъяһындағы фән һәм мәҙәниәт тормошо, арҙаҡлы шәхестәр, күренекле ваҡиғалар, оло ҡаҙаныштар тураһындағы төп мәҡәләләрҙең авторы ла – ул, бер үҙе! Бер сығарылышта – илле-алтмышлап мәҡәлә. Быйыл уның бишенсе китабы донъя күрә. Әлбиттә, баш һүҙ йәки бүтән мөмкинлектәр менән унда башҡа авторҙар ҙа баҫыла ала. Йыйынтыҡтың төп ҡағиҙәһе – төрки телдәренең һәр ҡайһыһында сығыш яһарға мөмкин. Совет заманында төрки телле ғалимдарҙың «Советская тюркология» журналы үтәй алмаған хыялын Күлбәк Иргөбәк профессор йөҙөндә «Түрикстан жинағы» апанһат тормошҡа ашыра.

Минең алдымда – был йыйынтыҡтың Күлбәк Иргөбәк үҙе бүләк иткән беренсе, өсөнсө һәм электрон почта аша ебәргән бишенсе китаптары. Ҡаҙаҡ әҙәбиәте классиктары һәм бөгөнгө вәкилдәренән тыш, уларҙа төрки халыҡтарының арҙаҡлы әҙиптәре, төркиәт фәненә хеҙмәт иткән донъя ғалимдары хаҡында бай мәғлүмәт таба алабыҙ. Күҙ алдына баҫтырыу өсөн, ҡайһы бер исемдәр теҙмәһен генә килтереп ҡарарға уйлағайным, булдыра алманым: энциклопедиялағы исемдәрҙе айырып алып та, һанап бөтөп тә булмай. Башҡортостанға ҡағылышлылары хаҡында ғына бер-ике һүҙ әйтеп ҡарайыҡ. 1978 йылда Башҡорт дәүләт академия драма театры Алма-Атала гастролдә сығыш яһаған ваҡытта 26 йәшлек Күлбәк СССР-ҙың халыҡ артисҡаһы Зәйтүнә Бикбулатованан интервью алған. Йыйынтыҡтың өсөнсө китабын (2011) әҙерләгән саҡта ошо һөйләшеүгә кире ҡайтып, аңлатмалар биреп, тулыландырып урынлаштырған. Бынан тыш, йыйынтыҡтың төрлө баҫмаларында Мостай Кәрим, Сәйфи Ҡудаш, Мифтахетдин Аҡмулла хаҡында материалдар сығарған. Өсөнсө китапта Күлбәк 2010 йылда үҙенең Башҡортостанға килеүе, заманында ҡаҙаҡ шағиры Мағжан, яҙыусы Бейембәт Майлин уҡыған «Ғалиә» мәҙрәсәһендә, Мәжит Ғафури музейында, Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһында булыуы тураһында яҙа. Ғөмүмән, башҡорт әҙәбиәте, әҙәби процесы, айырым яҙыусылары ижады менән яҡындан ҡыҙыҡһынып тора. Үҙ-ара алышҡан хаттарыбыҙҙың береһендә ул «Ағиҙел» журналын даими уҡып барыуы, заманында Мостай Кәрим менән «аралашҡан әҙәм» булыуы, Гөлфиә Юнысова ижадын «борондан – Совет хөкүмәте ҡәҙәренән» белеүе тураһында яҙа. Башҡортостанға һуңғы килеүендә ул айырым яҙыусылар, шул иҫәптән Ҡәҙим Аралбай, Фәнис Янышев менән яҡындан таныша. Ә Ғиниәт Ҡунафин менән беҙ уны 2011 йылдың октябрендә Төркстанға Халыҡ-ара ғилми конференцияға барған саҡта «астыҡ». Шул саҡтарҙа минең башҡа шундай бер уй килгәйне: төрки халыҡтарының һәр ҡайһыһынан шундай бер уҙаман табылып, үҙ халҡы төбәген изге ергә әүерелдерә ала. Бының өсөн Күлбәк Иргөбәктән үрнәк алып, уның менән тәжрибә уртаҡлашып, фән һәм мәҙәниәттең төрлө тармаҡтарында дөйөм төрки ҡаҙаныштары юғарылығынан тороп, уның кеүек оло мөхәббәт тойғоһо менән ҡолас ташлап эшләргә кәрәк.

***

Был мәҡәлә «Төрикстан жинағы»ның бишенсе китабына баш һүҙ өсөн яҙылғайны. Унан һуң миңә тағы ла Ҡаҙағстанға, Төркстан ҡалаһына юл төштө. Ошо

йылдың апрель аҙағында Әхмәт Йәсәүи исемендәге Ҡаҙаҡ-төрөк университеты базаһында V халыҡ-ара Төркиәт конгресы үтте. Был оло сара Күлбәк Иргөбәккә алтмыш йәш тулыу ваҡытына тап килде. Бер юлы уны ла юбилейы менән ҡотлау өсөн Ҡаҙағстанға Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы ағзаһы шағирә Гөлфиә Юнысова менән бергә юл тоттоҡ.

Тап ошондай исемдәге фәнни форум – Халыҡ-ара төркиәт конгрестары – Рәсәй Федерацияһында ла даими үткәрелә. Улар Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Рәсәйҙең төрки телле республикалары һәм төбәктәре баш ҡалаларында сиратлап ойоштороla. Әлбиттә, донъяның башҡа илдәренән дә күп кенә ҡунаҡтар ҡатнаша. Миңә ошо үҙебеҙҙең конгрестарҙа һәм шәрҡиәтселәр съездарында ла сығыштар яһарға тура килде. Ҡаҙағстанда ла, Рәсәйҙә лә төркиәткә һәм шәрҡиәткә ҡағылышлы киң даирәле көнүҙәк проблемалар уртаға ҡуйылып, халыҡ-ара күләмендәге етди мәсьәләләрҙе хәл итеү йүнәлешендә юғары кимәлдә һүҙ алып барыла. Шулай ҙа Ҡаҙағстан конгрестарының ҡайһы бер үҙенсәлектәре лә күҙгә бәрелмәй ҡалмай. Беренсенән, улар бер генә урында – төркиәттең изге төбәгенә әйләнгән Төркстан ҡалаһында ғына уҙғарыла. Икенсенән, донъяның төрлө мөйөштәренән йыйылған ғалимдар төрки телдәрендә генә сығыш яһай. Докладтарға, әлбиттә, тыңлаусылар өсөн рус, инглиз, төрөк телдәренә бер юлы тәржемә яһала бара; әммә, иғтибар итеүемсә, был туранан-тура тәржемә менән бик һирәктәр генә файҙалана. Ғәҙәттә, тәүге һөйләмдәренә ныҡлап ҡолаҡ һалһаң, артабан тыңлаған һайын сығыштарҙың асылына еңелерәк төшөнә бараһың. Тағы ла бер үҙенсәлек: пленар ултырыштарҙа ла, секцияларҙағы һөйләшеүҙәрҙә лә, тәнәфестәрҙәге йәки мәҙәни сараларҙағы аралашыуҙарҙа ла төрки халыҡтарының тарихи туғандашлыҡ тамырҙары, бөгөнгө рухи берҙәмлеге, киләсәк яҙмышы тураһында оло хәстәрлек атмосфераһы хөкөм һөрә. Сит республикалар вәкилдәре Рәсәй эсендәге төрки халыҡтарының бөгөнгө хәле, үҙ-ара мөнәсәбәте менән ҡыҙыҡһынып бара; уңайы тура килгәндә, шуларға бәйле үҙҙәренең ҡыуаныстарын йә борсолоуҙарын да белдерергә ынтылалар. Миңә, мәҫәлән, тәнәфестәрҙә аралашҡан ваҡыттарҙа:«Зинһар, Башҡортостанда ваххабизм кеүек күренештәргә юл ҡуймағыҙ, ул бер ҡасан да һеҙҙе лә, беҙҙе лә йүнлегә килтермәйәсәк», – тип үҙҙәренсә ысын күңелдән кәңәштәр биреүселәр, киҫәтеүселәр булды. Башҡортостандан, Рәсәйҙән ситтә йәшәүселәр беҙҙәге хәлде, әлбиттә, күбеһенсә Интернет селтәрендәге имеш-мимеш хәбәрҙәр буйынса ғына күҙ алдына баҫтыра. Шулай ҙа уларҙың беҙҙең хаҡта туғандарса борсолоуы, үҙҙәренсә ҡурсаларға тырышыуы ыңғай тәьҫир уята.

Көнсығыш һәм төркиәт фәненең Ҡаҙағстандағы ғәмәли үҙәге һаналған Ә. Йәсәүи исемендәге Халыҡ-ара ҡаҙаҡ-төрөк университетының вице-президенты булараҡ, Күлбәк Иргөбәккә конгрестың ойоштороlоуы, барышы өсөн тулы яуаплылыҡ һалынған ине. Ундай вазифалағы кешенең ваҡыты, ғәҙәттә, минутына тиклем иҫәпләнгән була. Шулай ҙа Күлбәк Башҡортостандан килгән делегацияға даими иғтибар бүлеү мөмкинлеген тапты. Беҙҙең республикаға, башҡорт халҡына ҡаҙаҡтарҙың, шул иҫәптән – Күлбәктең дә, ихтирам һәм айырым иғтибар менән ҡарауын беҙ Ғ. Ҡунафин менән Төркстандағы ғилми конференцияға үткән килгәндә үк тойғайныҡ. Былдай мөнәсәбәтте был юлы ла апасыҡ күрҙек. Конгресс башланыр алдынан ғына Алматыла командировкала булып, төн йоҡламай юлдан ҡайтҡан вице-президент беҙҙе поездан үҙе ҡаршы алды, ҡатын-ҡыҙ затына күҙҙең яуын алырлыҡ сәскә гөлләмәһе тотоп килергә лә онотмаған. «Өфө – Ташкент» поезы Төркстанға иртә килде, конгресс икенсе көндә генә асыла, алда әле башланмаған тотош көн бар. Ҡунаҡханаға урынлашып, тамаҡ ялғап алғас, ҡаршы алыусыбыҙ беҙгә ҡаланың иҫтәлекле урындары

менән танышыу өсөн машинаһын һәм оҙатып йөрөүсеһен биреп ҡуйҙы. Башҡа көндәрҙә лә шулай: төрлө илдәрҙән йыйылған ике йөҙгә яҡын ҡунаҡты университетҡа, ҡунаҡханаға, ашханаға, экскурсияларға, мәҙәни сараларға йөрөтөү өсөн ике ҙур автобус бүленгән; ә Күлбәк Башҡортостандыҡыларҙы үҙе алып йөрөй, юл ыңғайында ике республикаға, әҙәбиәт, фән һәм юғары уҡыу йорттарына ҡағылышлы мәсьәләләр тураһында иркенләп һөйләшәбеҙ. Бер саҡ Сырдаръя йылғаһын телгә алдыҡ та, мин XIX быуаттың беренсе яртыһында Рәсәй дәүләте тарафынан ойошторолған Хива походтарын, унда ебәрелгән ғәскәрҙә башҡорттарҙың да күпләп ҡатнашыуын, сәсәндәрҙең «Һыр» (Сырдаръя) тигән йыр ҙа сығарыуын иҫкә алдым; үткән килгәнемдә был йылғаны күрергә насип булмағанын да әйтеп һалдым. Күлбәк шунда уҡ конгресс программаһына күҙ ташлап алды ла билдәләп тә ҡуйҙы: «Иртәгә төшкә тиклем мөмкинлек бар. Төркстандан алтмыш саҡрым ғына. Мотлаҡ алып барып күрһәтәм...» Шулай итеп, һөйләшеүҙең иртәгәһенә ярты көн йөрөп, яу походтарында ата-бабаларыбыҙҙың эҙҙәре ҡалған ерҙәрҙе күреп ҡайттыҡ.

Төркиәт ғилеме донъяһында Күлбәк Иргөбәктең таныштары, дуҫтары күп. Кемеһе менән аралашһа ла, әлбиттә, шул кешенең иле, халҡы тураһында һүҙ сыға. Һәр береһенең илендәге көнүҙәк йә борсоулы мәсьәләләрҙе ул һәйбәт белә, яңылыҡтарҙы ҡыҙыҡһынып һораша, кәңәштәрен бирә. Иң яҡын дуҫтары менән оҙағыраҡ, иркенләп һөйләшеп алыр, бер юлы ҡаҙаҡтарҙың ҡунаҡ һыйлау йолаһын да күрһәтеп ҡалыр өсөн, ул ситтән килгән унлап кешене өйөнә саҡырҙы. Төркиәнән, Монголиянан, Ҡытайҙан, Яҡут-Саханан, Таулы Алтайҙан, Ҡарағалпаҡстандан, Үзбәкстандан, Башҡортостандан вәкилдәр йыйылды. Ошо төбәктәрҙең һәр береһенә ҡағылышлы йәнле һөйләшеү менән бергә, ҡунаҡтар үҙ-ара танышып, ғилем өлкәһендәге хеҙмәттәшлек, артабанғы бәйләнештәр тураһында килешеп өлгөрҙө. Күлбәктең дуҫтары беҙҙең дә яҡын таныштарға әйләнде.

Алдан белеүемсә, Күлбәк үҙенең 60 йәшлек юбилейын ошо Конгресс көндәре менән тап килтерергә ниәтләнгәйне. Һуңынан кире уйланы. Төп сәбәптәрҙең береһе:үткән йылдың аҙағында уның әсәһе донъя ҡуйҙы. Беҙҙең быуын кешеләре, хәҙерге заман йәштәре кеүек sms йәки скайп менән генә ҡәнәғәтләнә алмай, оҙон-оҙон хаттар аша хәбәрләшергә күнеккәнбеҙ. Күлбәк менән Интернет аша ла элекке кеүек оҙон хаттар яҙышабыҙ. Әсәһен юғалтыуҙы ул бик ауыр кисерҙе. Шул ваҡыттағы хаттарының береһендә ул ҡайғыһын шулай уртаҡлашҡайны: «...Йылдың аҙағында ҡәҙерле әсәм донъя ҡуйҙы. 94 йәштә ине. Өлкән йәш. Нисек кенә булмаһын, әсәнең аты – Әсә. Атайҙан 37 йәш самаһында тол ҡалған әсәнең дүрт улды һис кемдән кәм итмәй тәрбиәләп үҫтереп, бөгөнгө көнгә еткереүе ҡайҙан мөмкин булды, тиһегеҙ? Был – бар ғүмерен үҙенең балаларына арнап үткәреү мосолман әсәләренең генә ҡулынан килерлек булһа кәрәк?! Минең әсәм шундай кеше ине». Ҡаҙаҡ йолаһы буйынса, яҡын кешенде ерләгәндән һуң бер йыл үтмәйенсә, тыуған көндәргә, юбилейҙарға бәйле күңел асыу саралары ҡорорға ярамай, әҙәпһеҙлек һанала. Шуға күрә быйылғы йыл аҙағынаса кисектереп торған. Ваҡыты еткәс, юбилейын Астанала юғары кимәлдә билдәләргә йыйына. Бирһен Хоҙай. Был хәлде мин алдан белә инем. Әммә Ҡаҙағстанға ураған һайын юл төшөп тормай. Моғайын, конгрестың пленар ултырышында берәй форсат тыуыр әле тип, әҙерләнеп барҙыҡ. Әмәлгә ҡалғандай, пленар ултырышта конгресты Рәсәй Федерацияһынан ҡатнашыусылар исеменән ҡотларға миңә һүҙ бирҙеләр. Ойоштороусылар менән алдан һөйләшеп ҡуйыу буйынса, һүҙемдең аҙағында трибунаға Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһынан вәкил булып килгән шағирә Гөлфиә Юнысованы саҡырҙым. Ул башҡортса шиғыр уҡып, Күлбәк Иргөбәккә беҙҙең Яҙыусылар берлеге идараһының ҡотлау хаты менән бүләген тапшырҙы. Үҙебеҙ ҙә уға бүләктәр




*Күлбәк Иргөбәк, Мирас Иҙелбаев һәм Гөлфиә Юнысова Әхмәт Йәсәүи исемендәге Ҡаҙаҡ-төрөк университеты алдында. Төркстан ҡалаһы.*

биреп, башҡорт еләне менән бүреген кейҙерҙек. Ошо мәл аҙаҡ пленар ултырыштың үҙәк ваҡиғаһына әйләнде. Тәнәфестә күптәр беҙҙең янға килеп, елән (Урта Азия халыҡтарында уға оҡшаш кейемде «сапан» тиҙәр), айырыуса – бүрек тураһында һораша. Башҡа төбәк кешеләре Салауат Юлаев һүрәттәре аша күреп белгән башҡорт баш кейеме улар өсөн дә бик матур күренә икән. Күлбәк үҙе лә атҡа менгәндәй шатланды…

Төркстан ҡалаһы Башҡортостандан ярайһы уҡ алыҫ ҡына арала ята. Поезд менән теп-теүәл ике тәүлек бараһың, дүрт тапҡыр сик буйы тикшереүен үтәһең. Самолет менән барам тиһәң, Өфөнән Мәскәүгә, Алматыға осорға кәрәк. Алыҫ юлға автомобиль менән сығыуҙың хикмәттәрен әйтергә лә түгел. Шулай ҙа беҙҙең республиканан унда йыш ҡына йөрөп торалар икән. Артистар гастролдәргә барып сыға. Дин әһелдәре, изге йәнле бәндәләр Әхмәт Йәсәүи, уның остазы Арыслан баба кәшәнәләрен күрер өсөн сәфәр ҡыла. Йәштәр Халыҡ-ара университетта белем алыу өсөн йүнәлә. Ғалимдар ике йылға бер тапҡыр даими уҙғарылып торған халыҡ-ара конгрестарға, улар араһында ойошторолған ғилми конференцияларға юл тота. Сауҙа юлы менән барып сыҡҡан йүнселдәр ҙә осрай. Шуныһы ғәжәп: ул урынға бер тапҡыр аяҡ баҫһаң, һис һүҙһеҙ ҡабат күрге килә. Изге ер, аралар алыҫ булһа ла, күңелдәрҙе яҡынайтып, ниндәйҙер илаһи көс менән үҙенә тартып, өҙләкһеҙ саҡырып тора, күрәһең…

**Мирас ИҘЕЛБАЕВ,**
**БДУ профессоры.**



**Леонид**
**СОКОЛОВ**

## Ҡыҫҡа хикәйәләр

## Магазинда

Варвара Петровна ҡайһы саҡта иренә магазинға барып аҙыҡ-түлек алып ҡайтырға ҡуша. Ә Иван Кузьмич был эште яратмай. Ул киреләнә, ат кеүек бышҡырып ала, әммә ҡулына аҡса тотторғас, теләр-теләмәҫ кенә ишеккә йүнәлә. Аҙыҡ-түлек алыу – тулыһынса ҡатыны ҡарамағында булыуына өйрәнгән ул. Шуға магазинда үҙен симфоник оркестр концертында ултырған пигмей йәки папуас кеүек тоя. Иҫәңгерәгән килеш кәштәләр буйлап йөрөп арығас, кеҫә телефонына йәбешә:

– Варь, тим, Варь! Ниндәй колбаса алайым?

– Үҙең ҡара, – тип яуаплай ҡатыны.

– Мин ҡайһыһын алырға белмәйем!

– Уның нимәһен беләһең, ҡайһыһы оҡшай, шуныһын ал да ҡуй!

Пышкин колбасаларға оҙаҡ итеп ҡарап тора, елкәһен тырнап ала ла йәнә ҡатынының телефон номерын йыя.

– Сосиска алһам, яҡшыраҡ булмаҫмы?

– Бәй, һаман ҡайтырға сыҡманыңмы ни? – тип йәне көйгән ҡатыны трубканы шартлатып һүндереп ҡуя.

Биш минуттан телефон йәнә шылтырай:

– Ниндәй сосиска алайым? Бында бит уның егерме төрлө сорты бар.

– Уф, Аллам, үҙәккә үттең бит. Ал молочный тигәнен.

– Уныһы күренмәй бит әле...

– Ялҡыттың бит, әй. Колбаса ал да ҡуй.

– Алло, алло, ниңә трубканы ташлайһың?

Ҡатынының телефон номерын яңынан йыя. Алыусы юҡ. Тағы йыя. Тамам юғалды бит хәләл ефете. Ниһайәт, улының тауышы ишетелә.

– Әсәй әйтте, бер нәмә лә алмаһын, тине, ул үҙе барыһын да сығып алған! Тиҙерәк өйгә ҡайтып иҙән йыуһын, тине.

---

*Леонид Соколов (1953) Өфө ҡалаһында тыуған. БДУ-ның филология факультетын тамамлағандан алып матбуғатта эшләй, юмористик һәм сатирик әҫәрҙәр яҙа. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Ҡәләмдәшебеҙҙе 60 йәше менән ҡотлайбыҙ.*

## Биш хатлыҡ тарих

***Беренсе хат***

Итек ремонтлау оҫтаханаһы
директоры В. М. Перекатовҡа

*Мин, Мормышкин А. М., 23 гинуарҙа уҡ һеҙ етәкләгән ойошмаға ботинка ремонтларға тапшырғайным. Ботинкала ҡайҙандыр хасил булған ҡаҙаҡ табаныма ҡаҙалып йөрөп, әйтеп аңлатҡыһыҙ һыҙланыуҙар сәбәпсеһе булғайны.*

*Ботинканы ун көн эсендә ремонтланған килеш кире алырға тейеш булһам, ай үтеп китһә лә, һөҙөмтә юҡ.*

*Экономист-ғалим булараҡ, шуны иҫәпләп сығарҙым: һеҙҙең оҫтаханаға йөрөү минең 18 сәғәт 17 минут ваҡытымды алды, был иһә өс эш көнө тигән һүҙ! Ошо ваҡыт эсендә 74 саҡрым 361 метр араны атлап үттем.*

*Аныҡ ҡына яуап бирегеҙ әле: был яуапһыҙлыҡтың сиге булырмы?*

**А. Мормышкин.**
**10 март.**

***Икенсе хат***

*Хөрмәтле Перекатов иптәш!*

*Мин йәнә ҡулға ҡәләм алырға мәжбүр булдым. Һеҙгә 10 мартта уҡ ебәрелгән хаттың яуапһыҙ ҡалыуы аптырата. Ботинкамдың һаман әҙер булмауы бөтөнләй шаҡ ҡатыра.*

*Уны бынан өс ай элек тапшырғанымды хәтерегеҙгә төшөрәм. Оҫтахана юлын тапауға инде 42 сәғәт ваҡытым исраф ителде.*

**А. Мормышкин.**
**30 апрель.**

***Өсөнсө хат***

*Хөрмәтле Перекатов В.М. иптәш!*

*Оҫтахана юлын саң ҡундырмай тапауым сәбәпле хасил булған асыуымды аңлатыр өсөн һүҙ таба алмайым. Һеҙгә шул да мәғлүм булһын: ботинка ремонтлау мәсьәләһе һаман хәл ителмәне, киреһенсә, уның эҙһеҙ юғалыуы сәбәпле, тамам ҡатмарлашты.*

*Уны эҙләү буйынса күрелгән саралар бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәне. Миңә икенсе ботинка тәҡдим иттеләр итеүен, әммә уның икеһе лә уң аяҡтыҡы һәм дүрт размерға бәләкәйерәк. Ботинканың законлы хужаһы булараҡ (квитанция быны раҫлай), уны кисекмәҫтән табыуығыҙҙы, ремонтлауығыҙҙы һәм ғәйеплеләргә яза биреүегеҙҙе талап итәм!*

**А. Мормышкин.**
**23 июль.**

***Дүртенсе хат***

Институт ректоры
В. П. Коромысловҡа
Итек ремонтлау оҫтаханаһы
директоры В. М. Перекатовтан

*Хөрмәтле ректор иптәш!*

*Һеҙҙең институт доценты Мормышкин А.М бына ярты йыл инде көн һайын беҙҙең оҫтахананан ҡайта белмәй. Ниндәйҙер ботинка таптырып беҙҙең хәлде ала һәм эш урынында түҙеп торғоһоҙ шарттар тыуҙыра.*

*Уның минең адресҡа яҙылған хаттарынан күренеүенсә, Мормышкин оҫтаханаға эш сәғәттәрендә килә. Ул 137 сәғәт 15 минут прогул яһаған. Институт етәкселеге быны беләме икән?*

*Яуыз прогулсыға ҡарата тейешле саралар күреүегеҙҙе үтенәбеҙ!*

**5 сентябрь.**

***Бишенсе хат***

Оҫтахана директоры
В. М. Перекатовҡа

*5 сентябрҙә һеҙҙең тарафтан ебәрелгән хатта телгә алынған факттар дөрөҫләнде. Доцент Мормышкин иҫкәртелде. Уға докторлыҡ диссертацияһы өҫтөндә емешлерәк эшләргә ҡушылды. Икенсе курс студенты М. Водолеевты уға ярҙамға беркеттек.*

*Бынан тыш, быйыл йәнә өс докторлыҡ һәм ете кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлау планлаштырыла.*

*Яҡлау датаһы хаҡында һеҙгә ғилми совет тарафынан өҫтәмә хәбәр итербеҙ.*

*Итек ремонтлау өлкәһендә һеҙгә ҙур уңыштар теләйбеҙ!*

**Хөрмәт менән, институт ректоры**
**В. П. Коромыслов.**

## «Бында В. С. булды»

Әҫәрҙең төп геройы слесарь-сантехник буласаҡ.

Етәрегеҙ инде, сантехник хаҡында күпме яҙырға мөмкин, тип үпкә белдереүселәр булыуы ла ихтимал. Әммә кеше, һыуһыҙ һәм аҙыҡ-түлекһеҙ йәшәй алмаған кеүек, ғәфү итегеҙ, бәҙрәфһеҙ ҙә йәшәй алмай. Бәҙрәф бар икән, сантехникһыҙ булмай. Мин быны һәр тәнҡитсе, һәр мөхәррир алдында ҡыйыу рәүештә белдерә алам.

Поезда, пароходта, самолетта ғына түгел, хатта космос карабында ла бар ул барыһы ла йәйәү йөрөй торған урын. Төп геройыбыҙ Василий Семенович Плинтусов – космодромда санузел торошо өсөн яуап биреүсе. Ул үтә башлы кеше, сөнки космодром – фән һәм техниканың иң лайыҡлы һәм һуңғы ҡаҙаныштары ҡулланылған урын. Шулай итеп, Плинтусов һәр космос аппаратының йыһанға юлланыуында ҡатнаша, һәр деталде, болтты тикшерә, аҙналар буйы эш урынынан сыҡмай. Һуңынан Юғары дәүләт комиссияһы ағзаларына «Барыһы ла әҙер!» тип рапорт бирә. Уға ышаналар һәм һөйәлләнеп ҡатҡан ҡулын оҙаҡ итеп ҡыҫалар.

Ә бер мәл ғәҙәттән тыш хәл булды. Инженер-сантехник, эш менән булаша торғас, барыһының да ҡайтып киткәнен һиҙмәй ҡалды. Бер тиҫкәре болт менән маташа ине ул. Аптырағас, кувалданы эшкә ҡушты. Бынағайыш, ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған ысул ыңғай һөҙөмтә бирҙе! Геройыбыҙ был ҡыуаныслы хәлде тантаналы рәүештә билдәләргә булды. Шайтан эсемлеген ҡайҙан алыуы, нисә грамм йәки литрҙың уны аяҡтан йығыуы – сер. Бер аҙҙан Плинтусов үҙенең эш урынында тәрән йоҡоға талғайны…

Тап ошо мәлдә донъялағы бөтә радиостанциялар мөһим ваҡиға тураһында һөйләй ине: Советтар Союзында космос карабы өс кешелек экипаж менән йыһанға осто! Бөтә ил ҡыуана! Василий Семенович Плинтусов был осош хаҡында ишетмәгән берҙән-бер кеше булғандыр, моғайын. Артығын тейәгәс, ул тәненең көс еткеһеҙ булып ауырайыуын, һуңынан бүлмә буйлап осоп йөрөүен дә һиҙмәй, хырылдап йоҡлауын белде. Ҡапыл уянғас, ҡурҡып китте. Ул ултырмай ҙа, ятмай ҙа, ә башы менән «түшәм»гә терәлгән килеш һауала аҫылынып тора ине. Эргәлә генә кувалда менән ниндәйҙер буш һауыт осоп йөрөй. Ишеккә ынтылыу бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәне. Ишек урынына ул иллюминаторға яҡынайғас, емелдәшкән йондоҙҙарҙы, ниңәлер ҙурайып киткән Айҙы, болоттарға төрөнгән Ерҙе шәйләне…

Космонавтар партияға һәм хөкүмәткә осоштоң бик уңышлы башланыуы

хаҡында тантаналы рапорт биргән мәлдә генә «Ҡотҡарығыҙ!» тигән ҡарлыҡҡан тауыш яңғыраны. Космонавтар шаҡ ҡатты. Башта: «Ерҙән шундай команда ишетеләме?» – тип уйлаштылар. Ә Ер өндәшмәй ине. Аптырашта ҡалған космонавтар иллюминатор аша сикһеҙ йыһанға күҙ һалды. Тик унда ла бер кем дә ярҙамға саҡырмай, осоусы тәрилкәләр ҙә күренмәй ине. Ҡолаҡҡа ишетелгәндер, тип тынысланa төштөләр.

– Ҡотҡарығыҙ! – тип асырғанып яр һалған тауыш космонавтарҙы йәнә һиҫкәнергә мәжбүр итте, эҙләү операцияһы яңынан башланды. Хатта прибор отсектары, компьютерҙар артына ла сығып ҡаранылар. Ниһайәт, космонавтарҙың береһенә батшалар ҙа йәйәү йөрөй торған әлеге урынға барырға кәрәк булды. Ишекте асыу менән ул башы менән ботинкаға бәреләә яҙҙы, ә өҫтә ниндәйҙер йөнтәҫ, шешенгән йөҙ күренә ине.

– Сит планета вәкиле! – Был уй космонавтың мейеһендә йәшен тиҙлегендә тыуҙы. Ә уны былдай осрашыуға әҙерләмәгәйнеләр. Буранлы йәки ямғырлы көндә парашюттан һикереү, утҡа йәки һыуға ташлау, аҙыҡ-түлекһеҙ бер кем йәшәмәгән утрауға ҡалдырып китеү кеүек бүстәк түгел бит был, етдиерәк хәл. Ҡото алынмаһа ла, космонавтыбыҙ элекке юлбашсыларҙың бронза һәйкәле кеүек ҡатты ла ҡалды.

Шул мәлдә «сит планета вәкиле» аңлайышлы телдә карапты яңғыратты:

– Нимә ҡарап ҡаттың, давай, төшөргә ярҙам ит!

Әммә космонавт ҡапыл телдән ҡалғайны. Ярҙам уларҙың икеһенә лә кәрәк ине.

– Баттыңмы әллә унда, ниңә оҙаҡланың? – Командирҙың был һорауы ла яуапһыҙ ҡалды. Көтөлмәгән хәл булыуын аңлап, иптәшенә ярҙамға ашыҡтылар. Хәҙер инде барыһы ла шаҡ ҡатҡыс хәлдең шаһиты булды.

Беренсе булып командир телгә килде:

– Һин кем? Ҡайҙан килеп сыҡтың?

– Ҡайҙан булһын? Айҙан!

Әммә командирҙы еңел генә алдап булмай шул. Хатта лунатик та күренмәй генә килеп керә алмаҫ ине, тип уйлап ҡуйған командир хаҡлы ине.

– Бында нимә эшләйһең?

– Эшләйем, бына һеҙҙең кеүек.

– Нимә менән шөғөлләнәһең һуң? – тип көләмһерәп һорау алыуын дауам итте командир.

– Сантехниканы ремонтлайым.

Әкренләп барыһы ла аңлашылды. Хәлде өҙөп-йыртып төшөндөргәс, Плинтусов уны Ергә оҙатып ҡуйыуҙарын үтенә башланы. Алып бармаһалар, юлда осраған берәй транспорт менән ҡайтып етергә йыйыныуын әйтте. Тик транспорт эҙләү файҙаһыҙ булыуын, ғөмүмән, бер нисә ай буйы өйгә ҡайтыу тураһында онотоорға кәрәклеген әйткәс кенә, сантехник тамам айныҡты.

Космонавтар үҙҙәренең табышы хаҡында Ергә хәбәр итмәҫкә ҡарар итте, сөнки кисекмәҫтән ҡайтырға ҡушыуҙары ла бар ине. Ә йондоҙҙар, шул иҫәптән түшкә тағыла торған алтыны ла, эргәлә генә – нисек ҡайтаһың! Шулай итеп, аҙыҡ-түлекте саҡырылмаған ҡунаҡ менән дә бүлешергә тура килде.

Ҡунаҡтың ыңғай яҡтары ла бар. Василий Семенович көләмәс тоҡсайы булып сыҡты, шахмат, шашка уйнай, тауышы ла матур ғына. Ер менән элемтәгә сыҡҡан мәлдәрҙә генә уға йырларға рөхсәт ителмәй ине. Плинтусовҡа ла карапта оҡшай башланы. Көн һайын космосҡа осоп булмай бит. Ул ҡатынынан ғына бер аҙ шөрләй ине. Коллектив уға был мәсьәләлә лә ярҙам ҡулы һуҙырға, кәрәк булһа ҡатыны менән һөйләшергә вәғәҙә итте.

Шулай итеп, станция, бөтә ҡитғаларға һәм илдәргә сәләмдәр ебәрә-ебәрә, Ер шарын урай бирҙе.

Барыһы ла майлаған кеүек барған мәлдә, бөтә прогрессив кешелек донъяһы юлбашсының юбилейын билдәләгән көндә, авария таблоһы янды. Баҡһаң, ҡояш батареяһы нимәгәлер эләккән. Хәл тамам киҫкенләште, кислород запасы бер-ике сәғәтлек кенә тороп ҡалды. Барыһының да кәйефе төштө. Бер Плинтусов ҡына бирешмәне: «Быны ғына күргән бар, ҡайғырмағыҙ»,– тип башҡаларҙы йыуатты.

Ә эфирҙан юлбашсыға дан йырлау дауам итте, ул туҡтауһыҙ яуған наградалар ямғырын саҡ күтәреп, көскә ҡуҙғалып йөрөй ине…

Күргән саралар һөҙөмтә бирмәгәс, асыҡ космосҡа сығып нимәлер эшләп ҡарау ысулы ғына тороп ҡалды. Командир яҡшылап скафандр кейҙе лә, карапҡа яҡшылап бәйләнгәс, асыҡ люкка табан атланы.

Ул ниндәй эш ҡырғандыр, әммә бер аҙҙан люкты туҡылдаттылар.

– Керегеҙ, – тип аңғармаҫтан әйтеп һалды Плинтусов. Башҡаларҙың берәмберәм сығып кереүе лә һөҙөмтә бирмәне. Шул саҡ эшһеҙлектән йонсоған Плинтусов телгә килде:

– Эш рәтен белмәйһегеҙ, кейендерегеҙ мине!

Бына ул карап люгы аша асыҡ йыһанға сыҡты, үҙе менән өйрәнгән ҡоралы – кувалданы ла эләктерҙе. Тап ошо кувалда барыһын да ҡотҡарҙы ла инде. Плинтусов йән асыуы менән бер-икене тондорғас, станция терелде лә китте.

Ваҡыт еткәс, иҫән-аман ғына Ергә төштөләр. Космонавтарға Йондоҙ тараттылар, ә беҙҙең геройҙы прогул өсөн эштән ҡыуып сығарҙылар.

Әммә ул ҡайғырып та бирмәй. Әле коммуналь хужалыҡта сантехник булып эшләй. Ҡайһы берҙә, күберәк тейәп алһа, космоста булыу тарихын иптәштәренә һөйләргә тотона. Бына шундай тарих.

Әйтергә онотоп торам. Күпмелер ваҡыт үткәс, белгестәрҙең береһе космос аппаратының эске өлөшөндә бер яҙыу күрҙе. «Бында В. С. булды» тип яҙылғайны унда. Фән өсөн был һаман да асылмаған сер булып ҡалды.

## Принцессаға хат

Был хаттың адресатҡа барып етеүе – үҙе бер мөғжизә. Конверты ла ябай ғына, яҙыуы ла танырлыҡ түгел. Шул хат принцессаның үҙенә барып етһен әле! Барып етеү генә түгел, королдәр, шейхтар, президенттарҙан килгән йөҙҙәрсә хат араһынан тап уға ҙур иғтибар бирелһен әле! Бәлки, ябайлығы менән әсир иткәндер ул. Принцесса конвертты әйләндергеләп оҙаҡ ултырҙы. Көньяҡ Африкала йәки тундрала йәшәһә лә, ҡатын-ҡыҙ ҡыҙыҡһыныусан тәбиғәтле була бит. Хат Рәсәйҙән булып сыҡты.

Принцесса адресаттың исем-шәрифен көс-хәлгә уҡып сыҡты: Сви-сто-пля-сов Ва-си-лий... Йәшәгән ауылының исеме тағы ла ҡатлаулыраҡ: Тояҡ Буйламаҫ Һаҙ.

Принцессаның кәйефе күтәрелде. Тәненә йылы тулҡын йүгерҙе, күңеле ашҡынып, ниндәйҙер яҡты, яңы, ҡабатланмаҫ тойғоларға сорналды. Ир-егеттәрҙең мөхәббәт хаттары, һоҡланыулы ҡараштары ғәҙәти күренеш булған йәш сағы хәтеренә төштө.

Принцесса хатты алыҫҡараҡ йәшерҙе. Тәмлекәсте лә, иң һуңынан ашар өсөн, йыйып ҡуяһың бит. Принц йоҡлап киткәс, төндәрен әкренләп хатты уҡый башланы. Почерк күберәк ҡытай яҙмаһын хәтерләтеүе өҫтөнә, Вася Свистоплясов һәр һүҙҙе өсәр хата менән яҙыуҙы ғәҙәте итеп алған, күрәһең.

Теүәл ярты айҙа ябығып, нервылары ҡаҡшап киткән принцесса хатты уҡып бөттө. Уның йөкмәткеһе былай ине:

*«Хөрмәтле принцесса иптәш! Һеҙгә хат яҙыусы Василий Свистоплясов тип белерһегеҙ. Һеҙгә күптән хат яҙырға йөрөй инем, ауылда эш күплектән, ваҡыт еткереп булмай. Йә һыйыр быҙаулай, йә трактор боҙола. Өй ҡыйыгын яңыртып япҡайным, бесән мәле етте…»*

Артабан Вася тыуған яҡтарының матурлығын рәссамдар көнләшерлек итеп һүрәтләргә тотона.

*«Беҙҙәге тәбиғәт иҫ киткес матур. Ниндәй генә ағас үҫмәй! Уҫағы ла, ҡаҙаны ла, ҡайыны ла осрай. Шулай ҙа иң таралғаны – имән. Яратҡан ағасым ул, сөнки ул да Рәсәй һымаҡ ҙур һәм ҡеүәтле!*

*Беҙҙәге сәскәләрҙе күрһәгеҙ ине! Ә ҡоштарҙың күплеге! Улар ниндәй генә тауыштар сығармай. Мин үҙем тумыртҡа туҡылдауын бик оҡшатам. Бәшмәктәрҙең төрлөһө үҫә. Ксениям уларҙы телде йоторлоҡ итеп бешерә. Бында эштең әтнәкәһе һарымһаҡта. Һарымһаҡһыҙ бәшмәктең тәме икенсе була…»*

Хатта ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр күп ине. Вася айҙар буйы эш хаҡы бирелмәүен, түрәләрҙең бөтә колхоздың мөлкәтен таратып алыуын, үҙҙәренә ике-өс ҡатлы йорттар һалып, ҡиммәтле сит ил машиналарында ғына йөрөүен әсенеп яҙа.

Хатта ҡәйнәһенә лә ҙур урын бирелгәйне:

*«Барыһына ла түҙеп була, тик бына ҡәйнәм Матрена Васильевнанан тынғы юҡ. Уға бер нисек тә ярап булмай, бөтә нәмәгә ҡыҫылып, көнө буйы мыжып тик йөрөй. Ә бит уға бер ниндәй насарлыҡ эшләгәнем юҡ. Шыпа тулы бер арба утын килтереп ауҙарҙым. Беләһегеҙме, нимә ти? Урлағанһың да унан ҡотолор өсөн килтергәнһең, ти. Ә ҡатын уны яҡлаша. Нимә эшләргә лә белмәйем. Бәлки, берәй кәңәш бирерһегеҙ?»*

Хат түбәндәге һүҙҙәр менән тамамланғайны:

*«– Һандуғас яҙҙы көткәндәй,*
*Көтәмен яуап хатын!*
*Үбәм. Һеҙҙең Вася Свистоплясов».*

Иң аҙаҡтан йәнә бер кәлимә өҫтәп яҙылғайны:

*«Һеҙҙе бик хөрмәт иткәнгә яҙам. Ә фотоһүрәтегеҙ өйҙә иң күркәм урында эленеп тора. Ҡәйнәм, кем ул, тип йәнде алып бара. Аңлатам наҙанға, мәйтәм, быныһы һеҙҙең эш түгел!»*

Ошо ябай ғына хат принцессаның йөрәгенә инеп ултырҙы. Уға бындай хаттар яҙыусы, серҙәре менән уртаҡлашыусы юҡ. Принцесса ҡайһы саҡта үҙен бәхетһеҙ тоя. Уның да бар нәмәгә танауын тығырға яратҡан ҡәйнәһе бар. Вася уға яҡын туғаны, серҙәше кеүек тойолдо, уның күңелен аңлар кеше бына ҡайҙа икән!

Күп тә үтмәй, Тояҡ Буйламаҫ Һаҙға ғәҙәти булмаған хат килеп төштө. Вася уны бер тында уҡып сыҡты:

*«Һаумы, Василий!*

*Һине принцесса Марианна сәләмләй. Ысын күңелдән яҙылған хатыңды алып бик ҡыуандым. Шундай матур тәбиғәт ҡосағында йәшәүеңә көнләшеп тә ҡуйҙым. Тумыртҡа туҡылдауын тыңлай алыуың менән бәхетле һин. Һарымһаҡ ҡушып бешерелгән бәшмәкте шул тиклем тәмләп ҡарайһым килә! Ә эш хаҡы алмағанға бик ҡайғырма. Миңә лә исем өсөн генә түләйҙәр. Ҡәйнәм бер цент та бирмәй, һинеке кеүек һаран. Ирем дә һуңғы ваҡытта бик үҙгәрҙе. Уның өсөн мин бар ни ҙә юҡ ни. Күңелде бушатҡас, рәхәт булып китте әле. Хат яҙ, йәме!»*

Вася көттөрөп кенә бик йөкмәткеле һәм эшлекле яуап хаты яҙҙы.

*«Ирегеҙ өсөн бөтөрөнмәгеҙ, әле башы әйләнеп йөрөһә лә, барыбер һеҙгә әйләнеп ҡайтыр. Кисер мине, зинһар, тип тубыҡланып торор әле. Ана, күршеләге Алевтина*

*Петровнаның ире йәш ҡыҙ артынан һеләгәйен ағыҙып йөрөгәйне. Эш нисек барып бөттө, тиһегеҙме? Өс айҙа теге сибәркәй быны тамам ыштанһыҙ ҡалдырҙы. Теге кикереге шиңгән этәс һымаҡ өйөнә ҡайтҡайны ла, Алевтина индермәне. Бынамын тигән ирҙе индереп, гөрләтеп донъя көтә. Һеҙ ҙә ҡайғырмағыҙ, өмөт менән йәшәгеҙ».*

Тора-бара хаттар йөк поезындай оҙонға һәм иң яҡын серҙәштәр ҙә көнләшерлек хислегә әүерелде. Оҙаҡламай Васяның кәңәшенән башҡа принцесса аҙым да яһамай ине инде. Вася ла шулай итә.

Хаттарҙың береһендә Вася үҙен ныҡ борсоған проблеманы телгә алды. Трактор ватылды, помпаһы эштән сыҡты, шуны бер ҡайҙан да таба алмайым, ярҙам итмәҫһегеҙме, бушлай түгел, бер һарыҡты һуйып булһа ла түләрмен, тиелгәйне унда.

Василийҙың үтенесе принцессаны телһеҙ ҡалдырҙы. Ул тракторҙарҙы бик насар белә, ә помпа тураһында ишеткәне лә юҡ. Тик принцесса ныҡыш булып сыҡты. Помпаһы булмаған тракторҙың урынынан да ҡуҙғала алмауын ул тиҙ аңланы. Тик телгә алынған трактор маркаһына помпа табыу еңел эш булмай сыҡты.

Көндәрҙән бер көндө Свистоплясовтың ишеген дөбөрҙәттеләр. Райондың бөтә түрәләре уның ҡапҡаһы алдына йыйылғайны.

– Һеҙме Свистоплясов? – тип ҡыҙыҡһынды төртһәң ҡаны сығырҙай тулы йөҙлө, ҡиммәтле костюм кейгән ир. – Нишләп һеҙҙе көнбайышта беләләр? Теләһә кем түгел, ә принцесса үҙе?

– Үҙенән һорағыҙ, хаттары менән надайыл итте, – тип тыныс ҡына яуапланы Вася.

Тулы йөҙлө ирҙең күҙҙәре маңлайына менә яҙҙы.

– Принцессаның бүтән хат яҙыр кешеһе юҡмы ни?

– Юҡтыр, ахыры.

Тулы йөҙлө ир бер аҙ телһеҙ ҡалып торҙо ла ҡулын ғына һелтәне:

– Тракторыңды барып ал. Һинең исемгә станцияға контейнер килгән.

Васяның иҫе китте. Ул принцессанан трактор көтмәгәйне. Бөтә мал-тыуарҙы, ҡош-ҡортто һатһаң да, аҡса етмәҫ.

Василий юҡҡа ҡурҡҡан икән. Трактор бүләк итеп ебәрелгән булып сыҡты. Тик бүләкте былай ғына тоттормайҙар икән. Башта йөктө ил сигенән үткәргән өсөн трактор деталдәренән дә күберәк нулдәр торған сумманы түләргә кәрәк булып сыҡты. Йөккә документтар, табыш алыу тураһында декларация таптырҙылар. Йыл буйы эш хаҡы алмаған Свистоплясов уны нисек тултырырға белмәй ине.

Ғәрлегенән шартлай яҙған Василий трактордан баш тартты, уны кире ебәреүҙәрен талап итте. Хәҙер инде урындағы түрәләр ығы-зығы килде. Өҫтәге түрәләрҙән һәм халыҡ-ара конфликттан ҡурҡыу үҙ эшен эшләне. Тракторҙы Василий Свистоплясовҡа тантаналы шарттарҙа бушлай тапшырҙылар!

Трактор барыбер урынынан ҡуҙғала алманы. Ҡайһылыр арала уның күп кенә деталдәре, шул иҫәптән помпаһы ла, эҙһеҙ юғалғайны.

Свистоплясов йәнә хат яҙырға ултырҙы.

**Марат ӘМИНЕВ**
**тәржемәләре.**

***

Ырымбур яҡтары – халҡыбыҙҙың күп арҙаҡлы шәхестәре үҫеп сыҡҡан төбәк. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов етәкселегендә бер төркөм әҙиптәр: уның урынбаҫары Фәниә Ғәбиҙуллина, Йыһат Солтанов, Ринат Камал, Гүзәл Ситдиҡова, БДУ доценты Нурислам Ҡалмантаев, журналист Айгиз Баймөхәмәтов өлкәнең Красногвардейский районында әҙәби осрашыуҙар уҙғарып йөрөнө. Район үҙәге Пләшәндә Ғабдулла Амантай, Дауыт Юлтый, Мөхәмәтша Буранғоловтарҙың ижади биографияларына арналған әҙәби-музыкаль кисәләр ойошторолдо, делегацияны Үрге Ильяс, Юлтый ауылдарында ла ҡәрҙәштәр бик йылы ҡаршыланы.

***

Ырымбур өлкәһе Медногорск ҡалаһының «Юбилейный» мәҙәниәт һарайында Башҡортостандың халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаевтың ижадына арналған әҙәби осрашыу үтте. Шағирҙың ижады һәм тормош юлы тураһында илһамлы һүҙ йыр-бейеү, ҡурай моңо, уҡыусыларҙың шиғыр уҡыуҙары менән аралашып барҙы. Сарала ҡала башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Наил Ҡулбаев, Ҡыуандыҡ районы башҡорт ҡоролтайы рәйесе Зәйнетдин Рамаҙанов, шулай уҡ өлкә семинарына йыйылған китапханасылар ҡатнашты. Осрашыуҙа Башҡортостандың Ейәнсура районы ҡоролтайы рәйесе Рәшит Иҙрисов, Медногорск мәғариф бүлеге белгесе Шәһиҙә Иҙелбаева һ.б. сығыш яһаны.

Сараны ойоштороуға күп көс һалған, уны шағирәнә һүҙҙәр менән алып барған «Юбилейный» мәҙәниәт йорто хеҙмәткәре Дилбәр Рәхмәтоваға Рауил Бикбаев ихлас рәхмәттәрен әйтте. Һағынып ҡайтҡан яҡташтарын сәләмләгәндән, шиғырҙар уҡығандан һуң, мәртәбәле ҡунаҡ үҙенең байтаҡ китаптарын бүләк итте, халыҡҡа хәҙистәр йыйынтығын таратты.

***

Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте яңы баҫылып сыҡҡан китаптарҙың исем туйын – автографтар кисәһен даими уҙғарып килә.

Яңыраҡ күренекле шағир, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ирек Кинйәбулатовҡа 75 йәш тулыу уңайынан сығарылған «Ғүмер китабы»ның да исем туйы ҙур йәнлелек менән үтте. Унда сарала нәшриәт директоры Илһам Йәндәүләтов, шағирҙың ҡәләмдәштәре Рауил Бикбаев, Ҡәҙим Аралбай, Гөлфиә Юнысова, Хәсән Назар, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Ләйсән Кәшфи нәшриәт ветераны Ғәлиә Ғәлимова һәм башҡалар ихлас сығыш яһаны. Сараны республиканың халыҡ артисы, виртуоз ҡурайсы Роберт Юлдашев сараны башҡорт халыҡ көйҙәре менән биҙәне. Әҙәби осрашыуҙы нәшриәттең баш мөхәррире Зөлфиә Ҡарабаева алып барҙы.

***

Баш ҡалабыҙҙа Рәсәй көнө, Өфө ҡалаһы көнө һәм милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуған көнө оло байрам итеп уҙғарыла.

Йыл да шағирҙар сығышына айырым ваҡыт һәм урын билдәләнә. Быйыл ул Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры майҙанында уҙҙы. Ҡәҙим Аралбай, Марат Кәримов, Риф Тойғон, Ирек Кинйәбулатов, Фәниә Чанышева, Әнисә Таһирова, Хәсән Назар, Гөлфиә Юнысова, Зөлфиә Ханнанова, Гүзәл Ситдиҡова, Таңһылыу Ҡарамышева, Гүзәл Ғәлиева, Фәниә Ғәбиҙуллина, Мөхәммәт Закиров, Әхмәҙин Әфтәх, Зөфәр Вәлит, Любовь Колоколова, Айҙар Хөсәйенов Ватан, заман хаҡындағы шиғырҙарын һөйләне. Бәйгене нәфис һүҙ менән Тәнзилә Дәүләтбирҙина һәм Риф Мифтахов алып барҙы.